# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**ДӘРЕСЛЕК**

## Баш һүҙ.

Хөрмәтле милләттәштәр! Һеҙҙең ҡулда юғары-дини белем биреү уҡыу йорттары студенттары өсөн туған тел булараҡ башҡорт телен өйрәнеү дәреслеге.

Тел – ул халыҡтың мәңге тере тарихы. Шул ғәзиз тел уны борон бер бөтөн халыҡ итеп ойошторошҡан; уртаҡ тел, һүҙ таптырған; көнөн, йүнен йүнләшкән; тәжрибәһен, аҡылын, күңелдәгеһен үҙенә туплап, уның күркен күтәрешкән; кемлеген бар донъяға таныҡҡан, халыҡтар менән аралаштырған. Телен ҡәҙерләгән халыҡ – хөрмәтле, абруйлы халыҡ. Уны өйрәнәйек, таратайыҡ, данлайыҡ.

Уҡыу – энә менән ҡойо ҡаҙыу. Еңел булмаған тел өйрәнеү эшендә илһам, түҙемлек юлдаш булһын! Уңыштар һеҙгә!

## ИНЕШ ДӘРЕС
### Башҡорт теле – беҙҙең туған телебеҙ.

**1-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Башҡорт телендә ниндәй милләт һөйләшә?
2. Башҡорттар Башҡортостандың ҡайһы райондарында күберәк?
3. Башҡортостандан тыш, башҡорттар тағы ҡайһы өлкәләрҙә йәшәй?
4. Башҡорт телендә ниндәй газеталар,журналдар сыға?
5. Башҡортостан китап нәшриәттәре ниндәй йүнәлештә эшләй?
6. Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы ниндәй телдәрҙә алып барыла? Ни өсөн?
7. Башҡорт телендә эшләгән ниндәй театрҙарҙы беләһегеҙ?
8. Беҙҙең республикала мәктәп, колледж һәм юғары уҡыу йорттарында ниндәй телдә уҡыталар? Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?
9. Ни өсөн туған телде өйрәнергә кәрәк?

Тимәк, башҡорт теле башҡорт милләтенең аралашыуы өсөн кәрәк. Башҡорт теленең һөйләү формаһы ла, яҙыуы ла бар, шуға күрә аралашыу ҙа йә телдән, йә яҙма рәүештә барырға мөмкин. Башҡорт телендә китап, газета һәм журналдар сыға, театрҙар эшләй, радио һәм телевидение тапрышыуҙары, төрлө йыйылыштар, концерттар һ.б. алып барыла.

**2-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе нисек аңлайһығыҙ? Үҙегеҙ өҫтәп ике мәҡәл әйтегеҙ.

Алтыла белгән әсә телен
Алтмышта ла онотолмаҫ.
Иң татлы тел – туған тел,
Инәм һөйләп торған тел.
Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр.
Тәмле тел балдан татлы.
Теле барҙың иле бар.
Телһеҙ кеше – ярты кеше.
Әҙәмдең күңеле бер булһын.

**3-сө күнегеү.** Туған тел менән бәйле фәһемле фекерҙәрҙе уҡығыҙ. Фекер алышығыҙ.

**1.** Донъяла һәр кемгә иң ҡәҙерлеһе – үҙ туған теле. Үҙ туған теле барҙың үҙ туған рухы бар.

Әсә телендә кеше донъяны, донъя матурлығын аңлай башлай. Унын шул телдә фекерләң культураһы,зауығы формалаша. Уй күрке тел икән, тел күрке-һүҙ. Һүҙ яғымлының үҙе лә яғымлы, теле матурҙың күңеле лә матур. Минең туған башҡорт телем-әсә һөтө менәнҡаныма һеңгән, әсә телем-донъяны таныҡкан,белем,ғилем биргән ғәзиз телем. Шул телем мине киң донъяға алып сыҡкан, бүтән телдәрҙе белергә, урыҫ телен икенсе туған телем итергә юл асҡан.

*Ғ. Хөсәйенов*

**2.** Тәбиғәт биргән иҫ китмәле мөғжизә ул – туған тел.туған тел – ул тойғо теле, моң теле. Беҙ туған телдә һөйләшеп туғанлыҡ тойғоһон яҡынайтабыҙ,туған телдә йырлап беҙ шатлыҡ беҙ шатлыҡ ишәйтәбеҙ,ҡайғы таратабыҙ, күңел сафландырабыҙ.

М. *Бураҡаева*

**3.** Әсәм теле – иман телем,
Әгәр һине һағынмаһам,
Көн дә һиңә табынмаһам,
Телдәремдән яҙыр инем.

*М.Кәрим*

**4-се күнегеү.** Л. Таңатова һәм А. Шәмсетдинованың «Башҡортмон» тигән йырының тексын уҡығыҙ. Интернетта тыңлағыҙ . Йырлап өйрәнегеҙ.

Йөҙөңә бысраҡ ташлап йөрәгең ярылһа,
Онотма тамырҙарыңдан башҡорт ҡаны аға,
Көслө рухлы халыҡтың уланы һин, онотма!
Милләтеңде алға әйҙә, саҡыр һин көрәшкә,
Онотма үҙ тарихыңды, юғалтма һин, һаҡла,
Заман афәттәренә башҡортом бирешмә!

Ҡушымта:
Көс, ғәйрәт, түҙемлек бир, Аллам.
Башҡортмон, тип күкрәгемде ҡағам !!!

# ФОНЕТИКА

## Телмәр өндәре. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр

Тел тигән даръя бар,
Даръя төбөндә мәрйән бар.
Белгәндәр сумып алыр,
Белмәгәндәр ҡоро ҡалыр.

**1-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе уҡығыҙ, өндәрҙең әйтелешен сағыштырығыҙ.

| | |
|---|---|
| башҡортса | русса |
| бал (мед) | бал |
| был (это) | был |
| он (мука) | он |
| тот (держи) | тот |
| элек (раньше) | эра |

➢ **Фонетика** – тел ғилеменең телмәр өндәрен өйрәнә торған бүлеге. Ул телмәр өндәренең яһалышын, баҫым ҡуйыу, һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү үҙенсәлектәрен тикшерә. Телмәр өндәре һөйләү процесында һүҙҙәрҙе, уларҙың өләштәрен, һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе төҙөү өсөн ҡулланыла. Өндәр шулай уҡ һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен айырыу функцияһын да башҡара. Мәҫәлән, бар – баҫ һүҙҙәренең мәғәнәләре бер-береһенән [р] һәм [ҫ] тартынҡылары, ә тор – төр һүҙҙәре [о] һәм [ө] һуҙынҡылары менән айырыла.

Өндәр кешенең телмәр аппаратында тын алғанда тел һәм ирен, тауыш ярыларының актив эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Өндәр ике төркөмгә бүленә: һуҙынҡылар һәм тартынҡылар.

Һуҙынҡы өндәрҙе әйткәндә үпкәнән сыҡҡан һауа ағымы ҡаршылыҡҡа осрамай, уларҙы әйткәндә бары тауыш һәм ирендәр генә ҡатнаша. Тартынҡы өндәр тауыш, һауа, шулай уҡ тел, ирен, тештәр ҡатнашлығында яһала. Уларҙы әйткәндә, үпкәнән килгән һауа телмәр ағзаларында ҡаршылыҡҡа осрай.

Башҡорт телендә 12 һуҙынҡы өн бар. Шуларҙың туғыҙы – [а], [ә], [о°], [ө], [ы], [э], [и], [у], [ү] – төп башҡорт һүҙҙәрендәге һуҙынҡылар: атай [атай], әсәй [әсәй], болот [бо°ло°т], өкө [өкө], тыныс [тыныс], кейем [кейем], иләк [иләк], урам [урам], үлән [үлән]; ҡалған өсөһө – [о], [ы$^{u}$], [э$^{и}$] рус теленән һәм рус теле аша башҡа телдәрҙән ингән һүҙҙәрҙә ҡулланыла: полк [полк], повесть [повесть], музыка [музы$^{u}$ка], посылка [посы$^{u}$лка], эра [э$^{и}$ра], эпос [э$^{и}$пос].

Һуҙынҡы өндәр ике төргә: ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларға бүленә. Ҡалын һуҙынҡыларға [а], [у], [о], [ы], ә нәҙек һуҙынҡыларға [и], [ә], [ү], [ө], [е], [э] өндәре инә. Ирендәрҙең ҡатнашлығына ҡарап, һуҙынҡы өндәр иренләшкән һәм иренләшмәгән һуҙынҡыларға бүленәләр. Иренләшкән һуҙынҡыларға [$о^{\circ}$], [о], [ө], [у], [ү], иренләшмәгән һуҙынҡыларға [а], [ә], [ы], [$ы^{ч}$], [э], [$э^{и}$], [э], [и] өндәре ҡарай.

Башҡорт телендә 27 тартынҡы өн бар. Тартынҡы өндәр, тауыш һәм шау ҡатнашлығына ҡарап, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларға бүленә: б-п, в-ф, г-к, ғ-ҡ, д-т, ж-ш, з-с, ҙ-ҫ. Яңғырау тартынҡыларҙы әйткәндә, тауыш та, шау ҙа ҡатнаша, һаңғырау тартынҡыларҙы әйткәндә тик шау ғына ҡатнаша.

Бынан тыш, тартынҡыларҙы талғын йәки сонор өндәргә бүлеп йөрөтәләр: л, м, н, ң, й, р.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Һөйләргә әҙерләнегеҙ.

## Донъяла телдәр күпме?

Боронғо йәһүдтәрҙең бер мифы бар. Имештер, борон, туфан һыуы *калкып баҫылғандан һуң, кеш*еләр йыйылғандар ҙа Сенаар ерендә ҙур Вавилон ҡалаһын һәм унда түбәһе күккә тейеп торорлоҡ бейек башня төҙөргә булғандар. Эш ҡыҙыу киткән. Башняның күп кенә өлөшө төҙөлгәс, ҡурҡыуынан һәм асыуынан туҙынған Аллаһы тәғәлә кешеләрҙең телен береһен-береһе аңламаҫлыҡ хәлгә килтереп бутап бөтөргән, ә үҙҙәрен бөтә ер йөҙө буйынса таратып ебәргән. Ошо арҡала ерҙә төрлө телдәр барлыҡҡа килгән, имеш…

Ысынында телдәрҙең барлыҡҡа килеүе һис тә былай түгел. Шулай ҙа ер йөҙөндә нисә тел бар һуң? Телдәрҙең һанын яҡынса ғына билдәләргә мөмкин, сөнки бөтә телдәр ҙә етерлек дәрәжәлә өйрәнелмәгән һәм уларҙың айырым телме, әллә берәй телдең һөйләшеме йәки диалектымы икәнлеге асыҡланмаған. Иҫәпләүҙәренә ҡарағанда, донъяла яҡынса ике мең ярымдан биш меңгә тиклем тел бар. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә миллионлаған кеше, ә ҡайһыларында тиҫтәләп кенә кеше һөйләшә. Мәҫәлән, рус телендә – бер нисә йөҙ миллион, ә алеут телендә ни бары йөҙгә яҡын кеше генә һөйләшә. Ҡайһы бер телдәр ер йөҙөндә бик киң таралған, һәм уларға бер нисә илдең халҡы һөйләшә: француз телендә Франция, Белгия, Швейцария халыҡтары, инглиз телендә Великобритания һәм Америка Ҡушма Штаттары халыҡтары, ә испан телендә Испания һәм Урта Американың 20 илендә йәшәгән халыҡтар һөйләшә.

Ер йөҙөндә киң таралыш алған телдәр халыҡ-ара телдәр иҫәбенә инә. Бындайҙарға инглиз, ғәрәп, испан, ҡытай, рус, француз телдәре инә.

*(Ураҡсин З.Ғ., Ишбирҙин Э.Ф. буйынса)*

**3-сө күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1) Башҡортостанда нисә дәүләт теле бар? Улар ниндәйҙәр?
2) Һин ниндәй телдәрҙе беләһең?
3) Тағы ниндәй телдәрҙе өйрәнергә теләйһең?
4) Ни өсөн сит телдәр белергә кәрәк?

**4-се күнегеү.** Текстан алтышар ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙе табығыҙ.

**5-се күнегеү.** Нөктәләр урынына исем барлыҡка килерлек итеп һуҙынҡы өндәр өҫтәгеҙ.

б…л, б…ҙ, б…т, к…ç, ҡ…ҙ, ҡ…ш, м…л, т…ҙ, м…к, с…р, т…й, т…л, т…н, т…п, т…ш, һ…н, һ…т.

**6-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең тәүге, икенсе һәм һуңғы өндәрен алмаштыра барып, яңы һүҙҙәр төҙөгөҙ.

ҡаҙ, бер, тал, ай

Өлгө: бар – зар, ҡар, лар, сар, пар, тар, шар, дар;
бар – бер, бир, бор, бөр, бур, бәр;
бар – баҙ, бай, бай, бак, бал, бар, баҫ, бат, бау, баш.

**7-се күнегеү.** Текстарҙы уҡығыҙ. Автор менән килешәһегеҙме? Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе һөйләгеҙ.

Кешеләрҙе ерҙә тел йөрөтә,
Тылсым асҡысындай тел үҙе…
Йәнебеҙгә, тәнебеҙгә дауа –
Телебеҙҙең тере диңгеҙе. (Р. Шәкүр)

Һөйләй белһәң, ашырыр тел бәхеттәргә,
Бәхет булғас, менерһең һин тәхеттәргә.
Һөйләр булһаң, нәтижәһен уйламайса,

Төшөрөр тел тәхеттәрҙән ләхеттәргә. (Ғ. Ғәлиев)

**8-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Фонетика фәне нимә өйрәнә?

2. Һуҙынҡы өн менән тартынҡы өндәрҙе айырыусы билдәләрҙе һанап сығығыҙ?

3. Тартынҡы өндәр ниндәй төрҙәргә бүленә?

4. Ҡайһы өндәрҙе иренләшкән тип йөрөтәләр?

5. Ниндәй өндәр тик рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла? Миҫалдар килтерегеҙ.

**Өйгә эш.**

1. Донъя телдәренең генеалогик классификацияһында башҡорт, рус, ғәрәп телдәрен табығыҙ. Был телдәр ниндәй ғаиләгә, төркөмгә ҡарай?

2. Халыҡ-ара телдәрҙе һәм был телдәрҙә һөйләшкән халыҡтар һанын яҙып алығыҙ.

3. «Тел тигән даръя бар, даръя төбөндә мәрйән бар…» тигән темаға инша яҙығыҙ.

## Башҡорт алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре

Аҡыл – ҡаҙна, күңел – йоҙаҡ, тел – асҡыс.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Башҡорт теленең алфавиты менән танышығыҙ, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Башҡорт теленең алфавиты**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Аа | Бб | Вв | Гг | **Ғғ** | Дд | **Ҙҙ** |
| Ее | Ёё | Жж | Зз | Ии | Йй | Кк |
| **Ҡҡ** | Лл | Мм | Нн | **ң** | Оо | **Өө** |
| Пп | Рр | Сс | **ҫ** | Тт | Уу | **Үү** |
| Фф | Хх | **Һһ** | Цц | Чч | Шш | Щщ |

ъ Ыы ь Ээ **Әә** Юю Яя

➢ Башҡорт теленең алфавитында бөтәһе 42 хәреф бар. Шуларҙан ике хәреф – ъ һәм ь хәрефтәре – өндө белдермәй, айырыу билдәһе хеҙмәтен генә үтәй. ъ – ҡалын айырыу билдәһе (аръяҡ, ашъяулыҡ, донъя); ь – нәҙек айырыу билдәһе (мәсьәлә, тәьҫир) һәм рус теленән алынған һүҙҙәрҙә нәҙеклек билдәһе (автомобиль, апрель, компьютер).

9 хәреф һуҙынҡы өндәрҙе белдерә: а, ә, э, и, о, ө, у, ү, ы.

27 хәреф тартынҡы өндәрҙе белдерә: б, в, г, ғ, д, ҙ, ж, з, й, к, ҡ, л, м, н, ң, п, р, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ.

ц, ч, щ хәрефтәре рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла.

4 хәреф – е, ё, ю, я – ике өндө белдерә: [йе], [йо], [йу], [йа].

Башҡорт теле алфавиты рус теленән үҙенсәлекле ә, ө, ү, ғ, ҙ, ҡ, ң, ҫ, һ өн-хәрефтәре булыуы менән айырыла.

**2-се күнегеү.** Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен уҡығыҙ, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

Ә – иренләшмәгән нәҙек һуҙынҡы. Телдең осо ауыҙ ҡыуышлығының алғы өлөшөндәге аҫҡы тештәргә тейә, телдең уртаһы саҡ ҡына күтәрелә: әсәй, әтәс, мәктәп.

Ө – иренләшкән нәҙек һуҙынҡы. Ирендәр бөрөшкән хәлдә тора, урт эсендә тел өҫкә күтәрелә: өс, Өфө, өкө.

Ү – иренләшкән нәҙек рәт һуҙынҡы. Ирендәр, у өнөн әйтергә әҙерләнгән кеүек бөрөшкән хәлдә тора, ләкин ослораҡ, тел өҫкә күтәрелә: күл, үгеҙ, үлән.

Ғ – тамаҡ төбө тартынҡыһы. Тел төбө аңҡауға яҡынлашып, һауа ярыҡ аша ғына сыға: ағас, туғыҙ, ғорур.

Ҙ – теш араһы тартынҡыһы. З өнөн әйтергә йыйынғандағы һымаҡ, ләкин тел теш араһына ҡуйыла: ҙур, оҙон, аҙыҡ.

Ҡ – тамаҡ төбө тартынҡыһы. Тамаҡ төбөндә тел ярҙамында ҡапланып торған һауа үпкәнән көс менән сығарыла: ҡуян, ҡала, ҡар.

Ң – талғын аңҡау өнө. Н өнөн әйтергә йыйынғандағы һымаҡ, ләкин ауыҙ әҙерәк асылып танау эсендә әйтелә: таң, маңлай, моң.

Ҫ – теш араһы тартынҡыһы. С өнөн әйтергә йыйынғандағы һымаҡ, ләкин тел теш араһына ҡуйыла: дуҫ, таҫтамал, һайыҫҡан.

Һ – яһалашы менән тамаҡ төбө менән тын өрөүгә оҡшаған: һауа, һандуғас, һигеҙ.

**3-сө күнегеү.** Шиғырҙы тыңлағыҙ, уҡығыҙ. Башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡылары һәм тартынҡылары менән миҫалдар яҙып алығыҙ.

**Башҡорт теле**

Мәңгелектәй, һин – аҡ нурһың иң боронғо,
Аҡ шишмәләй, йәнгенән саф. Белмәй тынғы.
Урал үрҙәрендәй, һин – бай офоҡ иле,
Һәр бер йәмдәй, көнөң оло, башҡорт теле.
Пәйғәмбәрҙәй, рух ҡанаты бирәһең һин,
Изге доға итеп ятлар сүрәһең һин.
Һәр өнөң – ҡош, яҙ һулышы, күңел түле.
Һәр һүҙең – наҙ, һин – наҙ моңо, башҡорт теле.
Тауға килһәң, иң шифалы һин тау еле,
Дауға тиһәң, һин – бөгөлмәҫ батыр биле.
Илкәй өсөн һин – йәшәткес көс ғаләме,
Әй, һөйөклө, алсаҡ, ипле башҡорт теле.

*(Мәхмүт Һибәт)*

**4-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ. Нисә хәреф, нисә өн икәнлеген билдәләгеҙ.

Егет, әсәй, юл, япраҡ, китап, дәфтәр, донъя, егерме, ҡәләм, исем, ямғыр, еләк, юлбарыҫ, үлән, йүгән, Йәнбикә, юлдаш, ябалаҡ, йәшел, йүнсел.

**Былар ҡыҙыҡлы.**

**5-се күнегеү.** Тексты уҡы.

Донъяла әле 65 алфавит бар. Иң күп хәрефле алфавит – кхмерҙарҙа. Уларҙа бөтәһе – 72 хәреф.

Яңы Гвинеяның Бугенвиль утрауында йәшәүсе ротокас халҡында ни бары 11 хәреф бар. Уларҙың телендә тик 6 тартынҡы өн.

Ә бына Кавказдағы убых телендә тартынҡы өндәр иң күбе – 85.

Вьетнамда йәшәүсе седаг халҡы – һуҙынҡы өндәргә иң байы һанала: уларҙа 55 һуҙынҡы өн бар. Ә был йәһәттән иң «ярлыһы» – Кавказдағы абхаз халҡы, сөнки был телдә бары 2 генә һуҙынҡы өн бар (Мәктәп календарынан).

**6-сы күнегеү.** Бөйөк шәхестәрҙең туған тел тураһында фекерҙәрен уҡығыҙ, сағыштырығыҙ.

1. Халыҡтың теле – уның бөтә тормошоноң бер ваҡытта ла һулымай торған һәм мәңге сәскә атып тора торған сәскәһе ул. Телдә бөтә халыҡ һәм уның тыуған ере йәнләндерелә (К.Д. Ушинский).

2. Үҙенең әсә теленә булған мөхәббәтенә ҡарап, һәр бер кешенең мәҙәниәт кимәленә генә түгел, бәлки уның граждандлыҡ ҡиммәтенә лә баһа бирергә мөмкин. Үҙенең иленә ҡарата булған ысын мөхәббәтте туған теленә ҡарата булған мөхәббәттән тыш күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Үҙенең теленә вайымһыҙ ҡараған кеше – ул ҡырағай кеше. Ул үҙенең асылы менән зарарлы кеше. Сөнки әсә теленә ҡарата уның ғәмһеҙлеге үҙ халҡының үткәненә, хәҙерге хәленә һәм киләсәгенә ғәмһеҙ ҡарауҙан килә (К. Паустовский).

3. Үҙ әсә телем – минең өсөн матур, иң тәмле тел; үҙ телем – үҙ әйберем булған өсөн ярата күңел (М. Ғафури).

4. Һүҙ – ул телмәрҙең нигеҙ ташы. Үҙ халҡына һәм туған телгә булған мөхәббәт бер-береһенә айырылғыһыҙ бәйләнгән. Халыҡтың йәнле һөйләү теле – ул әҙәби телдең шишмәһе. Әсә теле – мәктәптә белем һәм тәрбиә ҡоралы (Ж.Ғ. Кейекбаев).

5. Ил менән тел төшөнсәһе миңә бер бөтөн. Мин әсәмдең телен уның үҙенән йолҡоп алып ҡарай алмайым. Ул тел минең үҙ телем һәм ул минең иң тура ата торған ҡоралым (Р. Ғарипов).

6. Тел үҙенең ҡулланыу өлкәһе ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, йәмғиәттең иң ҡиммәтле хазинаһы һанала (Ж. Кейекбаев).

7. Телдәрҙе күп белеү эске донъяны байыта (Б. Рафиҡов).

8. Телен һаҡлаған халыҡ – илен яҡлаған халыҡ (Р. Шәғәлиев).

**7-се күнегеү.** Түбәндәге шаҡмаҡтарға хәрефтәрҙе дөрөҫ итеп тултыр.

| | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| А<br>1 | Б<br>2 | В<br>3 | Г<br>4 | Ғ<br>5 | Д<br>6 | Ҙ<br>7 | Е<br>8 | Ё<br>9 | Ж<br>10 | З<br>11 |
| И<br>12 | Й<br>13 | К<br>14 | Ҡ<br>15 | Л<br>16 | М<br>17 | Н<br>18 | Ң<br>19 | О<br>20 | Ө<br>21 | П<br>22 |
| Р<br>23 | С<br>24 | Ҫ<br>25 | Т<br>26 | У<br>27 | Ү<br>28 | Ф<br>29 | Х<br>30 | Һ<br>31 | Ц<br>32 | Ч<br>33 |
| Ш<br>34 | Щ<br>35 | Ь<br>36 | Ы<br>37 | Ь<br>38 | Э<br>39 | Ә<br>40 | Ю<br>41 | Я<br>42 | | |

| | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 | 8 | 16 | 2 | 8 | 16 | 8 | 17 | 1 | 24 | 15 | 37 | 24 | 37 |
| | | | | | | | | | | | | | |

**7-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бир*егеҙ*.

1. Башҡорт телендә нисә хәреф бар?
2. Башҡорт алфавитында нисә һуҙынҡы, нисә тартынҡы хәреф бар?
3. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен әйтегеҙ.
4. Башҡорт алфавитындағы ниндәй хәрефтәр тик рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә генә ҡулланыла? Миҫалдар килтер.
5. Ике өндө белдергән хәрефтәрҙе әйтегеҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.

6. Хәрефтәр ул...

а. яҙыуҙың билдәле бер тәртиптә урынлашыуы

в. айырым һүҙҙең мәғәнәһен белдереүе

с. телмәр өндәрен яҙыуҙа күрһәтеү өсөн ҡабул ителгән график саралар

7. Билдәле бер тәртиптә урынлаштырылған хәрефтәр йыйылмаһы, ул...

а. хәреф һәм өн

в. алфавит

с. графика

8. Хәҙерге башҡорт алфавитында нисә хәреф бар

а. 38

в. 36

с.42

9. Юрматы һүҙендә нисә һуҙынҡы, нисә тартынҡы өн бар?

а. өс һуҙынҡы, өс тартынҡы

б. дүрт тартынҡы, өс һуҙынҡы

в. г. дүрт тартынҡы, дүрт һуҙынҡы

**Өйгә эш.**

1. Дәреслектә бирелгән М. Һибәттең «Башҡорт теле» шиғырын З. Биишеваның шул исемдәге шиғыры менән сағыштырығыҙ.
2. Тел тураһында ете мәҡәл һәм әйтем яҙып килегеҙ.

3. Бөйөк шәхестәрҙең туған тел тураһында фекерҙәрен сағыштырығыҙ. Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе яҙығыҙ.

## Сингармонизм

Бәхетте юлдан эҙләмә, белемдән эҙлә.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәргә ялғау өҫтә.

белем, кит, ҡолон, тел, ҡайт, бысаҡ, бишек, боролош, алма, үтек, сәйәхәт, эш, өй, сәскә, үлән, болот, төҙөлөш, ойоҡ, көтөү, кеше, бүлмә, баҫыу, урман, ағас.

➢ Сингармонизм – грек һүҙе, ул ярашыу, яңғырау яғынан бер-береһенә оҡшау тигән мәғәнәне белдерә. Башҡорт теле сингармонизмлы телдәр төркөмөнә инә. Сингармонизмдың түбәндәге төрҙәре бар.

1. Һуҙынҡы өндәр гармонияһы. Төп башҡорт һүҙҙәрендә һүҙҙең тамырында йә ҡалын, йә нәҙек һуҙынҡылар ҡулланыла. Мәҫәлән: балалар – баланың, ишек – ишектәр.

2. Ирен гармонияһы. Төп башҡорт һүҙҙәренең тамырында иренләшкән **о, ө** өндәре булһа, ялғауҙарҙа ла **о, ө** өндәре яҙыла. Мәҫәлән: ҡолон – ҡолоном, ҡолоноң, ҡолондо; өй – өйөм, өйөң, өйҙө һ.б. Әгәр ялғауҙарға а, ә, у, ү өндәре килеп ҡушылһа, ирен гармонияһы боҙола: көтөү – көтөүҙе, болонда.

3. Һуҙынҡы өндәр менән тартынҡы өндәрҙең ярашыуы. Башҡорт һүҙҙәрендә тамырҙа йә нигеҙҙә нәҙек һуҙынҡылар йәки ҡалын тартынҡы өндәр йомшаҡ әйтелә, ҡалын һуҙынҡылар эргәһендә тартынҡылар ҡаты яңғырай (бара – бәрә, был – бел). Башҡорт һүҙҙәрендә нәҙек һуҙынҡылар эргәһендә **к, г** өндәре, ҡалын һуҙынҡылар янында **ҡ, ғ** өндәре ҡулланыла. Мәҫәлән: ҡолас – көләс, ҡалаҡ – ҡалаҡ.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ғилемгә ҡарата үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе әйтегеҙ. Сингармонизм төрҙәрен күрһәтегеҙ.

### Кеше тормошонда ғилем

«Иман – яланғас бер нәмә, – тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, – Уның кейеме – тәҡүәлек (йәғни Аллаһ бойорғандарҙы үтәй, Аллаһ тыйғандарҙан тыйыла белеү), зиннәте – әҙәп, емеше – ғилем» .

Мосолмандарҙы ул имандың татлы бер емеше булған ана шул ғилемде өйрәнергә, ғалимдарҙы хөрмәт итергә, аҡыллы булырға өйрәтә.

«Ғалим йәки ғилем өйрәнеүсе, ғалимдарҙы тыңлаусы, күңелең менән уларҙы һөйөүсе бул, – ти, – бишенсеһе, йәғни ғилемде дошман күреүсе була күрмә – һәләк булырһың».

Ғилем үҙеңә, кешеләргә, илгә, *халыҡҡа файҙалы булырға тейеш, – тип өйрәтә дин.* – Аллаһы Тәғәләнән файҙалы ғилем биреүен һәм файҙаһыҙ ғилемдән һаҡлап ҡалыуын һорарға ҡушҡан пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм.

Изге Ҡөрьәндә Аллаһ Үҙе лә: «...Белгән менән белмәгән бер булырмы? Саф аҡыл эйәләре менән генә был хәҡиҡәткә төшөнөр», – тигән.

...Үҙенең илсеһенә Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәнде нисек итеп өйрәнергә, уҡырға кәрәклеген дә аңлатып бирә: «Онотормон тип ҡурҡып, вәхиҙе Ябраил уҡып бөтмәҫтән элек үк уҡый башларға ашыҡма. Тыңлап тор. Һәм: «Әй Раббым! Минең ғилемемде арттыр, тип доға ҡыл», – ти.

Ғилем кешене игелек, бәндәселек тарафына саҡырыу юлы. Сөнки, изгелек бер ҡасан да онотолмаҫ, хаҡлыҡ менән ялғанды айырып биреүсе Аллаһ бер ҡасан да үлмәҫ. Теләгәнеңде эшлә, нимә эшләһәң дә шуға лайыҡ булған әжерен алырһың.

*(Дини календарҙән)*

**3-сө күнегеү**. Шиғырҙы уҡығыҙ. Нимә тураһында һүҙ бара? Сингармонизм төрҙәрен күрһәтегеҙ.

**Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!**

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!

Илтифат ит: уҡыуҙалыр шәрафәттәр,
Яһиллыҡтан килә ятыр ҙур афәттәр.
Уҡығандар күктә осор, һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, кәрамәттәр.

Уҡығанға был донъяла жәләл булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр хәләл булыр.
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр.

Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай,
Сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.
Белемлелек – арыҫландан көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.

(М. Аҡмулла)

**4-се күнегеү**. Түбәндәге һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ. Ҡ, Ғ һәм К, Г өндәренең ниндәй һуҙынҡылар менән килеүен күҙәтегеҙ.

ҡолас – көләс, ҡайтҡан – киткән, тороғоҙ – төрөгөҙ, ышыҡ – ишек, ҡыйыҡ – кейек, ҡыйғас – кейгәс, барығыҙ – бәрегеҙ, ҡондоҙ – көндөҙ, ҡапайтыу – кәпәйтеү, ҡубырсыу – күберсеү, ҡубыу – күбеү, ҡуҙ – күҙ, ҡалыплашыу – кәлепләшеү.

5-**се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе тәржемә итегеҙ. Рус һүҙҙәрендәге артҡы рәт һуҙынҡыларының башҡорт телендә алғы рәт һуҙынҡыларына күсеү сәбәбен аңлатығыҙ.

капуста, крупа, ярмарка, трубка, табак, бочка, кружка, горшок, перчатка, корзинка, тарелка, карниз.

**6-сы күнегеү.** Мәҡәлдәрҙең аҙағын табып уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

| | |
|---|---|
| Уҡыу – | белмәгәнгә – гүр. |
| Белемлегә йот юҡ, | беләге тыныс. |
| Белмәгәндең | белмәгән – түрҙә. |
| Белгәнгә – ер, | белемһеҙгә ҡот юҡ. |
| Белгән – юлда, | белемһеҙгә биш әйтһәң дә – ҡолағының тышында. |
| Батыр берҙе, | белмәгән беләген тешләр. |

| | |
|---|---|
| Белгән белгәнен эшләр, | белемдән эҙлә |
| Белемлегә бер әйтһәң дә – ҡолағының эсендә, | белемле меңде йығыр! |
| Белмәү ғәйеп түгел, | энә менән ҡойо ҡаҙыу. |
| Бәхетте юлдан эҙләмә, | белергә тырышмау – ғәйеп. |

**7-се күнегеү.** Түбәндәге ҡалып менән һүҙҙәр уйлап табығыҙ.

1) …о…о…  2) …ө…ө…
3) …о…о…о…  4) …ө…ө…ө…

Өлгө: 1) ҡолон  4) төҙөлөш

**Өйгә эш.**

1. Сингармонизм законы тураһында уҡығыҙ.
2. Белем тураһында ете мәҡәл яҙығыҙ.
3. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырын ятлағыҙ.

## Ижек.

Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәр нисә ижектән торғанын билдәләгеҙ.

көтөүсе, мәсет, уйын, манара, Мәҙинә, утрау, ваҡыт , донъя, әхлаҡ, дин, ҡарт, иман, рух, намаҙ, ожмах, тамуҡ.

➢ Ижек – һүҙҙең бер тын менән әйтелә торған быуыны. Һүҙ ижектәргә бүленә. Һүҙҙә нисә һуҙынҡы өн булһа, шул тиклем ижек була. Һүҙ бер нисә ижектән торорға мөмкин. Ижектәр бер, ике, өс, дүрт өндән торорға мөмкин: хат, у-лар, ҡа-ла, ба-ла-лар-ҙы-ҡы.

Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең килеү тәртибенә буйынса, башҡорт телендә 6 төрлө ижек ҡалыбын бар:

Бер һуҙынҡынан торған – Һ
Һуҙынҡы һәм тартынҡынан торған – ҺТ
Тартынҡы менән һуҙынҡынан торған – ТҺ
Тартынҡы, һуҙынҡы, тартынҡынан торған – ТҺТ
Һуҙынҡы, тартынҡы, тартынҡынан торған – ҺТТ
Тартынҡы, һуҙынҡы, тартынҡы, тартынҡы – ТҺТТ

**2-се күнегеү.** Шиғырҙы уҡығыҙ. "Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн, Күңелдәргә иман нуры яҡһын өсөн" тигән юлдарҙы нисек аңланығыҙ? Төрлө ижек ҡалыптарына өсәр миҫал табығыҙ.

Тел ҡөҙрәте бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ғәмһеҙҙәрҙең күңел ҡылын ҡаҡһын өсөн,
Үлән кеүек халҡым ҡабат ҡалҡһын өсөн,
Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн!

Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ҡараңғыла яҡты юлды тапһын өсөн,
Хаҡлыҡ эҙләп, ул ҡояшҡа баҡһын өсөн,
Йөрәгемде яҡтырт, Хоҙай, халҡым өсөн!

Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн,
Күңелдәргә иман нуры яҡһын өсөн,
Ил-дәүләтем күкрәп сәскә атһын өсөн,
Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн!

*(Зөлфиә Ханнанова)*

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Нимә ул атайсал? Мөхәммәт (с.ғ.с.) пәйғәмбәребеҙҙең тормошо тураһында нимәләр беләһегеҙ?

**Исламда атайсал төшөнсәһе**

Тыуған илгә ҡарата булған һөйөүҙең иң яҡшы өлгөһөн беҙ пәйғәмбәребеҙ тормошонда ла табабыҙ. Мәккәнән Мәҙинәгә күсереп киткән саҡтарында ул тәүҙә Ҡәғбәтуллаға күҙ һалып ала, унан үҙенең тыуған ҡалаһында Ҡөрьән аяттары инә башлаған урындарға, мосолмандарҙың ҡиблаһына ҡарап ул:

"Иманым камил, һеҙ Аллаһ ҡашыһындағы ерҙәрҙең иң гүзәле. Уның иң һөйөклө төбәге, әгәр ҙә ҡыуып ебәрелмәгән булһам, мин уны ташлап китә алмаҫ инем", – ти ҙә: "Әлхәмдү-лилләһи! Мине юҡтан бар итеп яралтҡан

Аллаһҡа дан! Эй, Аллаһ! Миңә фани донъя тормошондағы ауырлыҡ һәм ҡыйынлыҡтарҙы, замандың көнөн дә, төнөн дә килеп кенә торған бәләләрен кисерә белергә ярҙам ит. Юлдарымда юлдаш, ғаиләмдә ышаныс бул. Үҙең биреп кенә торған өлөшөмдө ишәйтә бар, түбәнһетелгән була ҡалһам, Һинең алдыңда ғына түбәнһетелгән булайым, куркәм холоҡло һәм кешеләргә лә һөйкөмлө булырға ярҙам ит. Һин бит зәғифтәр Раббыһы, минең Раббым. Мин һинең күктәрҙәге һәм ерҙәге ҡараңғылыҡты юҡ иткән ҡарашыңдан ғына нур алам".

**4-се күнегеү.** Ижек ҡалыптарына тура килгән дүртәр һүҙ яҙығыҙ.

Тһ+ Тһ+ Тһ
ТһТ+ Тһ +ТһТ
һ +ТһТ + һБ

**5-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙә төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп, күсереп яҙығыҙ.

Ир-егеттең ... ил эшендә танылыр.
... барҙың – көнө бар.
Аҫыл ... алтын тип үлмәҫ, ... тип үлер.
Ат әйләнеп төйәген табыр, һыу әйләнеп юлын табыр, ... әйләнеп илен табыр.
Ат туйған ... , ир ... .
... яуған ерҙән тыуған-үҫкән ... артыҡ.
Биле ныҡтың – ... ныҡ, иле ныҡтың – ... ныҡ.
... барҙа, ир хур булмаҫ, ... барҙа, ил хур булмаҫ.
... барҙың теле бар, ... барҙың иле бар.
... ҡәҙерен белмәгән – башын юғалтҡан,
Ер ҡәҙерен белмәгән – ... юғалтҡан.

**5-се күнегеү.** Ниндәй ижектәр була? Схемаға ярашлы һүҙҙәр яҙығыҙ. Һығымта яһағыҙ.

1. Тһ
2. һТ
3. ТһТ
4. һ
5. ТһТТ

**Өйгә эш.**

1. Тыуған ил, Ватан, атайсал тураһында ете мәҡәл яҙығыҙ.

2. З. Ханнанованың «Тел ҡөҙрәте бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн» шиғырын ятлағыҙ.

3. «Күҙҙәремде нурла, Хоҙай, халҡым өсөн» темаһына эссе яҙығыҙ.

## Баҫым.

Ир ҡанаты ата йортонда нығый.
Әйтем.

**1-се күнегеү**. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ.

| | |
|---|---|
| бала | баҫ |
| балаҡай | баҫҡыс |
| балаҡайҙар | баҫҡыстар |
| балаҡайҙарҙы | баҫҡыстарым |
| балаҡайҙарҙыҡы | баҫҡыстарымдан |
| балаҡайҙарҙыҡына | баҫҡыстарымдандыр |

➢ Бер нисә *ижекле һүҙҙәрҙә, ғәҙәттә,* бер ижек әйтелеше менән *башҡаларынан* айырылып тора. *Һүҙ эсендәге бер ижектең төрлө фонетик саралар ярҙамында айырып әйтелеүен* ***баҫым*** *тиҙәр.* Башҡорт телендә баҫым һүҙҙең аҙаҡҡы ижегенә төшә; һүҙгә ялғау ҡушылған һайын, баҫым аҙаҡҡы ижеккә (ялғауға) күсә бара.

**2-се күнегеү**. Тесты уҡығыҙ. Һүҙҙәргә баҫым ҡайһы ижеккә төшөүен билдәләгеҙ.

### Исламда ғаилә, ғаилә именлеге, балалар тәрбиәләү

Ғаилә ислам тәғлимәтендә үҙәк урынды алып тора.

Ғәиләнең мөһим бер бурысы – Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән балаларҙы лайыҡлы һәм изгелекле мосолмандар итеп үҫтереү. Мөхәммәт пәйғәмбәр (с.ғ.с.) ата-әсәләрҙең бурыстарын шулай тип билдәләп үткән*:* *«Һ*еҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе һәм һәр кем үҙ көтөүе өсөн яуаплы. Ир – ғаиләнең, ҡатын – өйөнөң һәм балаларының көтөүсеһе булып тора һәм уның өсөн яуаплы».

Балаларҙы тәрбиәләү, иң беренсе, ата-әсәләрҙең үҙҙәренең тәрбиә кимәленән тора. Ата-әсәләр тәрбиә ысулында иғтибар итергә кәрәк булған бер нисә төп факторҙы билдәләп үтәйек.

• Балаға уның холҡона яҡшы тәьҫир итәсәк мосолман исеме ҡушырға.

• Бала изгелекле мөхиттә үҫһен һәм тәрбиәләнһен өсөн уны тик хәләл ризыҡтар менән туҡландырырға.

• Балалар үҫә килә һөйләшеү манераһынан алып холоҡ-фиғелдәргә тиклем ата-әсәһенән өлгө ала. Шуға күрә балаларыңа яҡшы өлгө булырға.

• Баланың яҡшы эштәрен хупларға ҡушыла, сөнки хуплау һөҙөмтәһендә яҡшы эштәр баланың шәхесендә ныҡлы урын ала. Шулай уҡ хаталарын иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай, юғиһә, ваҡытында иғтибар ителмәгән ҡылыҡтар баланың насар ғәҙәтенә әйләнеп китеүе ихтимал. Шуға күрә баланы тәрбиәләгәндә ташламалар эшләмәҫкә.

• Ҡағиҙәләрҙе һәм тыйыуҙарҙы аңлатҡан ваҡытта уларҙың сәбәптәрен балаға аңлайышлы итеп еткерергә кәрәк.

• Баланы үҙ-үҙен тоторға һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү мотлаҡ.

• Баланы биргән ниғмәттәре өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт һәм шөкөр *и*тергә өйрәтергә. Пәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с.) күркәм тормошонан өлгө алып балаға рухи тәрбиә бирергә тырышырға кәрәк.

• Иртә йәштән баланы Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылырға өйрәтеү, Аллаһҡа хеҙмәт итеүҙең мөһимлеген һәм яуаплылығын аңлатыу мөһим.

Бер һүҙ менән әйткәндә, идеаль балалар тәрбиәләү өсөн идеаль ата-әсә булыу кәрәк. Баланы тәрбиәләү иң тәүҙә ата-әсәнең һөйөүенән башлана. Улар сабыйҙарын Аллаһы Тәғәләнең ниғмәте, бүләге булараҡ яратырға тейеш. Был һөйөү был донъяла ла, теге донъяла ла бәхет алып киләсәк. Әгәр беҙ лайыҡлы нәҫел тәрбиәләп ҡалдырмаһаҡ, беҙҙең ҡәберҙәребеҙ ташландыҡҡа әүереләсәк.

(Интернет селтәренән)

**3-сө күнегеү**. Түбәндәге һүҙҙәргә баҫым ҡуйып уҡығыҙ.

һаман (килмәне), ҡасан (ҡайта), ҡапыл (күренде), яңы (килде), байтаҡ (эшләне), нисә (тапҡыр).

**4-се күнегеү**. Кәрәкле һүҙгә логик баҫым ҡуйып, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

**Сәлим дуҫы менән лагерҙа ял итте.**

1. Сәлим дуҫы менән йәйгеһен ни эшләне?
2. Сәлим дуҫы менән йәйгеһен ҡайҙа ял итте?
3. Кем дуҫы менән лагерҙа ял итте?
4. Сәлим дуҫы менән ҡасан ял итте?
5. Сәлим йәйгеһен кем менән ял итте?

➢ Айырып күрһәтергә теләгән һүҙгә йәки һүҙбәйләнешкә баҫым төшә. Был логик баҫым тип атала. Башҡорт телендә логик баҫым һөйләмдә хәбәр алдындағы һүҙгә төшә һәм һорау шул һүҙгә бирелә.

**5-се күнегеү**. Шиғырҙы уҡығыҙ. Йәшәү өсөн балаға ниндәй кәңәштәр бирелә? Кешегә тормошта тағы ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк? Ижек һәм логик баҫымдарҙың ҡуйылышын аңлатығыҙ. Һығымта яһағыҙ.

| | |
|---|---|
| **Нәсихәттәр**<br>Өс нәмәнән һаҡлан, балам,<br>Кәңәшемде ташлама:<br>Беренсеһе – бер ҡабым да<br>Харам ризыҡ ашама.<br><br>Икенсеһе – күңелеңә<br>Ояламаһын ялған.<br>Ялған бар ерҙә хаҡлыҡ юҡ,<br>Шуны онотма, балам.<br><br>Өсөнсөһө – иң мөһиме –<br>Шәфҡәтһеҙ була күрмә.<br>Шәфҡәтһеҙ кеше – тиран ул,<br>Шәфҡәтһеҙ донъя – төрмә. | **Өләсәйем**<br>Өйҙәгеләрҙе өҙлөкһөҙ<br>Өйрәтә өләсәйем:<br>“Өлкәндәр өгөт өләшә,<br>Өгөттәр өләшәйем!<br><br>Өлкәндәр өмөт өләшә -<br>Өмөттәр өләшәйем!” -<br>Өҙөлөп- өҙөлөп,<br>Өҙөлөп- өҙөлөп,<br>Өндәшә өләсәйем.<br>(Ә. Әхмәт-Хужа) |

**Өйгә эш.**

1. Баҫым тураһында белешмәне уҡығыҙ.
2. Ғаилә тураһында ете мәҡәл яҙып алып килегеҙ.
3. “Малайға тәрбиә биреп – ил тәрбиәләйһең, ҡыҙға тәрбиә биреп – милләт тәрбиәләйһең” темаһына инша яҙығыҙ.

## Һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәреше.

Ожмах – әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында.
Әйтем.

**1-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. Һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәрешен күҙәтегеҙ.

тупраҡ – туп(ы)раҡ , стол – өҫтәл, бревно – бүрәнә, шәхес – шәхси, труба – торба, алма ағасы – алмағас, уйын – уйна, рәхәт – (э)рәхәт, кеше араһында – кешараһында

➢ Телмәр ағышында һуҙынҡы өндәр түбәндәге үҙгәрештәргә осрай:

**Редукция.** Баҫымһыҙ ижектәрҙәге һуҙынҡыларҙың көсһөҙләнеүе, йәғни юғалыуы, редукция тип атала. Әгәр баҫымһыҙ ижектә һуҙынҡы өн бөтөнләй юғалһа, ул тулы редукция тип атала. Миҫалдар: төйөн һәм төйнә, ете һәм етмеш.

Баҫымһыҙ ижектең һуҙынҡыһы төшөп ҡалмайынса көсһөҙ әйтелһә, ул тулы булмаған редукция тип атала. Миҫалдар: саҡырым – саҡрым, йомошаҡ – йомшаҡ, әкерен – әкрен, бигерәк – бигерәк.

**Протеза менән эпентеза.** Сит телдәрҙән алынған һүҙҙәрҙең әйтелешен еңелләштереү өсөн, ҡайһыларының алдына, ҡайһыларының уртаһына артыҡ бер һуҙынҡы өн ҡуйыла. Әгәр һуҙынҡы өн һүҙҙең алдында торһа, **протеза** күренеше барлыҡҡа килә. Миҫалдар: эләүкә, эшләпә.

Артыҡ һуҙынҡы өн һүҙҙең уртаһына ҡуйылһа, **эпентеза** барлыҡҡа килә. Миҫалдар: т**о**рба, к**е**нәгә.

**Элизия.** Ул ике һүҙ эсендә генә була: тәүге һүҙ һуҙынҡы өнгә бөтөп, уның эргәһендәге һүҙ һуҙынҡы өн менән башланһа, һуҙынҡы өндәрҙең береһе ҡыҫырыҡлап сығарыла. Миҫалдар: килә алманым – килалманым, ҡоро утын – ҡорутын.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәрешен күҙәтегеҙ.

Ожмах – әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында. Был әйтемде барыбыҙ ҙа ишеткәне бар. Ислам динендә әсәйҙәргә оло ихтирам күрһәтелә. Ҡөрьән Кәримдә уларға төшкән ауыр вазифалар тураһында иҫ киткес йомшаҡ, наҙлы һүҙҙәр менән телгә алына.

Ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләләге төп бурысы – балалар тәрбиәләп үҫтереү, Ҡөрьәнде аңлатыу, уларҙы юғар**ы** **и**манлы, әҙәпл**е** **и**теү, сөнки

балалар күпселек ваҡытын әсә янында үткәрә, беренсе тәрбиәне, өгөт-нәсихәтте, әҙәп өлгөләрен унан ала.

Әсә хаҡы бик ҙур. Уны тейешенсә үтәмәү, әсәйеңдең күңелен ҡалдырыу – бик ҡурҡыныс эш.

Изге "Ҡөрьән" әсәйгә генә түгел, атай кешегә лә изгелекле, ихтирамлы мөнәсәбәттә булырға өйрәтә. Хоҙай Тәғәлә уларҙың хаҡын Үҙе менән бер дәрәжәгә ҡуя.

Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән (с.ғ.с) берәү ата-әсә хаҡы тураһында аңлатып биреүен һораған. "Атайыңа "атайым!" тип кенә өндәш, – тигән пәйғәмбәребеҙ. – Бергә йөрөгәндә ул алданыраҡ барһын. Атаһы менән әсәһенә ҡарата изге мөнәсәбәттә булғандар алдында йәннәттең ике ҡапҡаһы ла асып ҡуйылыр".

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә былай ти: "Ат**а-ә**сәгеҙ берәй ярамаған эш ҡылһа ла, ҡаты бәрелмәгеҙ, бәлки йомшаҡ һүҙ менән генә ул эштең килешмәгәнен әйтегеҙ, ат**а-ә**сәңә түбәнселек менән буйһоноп, һәр ваҡыт рәхмәт уҡып тороғоҙ".

Атай-әсәйең яҡшы кешеләр булһа ла, яман кешеләр булһа ла, уларҙы ысын күңелдән һөй – шулай тип өйрәтә дин. Уларҙың күҙенән юғалып, билдәһеҙ ерҙәрҙә оҙаҡ йөрөмә. Айырым торһаң, даими рәүештә барып хәлдәрен бел, йомоштарын үтә, саҡырып ҡунаҡ ит. Атай-әсәйең йөрөй алмаҫлыҡ хәлгә килһә лә, һис бер ауырһынма. Хатта ата-әсәң һине яратмаһа ла, үҙең ҡараңғы сырай күрһәтмә. Гүр эйәһе булһалар, һәр саҡ уларға доға ҡылып тор. Бына шулай тәрбиә итһәң генә, уларҙың хаҡын еренә еткереп үтәгән булырһың.

("Көнгәк" гәзитенән)

**3-сө күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең башҡорт телендәге тәңгәллектәрен яҙығыҙ.

Стол, бревно, скамья, князь, клеть, труба, шляпа, скатерть, скирда, книга, кровать, трубка.

**4-се күнегеү.** Исемдәрҙән сифаттар яһағыҙ. Ниндәй фонетик үҙгәреш күҙәтелә?

Шиғыр, синыф, шәхес, рәсем, сихыр, ғилем.

**5-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙә ниндәй үҙгәреш күҙәтелә? Улар ниндәй һүҙҙәрҙән яһалған?

Алмағас, һарут, Ҡариҙел, Яңауыл, олатай, өләсәй, Арҡыуыл, ҡарурман, төрлө әңгәмәләр, ҡарағас.

**6-сы күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ.

Әсәйҙәргә ваҡытыбыҙ етмәй,
Ашығабыҙ, бөтмәй эшебеҙ,
Сит-яттарға ярҙам күрһәтәбеҙ,
Әсәй көтөр – ул үҙ кешебеҙ!

Беҙҙең өсөн тик ул янып-көйә,
Көтә тәмлекәстәр бешереп,
Һыҙланыуын беҙгә һиҙҙермәйсә,
Төндә эсә дарыу йәшереп.

Күп һөйләйбеҙ, ләкин иң кәрәкле,
Иң ҡәҙерле һүҙҙе әйтмәйбеҙ,
“Ҡабаланам, әсәй, хуш хәҙергә!”-
Яуап биргәнен дә көтмәйбеҙ.

Эстән генә доғаларын уҡып,
Йүгерә-атлай ҡала оҙатып,
Төн йоҡламай аҙаҡ беҙҙе уйлап,
Беҙ китәбеҙ шулай илатып.

Күп кәрәкме уға? Ул бит әсәй!
Сикәһенә терәп сикәне,
“Һин кәрәкһең, әсәй, һағынам,” – тип
Бер ҡосаҡлап уны үпһәңсе!

Ҡояш кеүек балҡыр әсә йөҙө,
Йөрәгенә килер еңеллек…
Ошо йөрәк әле типкән саҡта
Ашығайыҡ өйгә иң элек!

(Фирүзә Абдуллина)

**7-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙең аҙағын табып уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

| | |
|---|---|
| Әсә йылыһы – | ҡәҙерле булыр. |
| Донъяла ата-әсәнән башҡа | әсәһен күреп ҡыҙ үҫер. |
| Ата-әсә алғышы | үҙе лә изгелек күрмәҫ. |
| Телһеҙҙең телен | бар нәмә лә табыла. |
| Әсә хаҡы – | ҡояш йылыһы. |
| Ҡояш – яҡтылыҡ, | әсәһе белер. |
| Ата-әсәһенә ҡәҙер күрһәтмәгән – | тәңре хаҡы. |
| Атаһын күреп ул үҫер, | әсәй – бәхетлек. |
| Астан үлһәң дә, | утҡа-һыуға батырмаҫ. |
| Әсәһен ҡәҙерләгән | ата-әсәңде ташлама. |

**8-се күнегеү.** Күп нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе ҡуйығыҙ.

1. Ике һүҙ араһындағы йәнәш килгән ике һуҙынҡының ҡыҫырыҡлап сығарылыуы … тип атала. Миҫалдар: …

2. Ике тартынҡы өндән башланған үҙләштерелгән һүҙҙең алдына һуҙынҡы өн ҡуйыу … тип атала. Миҫалдар: … .

3. Баҫымһыҙ ижектәрҙәге һуҙынҡыларҙың көсһөҙләнеүе, йәғни юғалыуы, … тип атала. Миҫалдар: … .

4. Үҙләштерелгән һүҙҙәргә һүҙ уртаһындағы ике тартынҡы араһына һуҙынҡы өн ҡуйыу … тип атала. Миҫалдар: … .

**Өйгә эш.**

1. 3, 4, 5-се күнегеүҙәрҙәге 2-шәр һүҙҙе ҡулланып, һөйләмдәр яҙығыҙ.

2. “Атаһын күреп ул үҫер, әсәһен күреп ҡыҙ үҫер” тигән темаға инша яҙығыҙ.

3. “Минең әсәйем” тигән темаға проект эше эшләгеҙ.

**Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше.**

Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. Тартынҡы өндәрҙең үҙгәрешен күҙәтегеҙ.

**С**ырыш – **ш**ырыш, **б**очка – **м**искә, ква**с** – кеүә**ҫ**; тирбәлеү – тирбәлеү, ты**ңк**ыш – ты**ңш**ыҡ; ки**лд**е – кө**лт**ә, урма**нд**а – урма**нт**а, **алы**п кил – әпкил, шу**л** ҡорло – шуғорло; йомортҡа > йомор**ҡ**а.

➢ Телмәр ағышында тартынҡы өндәр түбәндәге үҙгәрештәргә осрай:

**Тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы.** Һүҙ аҙағында килгән ҡ, к һәм п өндәре, һүҙгә һуҙынҡы өн менән башланған ялғау ҡушылғанда ғ, г һәм б өндәренән әйләнә, мәҫәлән: тараҡ – тарағым, тоҡ – тоғоң, ҡалаҡ – ҡалағы, теләк – теләгебеҙ, иләк – иләгең, китап – китабы, талап – талабы, сәбәп – сәбәбе, тәртип – тәртибе һ.б. Был фонетик законға рус теленән алынған һүҙҙәр ҙә буйһона, мәҫәлән: барак – барагы, ток – колхоз тогы; этап – этабы, принцип – принцибы.

**Ассимиляция.** Ассимиляция – латин һүҙе, ул оҡшатыу тигән мәғәнәне аңлата. Башҡорт телендә һүҙҙең аҙағындағы тартынҡылар менән ялғауҙар башындағы тартынҡы өндәр бер-береһенә оҡшашып килә. Миҫалдар: баш – баштар, баштың, ләкин башдар, башдың түгел. Әгәр һүҙҙәр **р, й, ҙ, у, ү** өндәренә бөтһә, ҡайһы бер ялғауҙар **ҙ** өнө менән башлана. Миҫалдар: ярҙа, тайҙың, ҡыҙҙың, уҡыуҙа, көтөүҙән.

**Диссимиляция.** Диссимиляция – оҡшашмау тигән һүҙ, ул йәнәш торған тартынҡы өндәрҙең бер-береһе менән оҡшашмауын аңлата. Диссимиляцияға нигеҙләнгән һүҙ яһаусы ялғауҙар:

1. Исем яһаусы **-лыҡ, -лек, -лоҡ, -лөк** ялғауҙары: баш-лыҡ, ағас-лыҡ, еләк-лек, оҙон-лоҡ.

2. Сифат яһаусы -лы, -ле, -ло, -лө, -һыҙ, -һеҙ, -һоҙ, -һөҙ ялғауҙары: тат-лы, һут-һыҙ, баш-һыҙ.

3. Ҡылым яһаусы **-ла, -лә** ялғауҙары: һүҙ ниндәй өнгә бөтөүгә ҡарамаҫтан, ялғау **л** өнө менән башлана. Миҫалдар: баш-ла, таш – **ла**.

**Метатеза.** Әйтелештәрен еңелләштереү өсөн һүҙ составындағы тартынҡы өндәрҙең урындарын алмаштырып ҡуйыуға **метатеза** (грекса: metathesis – алмаштырып ҡуйыу) тиҙәр. Мәҫәлән: ҡырмыҫҡа – ҡымырҫҡа.

**Диэреза.** Ассимиляция йәки диссимиляция һөҙөмтәһендә һүҙҙең берәй өнө йәки ижеге төшөп ҡалыуҙы **диэреза** (грекса: diairesis – өҙөү, бүлеү, алып

ташлау) тип йөрөтәләр. Башҡорт телендә диэреза, ғәҙәттә, йәнле һөйләү телендә һәм балалар телмәрендә осрай. Бигерәк тә талғын [л] тартынҡыһы төшөп ҡалыусан. Был процесс төрлө фонетик шарттарҙа булырға мөмкин: булмаç > бумаç, алып бир > әпир, ул тиклем > утиклем, кеçәртке > кеçәрке һ.б.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Уға исем бирегеҙ. Һеҙҙеңсә нимә ул дуçлыҡ?Ассимиляция һәм диссимиляция күренештәрен табығыҙ.

Пәйғәмбәребеҙ *(с.ғ.с),* "Кеше уҙенең дуçы менән бер диндә булырға тейеш, шуның өсөн дуç буласаҡ әҙәмдең хәл-әхүәлен, холоҡ-фиғелен, ғәҙәттәрен белһен", – тигән.

Ысынлап та, кеше үҙенең тәбиғәтенә оҡшаш кеше менән дуçлашыр. Тәбиғәтендә оҡшашлыҡ һәм яҡынлыҡ булмағанда дуçлыҡҡа ла урын ҡалмаç. Аҡыллы менән ахмаҡ, ихтирамлы кеше менән тәкәббер, ғалим менән яһил, ихлас күңелле әҙәм менән ике йөҙлө кеше дуç була алмаç, – тип фекерен ҡеүәтләп ҡуя.

– Тереләр генә түгел, әруахтар – бәндәләрҙең рухтары ла – бергә йыйылған ғәскәр кеүек, ялтылмыштарында, холоҡтарында, оҡшашлыҡ булмаған йәндәр ҙә бергә йыйылмаç, – тип тағы ла бер хәҙисте өçтәп ҡуя.

Һәр хәлдә, яҡшы һынамай тороп, дуçтар һайлау мөмкин булмаһа, урталыҡ тарафын һайлап, халыҡтар менән дуç та, дошман да булмай ғүмер итеү яҡшыраҡ. Йән дуçтар табыу бит ул – ауыр эш.

(Ризаитдин Фәхретдин)

**3-сө күнегеү.** Күп нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәр ҡуйып, мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ.

1. Дуç булһаң, ... ... онотма.
2. Дуç ... өсөн мал бирер, яу килгәндә ... бирер.
3. ... илатып өйрәтер, дошман көлдөрөп көйрәтер.
4. Дуç көлгәндә ... , бөлгәндә беленә.
5. Дуçты тапҡансы эҙлә, тапһаң – ... .
6. Дуçһыҙ ... – ҡанатһыҙ ҡош.
7. Ике яҡшы ... булһа, ике аранан ҡыл үтмәç.
8. Ил өçтөндә илле ... булһын.
9. Кейемдең яңыһын маҡта, ... иçкеһен маҡта.
10. ... кем икәнен әйтһәң, һинең кем икәнлегеңде әйтермен.

**4-се күнегеү.** Күплек ялғауҙарының һигеҙ төрлө вариантта килеүенә миҫалдар уйлап табығыҙ һәм таблица рәүешендә яҙығыҙ.

**5-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙән, исемдәр, сифаттар, ҡылымдар яһағыҙ, ассимиляция һәм диссимиляция күренешен аңлатығыҙ.

Баш, көй, тимер, ҡом, аҡ, көс, йыр, тоҙ, сәскә, боҙ.

**6-сы күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙең башҡорт әҙәби телендәге варианттарын яҙығыҙ. Һығымта яһағыҙ.

Боралыу, ыҡшыу, мәйшәйеү, ҡымырҫҡа, шатраш, утырыу, апарҙым.
Өлгө: тибрәлеү – тирбәлеү.

**Өйгә эш.**

1. Тема буйынса ҡағиҙәне уҡығыҙ, һәр күренешкә 4-әр миҫал килтерегеҙ.
2. Башҡорт әҙәбиәтенән дуҫлыҡ тураһында бер нисә шиғыр килтерегеҙ.
3. «Дуҫың кем икәнен әйтһәң, һинең кем икәнлегеңде әйтермен» тигән темаға фекереңде яҙып кил.

## Орфоэпия.

Дин – әҙәп-әхлаҡ
нигеҙҙәренә таяныуы менән көслө.
Ғайса Хөсәйенов.

**1-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Дөрөҫ әйтелештә барлыҡҡа килгән үҙгәрештәрҙе билдәләгеҙ. Һығымта сығарығыҙ.

Китап уҡый, илап-илап, еп эҙләй, һәр кеше, асыҡ икән, йәй көнө, вайымһыҙ, вәзир, Ваһап, Вәли, актив, ун биш, көнбағыш, арыҫлан, бойороҡ.

- **Орфоэпия** – мәғәнә берәмектәренең (морфемалар, һүҙҙәр, һөйләмдәр) дөрөҫ әйтелеш нормаларының йыйылмаһы.

Башҡорт теленең орфоэпияһы түбәндәге ҡағиҙәләрҙе үҙ эсенә ала:

1) ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һәм фарсы теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә һүҙ аҙағындағы һәм һуҙынҡылар алдындағы [и] өнө [ий] тип әйтелә: синфи – синф[ий] һ.б.;

2) әгәр ике һүҙ араһында һуҙынҡылар тура килһә, уларҙың береһе төшөп ҡала: “ни эшләй” [нишләй] һ.б.

3) урыҫ теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр аҙағында [б], [в], [г], [д], [ж], [з] яңғырау тартынҡылары һаңғыраулана: гипноз – гипно[с], клуб – клу[п] һ.б.;

4) һуҙынҡылар араһында йәки [ҙ], [з], [ж], [й], [р], [л], [ү] тартынҡыларынан һуң [б] өнө [в] тип әйтелә: китабым – кит[авы]м, яр буйлап – я[рву]йлап һ.б.; ошоға оҡшаш позицияларҙа [ҡ], [к] өндәре яңғыраулана: ишек алды – иш[ега]лды, бал ҡорто – ба[лғо]рто һ.б.;

5) әгәр һүҙ -зд, -ст менән бөтһә, әйтелештә [д], [т] өндәре төшөп ҡала: поезд – пое[з], текст – тек[с] һ.б.

**2-се күнегеү.** Тексты дөрөҫ итеп уҡығыҙ. Текста яҙылғандар буйынса фекер алышығыҙ.

### Дин ҡанундарынан

Ислам динендә яҡындарыңды, кешеләрҙе бар күңелдән яҡын күреү, миһырбанлыҡ, Аллаһы Тәғәләгә илаһи мөхәббәт үҙәктә тора. Ошо инаныс, өмөт, мөхәббәт төшөнсәләре дини, әҙәп-әхлаҡи принципҡа әйләнә. Дин үҙ нигеҙендә ошондай әҙәп-әхлаҡ принциптарының ятыуҙары, әҙәмдәрҙе донъяға, кешеләргә ҡарата мөхәббәт, изгелек, миһырбанлыҡ, әҙәмселек рухында тәрбиәлеүҙәре менән оҙон ғүмерлелер, хатта ки мәңгелектер.

Дин асылда һәйбәт әҙәп-әхлаҡ нигеҙҙәренә таяныуы менән көслө.

Дин ҡанундары быуаттар, меңәрләп йылдар буйы һыналған.

Динлеләр фарыз ғәмәлдәрҙе – намаҙҙарҙы, бүтән ғибәҙәттәрҙе ғүмере буйы үтәй килгән һайын үҙенсә кинәнес кисереп йәшәй. Улар уның көндәлек ғәмәле, күңел йыуанысы, тән, йән сафлығы.

Шуға уларҙың тормошо ла, килер ахирәте лә үҙенә бер рухи мәғәнә менән һуғарыла.

Быны тойоп белгәндәр, кисергәндәр бермә-бер бәхетле.

(Ғайса Хөсәйенов)

**3-сө күнегеү.** Тиҙәйткестәрҙе дөрөҫ итеп уҡығыҙ.

1.Ҡараңғыла ҡара ҡарғаға ҡараным,
Ҡара ҡарғаға ҡараңғыла ҡараһаң да,
Ҡарамаһаң да, ҡара ҡарғаға ҡарағанда
Ҡара ҡараҫҡыға оҡшап тора.
2.Һалҡын һыулы Һаҡмарҙа һайрай һары һандуғас.
3. Бәҙриҙең бөҙрә Бәҙәре биҙәкһеҙ биҙрәһен биҙәкләткән.

4. Һары һаҡаллы Һаҙыйҙың һары Һарығолағы һары һаламда ята.

5. Усыма усаҡтан уҫаҡ осҡоно осто.

6.Турғайлы туғайҙағы талға тамға тамғалағандар.

7. Ҡыйын өҙҙөрттөрҙөләр, сүбен өйҙөрттөрҙөләр, саңын өрҙөрттөрҙөләр.

8. Беҙҙең кәзәбеҙ мөгөҙлө, һеҙҙең кәзәгеҙ мөгөҙһөҙ..

**3-сө күнегеү.** Түбәндәге һөйләмдәрҙә **б, п** өндәренең дөрөҫ әйтелешен күҙәтегеҙ.

1. Сүп өҫтөнә сүмәлә. 2. Зәйнәп әбей сәй эсеп ултыра ине. 3. Беҙ ҡайтҡанда, ҡояш байып бара ине. 4. Уҡығанды һөйләп бирегеҙ. 5. Һеҙҙән эш талап итеlә. 6. Китабымды Нәжип алды. 7. Беҙ туп уйнаныҡ. 8. Ишекте ябып инегеҙ. 9. Беҙ машинаға ултырып барҙыҡ. Мин Әхәткә китап алып бирҙем.

**4-се күнегеү.** Түбәндәге һөйләмдәрҙә **ҡ, к** өндәренең дөрөҫ әйтелешен күҙәтегеҙ.

1. Ул аяҡ өҫтө баҫты. 2. Беҙ урманда еләк ашаныҡ. 3. Урманда мылтыҡ аттылар. 4. Тәҙрә асыҡ ине. 5. Юлға икмәк алдым. 6. Бөгөн барайыҡ әле. 7. Әйберҙәр тоҡ эсендә. 8. Ҡунаҡтар йыраҡ илдәрҙән килгән. 9. Бер ҡабым да ашаманы. 10. Машина яй килә.

**5-се күнегеү**. Дөрөҫ әйтелешен яҙығыҙ.

Поезд, текст, ҡайта икән, килә икән, ишек алды, әйтә имеш, бал ҡорто, клуб, гипноз, ғаилә, шәхси, әхләҡи, илаһи, сәбәп , кәбән.

**5-се күнегеү**. Ребусты сисегеҙ.




**Өйгә эш.**

1. Хәҙерге башҡорт теленең орфоэпияһы менән танышығыҙ.

2. Төрлө хәрефтәргә өс тиҙәйткес яҙып килегеҙ.

3. “Дини кеше ниндәй булырға тейеш?” тигән темаға фекерләү иншаһы яҙығыҙ.

## Орфография.

Яҡшылыҡтан ҡасма, яманға аяҡ баҫма.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәргә төшөм килеш (кемде? нимәне?) ялғауҙарын ҡушып яҙығыҙ. Һандарҙы цифр менән бирегеҙ. Һығымта яһағыҙ.

Полк, штамп, календарь, киоск, кросс, Донбасс, отпуск, банк, Ғәли, Орск, лагерь, февраль, декабрь, класс, танк, тарих;

Ике мең ун туғыҙынсы йыл, утыҙынсы ноябрь, егерме беренсе быуат, егерме беренсе быуаттың егерменсе йылдары, икенсе курс, өсөнсө рәт, дүртәр китап.

➢ Орфография (грекса orthos-«дөрөҫ» һәм grapho- «яҙам» һүҙенән) – дөйөм ҡабул ителгән, берҙәм нормаларға һалынған һәм һәр кем өсөн мәжбүри һаналған практик яҙыу системаһы. Тел ғилеменең дөрөҫ яҙылыш нормаларын өйрәнә торған бүлеге **орфография** тип атала.

Орфографияның маҡсаты шул телдә яҙыусыларҙың һәм уҡыусыларҙың бөтәһенә, бер төрлө яҙыуҙы билдәләү нигеҙендә, теләһә ниндәй тексты ла тиҙ, еңел уҡырға һәм яҙырға мөмкинлек биреүҙән тора. Башҡорт теленең Орфографияһында түбәндәгесә бүлектәр айырып йөрөтөлә:

*1)* һүҙҙәрҙең өн составын хәрефтәр менән күрһәтеү;

*2)* ҙур һәм бәләкәй хәрефтәрҙе ҡулланыу;

*3)* һүҙҙәрҙе айырып, ҡушып, дефис аша яҙыу;

*4)* һүҙҙ*әр*ҙе юлдан юлға күсереү;

*5)* һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡыҫҡартыу.

Орфографияһының һәр бер бүлеге билдәле бер принциптар менән характерлана.

*1.* **Фонетик принцип** һүҙҙәр хәҙерге телдә нисек әйтелә, шулай яҙыуҙан тора.

*2.* **Морфологик принцип** һүҙҙәрҙең мәғәнәле киҫәктәрен һәр осраҡта ла бер генә төрлө яҙыуҙы, һүҙ үҙгәреү менән уларҙағы өн үҙгәрештәрен күрһәтеп тормауҙы маҡсат итеп ҡуя. Рус һәм рус теле аша ингән һүҙҙәр морфологик принципта яҙыла.

3. **Тарихи (традицион) принцип** элекке яҙыуҙы һаҡларға тырыша. Һүҙҙәрҙең ҙур йәки бәләкәй хәреф менән яҙылышы традицион принципҡа нигеҙләнгән.

Ҙур хәрефтәр менән түбәндәгеләр яҙыла:

- Яңғыҙлыҡ исемдәр, фамилия, исем һәм кешеләрҙең атамалары, ҡушаматтар, хайуандарҙың исемдәре: Мусин Ирек Әхәт улы, Ирәндек, Азамат, Бөйрәкәй, Аҡтүш һ.б.;

- Яңғыҙлыҡ географик атамалар: Мәскәү, Ҡазан, Аҡкүл, Пирения ярымутрауы һ.б.;

- Сәнғәт әҫәрҙәренең исемдәре: «Ырғыҙ» романы, Салауат арияһы, «Ҡоҙаса» комедияһы һ.б.;

-Матбуғат, кондитер һәм парфюмерия изделиелары, транспорт сараларының тәүге һүҙҙәре тырнаҡ эсенә алына: «Башҡортостан» гәзите, «Боролош» романы, «Ағиҙел» журналы, «Жигули» машинаһы һ.б.;

- Хәрефтәрҙән йәки аббревиатура өндәре менән яҙылған исемдәр: БДУ, МДУ һ.б.;

- Хәрефтәрҙән һәм аббревиатура өндәре менән яһалған исемдәр: БГПУ, БР, БДУ һ.б.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Орфографияның төрлө принциптарына таянып яҙылған һүҙҙәрҙе табығыҙ. Темаға ярашлы Ҡөрьәндән миҫалдар килтерегеҙ.

**Доғалай**

Бәндәләрҙе бик ҡаты хөкөм итмәгеҙ, үҙегеҙ ҙә шундай хөкөмгә хөкөм ителеүегеҙ бар.

Бәндәләрҙе ярлыҡай ҙа белегеҙ, үҙегеҙ ҙә бер шундай ярлыҡауға мохтаж булыуығыҙ бар.

Ярлыҡай бәндәләрҙе Хоҙай ҙа, ярлыҡай белермен, тигән.

Кешеләр һеҙгә яҡшылыҡ эшләһен өсөн, үҙегеҙҙең уларға яҡшылыҡ эшләүегеҙ ҙә бик кәрәк.

Бүтәндәр үҙеңә ҡарата яманлыҡ ҡылыуҙарын теләмәһәң, үҙең дә уларға шунса яманлыҡ ҡылыуҙан тыйыл.

Былар – Ҡөрьәндән һәм бүтән изге дин китаптарынан алынған бер нисә әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре.

Шуларҙы һәр кеше тотҡан хәлдә донъяла йәшәүҙәре, үҙ-ара мөғәмәләләр ҡалай күпкә күркәмерәк булыр ине.

Кешегә Алланы таныр өсөн үҙенең эске инанысы, күңел Аллаһы ла булырға тейеш.

Аллаға инаныстың тамыр осо – күңелдә, ти изге китап.

(Ғайса Хөсәйенов)

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ҡушма һүҙҙәрҙең яҙылышына иғтибар итегеҙ. Автор күтәргән проблемаға үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы әйтегеҙ.

Донъяла иң аҡыллы йән тигән әҙәмдең ҡай саҡ аҡылһыҙлығына ғәжәп итерлек. Донъяла ул мал артынан ҡыуа, аҡса, алтынға табына. Күптәрҙең Аллаһы – алтын. Мал, алтын өсөн йәнен бирергә әҙер. Бар хәстәре, бар хәсрәте – мал да байлыҡ. Мал-мөлкәтенә аҙ генә тәләф килһен, унын өсөн был оло хәсрәт.

Ә үҙе үлгәс, быларҙың һәммәһен юғалтырын уйлап та бирмәй. Бына ҡайҙа ул оло хәсрәт, һәләкәт.

Аҡыллы, уңған тигән әҙәмдең аңында, күңелендә донъялыҡтағы ваҡ-төйәк нәмәләр өсөн дә ҡайғырып-хафаланып үлере, бар байлығының үҙенән ҡалыры тураһында – мәңгелек ҡайғы-хәтәр хаҡында төптән уйламауы ғәжәп.

Әҙәмдең аҡылын нәфсеһе еңә шул йыш ҡына.

Күңелдә олуғ Аллаһы булмауы нишләтә әҙәмде.

(Ғайса Хөсәйенов)

**4-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп яҙығыҙ.

(А,а)ллаһы (Т,т)әғәлә, (Ю,ю)ныс сүрәһе, (Б,б)өйөк (В,в)атан (Һ,һ)уғышы, (Б,б)ородино һуғышы, (У,у)ҡытыусылар көнө, (Ҡ,ҡ)ыҙыл (М,м)айҙан, (Ҡ,ҡ)өрьән аяттары, (О,о)ктябрь проспекты, (И,и)слам (Д,д)ине, (М,м)илли (Й,й)әштәр театры, (Ҡ,ҡ)ышҡы һарай, (Р, р)әсүлуллаһ, (Ө,ө)фө боҙ аренаһы, (С,с)алауат һәйкәле, (О,о)ло (Ғ,ғ)азап, (П,п)әйғәмбәрҙәр тарихы.

**5-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү өсөн ижектәргә бүлеп яҙығыҙ.

Марттан, ауылдағы, Диниә, химия, полкта, ҡая, ҡаялар, яҡын, ҡуя, таяҡ, аяуһыҙ, Зыя, атаһы, эне, элек, ысын, ылау, еләк, еләҫ, ерҙә, ерән, хикәйә, акт, пункт.

**6-сы күнегеү.** Бирелгән ҡылымдарҙы хәҙерге заманда зат менән үҙгәртегеҙ һәм **я** хәрефенең дөрөҫ яҙылышына ҡағиҙә төҙөгөҙ.

Ҡойоу, көйөү, эйеү, кейеү, йыйыу, һыйыу, юйыу, сыйыу, уйыу, олоғайыу, һарғайыу, ҡыйшайыу, ҡарайыу, тойоу.

**7-се күнегеү.** Бирелгән хәрефтәр араһынан дин өлкәһенә ҡараған туғыҙ һүҙҙе табығыҙ.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| С | П | Ф | Е | А | Л | Л | А | Һ | З |
| Ә | Р | Д | Р | Л | З | М | З | Ж | Ъ |
| Ж | А | И | Э | Ы | Ш | Д | И | Э | К |
| Д | Ә | Н | Д | Ь | А | Н | Ы | У | Б |
| Р | Х | Д | Н | З | Ш | И | Л | В | Щ |
| И | С | И | А | Д | Ю | И | Б | Е | Р |
| Т | Л | Н | М | З | М | Д | Щ | З | Х |
| Л | А | Ж | А | Щ | Ө | Х | Ә | А | Ж |
| Д | М | З | Ҙ | Л | Е | Ю | М | Т | Б |
| У | Ь | П | Д | З | Ш | К | М | Ә | Т |
| Р | Й | О | С | О | Ф | З | Ш | Б | Д |
| А | Д | Д | Т | Ш | Л | П | Б | З | Х |
| Ҙ | А | Ш | Б | Д | О | Ғ | А | Ь | Ц |

**8-се күнегеү .** Һорауҙарға яуап бирегеҙ. Миҫалдар килтерегеҙ.

1. Орфография фәне нимә өйрәнә?
2. Башҡорт теленең орфографияһы ниндәй принципҡа ҡоролған?
3. Һүҙҙәрҙең ҙур һәм бәләкәй хәрефтәр менән яҙылыу осраҡтарын һөйләгеҙ.
4. Һандарҙың яҙылышы менән бәйле ниндәй ҡағиҙәләр бар?
5. Һүҙҙәрҙе айырып, ҡушып, дефис аша яҙыу.
6. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡыҫҡартыу ҡағиҙәләрен әйтегеҙ.
7. Һүҙҙең тамыры һәм ялғауҙары менән бәйле ҡағиҙәләрҙе әйтегеҙ.

**Өйгә эш.**

1. Орфографик йәки «Башҡортса-русса һүҙлектең» төрлө хәрефтәренән унышар ҡушма һәм парлы һүҙ яҙып алығыҙ.
2. Төп башҡорт һүҙҙәрендә һәм рус, ғәрәп теленән алынған һүҙҙәрҙә нәҙек йәки ҡалын ялғау ҡушылыуы тураһында ҡағиҙә төҙөгөҙ һәм миҫалдар яҙығыҙ.
3. «Яҡшылыҡтан ҡасма, яманға аяҡ баҫма» темаһы буйынса инша яҙығыҙ.

## ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ДӘРЕСЕ.

### Әхмәт Лотфуллиндың «Алланан ямғыр һорау» картинаһы буйынса инша яҙыу.

Күңелдәрҙә урын алырлыҡ әҫәрҙәр ижад
итер өсөн, күңелеңдә халыҡҡа, тыуған
илеңә ҡарата оло һөйөү йөрөтөргә кәрәк.
Әхмәт Лотфуллин.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Әхмәт Лотфуллин тураһында тағы нимәләр беләһегеҙ?

Лотфуллин Әхмәт Фәтҡулла улы – СССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың халыҡ, Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Ул 1928 йылдың 4 февралендә Башкортостандың Әбйәлил районы Асҡар ауылында тыуған. Бала сағы һуғыш йылдарына тура килә. Уның йәш йылдары Асҡар һәм Абҙаҡ ауылдарында үтә. Һуғыш башланғас, йәш егет Магнитогорск ҡалаһына йәйәү бара, унда училищеға инеп токарь һөнәрен үҙләштерә башлай. Һуғыштан һуң ул Ленинград ҡалаһында архитектура һәм һынлы сәнғәт, Өфөлә театр һәм һынлы сәнғәт училищеларын тамамлай, Литва республикаһындағы дәүләт һынлы сәнғәт институтында уҡый.

1957 йылда Өфөлә талантлы рәссамдың тәүге шәхси күргәҙмәһе уҙғарыла. 1957 – 1998 йылдарҙа Бөтә Рәсәй һәм республика әһәмиәтендәге күргәҙмәләрҙә ҡатнаша. 1966 йылда «БАССР-ҙың атҡаҙанған рәссамы» исеме бирелә, 1978 йылда «РСФСР-ҙың атҡаҙанған рәссамы» исеменә лайыҡ була. 1982 йылда «РСФСР-ҙың халыҡ рәссамы» маҡтаулы исеме, шул уҡ йылда Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелә. Талантлы рәссамдың һүрәттәре донъяның төрлө музейҙарынан урын ала. Уның бөтә һүрәттәрендә лә тыуған ил тойғоһо, тәбиғәт, халыҡсанлыҡ һәм милли ғорурлыҡ ярылып ята. Киң билдәле “Өс ҡатын”, “Тыуған ил менән хушлашыу. Салауат”, “Байрам”, “Фронтҡа оҙатыу”, “Хушлашыу” һәм башҡа бик күп картиналарын күп быуын мәктәп уҡыусылары дәрестә өйрәнеп үҫкән.

**2-се күнегеү.** Әхмәт Лотфуллиндың «Алланан ямғыр һорау» картинаһын ҡарағыҙ, һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. «Алланан ямғыр һорау» картинаһы ниндәй жанрҙа башҡарылған?

- Һеҙҙеңсә, был картинаның темаһы ниндәй?
- Әҫәрҙең идеяһы ниндәй? Был әҫәре менән автор ни әйтергә теләгән?
- Картинаның композицияһы тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? (картинала предметтарҙың урынлашыу тәртибе).

2. Картинаның йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

- Картинала һеҙ нимә күрәһегеҙ?
- Картинаның фоны тураһында һеҙ ни әйтерһегеҙ?
- Картинаға тағы ниндәй исем бирер инегеҙ?
- Картинаның иң мөһим деталдәрен әйтеп сығығыҙ.
- Ниндәй йыл миҙгеле һүрәтләнгән?
- Ни өсөн тәбиғәт күренеше артҡы планда?
- Картинаның төп фекере ниндәй?
- Картина ниндәй хистәр уята?
- Картинала рәссам ниндәй төҫтәр ҡулланған?

**3.** Әхмәт Лотфуллиндың «Алланан ямғыр һорау» картинаһы буйынса инша яҙырға әҙерләнегеҙ.

**Инша планы.**

1. Рәссам тураһында һүҙ.
2. «Алланан ямғыр һорау» картинаһының идея-тематик йөкмәткеһе
3. Әҫәрҙең төп идеяһын асыуҙа автор тарафынан ҡулланылған төҫтәрҙең роле.
4. Картина уятҡан хис-тойғолар.

**Өй эше.**

1. Һынлы сәнғәттең жанрҙары тураһында белешмә яҙығыҙ.
2. Рәми Ғариповтың 1971 йылда Әхмәт Лотфуллинға арнап яҙылған «Урал урманы» шиғырын яҙып килегеҙ.
3. Әхмәт Лотфуллиндың «Алланан ямғыр һорау» картинаһы буйынса инша яҙығыҙ.



*Әхмәт Лотфуллин «Алланан ямғыр һорау» картинаһы. 1994 йыл.*

# ЛЕКСИКА

## Лексика тураһында төшөнсә. Һүҙ мәғәнәһе.

Милләт нигеҙе – дин һәм тел.
Н. Ниғмәтуллин.

**1-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ, уның тураһында фекер алышығыҙ.

«Ҡөрьән Кәрим»дә Аллаһ Тәғәлә «бисмилләһир-рахмәнир-рахим» тип донъяла йәшәгән бөтөн кешегә мөрәжәғәт итә. «Мин һеҙҙе бер атанан, бер әсәнән яраттым», – ти Раббыбыҙ. Быны бөгөн генетика ғилеме менән шөғөлләнгән ғалимдар ҙа раҫлай.

Шулай булғас, барыбыҙ ҙа бер телдә һөйләшергә тейеш инек, ләкин Аллаһ Тәғәлә аяттың дауамында: «Мин һеҙҙе төрлө милләт, халыҡ, ҡәбилә итеп яраттым», – тигән. Тимәк, был бүленеш – Хоҙайҙың хикмәте. Һәр милләткә айырым үҙенсәлек хас.

«Телегеҙҙең төрлө булыуы – Аллаһ Тәғәләнең барлығына бер дәлил», – тиелә «Ҡөрьән»дә. Хоҙай барлыҡҡа килтергән был хазинаны һаҡлау – милләттәрҙең изге бурысы. Шул тиклем бөйөк ул тел: уның эсендә күпме изге фекер, фәлсәфә, мәғәнә ята, әкиәт, әйтем, ҡобайыр һәм башҡа ижади ҡомартҡылар бар! Улар әле лә яҙыла.

Хоҙай Тәғәлә милләттәрҙе бер-береһе менән танышһын, төрлө тел өйрәнһен, ғилем уртаҡлашһын өсөн яратҡан. Донъяға килгән һәр кеше иң тәүҙә туған телен өйрәнә, уҡый башлағас, дәүләт телен, сит телдәрҙе үҙләштерә. Борон-борондан тәржемәселәр иң кәрәкле һөнәр эйәләре булып иҫәпләнгән. Күпме тел белһәң, донъяға ҡараш та шул ҡәҙәр киң була. Милләттең төп нигеҙе – тел һәм мәҙәниәт. Улар бер бөтөндө тәшкил итә. Туған телгә, мәҙәниәткә, йолаларға ғаиләлә иғтибар бар икән, милләт тә йәшәйәсәк. Әхмәтзәки Вәлиди «Башҡорт халҡына хушлашыу хаты»нда ике бөйөк ҡиммәтебеҙгә – динебеҙгә һәм телебеҙгә – һөжүм буласағы тураһында белдергән. Был һүҙҙәрҙе тарих иҫбатланы.

Динебеҙҙе һаҡлаһаҡ, телебеҙ ҙә имен булыр. Ғабдулла Туҡайҙың «Эй, туған тел, эй, матур тел, атам-әсәмдең теле», Рәми Ғариповтың «Йөрәгендә халҡы булмағандың кеше булырға ла хаҡы юҡ» тигән һүҙҙәре юҡтан ғына әйтелмәгән. Хөрмәтле ҡәрҙәштәр, телебеҙ бер телдән дә кәм түгел. Уны аралашыу кимәлендә генә түгел, ә төбөнә төшөп өйрәнергә, барлыҡ ижади ҡомартҡыларын белергә ынтылырға тейешбеҙ. Бергәләп эшләһәк, сабыйҙарыбыҙҙа йырҙарыбыҙға, әҙәбиәтебеҙгә, сәнғәтебеҙгә мөхәббәт уятһаҡ ҡына милләтебеҙ һаҡланыр.

- Был текста иң мөһим, тексты аңлауға асҡыс булып торған һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ, уларҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.

( Н. Ниғмәтуллин)

Телдә булған бөтә һүҙҙәр йыйылмаһын, йәғни уның һүҙлек составын **лексика** тип, ә тел белеменең уны өйрәнеүсе бүлеген **лексикология** тип атайҙар. Лексикология телдәрҙәге һүҙҙәрҙә һүҙлек составының мәғәнәгә эйә булған берәмеге булараҡ өйрәнә, шуға күрә уға айырым һүҙҙәр генә түгел, ә мәғәнәләре буйынса бер һүҙгә тиң булған лексикалашҡан һүҙбәйләнештәр, фразеологик берәмектәр ҙә ҡарай.

Телдәге һүҙҙәрҙәң барлыҡҡа килеүе, үҙгәрештәргә бирелеүе һәм үҫеүе халыҡтың оҙайлы тарихына бәйләнгән. Башҡорт теленең һүҙлек составында башҡа ҡәрҙәш һәм ҡәрҙәш булмаған халыҡтар менән мөнәсәбәттәр ҙә сағылыш таба. Ғәҙәттә, ҡәрҙәш телдәр менән бергә борондан килгән уртаҡ һүҙҙәр күп була, ә ҡәрҙәш бүлмаған телдәрҙән яңы һүҙҙәр үҙләштерелә. Конкрет телдең, шул иҫәптән башҡорт теленең дә, һүҙлек составы өҙлөкһөҙ үҙгәрештәргә бирелә: ҡайһы бер һүҙҙәр иҫкереп, һирәгерәк ҡулланыла башлай, хатта телдән – ҡулланылыштан төшөп тә ҡала, яңы төшөнсәләр менән бергә яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килә, һүҙҙәрҙең мәғәнәләрендә лә үҙгәрештәр булып тора. Лексикологияның айырым бүлектәрендә һүҙҙәр өлкәһендә булған үҙгәрештәр ҡараласаҡ.

## Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре

Һүҙ телдең төп берәмеге булып, ысынбарлыҡтағы әйберҙәрҙең, күренештәрҙең, билдәләрҙең, хәрәкәт төрҙәренең, заттарҙың, тойғоларҙың атамаһы булып тора. һәр бер һүҙҙең формаһы һәм йөкмәткеһе була. Форма – ул тышҡы күренеш һәм унда һүҙҙең өндәре, хәрефтәре һәм уларҙың билдәле бер тәртиптә килеүе сағылыш ала. Йөкмәтке,киреһенсә, – эске күренеш, уға һүҙҙең мәғәнәһе, хис-тойғо биҙәктәре ҡарай. Һәр бер һүҙ тышҡы форманың һәм эске йөкмәткенең тығыҙ берҙәмлегенән тора. Һүҙҙең тышҡы төҙөлөшө үҙгәрһә, уның мәғәнәһе лә үҙгәрергә мөмкин. Мәҫәлән, *һал* һүҙенең бер өнөн генә үҙгәртһәң дә, әллә нисә яңы мәғәнәләге һүҙҙәр барлыҡҡа килә: *һал – һаҡ- һап – һау – һан – һай* һ.б. Һүҙҙәрҙә ысынбарлыҡтағы әйбер һәм күренештәрҙең дейөмләштерелгән мәғәнәһе сағылыш ала. Мәҫәлән, *кеше* тигән һүҙ билдәле бер кешенең генә атамаһы булып ҡалмай, ә ошо төркөмгә ҡараған заттарҙың атамаһы ла булып йөрөй. Шуға күрә был атамала билдәле бер кешегә генә хас була торған енес, йәш, холоҡ, төҫ-баш һымаҡ билдәләр сағылыш алмай. Хатта яңғыҙлыҡ исемдәр ҙә күп осраҡта айырым берәмеккә

булған мөнәсәбәтте белдермәй, сөнки Азат, Таһир, Айгөл, Маһинур һымаҡ исемдәрҙе бер генә кеше түтел, ә тиҫтәләгән, йөҙәрләгән кешеләр йөрөтөргә мөмкин.

Ысынбарлыҡтағы төшөнсәнең һүҙ ярҙамында сағылдырылышы һүҙҙең лексик мәғәнәһе була. Мәҫәлән, һыйыр һүҙенең мәғәнәһе – һөтө өсөн аҫрала торған айыры тояҡлы эре мөгөҙлө мал. Һәр бер һүҙҙең лексик мәғәнәһе өс төрлө күренештең ҡатмарла бәйләнешенән тора: ысынбарлыҡ – төшөнсә – һүҙ. Ләкин төшөнсә менән һүҙ һәр ваҡыт тап килеп тормай. Мәҫәлән, алйот, ахмаҡ, иҫәр, тиле, йүләр һүҙҙәре бер үк төшөнсәне белдерә, ләкин телдә төрлө һүҙҙәр менән сағылыш ала. Киреһенсә, бер үк һүҙ бер нисә төшөнсәне белдерергә мөмкин. Мәҫәлән, аҡ һүҙенең төп мәғәнәһе киңәйеү нигеҙендә яңы мәғәнәләр барлыҡҡа килгән, һәм был һүҙ хәҙерге башҡорт телендә бер нисә мәғәнәлә йөрөй, йәғни бер нисә төшөнсәнең атамаһы итеп ҡулланыла: аҡ – төҫ (аҡ ҡағыҙ); аҡ – һөт аҙығы (аҡ етмәү); аҡ – күҙ ауырыуы (аҡ тешөү); аҡ – изге (аҡ хыялдар) һ. б.

Телдә һүҙҙең, лексик мәғәнәһенән тыш, грамматик мәғәнәләре лә була. Грамматик мәғәнә һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр эсендә һүҙҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре нигеҙендә асылып, төрлө грамматик категориялар һәм уларҙы белдереүсе формалар аша сағылдырыла. Мәҫәлән, һыйыр көйшәй тигән һөйләмдә һыйыр һүҙенәң грамматик мәғәнәһе унның исем һүҙ төркөмөнә ҡарап, төп килештә, берлек һанда килеүендә һәм һөйләмдең әйәһе булыуында сағылыш таба. Һыйырҙарға бесән һалдым һөйләмендәге һыйыр һүҙенең грамматик мәғәнәһе уға ялғауҙар ҡушыу юлы менән үҙгәргән: хәҙер ул төбәү килештә, күплек һанда тороп, һөйләмдең тултырыусыһы булып килгән. Аҡ һүҙенең лексик мәғәнәһе – нейтраль төҫ атамаһы, ә -һыл, -ыраҡ, ап- күрһәткестәре уға яңы грамматик мәғәнәләр өҫтәй: аҡ-һыл (төп төҫтән кәмерәк), агыраҡ (төп төҫтән юғарыраҡ), ап-аҡ (төп төҫтөң иң юғары сиге).

**2-се күнегеү**. Р. Фәхретдиновтың нәсихәттәрен иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡара шрифт менән бирелгән һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләрен әйтегеҙ.

**Ватан һәм милләт**

1. Күге аҫтында йәшәгән, һауаларын еҫкәгән, һыуын эскән, икмәген ашаган **ватанығыҙҙы** нык һөйөгөҙ, унын исемен **бөйөк** итеү өсөн тырышырыҙ.

2. Ватан – кешеләрҙең хөрмәте һәм һәр кем алдында ғорурланырлыҡ хазина. Шуға күрә ватан өсөн малығыҙҙы ҡыҙғанмағыҙ һәм көстәрегеҙҙе аямағыҙ. Ватан хаҡында бындай **фиҙаҡәрлек** күрһәтмәгән кеше унда йәшәргә **лайыҡ** түгел.

3. Ата-әсәгеҙҙе, яҡын **ҡәрҙәштәрегеҙҙе** нисек һөйһәгеҙ, **милләтегеҙҙе** лә шулай һөйөгөҙ. Милләтегеҙ өсөн хеҙмәт итеүҙе йәнегеҙ өсөн бәхет тип белегеҙ. «Милләт» һәм «Ватан» һүҙҙәрен **мәсхәрәләүселәрҙе** тыңламағыҙ. Улар шәрәф сифатынан мәхрүм ҡалған **бисаралар**. Уларҙың үҙҙәрен ҡыҙғанығыҙ һәм былдай түбән дәрәжәгә төшкәндәре өсөн **мәрхәмәт** күрһәтегеҙ.

4. Милләт һәм ватан өсөн хеҙмәт итергә тура килһә, уның өсөн рәхмәт һәм бүләк көтмәгеҙ. Бүләк көтөү шулай ҡалһын, **фарыз** ҡылдың, милләт һеҙгә яфа ҡылһа, һис үпкәләмәгеҙ, өҫтөгөҙгә йөкмәтелгән хеҙмәттәрҙән баш тартмағыҙ. «Ҡалаларым һәм ҡәүемдәрем ни ҡәҙәр мине яфалаһалар ҙа, минең алдымда улар һаман хөрмәтле», – тигән ғәрәп шиғырын уҡығыҙ һәм шулай итеп күңелегеҙҙе йыуатығыҙ.

5. Дин һәм белем таратыу, мәктәптәр һәм **хәйриә** эштәре һәм нисек кенә булһа ла халыҡҡа ярҙам биреү өсөн тырышлыҡ сарыф итеү иң гүзәл **ғәйрәттер**. Быны̆ң яҙаһы (бүләк)ла матур буласаҡ. Шуның өсөн изге һәм дин ҡушҡан эштәргә, милләт һәм дин файҙаһына ярҙам биреүҙе бәхет тип һанағыҙ. Күңелегеҙ менән һөйә-һөйә ярҙам бирегеҙ. Милләтегеҙгә белем һәм мәғрифәт таратығыҙ. Араларына дуҫлыҡ һәм мөхәббәт орлоҡтары сәсегеҙ. Дошманлыҡ һәм гонаһ эштәренә ярҙам итеүҙән һаҡланығыҙ. Бигерәк тә милләт **зарарына** бер хәреф тә һөйләмәгеҙ һәм бер нөктә лә яҙмағыҙ.

6. Милләт файҙаһына хеҙмәт итеүселәрҙе үҙҙәре менән һөйләшмәҫтән элек, белер-белмәҫ килеш күңел тарлығы бәләһе сәбәбенән төрлө ялғандар менән ҡаралауға ынтылмағыҙ. Кеше зарарына хөкөм итергә ашыҡмағыҙ. Кешегә яла яғыу һәм ғәйепләүҙе, шәм һүндереү кеүек еңел, тип иҫәпләмәгеҙ. Хөкөм итеүҙән элек фекерегеҙҙең дөрөҫлөгендә **шөбһәләнһәгеҙ**, аҡыл эйәләренә мөрәжәғәт итегеҙ. Уларҙың фекерен алығыҙ. Фекерегеҙ яңылыш булыуы ихтимал.

(Р. Фәхретдинов)

**3-сө күнегеү**. Өсөшәр кешенән торған командаларға бүленеп, лексика, лексикология йә һүҙҙәрҙең мәғәнәләре темаһына кластер төҙөгөҙ. Класс алдында сығыш яһағыҙ.

**4-се күнегеү**. Ребусты сисегеҙ.



,,,  ,, + эйәлек заты ялғауы

 к=л ,  е=а.

**5-се күнегеү** . Һорауҙарға яҙма яуап бир.

1. Нимә ул лексика һәм лексикология?
2. Һүҙҙәрҙең ниндәй мәғәнәләре була?
3. Нимә ул һүҙҙең грамматик мәғәнәһе?
4. Нимә ул лексик мәғәнә?

**Өйгә эш:**

1. Милләт, ватан тураһында 10 мәҡәл яҙып алып кил.
2. З. Ханнанованың "Мин – башҡорт, тип танышығыҙ!" шиғырын ятлағыҙ һәм сығыш яһағыҙ.
3. Лексика, лексикология һүҙенә синквейн яҙығыҙ.

## Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Күсмә мәғәнәһе

Йөҙ һумың булғансы, йөҙ дуҫың булһын.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ, был темаға ҡарата үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ. Ҡара шрифт менән бирелгән һүҙҙәр тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?

Кеше ҡайғы-шатлыҡтарын уртаҡлашырлыҡ дуҫтарға һәр ваҡыт мохтаж. Ҡайһы бер дуҫтар матди **яҡтан**, ҡайһылары рухи яҡтан ярҙам итәләр. Кәрәк ваҡытта уларҙан аҡса йәки берәй әйбер һорап тора алаһың, бәләгә тарыһаң йәки ауыр хәлгә осраһаң дуҫтарҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалаһың. Мәшәҡәттәре мәңге бөтмәҫ был донъяла дуҫтар һәр саҡ терәк. Дуҫлыҡҡа таянған кеше тормошта бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Уның һәр аҙымы ышанығлы була. Тайғаҡ юлдан атлағанда йығылмаҫ өсөн таяҡ кәрәк, ғүмер юлынан уҙғанда дуҫтарҙың булыуы шарт.

Дуҫлашып йәшәүҙең дә үҙ ҡағиҙәләре бар. Шуларҙы белеү мотлаҡ. Уларҙы үтәү араларағы дуҫлыҡты нығыта. Был ҡағиҙәләр: үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттә булыу, йыш аралашыу, бер-берендең хәлен белешеү һәм башҡалар.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләмдең Мәҙинәгә һижрәт ҡылғандан һуң сәхәбәләр менән ансарҙарҙы бер-береһенә дуҫ-ҡәрҙәш яһағанлығы мәғлүм. Бында бик ҙур ғибрәт бар. **Ауыр** замандарҙа дуҫ йыуаныс була. Донъя **малы** килә лә китә ул, ә дуҫлыҡ бөтмәй. Аҡыллы кеше дуҫы менән һөйләшеп ултырыуҙан да ләззәт ала. Ысын дуҫты табыуы ҡыйын. Айырыуса, ике йөҙләләр күбәйгән дәүерҙә. Әгәр берәйһе менән дуҫлашырға теләһәң, ашыҡмаҫҡа кәрәк, уны **башта** һынап ҡарау мөһим. Дуҫтың тоғромо, ышаныслымы икәнен түбәндәгесә һынап ҡарарға мөмкин:

1) Дуҫ буласаҡ кешенең элекке дуҫтарын, дошмандарын белеү кәрәк. Кешенең кемлеген дуҫынан белеп була. Әгәр дуҫы **боҙоҡ** булһа, унан йыраҡ кит, яҡшы булһа яҡын бар, уңырһың.

2) Буласаҡ дуҫтың биографияһын өйрәнергә кәрәк. Кешенең тышҡы яғына ғына ҡарама, эске донъяһына иғтибар ит. Ҡара **эсле** әҙәмдәр арабыҙа әҙме ни.

3) Ғәйбәт һөйләп, башҡаларҙың серҙәрен фаш итеүселәр дуҫ яһау өсөн яраҡлы түгел. Сөнки улар һинең серҙәреңде лә бүтәндәргә еткерәсәк. **Яҡын** дуҫ булмай тороп үҙенең шәхси хәлдәрен һөйләүсенең дә сер һаҡлай алмауына бер дәлил. Серен һаҡлай алмаған әҙәм нисек итеп һинең сереңде һаҡлай алһын.

Тоғро дуҫтарҙа була торған яҡшы сифаттар: улар һүҙҙәренән бигерәк ғәмәлдәре менән яҡын итерҙәр, кешеләге кәмселеккә күҙ йоморҙар, сәбәп эҙләп тормай, шатлыҡлы минуттарҙа ла, ауыр мәлдәрҙә лә дуҫлыҡты белгертерҙәр.

Әҙәм балаһы хатаһыҙ булмай. Дуҫтың ғәйебен табып, дуҫлыҡтан айырырға ярамай. Бер эш өсөн үпкәләп, бөтөнләй дуҫһыҙ ҡалырға була. Аҙаҡ ғүмер буйы үкенерһең. Шуға күрә дуҫтың ҡәҙерен белергә кәрәк. Яҡында

булғанда ялҡытмаҫлыҡ, йыраҡта булғанда онотмаҫлыҡ, һүҙе менән дуҫ итеүҙән бигерәк фиғеле менән дуҫ итеүсе кешене табыу кәрәк.

(Р. Фәхретдин)

Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеген тел белемендә **полисемия** (грекса полис – «күп», сема – «мәғәнә») тип йөрөтәләр. Күп осраҡта телдәге һүҙҙәр бер мәғәнәлә түгел, ә ике йәки унан да артыҡ мәғәнәлә ҡулланыла. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге, ғәҙәттә, телмәрҙә генә йәки контекста ғына асыҡлана. Мәҫәлән, таҙа һүҙенең телмәрҙәге ҡулланылышынан сығып, уның түбәндәге мәғәнәләрен билдәләргә мөмкин: тапһыҙ, бысраҡ түгел (таҙа иҙән, таҙа кейем), һау-сәләмәт (таҙа кеше), бөхтә, йыйнаҡ (таҙа булмә).

Һүҙҙәрҙә мәғәнә күсеше билдәләрҙең уртаҡлығы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Мәғәнә күсешенең бер нисә төрөн айыралар. **Метафорала** (грекса «күсереү» мәғәнәһендә) мәғәнә күсеше тышҡы йәки эске билдәләрҙең оҡшашлығына нигеҙләнгән була. Мәҫәлән, тәңкә һүҙенең тура мәғәнәһе – «ваҡ металл аҡса», ә күсмә мәғәнәһе – «балыҡ ҡабығы» (балыҡ тәңкәһе).

Предметтарҙың йәки күренештәрҙең арауыҡ һәм ваҡыт яҡынлығына мәғәнә күсешен **метонимия** (грекса – «исем алмаштырыу») тип йөрөтәләр. Мәҫәлән, ауыл һүҙенең тура мәғәнәһе «ауыл хужалығында эшләүсе кешеләр йәшәгән урын».

Өлөш урынына бөтөндөң, бөтөн урынына өлөштөң атамаһын ҡулланыуҙы **синекдоха** (грекса синекдохе – «мөнәсәбәттәшлек») тип атайҙар. Синекдоха күберәк йәнле телмәрҙә ҡулланыла һәм, башлыса, кешене уның тән өлөшөнә йәки кейеменә ҡарап атауға ҡоролған: Һүҙгә «һаҡал» да ҡушылды (һаҡаллы кеше урынына).

**2-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ, күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе табығыҙ. Ул һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен әйтегеҙ.

Ҡиәмәттә, Мизан ваҡытында, бер кешенең ожмахҡа керер өсөн әҙ генә әжер-сауабы етмәҫ. Ул Аллаһ Тәғәләнән ялбарыр: “Бер аҙ ваҡыт бир, мин етмәгән әжер-сауапты табырым”, – тип. Ул әсәһенә барыр, унан әҙ генә әжер һорар. “Эй әсәйем! Һинең балаңа тамуҡҡа кермәҫ өсөн әҙ генә сауап етмәй. Мине ҡотҡар, әҙ генә сауабыңды бирһәңсе”, – тиеп ялбарыр. Ләкин әсәһе уға: “Эй улым! Һин ҡурҡҡандан, мин дә ҡурҡам. Һиңә әжерҙәремдән бер нәмә лә бирә алмам”, – тиер. Һуңынан атаһына барып ҡарар, ләкин унан да шундай уҡ яуап алыр. Туғанларына, һеңлеләренә, хәләл ефетенә барып та әжерһеҙ ҡайтыр, берһелә, бер әжер ҙә уға бирмәҫ. Инде ҡотолоп булмаҫына, Тамуҡҡа эләгеренә ҡайғырып кире Аллаһ Тәғәләгә барғанда мәсеткә бергә

йөрөгән, Аллаһ ризалығы өсөн бергә намаҙ уҡыған ҡәрҙәшен осратыр үә уға үҙ ҡайғыһын һөйләп бирер. Шул саҡта дин ҡәрҙәше уға: “Миңә әле Хисап булманы, бәлки миңә лә әжер-сауаптарым етмәç. Икебеҙ ҙә тамуҡҡа кергәнсе, һин булһа ла ожмахҡа кер”, – тип уға үҙенең бөтөн әжерҙәрен бирер. Аллаһ алдына әжер-сауаптар менән һөйөнөп был мосолман килер ҙә уны ожмахҡа керергә рөхсәт ителер. Инде ожмах ишегенә килеп баçҡас, ауаз ишетә:

“Үҙ дуçы бәләгә тарығанда, тамуҡҡа кергәндә уны ташлаған ирҙәр сифатынан булмаç.” Был мосолман үҙ ҡәрҙәше тураһында уйланыр. Уның тамуҡҡа керере, ундағы яфаларҙы иçенә алып, Аллаһҡа ялбарыр: “Йә Раббым! Минең ҡәрҙәшемде лә ғәфү ит, уны ла ожмахыңа керет. Йә мине лә уның менән бергә тамуҡҡа ырғыт”, – тип сәждәгә китер. Уға фәрештәләр: “Кер ожмахҡа”, – тигәс: “Юҡ, дуçым миңә сауаптарын бирҙе, мине ҡотҡарҙы, унһыҙ керә алмам”, – тиер. Шул саҡ Аллаһ Тәғәлә фәрештәләргә: “Барығыҙ тамуҡҡа үә уның дуçың сығарығыҙ”, – тигән әмер ителер. Улар икеһе лә ожмахҡа керерҙәр, икеһе лә ҡотолорҙар.

Пәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм әйткән бит: “Мосолман дуçтарығыҙ күп булһын. Улар Ҡиәмәттә һеҙҙең өсөн шәфәғәт ҡылырҙар”. Ибн Мәджәнең хәҙистәр йыйынтығында килгән хәҙистә: “Ҡиәмәттә, Хисап ваҡытында, мосолмандар Аллаһ Тәғәлә менән ҡыйышҡан һымаҡ ныҡ ялбарырҙар. “Йә Раббым! Был ҡәрҙәштәребеҙ беҙҙең менән мәсеттә бергә намаҙ уҡыны, ураҙа тотто, уларҙы тамуҡтан сығарһаңсы”, – тип. Шул саҡ Аллаһтан рөхсәт ителеп: “Күңелендә дирхәм ҡәҙәре иманы булғандарын тамуҡтан сығарығыҙ”, – тиелер. Мосолмандар тағы ла ялбарыр. Һуңынан Аллаһтан ярты дирхәм ҡәҙәре булһа ла иманы булғандарын сығарырға рөхсәт ителер. Ләкин мосолмандар ялбарыуынан туҡтамаç. Һуңынан Аллаһтан хатта туҙан бөртөгө ҡәҙәрем булһа ла иманы булғандарын тамуҡтан сығарырға әмер ителер”.

Мөхтәрәм дин ҡәрҙәштәребеҙ! Ҡиәмәттә бер-беребеҙҙең ҡәҙерен беләсәкбеҙ. Шул саҡҡа әҙер булайыҡ. Дин ҡәрҙәштәребеҙ күп булһын, уларҙы Аллаһ ризалығы өсөн һөйәйек, уларға ярҙам итәйек. Зыян итә күрмәйек. Хатта иң яҡын туғандарыбыҙ ҙа ярҙам ҡулы һуҙмағанда, улар ярҙам итер. Шул саҡта дуçлыҡтың ҡәҙерен белербеҙ. Әле бер- берһе менән ҡыйышып йөрөгән мосолмандар шул саҡ үкенер. Донъяла мосолмандар төрлө фирҡәләргә бүлгеләнер, мал-мөлкәт бүлешәләр, үҙҙәренең дуçлығын юҡ итәләр. Ҡиәмәттә был кәрәк булырмы? Кемдәрҙер белеп, ҡайһылар аңғармай даләләттә (аҙашыуҙа) булырҙар. Ҡай берәүҙәр мосолмандарға зыян һалып йөрөр, уларҙан көлөп маташыр. Һындайҙар үҙҙәренең ҙур хәсрәттә икәнен аңламаç ҡына. Үкенерҙәр, ләкин һуң булыр...

( И. Хафизи )

**3-сө күнегеү.** Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге темаһына синквейн төҙөгөҙ. Класс алдында уҡып күрһәтегеҙ.

**4-се күнегеү**. Кроссвордты тултырығыҙ.



Вертикаль буйынса:

1. Предметтарҙың йәки күренештәрҙең арауыҡ һәм ваҡыт яҡынлығына мәғәнәуи күсеше.
2. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеген тел белемендә шулай атайҙар.

Горизонталь буйынса:

1. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге, ғәҙәттә, унда ғына асыҡлана.
2. Мәғәнә күсеше тышҡы йәки эске билдәләрҙең оҡшашлығына нигеҙләнгән күп мәғәнәлелек.
3. Өлөш урынына бөтөндөң, бөтөн урынына өлөштөң атамаһын ҡулланыуҙы нимә тип атайҙар?
4. Ул латинса «эш башҡарыу» тигәнде аңлата.

**5-се күнегеү**.

1. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеген тел белемендә нимә тип йөрөтәләр?

А) полисемия

Б) уносемия

В) моносемия

2. Һүҙҙәрҙә мәғәнә күсеше нимә нигеҙендә барлыҡҡа килә?

А) билдәләрҙәң айырмаһы

Б) билдәләрҙең уртаҡлығы

В) тамырҙарҙың уртаҡлығы

3. Метафорала (грекса «күсереү» мәғәнәһендә) мәғәнә күсеше нимәгә нигеҙләнгән?

А) өлөш урынына бөтөндөң, бөтөн урынына өлөштөң атамаһын ҡулланыуға нигеҙләнгән

Б) предметтарҙың йәки күренештәрҙең арауыҡ һәм ваҡыт яҡынлығына мәғәнә күсешенә нигеҙләнгән

В) тышҡы йәки эске билдәләрҙең оҡшашлығына нигеҙләнгән

4. Предметтарҙың йәки күренештәрҙең арауыҡ һәм ваҡыт яҡынлығына мәғәнә күсешен нимә тип йөрөтәләр.

А) метонимия

Б) синекдоха

В) метафора

5. Нимәне синекдоха (грекси синекдохе – «мөнәсәбәттәшлек») тип атайҙар?

А) тышҡы йәки эске билдәләрҙең оҡшашлығын

Б) өлөш урынына бөтөндөң, бөтөн урынына өлөштөң атамаһын ҡулланыуҙы

В) предметтарҙың йәки күренештәрҙең арауыҡ һәм ваҡыт яҡынлығына мәғәнә күсешен

**Өйгә эш.**

1. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге темаһына кластер эшләгеҙ.

2. Художестволы әҙәбиәттән күп мәғәнәле һүҙҙәр ҡулланылыуына миҫалдар табып яҙығыҙ.

3. «Дуҫлыҡ» темаһына инша яҙып килегеҙ.

**Синоним.**

Дин – ул доньяны төшөнөү, ғибрәтте
һәм әхлаҡи нормаларҙы, тәртип-низамды,
йолаларҙы сағылдырыу.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, был проблемаға ҡарата үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы белдерегеҙ. Ҡара шрифт менән бирелгән һүҙҙәр тураһында нимә әйтерһегеҙ?

## Динебеҙҙә терроризм юҡ.

**Терроризм** – ул кешелеккә ҡарата эшләнгән **енәйәт**. Уның арҡаһында **бер ғәйепһеҙ**, **саф** кешеләр зыян күрә. Террорсыларҙың маҡсаты – кешеләрҙе үлтереп һәм **имгәтеп**, **ҡурҡытып** йәмғиәт өсөн яфа тыуҙырыу. Был **ғазап** һәм **ыҙаны** ҡулланып, төрлө вәхши сәйәси маҡсаттарға өлгәшеү.

Һуңғы йылдарҙа донъя күләмендә "Ислам терроры" тигән тәбиғи булмаған бер төшөнсә барлыҡҡа килде. Дөрөҫ, яңылыш мәғлүмәт – сөнки Исламда террорға урын юҡ.

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә бөтә мосолмандар донъяға тыныслыҡ, яҡшы тормош һәм **ҡәрҙәшлек**, **туғанлыҡ** килтереүҙәрен бойороҡ итте. Ислам дине ул **дөрөҫ**, **ғәҙел** һәм **тыныслыҡҡа**, **именлеккә** саҡыра торған дин. Ләкин, ни ҡыҙғаныс, ҡайһы берәүҙәр уны **икенсе төрлө**, **яңылыш** аңлайҙар, йәнәһе, был текст дөрөҫ түгел: "Ул Ислам тыныслыҡҡа өндәмәй, ул халыҡты мәжбүр итә, уларға мәшәҡҡәт тыуҙыра. Ҡайһы берәүҙәр ислам динен тотоусы мосолмандарҙан ҡурҡалар. Мосолмандар – **экстремисттар** һәм **террористар**", – тип әйтеүселәр ҙә бар. Ни өсөн шулай әйтәләр тиһәгеҙ, хәҙерге ваҡытта һуғыш барған Сирияға һәм тыныс булмаған Ғираҡ, Афғанстанда барған хәлдәргә ҡарап, шулай уҡ үҙебеҙ йәшәгән Рәсәйҙәге террористарҙың ғәмәлдәренә ҡарап Исламға ҡарата **хаталы**, **ялған** баһа бирәләр. Улар маңлай күҙҙәре менән күргәндәренән сығып баһа бирә. Ә беҙ, мосолмандар, ауыҙыбыҙға һыу ҡапҡан шикелле **хаҡ**, **дөрөҫ** һүҙҙе әйтә алмайса ғажиз булып ҡалабыҙ. Беҙгә бик тә **ҡыйын**, **йәнебеҙ әрней**.

Ислам дине тыныслыҡҡа һәм бер-береңә **ярҙам итергә**, **изгелек ҡылырға** өндәй. Тыныс илдә йәшәүе **рәхәт**, **күңелле**. Мөхтәрәм йәмәғәт, бер-беребеҙҙе тыныслыҡҡа өндәйек, **тыныс**, **имен** йәшәү өсөн бер-беребеҙҙе **яҡшы**, **хәйерле**, **файҙалы** вәғәздәр менән нәсихәтләйек! Әгәр ҙә беҙ – мосолмандар: "Был эш миңә ҡағылмай", тиһәк ялғышабыҙ. Аллаһ Тәғәлә беҙгә Үҙе тыныслыҡҡа өндәргә ҡушты. Тыныслыҡ өсөн тырышҡаныбыҙҙы һүҙҙә генә түгел, ғәмәлдә лә күрһәтергә булһын. Терроризмдың бәләләрен кешеләргә, балаларыбыҙға оноҡларыбыҙ һөйләп аңлатыу Исламдың тыныслыҡҡа саҡырыуын һәм тыныслыҡ дине икәненә етәксе аңлатып биреү төп бурысыбыҙ булһа ине. Ошо эштәрҙе эшләһәк кенә маҡсатыбыҙға ирешербеҙ, ин шәә Аллаһ.

(DAGVAT.RU сайтынан )

Синонимдар – мәғәнәләре яғынан бер-береһенә тап килгән йәки бик яҡын булған һүҙҙәргә әйтәләр. Синонимдар ысынбарлыҡтағы бер үк

предметты, күренеште, билдәне, хәрәкәтте төрлөсә атау йәки төрлө телдәрҙән йәки һөйләштәрҙән әҙәби телгә килеп ингән һүҙҙәр нигеҙендә барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, ырғытыу, бырғытыу, ташлау, атыу синонидары төп башҡорт һүҙҙәренән яһалған. Ә башҡорт һүҙе булған бойороҡ һүҙенә төрлө телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр синоним булып килә: приказ (рус теленән), әмер (ғәрәп теленән), фарман (фарсы теленән). Мәғәнәләш һүҙҙәр синонимик рәттәр яһай. Синонимик рәттәге йышыраҡ ҡулланылған, мәғәнәһе киңерәк, стилистик яҡтан битараф һүҙҙе доминанта тип атайҙар. Синонимдар ояһына ҡараған һүҙҙәрҙең йәки һүҙбәйләнештәрҙең һаны төрлөсә булырға мөмкин: күнәк, биҙрә; тәүҙә, элек, башта, әүәл;

Синонимик рәткә ҡараған һүҙҙәр мәғәнәләре һәм ҡулланылыштары менән бе-береһенән айырылырға мөмкин. Мәҫәлән, ашау, туҡланыу, ризыҡланыу, тамаҡ ялғау, йыпырыу, тығыныу тигән синонимик рәттә киң ҡулланылған битараф һүҙ – ашау (доминанта), туҡланыу – китап теленә тартым, ризыҡланыу – һирәк ҡулланылыусы иҫкереп барған һүҙ, тамаҡ ялғау – еңелсә ашап алыу, ә йыпырыу менән тағыныу – түбәнәйтелгән һөйләүтелмәренә ҡараған тупаҫ һүҙ. Күп осраҡта синонимдар телмәрҙә береһен икенсеһе алмаштыра алмай.

Синонимдар телмәр өсөн бик әһәмиәтле, улар фекерҙе тапҡыр, тулы, эмоциональ итә.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, текста бирелгән бер үк предметты, күренеште, билдәне, хәрәкәтте төрлөсә атағыҙ.

Ислам тарихына күҙ һалһаҡ, беҙ күрәбеҙ: Пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.в.) ғәйепһеҙ кешеләрҙе гел һаҡлап килгән. Дошмандарҙан һаҡланыу өсөн булған һуғыштарҙан башҡа һис бер ваҡыт һуғыш башламаған. Был һуғыштарҙа иһә ғәйепһеҙ кешеләргә теймәҫкә, һис бер ерҙе бик харап итмәҫкә, сиркәү һәм синагогаларға хөрмәт күрһәтергә, тип яу башлыҡтарына бойороҡ итә. Был ғәҙеллек һәм татыулыҡ бөтөн Ислам тарихы буйынса күҙәтелә. Ислам тыныслыҡ дине икәне бынан да бик асыҡ күренә. Бөтә кешеләргә ҡарата яҡшы, ғәҙел булыу һәм ер йөҙөндә фетнәләргә ҡаршы көрәшеү – мосолмандарҙың төп вазифаларының береһе.

Кеше рәнйетеү, кеше ҡанын ҡойоу – оло гонаһтарҙан. Ҡөрьәндә: «Бер кешене үлтереү бөтә кешелек доньяһын үлтереүгә тиң, бер кешене ҡотҡарыу бөтә кешелекте ҡотҡарыуға тиң», тиелгән. Аллаһының китабы, беҙҙе татыулыҡҡа өндәй. Ә ни өсөн беҙ дини тарҡаулыҡта, милләт-ара дошманлыҡта? Кеше үлтереп, беҙ бит шайтанға ҡорбан салабыҙ, уға яҡын булабыҙ.

Ислам һүҙе үк «тыныслыҡ» тигән һүҙ. Беҙ, мосолмандар, ҡан ҡойоп кешеләрҙең ерен, малын тартып алыу өсөн мосолман булманыҡ, ә кешеләрҙең йөрәктәрен яулап алыр өсөн Ислам байрағын күтәрҙек. Мосолман ҡуйынында бомба түгел, уның йөрәгендә иман, сәләм, бөтөн донъяға ҡарата һөйөү булырға тейеш. Шул мөхәббәте менән ул бөтә донъяға Аллаһ һүҙен сәсеп, донъяны гөл баҡсаһы итергә теләүсе заттарҙан булырға тейеш. Беҙ, мосолмандар, әлһәмдү лилләһ, беренсе, икенсе бөтә донъя һуғыштарын башламаныҡ, Японияға атом бомбаһын ташламаныҡ, водород, химик, нейтрон бомбалары уйлап тапманыҡ. Ерҙәге, диңгеҙҙәге, йыһандағы ҡоралдарыбыҙ менән маҡтанмайбыҙ. Беҙҙең «бомбабыҙ», ҡоралыбыҙ – бары тик доға һәм Аллаһының һүҙе, пәйғәмбәребеҙ сөннәте, маҡсатыбыҙ – тыныслыҡ, дуҫлыҡ, Аллаһының ризалығы.

(Интернет селтәренән)

**3-сө күнегеү**. Кроссвордты тултырығыҙ.



1. Ерҙәге үҙ эштәрең өсөн яуап биреү.
2. Был һүҙ, ғәрәп теленән тәржемә иткәндә, “тәрән ышаныу, инаныу” тигәнде аңлата.
3. Тамуҡ һүҙенең синонимы.
4. Шул уҡ йәннәт.
5. Уларҙа кешеләрҙең изге һәм гонаһлы ғәмәлдәре үлсәнә.
6. Ожмах әһелдәре – ожмахҡа, тамуҡ әһелдәре – тамуҡҡа ингән көн.
7. Бөтә кешеләр ҙә терелеп, майҙанға яуап биреү өсөн йыйылыу.

**4-се күнегеү.** Ребусты сисегеҙ.



Ә=А+ЛЫ



И=Е 



 Ҡ=Н Ш=Ҫ+ЛЫ  Ҡ=К А=Е+Е

**5-се күнегеү.** Һорауҙарға яҙма яуап бирегеҙ.

1. Нимә ул сифаттар?
2. Синонимдарҙы телмәрҙә ҡулланыу кәрәкме? Ни өсөн?
3. Ниндәй синонимдарҙы беҙ доминанта тип атайбыҙ?
4. Синонимдар һәр ваҡыт бер-береһен алмаштырып килә аламы? Яуабығыҙҙы миҫалдар менән дәлилләгеҙ.

**Өйгә эш:**

1. Иман һәм дин тураһында синонимдар ҡулланылған 5 мәҡәл яҙып алып килегеҙ.

2. Иман темаһына синквейн төҙөгөҙ.

3. Ата-әсәйҙәрҙән, олатай-өләсәйҙәрҙән Ислам дине, иман темаһына интервью алып, видео төшөрөгөҙ.

## БӘЙЛӘНЕШЛЕ ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ДӘРЕСЕ.

### ”Нимә ул дин?” темаһына проект эше башҡарыу.

### Антонимдар
### Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ

Яҡшылыҡ ҡылған – аш йыйған,
яманлыҡ ҡылған – таш йыйған.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.**Өҙөктө уҡығыҙ. Ҡара шрифт менән бирелгән һүҙҙәр тураһында нимә әйтерһегеҙ?

Минеңсә, кешелектең маҡсаты **яманлыҡты** еңеү түгел, ә уны **кәметеү** юлдарын табыу, **яҡшылыҡты арттырыу** булырға тейеш. Минеңсә, был әхлаҡи тәрбиә етмәгәнлектән килә. Кешегә бәләкәйҙән тәбиғәткә, башҡа кешеләр мәнфәғәтендә игелек ҡылыу кәрәклеген аңлатҡанда, яманлыҡ улай ныҡ арта алмаҫ ине. Әлбиттә, әхлаҡи тәрбиә менән бер рәттән, йәмғиәттең ҡанундарына буйһоноп йәшәү тәртибен дә онотмаҫҡа кәрәк. Эш итеп килгән рәсми ҡанундарҙың әхлаҡи яҡтан камиллығы мотлаҡ. Әлеге заманда йәшәйештең төп ҡанундары боҙола, **яманды – яҡшы**, яҡшыны яман күрәбеҙ, **ысын** менән **ялғанды** бутайбыҙ. Бына шул мине ныҡ борсоуға һала ла инде.

Кешенең йәшәү мәғәнәһе – тирә-яҡ мөхиткә **зыян итмәү**, Ер шарының күркәмлеген, байлығын тойоу, дөрөҫ, самалы файҙаланыу, киләсәк быуындар өсөн **һаҡлау**. Ер йөҙөндә тыныс тормош урынлашһа, шунан да яҡшыраҡ ожмах булырмы? Эйе, йәшәү мәғәнәһе бер генә – һәр кеше ерҙә үҙ эҙен ҡалдырһын, **ҙурмы**, **бәләкәйме**, бары тик яҡшы эҙ, киләсәк быуыны, тоҡомдары ғорурланып хәтерләрлек булһын. Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем: **яуызлыҡҡа** ҡаршы көрәш ысулы бер генә – тәбиғәткә, башҡа кешеләргә ҡарата **яҡшылыҡ**, **игелек** ҡылыу.

( "Ағиҙел" журналынан)

**Антонимдар** (грекса анти-ҡаршы, ҡапма-ҡаршы, онима – исем, атама) тип бер-береһенә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәргә әйтәләр. Телдәге бөтә

һүҙҙәрҙең дә антонимдары булмай. Китап, ағас, ҡояш, һигеҙ, Урал кеүек һүҙҙәргә ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе табыу мөмкин түгел. Һүҙҙең мәғәнәһендә ҡапма-ҡаршылыҡҡа барып етерлек сифат билдәле булғанда ғына уларға ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр табырға мөмкин. Шуға күрә лә төп сифаттарҙың һәм рәүештәрҙең антонимдары күп була: тәрән-һай, яҡшы-насар, оҙон-ҡыҫҡа һ. б.

Тура мәғәнәлә алынған исемдәрҙең һәм ҡылымдарҙың антонимдары аҙыраҡ була. Улар башлыса сифат билдәләре булған исемдәрҙә һәм ҡылымдарҙа барлыҡҡа килә: иҙән (аҫҡы) – түбә (өҫкө), көн (яҡты) – төн (ҡараңғы), байлыҡ-ярлылыҡ һ. б.

Антонимдар һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге һәм синонимдар менән тығыҙ бәйләнештә тора. Күп мәғәнәле һүҙҙәрҙә һәр мәғәнәнең үҙ синонимдары һә антонимдары була:

Таҙа (күп мәғәнәле һүҙ) – керһеҙ (синонимы) – бысраҡ (антонимы).

Йыш ҡына һүҙҙәрҙең үҙҙәре антонимдар булмаһа ла, контекстарҙа антонимдар сифатында ҡулланыла. Мәҫәлән, бауырһаҡ һәм һарымһаҡ һүҙҙәре үҙ-ара антонимдар түгел, үҙ әсәң-бауырһаҡ, үгәй әсә-һарымһаҡ тигән әйтемдә уларҙың күсмә мәғәнәләре антонимдар рәүешендә ғулланылған: бауырһаҡ – тәмле, яҡшы нәмә, һарымһыҡ – әсе, тәмһеҙ, насар нәмә. Аҙағы аш булманы – таш булды әйтемендә лә ошондай мөнәсәбәт күҙәтелә. Бының һымаҡ айырым контекстарҙа ғына ҡулланылған антонимдарҙы контекст антонимдары тип атайҙар.

Антонимдар – телдең бик көслө һүрәтләү һәм биҙәү сараһы. Шуға күрә лә улар матур әҙәбиәттә, халыҡ ижадында, йәнле һөйләү телмәрендә актив ҡулланыла.

**2-се күнегеү.**Текстан сифаттарҙы һәм рәүештәрҙе табып, уларҙың антонимдарын, контекст антонимдарҙы әйтегеҙ.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әйткән: “Харам ризыҡ ашап үҫкән иттән дә тамуҡҡа лайыҡлы нәмә юҡтыр”. Был хәҙистең мәғәнәһе бик тәрән. Харам мал ашап үҫкән бала тамуҡҡа иң лайыҡлы, тигән һүҙ был, тимәк, балаларыбыҙға харам ризыҡ ашатабыҙ икән, улар тамуҡҡа дусар булыусылар. Ошо рәүешле тыңлауһыҙ, йүнһеҙ балалар тәрбиәләнә. Ата-әсәһе абруйлы ғаиләләрҙә нәҫелдәрендә булмаған шундай йүнһеҙ балалар килеп сығып хайран ҡалдыра. Был балалар үҙҙәренә тәғәйенләнгән тамуҡҡа бара, тамуҡ әһелдәре ҡыла торған ғәмәлдәр ҡыла. Аллаһ һаҡлаһын! Харам ризыҡ башҡа ғаилә әһелдәренә лә тәьҫир итмәй ҡалмай. Иренең харам аҡсаһын ҡулланып йәшәгән ҡатын боҙола – харам ризыҡ уны ла тамуҡ

әһеленә әйләндерә. Быҙдай ҡатын насар яҡҡа үҙгәрә, хатта айырылышыу сигенә барып етәләр. Аллаһ Раббыбыҙ Үҙенең рәхмәте менән ундайҙарҙы ла һиҙәйәтенә күндереүе мөмкин, барыһы Уның ихтыярында. Әммә харам мал менән ғаиләне ҡарауҙа ҙур хәүеф бар – бөтә нәҫел аяныс хәлдә ҡалыуы ихтимал.

Харам малдан бәрәкәт ҡаса. Ундай мал, байлыҡ һәр ваҡыт юҡҡа сығыусан, ҡулдан китеүсән: йә штраф һалалар, йә юғала, йә булмаһа, бурҙар урлай...

Харам ризыҡ – ул сусҡа, “бисмиллаһыҙ” ит, араҡы, һыра ғына түгел. Шикһеҙ, былар барыһы ла харам булһа ла... Харам ризыҡҡа хаҡһыҙға тапҡан аҡсаға һатып алынған һәр ризыҡ керә. Мәҫәлән, кеше талап алған, ришүәт менән килгән аҡсаға икмәк һатып алһаң – ул икмәк тә харам булыр. Сөнки һатып алған аҡсаң – харам аҡса. Быҙдай аҡса йүнлегә булмай, донъяла ла бәлә-ҡазаларға килтерә, шауҡымы балаларға теймәһә лә, ейәндәр аша ғазабы килә. Ә ғазаптың иң күбе Әхирәттә көтөп тора. Аллаһ һаҡлаһын!

Шуға ла сәхәбәләр, башҡа ғалимдар ас торһа торған, ләкин ашҡаҙанына харам керетмәгән. Беҙгә лә харамдан һаҡланырға кәрәк. Ғалимдар юҡҡа ғына шулай эшләмәгәндәрҙер, моғайын... Кеше талап байыған кешенән дә бәхетһеҙ бәндә юҡтыр. Аҡса тип кешене рәнйетә үә был донъла уҡ бәддоғаларын ала. Әхирәттә ундайҙар ҙур үкенестә булыр.

Харамды хәләлдән айыра белеү мөһим. Динебеҙ тап ошоноң менән мәшғүл – ул харамды хәләлдән айырырға өйрәтә. Ошо маҡсаттан сығып булһа ла динде өйрәнергә, ә быының өсөн мәсет-мәҙрәсәләргә йөрөргә, китаптар уҡырға, вәғәздәр яҙҙырылған аудиодисктар тыңларға кәрәк. Балаларҙы үҙ-үҙҙәренә тапшырырға ярамай, уҡытырға, дини тәрбиә бирергә кәрәк. Тура юлды күрһәткән хәҙрәттәрҙе лә ихтирам итеү, уларға ярҙам итеү зарур.

(Интернет селтәренән)

**3-сө күнегеү**. Дүрт командаға бүленеп , *яҡшылыҡ, яманлыҡ, харам, хәләл* һүҙҙәренә синквейн төҙөгөҙ. Схемаһын түбәндә ҡарағыҙ.

1. Исем (Кем? Нимә?)
2. Сифат (Ниндәй?)
3. Ҡылым (Нимә эшләй?)
4. Дүрт һүҙҙән торған һөйләм.
5. Ассоциация.

**4-се күнегеү.** Түбәндәге кроссвордты тултырығыҙ.



Вертикаль буйынса:

1. Нимә ерҙә ятып ҡалмаҫ?
2. Үҙ хеҙмәтең, ҡулың менән табылған ризык.
3. Нимәне йәшләй һаҡларға кәрәк?

Горизонталь буйынса:

1. Нимәһе юҡтың хөрмәте юҡ?
2. Кешене кеше иткән иң мөһим һыҙат. Ҡанһыҙлыҡтың антонимы.
3. Кешегә нимә теләгәнсе үҙеңә һаулыҡ телә?
4. «Хәләл»дең антонимы.
5. Шундай кешенең теле әсе.
6. Алтын – ташта, ә башта нимә?
7. Нимә тырыш ҡулында?

**5-се күнегеү**. Түбәндәге мәкәлдәрҙең буш урынына аҫтына һыҙылған һүҙҙәрҙән антонимдарын яҙығыҙ.

1. Көн яманы китер, әҙәм яманы ... . (китмәҫ)

2. Яҡшы ҡағылһа – йән... , яман ҡағылһа – йән көйөнә. (һөйөнә)

3. ... мәрхәмәт ит, олоға итәғәт ит. (кесегә)

4. Яҡшылыҡ ҡылған – ... йыйған, ... ҡылған – таш йыйған. (аш; яманлыҡ)

5. Илай-илай ...була, ... күҙ була. (яҙ; көлә-көлә)

6. Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң – ... булырһың, ... ғәҙәтләнһәң – әрәм булырһың. (әҙәм; яманға)

7. ... һөйләһәң дә, уйлап һөйлә. (уйнап)

8. ... бер үлә, ҡурҡаҡ ... үлә. (батыр; мең)

9. Үҙеңде зурлама, кешене... . (хурлама)

10. Шаҙра булһа ла ... булмаһын. (аҡра)

**Өйгә эш**.

1. Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ тураһында антонимдары булған 5 мәҡәл яҙып килегеҙ.

2. Антонимдар темаһына кластер төҙөгөҙ.

3. М. Аҡмулланың “Бер тигәс тә ни яман...” ҡобайырын класс алдында сәхнәләштерегеҙ.

## Омонимдар

Әҙәпле кеше – солтан, әҙәпһеҙҙең бите – олтан.

Мәҡәл.

**1-се кунегеү.**Тексты уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ.Мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

### Сабырлыҡ тураһында нәсихәттәр.

”Аллаһ өсөн кемдәр *бөтә* нәмәнәндә ҡәҙерлерәк?” – тип һорайҙар мөьминдәр әмире Ғәли хәҙрәттән. «Аллаһ биргәндәргә шөкөр *ит,* бәлә һәм бәхетһеҙлектәр килгәндә сабыр *ит*”, – тигән имам.

Сабырлыҡ – Йәннәттәрҙәге хазиналарҙың береһе”.

Сабырлыҡ *ул* – нур”, – тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис- сәләм.

Сабырлыҡ, ҡәнәғәт була һәм шөкөр итә белеү – ҡолдоң *иң* мөһим бер сифаты, тип өйрәткән пәйғәмбәребеҙ.

(С. Суҡбаев)

Омоноимдар (грекса *homos* «бер төрлө», *онима* – «исем») тип әйтелеше һәм яҙылышы яғынан тап килгән, ләкин мәғәнәләре бөтөнләй башҡа төрлө булған һүҙҙәргә әйтәләр. Күп мәғәнә бәйләнеше асыҡ, күренеп тора, ә омонимдарҙа мәғәнә бәйләнеше булмай, йәки ул бәйләнеш юғалған була.

Омонимдар түбәндәге төркөмдәргә бүленә.

I. Лексик омонимдар – әйтелеш менән яҙылышы тап килеп, мәғәнәләре менән айырылған һүҙҙәр. Улар бөтә грамматик формаларҙа ла бер – береһенә тап килә. Мәҫәлән, борсаҡ (ҡуҙаҡлы үҫемлек) – борсаҡ (күктән яуған боҙ).

1) Төрлө мәғәнәләге һүҙҙәрҙең яңғырашы осраҡлы тап килеүенән: ҡабаҡ (йәшелсә) – ҡабаҡ (текә яр) – ҡабаҡ (күҙ ҡапҡасы), көсөк (эт балаһы ) – көсөк (тал сәскәһе).

2) Элекке күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләре алыҫлашыуынан: һуғыу (башҡа һуғыу) – һуғыу (балаҫ һуғыу).

3) Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең телдең үҙ һүҙҙәренән тап килеүенән йәки ике үҙләштерелгән һүҙҙең осраҡлы тап килеүенән: май (һөт аҙығы) – май (ай исеме).

II. Лексик – грамматик омонимдар йәки оморграфтар (грекса *homos* «бер төрлө», *графо* – «яҙам») тип тик айырым бер грамматик формалар ғына әйтелеш һәм яҙылыштары тап килгән, ә мәғәнәләре менән айырылған һүҙҙәргә әйтәләр. Мәҫәлән, тапма (ауырыу исеме – тапма ( тап- ҡылымының юҡлыҡ формаһы). Улар тик ошо бирелгән формаларында ғына тап килә. Лексик- грамматик омонимадар тағы ла һырға(ҡолаҡҡа таға торған) – һырға (һыр һүҙенең төбәү килеш формаһы).

III. Омофондар (грекса *homos* «бер төрлө», *фоне* – «өн, тауыш») тип әйтелеше яғынан тап килеп тә, яһылышытары яғынан тап килмәгән төрлө мәғәнәләре һүҙҙәргә әйтәләр. Ҡарлуғас (кеше исеме) – ҡарлуғас (ҡош атамаһы).

Омографтар (грекса *homos* «бер төрлө», *графо* – «яҙам») тип яҙылыштары буйынса тап килеп тә, әйтелештәре менән айырылған төрлө мәғәнәле һүҙҙәргә әйтәләр. Мәҫәлән, рус телендә; мука (он) – мука (ыҙа, яфа)

**2-се күнегеү.**Түбәндә бирелгән һүҙбәйләнештәрҙәге һәм һөйләмдәрҙәге лексик омонимдарҙы табығыҙ. Һөйләмдәрҙе киңәйтеп яҙығыҙ**.**

1. Йәш тама. Йәш кеше. 2. Борсаҡ яуҙы. Борсаҡ үҫте. 3. Киске аҙан. Аҙанып тороу. 4. Кер йыйыу. Мәсеткә кер. 5. Түңәрәк бит. Ҡөрьән бите. 6. Күктә ай. Ҡыш айы.

**3-сө күнегеү.** Омонимдарҙы табып, уларҙың төрҙәрен билдәләгеҙ**.**

1. Зәйнулла ишанды пәйғәмбәр урынына күреп ихтирам иткән хужа үҙенә ҡунаҡтың һүҙ ҙә ҡушмауы, һаман итек башындай балаға мөкиббән китеүе эсен бошорҙо (Л. Яҡшыбаева). 2. Күрер өсөн күҙ, ишетер өсөн ҡолаҡ кәрәк булған фани донъя өҫтөнән юғары осор өсөн, уларға рухиәт ҡапҡалары асыҡ. Ә рухи мәғрифәткә эйә тәкүәләр бөтә ғаләмде, ике донъяны хикмәт һәм гүзәллек тулы китап рәүешендә күрә (Н. Мусин). 3. Рамаҙан айы – динебеҙҙең төп бер рөкөнө булған фарыз ураҙаны үтәргә билдәләнгән ваҡыт һәм Аллаһтың иң бөйөк ниғмәттәренең береһе (И. Хәйбуллин). 4. Муғәҙ бин Джәбәлде Йәмәнгә ебәргән ваҡытта, Аллаһ Илсеһе (сАллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға: "Кешеләрҙән зәкәт өсөн иң ҡиммәтле әйберҙәрен алма. Йәберһетелгәндең доғаһынан һаҡлан. Сөнки уның менән Аллаһ араһында кәртә юҡ", – тип әйткән (Имам Ҙәһәби). 5. Ислам дине намаҙ уҡыуҙан һәм ураҙа тотоуҙан ғына тормай, ул – йәшәү рәүеше, донъяларҙы бар ҡылған Аллаһ Тәғәләнең ҡушыуы буйынса йәшәү өлгөһө («Диәнәт» дини журналы). 6. Ул беҙҙе уйын-көлкө өсөн бар итмәгән: «Беҙ күкте, Ерҙе һәм улар араһындағы бар нәмәне ҡыҙыҡ күреп бар ҡылманыҡ» (Ҡөрьәндән).

**4-се кунегеү .**Шиғырҙы уҡырға һәм омонимдарҙы табырға. Шиғыр нимә тураһында барағанын аңлатып китергә.

**Иҫкә ал!**

***Һыҙылып*** ҡыҙыл таң ***ата***,
Яңы көн тыуа.
***Дан*** таңдың хужаһына –
Лә иләһә илләЛлаһ!

***Күк*** күкрәй, ямғыр яуғанда
Ниндәй ***саф һауа***.
Кем ***һуң*** ямғыр яуҙырыусы?
Лә иләһә илләЛлаһ!

Ямғырҙан һуң ***бар*** йәшеллек
Һыуға туйынып ***ҡала***.
Һәр бер япраҡ зикер әйтә:
Лә иләһә илләЛлаһ!

Болот ҡаса, ҡояш сыға,
Нуры менән ерҙе **ҡоса**,
Ҡоштар һайрай, ***йәйгор*** балҡый,
Күбәләктәре оса...

***Бар*** тереклек маҡтай Уны,
***Бар*** тереклек ***данлай*** Уны,
**<u>Бар</u>** тереклек паклай Уны.
Унан ***башҡа*** илаһ бармы?
Лә иләһә илләЛлаһ!

Шул матурлыҡ араһында,
***Йәшәй*** әҙәм балаһы.
***Тик*** ниңәлер иҫкә ***алмай***
Аллаһын...

Зәңгәр ***күктән*** төшөп ҡояш,
Ҡыҙыл офоҡҡа сума...
Иҫкә ***ал***, кеше, Раббыңды,
Лә иләһә илләЛлаһ!

(Б. Кәримов)

**Һорауҙарға яҙма рәүештә яуап бирегеҙ:**

**1.** Нимә ул Омоним?
**2.** Омонидарҙың ниндәй төрҙәре бар? Һәр бер төрҙө аңлатып китегеҙ.
**3.** Омонимдарҙың төрҙәренә миҫал.
**4.** Омонимдарҙы ҡулланып ҡыҫҡа текст яҙығыҙ.

**Өйгә эш:**

1. «Нимә ул әҙәплек?» темаһына инша яҙығыҙ.
2. Оминимдарҙың төрҙәренә һүҙлектән бишәр миҫал һәм һөйләмдәр яҙырға.
3. « Башҡорт телендә омонимдар » темаһына презентация әҙерләргә.

**Контроль эш дәресе. Биремле диктант яҙыу.**

**Фразелогик берәмектәр**

Изгелек ерҙә ҡалмаҫ.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

Ҡөрьәни-Кәримдә Аллаһу Раббүл-ғаләмин хәҙрәттәре әйтә: «Изгелектең әжере лә – изгелек”, – ти. Әгәр ҙә бәндә *киң күңелле* икән, донъяла ла, ахирәттә лә был яҡшылыҡ уға бөйөк бер бүләк булып ҡайта. Шуның өсөн дә Аллаһы Раббүл-ғаләмин хәҙрәттәре: ”Әҙәм балаһы саң бөртөгө тиклем йәки унан да кесерәк изгелек ҡылған булһа ла, ул юғалмаҫ; кем дә кем кескәй генә насарлыҡ эшләй, *гонаһына инә* икән – ул да онотолмаҫ, уның да язаһы буласаҡ”, – тип беҙҙең иҫебеҙгә төшөрә. Игелектәрҙе күберәк эшләргә бойора.

“Изгелектәрҙә, хәйерле эштәрҙә һеҙ бер-берегеҙ менән уҙышығыҙ, ярышып йәшәгеҙ”, – ти. Донъя көтөүҙә, байлыҡ туплауҙа түгел, бәлки, ғилем юлында, изгелек юлында бер-беребеҙ менән уҙышырға, ярышырға, бер-беребеҙҙән хәйерле өлгө алырға тейешбеҙ.

Изгелек ул *ерҙә ятып ҡалмай*.

Үәс-сәләмү ғәләйкүм үә рәхмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ.

(Н. Ниғмәтуллин)

*Текст буйынса фекер алышығыҙ.

**Фразеологик берәмектәр** тип төҙөлөшө һәм мәғәнәһе яғынан ойошҡан, нығынған, телмәрҙә әҙер килеш ҡулланыла торған хис-тойғо биҙәкле, образлы һүҙбәйләнештәр. Фразеологик берәмектәр кәмендә ике һүҙҙән тора һәм, ғәҙәттә, бер төшөнсәне белдерә: *ут йотоу* (хәстәрләнеү), *баш ватыу* (ҡаты уйланыу).

Фразеологик берәмектәрҙе өс төркөмгә бүлергә мөмкин:

1. Фразеологик берекмәләр – мәғәнәләре уның составындағы һүҙҙәрзең мәғәнәләре менән бәйләнешһеҙ хис-тойғо биҙәкле берәмектәр. Быңдай фразеологик берәмектәрҙең тура мәғәнәле иштәре булмай. Мәҫәлән, *таш йөрәк* (бәғерһеҙ), *баш күккә тейеү* (көслө шатланыу).

2. Фразеологик берлектәр – тура мәғәнәле һүҙбәйләнештәрҙән яһалып, тик күсмә мәғәнәлә генә ҡулланылған берәмектәр. Тура

мөғәнәләрендә улар фразеологик берәмектәр түгел, ә ирекле һүҙбәйләнеш була. Мәҫәлән, *бил бөгөү* (ауыр эш башҡарыу), *аяҡ һуҙыу* (үлеү).

3. Фразеологик ҡушылмалар тип уның составына ингән һүҙҙәрҙең береһе тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә ҡулланыла ала торған тотороҡло һүҙбәйләнештәргә әйтәләр. Мәҫәлән, *йөрәкле* һүҙенең тура мәғәнәһе – «йөрәге бар», күсмә мәғәнәһе «батыр». Был һүҙ *арыҫлан йөрәкле, ҡуш йөрәкле* тигән фразеологик берәмектәрҙә лә ҡушыла.

**2-се күнегеү.** Бирелгән фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, төрҙәрен билдәләгеҙ. Һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ.

Ағас телле,ҡот осоу, кикерек төшөү**,** ике йөҙлө, айыу майы һөртөү, ҡыҙыл ҡар яуғас, татлы тел, ике күҙ дүрт булыу, башты юғалтау, танауына сиртеү, ебегән ауыҙ, кикерек төшөү, иманын уҡытыу, башҡа менеү, ләстит һатыу, танауҙы элеү, һөйәкһеҙ тел, ат башындай, утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ.

**3 –сө күнегеү. Кроссвордты тултыры**ғыҙ**:**



1. Балауыҙ һығыу
2. Һуҡыр тин дә тормау
3. Ғазап сигеү
4. Таш йөрәк
5. Баш ватыу
6. Тимер өҙөрҙәй
7. Кәйеф ҡырылыу

**4-се күнегеү.** Ошо фразеологизмдарҙың аңлатмаһын һүҙлектән табығыҙ һәм һөйләмдәр төҙөп яҙығыҙ:

Ҡул һырты менән доға ҡылыу. –
Тәүбәгә ултыртыу. –
Аң булыу. –
Бит һыйпау. –
Доға ҡалдырыу. –
Алланан йәйәү ҡасҡан. –
Гонаһына шомлоғо. –

**5-се күнегеү**. Белемегеҙҙе тикшерегеҙ**.**

| **Фразеологик берекмәләр** | **Фразеологик берлектәр** | **Фразеологик ҡушылмалар** |
|---|---|---|

Танауына сиртеү, мәмәй ауыҙ, ауыҙ ҡолаҡҡа етеү, арыҫлан йөрәкле, йөрәккә тоҙ һалыу, аяҡ салыу, күҙ дүрт булыу, баш юғалтыу, теште ҡыҫыу.

**Өйгә эш:**

1. Китап һәм гәзит- журналдарҙан ун фразеологизмдар табып килергә
2. «Нимә ул изгелек?», «Эскерһеҙлек» оҡшаған темаларҙың береһенә инша яҙып килергә.
3. Проект «Телмәребеҙҙә фразеологизмдарҙың роле».

## Фразелогик берәмектәр

«Кеше ниндәйҙер бер бинаға оҡшаш. Унын нигеҙе, терәге – иман. Кеше ниндәйҙер бер ағасҡа тартым, ул ағастың иң төп тамыры – инаныу...».

(Б.С. Нурси)

**1-се күнегеү.** Тексты уҡырға һәм фразеологизмдарҙы табырға:

### Васыят

Атаһы улын саҡырған да:

– Улым, миңә теге донъяға китергә ваҡыт еткән, һиңә бер васыят әйтеп ҡалдырам, шуны үтәһәң, бәхет йондоҙо ҡалҡыр, – тигән. – Кешеләргә сәләм бирмә, кешеләр үҙҙәре һиңә сәләм бирһендәр! – тигән.

Атаһы йән биргәс, улы бер кешегә лә сәләм бирмәй, моронон сөйөп йөрөй башлаған, үҙ ара: «Ниндәй аҡыллы егет ине, атаһының ғүмере өҙөлгәс, бик әҙәпһеҙләнде, маһая башланы», – тип ауыҙға алып алғандар.

Бер көн егет урамда китеп барғанда, ҡарттар уны туҡтатып һорағандар:

– Был ниндәй әҙәпһеҙлегең, нишләп сәләм дә бирмәй үтеп бараһың? – тигәндәр.

Егет таң ҡалған. Шул ай ҙа ҡарттарға дөрөҫөн һөйләп бирергә мәжбүр булған:

– Һеҙ теләһәгеҙ нишләтәгеҙ, әммә мин атайымдың васыятын боҙа алмайым, – тигән, – ул миңә: «Улым, кешегә сәләм бирмә, кешеләр үҙҙәре сәләм бирһендәр», – тип әйтем үлде.

Бер-береһенә ҡарап көлөшкәндәр ҙә ҡарттар был егеткә васыяттың мәғәнәһен бәйән иткәндәр.

– Атайың һиңә: «Эшкә иртә бар, кешеләр һинең эшләгәнде күреп, яныңдан уҙғанда, һине ҙурлап, сәләп биреп китһендәр», – тигән. Әгәр һуңға ҡалһаң, ул ваҡытта һинән элек барған кешеләргә һин үҙең сәләм бирергә тейеш булаһың бит! – тигәндәр.

(Башҡортостан календарынан)

* Был хикәйә нимә тураһында?

## Фразеологик берәмек, мәҡәл һәм әйтемдәр.

Фразеологик берәмектәр менән мәҡәл һәм әйтемдәрҙең үҙ-ара оҡшаш яҡтары, уртаҡ үҙенсәлектәре һәм айырымлыҡтары бар. Икеһенең дә күсмә мәғәнәле, образлы булыуы. Ләкин айырмалары оҡшашлыҡтарына ҡарағанда күберәк.

1. Мәҡәлдәр тамам фекерҙе, ә фразеологик берәмектәр төшөнсәне генә белдерә. Сағыштырығыҙ: Беләге йыуан берҙе йығыр, белеме булған меңде йығыр – Күҙ буяу, телде арҡыры тешләрҙәй булыу, хәлдән тайыу.

2. Мәҡәлдәр һәр ваҡыт һөйләм формаһында, ә фразеологик берәмектәр күпселегендә һүҙбәйләнеш рәүешендә булалар һәм һөйләмдең айырым киҫәге (эйәһе, хәбәре, эйәрсән киҫәге) булып киләләр. Мәҫәлән, *Башта ук колхоз булһам,* ***аҡ һаҡаллы ҡарт*** *булыр инем. Ә мин дурак булдым* (Һ. Дәүләтшина).

Әйтем төҙөлөшө һәм мәғәнәһе менән фразеологик берәмеккә яҡынныраҡ тора. Әйтемдәр, мәҡәлдәр кеүек өгөт-нәсихәт йөкмәткеле булмайынса, күберәк ысынбарлыҡ күренештәренең дөйөмләштерелгән атамаһы рәүешендә күсмә мәгәнәлә ҡулланылалар. Әйтемдәрҙең

компоненттары грамматик яҡтан ҡатып ҡалган була, хатта телмәрҙә лә үҙгәрешһеҙ ҡала. Мәҫәлән: *ағай оло, мин ҙур* (ағаһынан алға сығып эш башҡарған кеше); *һин белгәнде мин күптән киптереп элгән* (кешенең хәбәрен иҫәпкә алмағанда әйтелә).

**2-се күнегеү.** Фразеологик берәмектәрҙе табығыҙ һәм аңлатығыҙ.

А. Һаҡалына сал кергәнсе, башына аҡыл кермәгән. Алдағыны Алла белә. Кешегә соҡор ҡаҙма, үҙең төшөрһөң. Һуҡыр тауыҡҡа барыһы ла бойҙай. Йөрәктән сыҡҡан һүҙ йөрәккә инә . Бәхете кире киткәндең эте ҡараҡ киткәс өрөр. Көнләксөгә көнөң төшмәһен. Теле оҙон булмағандың ғүмере оҙон. Ямандан бурыс алһаң, йорт алдында яғаңдан алыр.

Б. Ул тыуҙы,билдән балта төштө. Ғишыҡ тотоу – ут йотоу. Йән ҡыйналмай йомош бөтмәй. Әрһеҙ ҡунаҡ оят өлөшөн ашаған. Алма беш, ауыҙыма төш. Ауыҙыңа бал да май! Куңелеңде киң тот!

## Фразеологик берәмектәрҙең килеп сығышы

Хәҙерге башҡорт теленең фразеологияһы тарихи үҫеш һөҙөмтәһендә тупланған. Халыҡтың коллектив аҡылы, тормош тәжрибәһе, донъяға ҡарашы быуаттар буйына йыйыла килгән һәм телебеҙҙә нығынып ҡалған.

Килеп сығышы буйынса башҡорт теленең фразеологик берәмектәрен түбәндәге төрҙәргә бүленә:

1) Ислам диненә ҡәҙәр үк булған бик боронғо хөрәфәттәргә бәйләнгән берәмектәр: *айыу майы һөртөү.*

2) Ислам диненә, дини йолаларға бәйле берәмектәр: *Алла белһен.*

3) Төрлө һөнәр: *шылдырып арҡанлау (*алдау*)* – малсылыҡта.

4)Төрлө ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең тышҡы күренешен, ҡылыҡтарын күрһәткән һүҙбәйләнештәр: *канат аҫтына алыу* (яҡлау).

5)Башҡорт халыҡ әҫәрҙәренән дөйөм телгә күскән берәмектәр: *ете ҡат ер аҫты.*

6) Кешенең тән өлөштәренең хәрәкәтен, торошон белдергән һүҙбәйләнештәрҙең, күсмә мәғәнә алып, хис-тойғоларын, эске донъяһын аңлатыу өсөн ҡулланылған берәмектәр: *ауыҙ асыу* (иғтибарһыҙ булыу).

**3-сө күнегеү.** Бирелгән фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, төрҙәрен билдәләгеҙ.

Энә күҙенән үткәреү, күҙ тейеү, ҡанатын ҡырҡыу, Алла бирһә, бер бите көн, ҡул һелтәү, кикреге төшкән, ҡот ҡойоу, тышауы оҙон (тотанаҡһыҙ), баш эйеү, бүре олоу, иманын уҡытыу.

**4-се күнегеү.** Бирелгән фразеологик берәмектәрҙе аңлатығыҙ**:**

Алла менән, Аллаға тапшырып, Аллаға һыйыныу,Аллаға шөкөр, Алла рәхмәтенән китеү, Алла хаҡы өсөн, Алла һаҡлаһын, Алла ярҙам (ҡеүәт) бирһен, ни Аллаға, ни муллаға, хоҙай менән, ауыҙ асыу, ен ҡағылыу, күк ҡабағы (шаршауы) асылыу, ҡәҙер кисе, Алланың рәхмәте киң.

*Бирелгән фразеологик берәмектәрҙе ҡулланып, текст уйлап яҙығыҙ.

**5-се күнегеү.** Тест һораузарына яҙма рәүештә яуап бирегеҙ**:**

1. Нимә ул фразеологик берәмектәр?

А) төҙөлөшө һәм мәғәнәһе яғынан ойошҡан, нығынған, телмәрҙә әҙер килеш ҡулланыла торған хис-тойғо биҙәкле, образлы һүҙбәйләнештәр

Б) әйтелеше һәм яҙылышы яғынан тап килгән, ләкин мәғәнәләре бөтөнләй башҡа төрлө булған һүҙҙәргә әйтәләр.

В) Фразеологик берәмектәр ирекле һүҙбәйләнештәрҙән йәнә үҙенең тура мәғәнәле булыуы менән булыуы менән айырыла

2. Фразеологик бермектәр нисә төркөмгә бүленә?

А)5 В)4

Б)3 Г)6

3. Фразеологик берекмәләр ул :

А) тура мәғәнәле һүҙбәйләнештәрҙән яһалып, тик күсмә мәғәнәлә генә ҡулланылған берәмектәр

Б) составына ингән һүҙҙәрҙең береһе тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә ҡулланыла ала торған тотороҡло һүҙбәйләнештәргә әйтәләр

В) мәғәнәләре уның составындағы һүҙҙәрһең мәғәнәләре менән бәйләнешһеҙ хис-тойғо биҙәкле берәмектәр

4. Фразеологик берлектәр ул:

А) мәғәнәләре уның составындағы һүҙҙәрҙең мәғәнәләре менән бәйләнешһеҙ хис-тойғо биҙәкле берәмектәр

Б) тура мәғәнәле һүҙбәйләнештәрҙән яһалып, тик күсмә мәғәнәлә генә ҡулланылған берәмектәр

В) составына ингән һүҙҙәрҙең береһе тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә ҡулланыла ала торған тотороҡло һүҙбәйләнештәргә әйтәләр

5. Фразеологик берәмек, мәҡәл һәм әйтемдәр:

А) Фразеологик берәмектәр менән мәҡәл һәм әйтемдәр күсмә мәғәнәле һәм образлы булыу яғынан оҡшаш

Б) Фразеологик берәмектәр мәҡәл һәм әйтемдәрҙең үҙ-ара оҡшаш яҡтары айырмаларына ҡарағанда күберәк

В) Фразеологик берәмектәр күпселеге һөйләм формаһында киләләр

**Өйгә эш:**

1. Фразеологизмдарға бишәр миҫал табып килергә.
2. Фразеологик берәмектәрҙең килеп сығышына бәйле әҙәбиәттән икешәр миҫал яҙып алырға.
3. Фразеологизмдарҙы ҡулланып, хикәйә уйлап яҙырға.

## Лексикография

Ислам – юғары дәрәжәлә аҡыл һәм ғилем,
әхлаҡ, тыныслыҡ һәм камиллыҡ дине ул.
Ислам – инаныуҙарға таянып ғүмер һөрөү,
ғүмер кисереү дине.

(М. Сөймән)

**1-се күнегеү.** Тексты уҡырға һәм һүҙлек ярҙамында тәржемә итергә.

Если прочесть аят “Ал-курси” и подуть на товары,можно получить следующую пользу:

- товары обеспечат прибыль своему владельцу;
- дела человека, прочитавшего этот аят, пойдут в гору;
- этот человек будет огражден от зла и нападок Шайтана;
- бедный станет богатым;
- человек получит пропитание из необычных и неизвестных ему источников... (М.Тханави)

**Лексикография** тип телдәге һүҙҙәрҙе туплау, системаға килтереүҙе, һүҙлектәр төҙөүҙе атайҙар. Һүҙлектәр өс төркөмгә бүленә: *энциклопедик һүҙлектәр, белешмә һүҙлектәр, лингвистик һүҙлектәр.*

*Энциклопедик һүҙлектәр* әйберҙәр, күренештәр, ваҡиғаларҙың асылы тураһында фәнни төшөнсә бирелә. Дөйөм эшциклопедик һүҙлектәр һәм айырым фән тармаҡтарына арналған һүҙлектәр була. Тулы энциклопедик һүҙлеккә, мәҫәлән, «Ҙур совет энциклопедияһы» (55 томда) йәки «Башҡортостан энциклопедияһы» (7 томда) ҡарай. Бынан тыш медицина, фәлсәфә, әҙәбиәт һ.б. күп фән өлкәләре буйынсаэнциклопедик һүҙлектәр бар.

*Белешмә һүҙлектәргә*, мәҫәлән, терминологик һүҙлектәр ҡарай. Бындай һүҙлектәрҙә айырым фән өлкәһенә ҡараған терминдарға аңлатмалар бирелә. Беҙҙә сыҡҡан терминологик һүҙлектәр, ғәҙәттә, рус теленән башҡортсаға, башҡорт теленән руссаға тәржемә рәүешендә башҡарыла.

*Лингвистик һүҙлектәрҙә* күренештәр, әйберҙәр, шәхестәр тураһында түгел, ә телдә булған һүҙҙәргә аңлатма бирелә. Лингвистик һүҙлектәр төҙөлөштәре, йәнәлештәре һәм маҡсаттары буйынса бер нисә төргә бүленә.

1. Тәржемә һүҙлектәр бер телдәгә һүҙҙәрҙе икенсе бер телгә тәржемәә итеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Бындай һүҙлектәргә, мәҫәлән, 1996 йылда сыҡҡан «Башҡортса-русса һүҙлек» һәм 2005 йылда сыҡҡан ике томлыҡ «Урыҫса-башҡортса һүҙлек» ҡарай.
2. Орфография һүҙлектәре һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын сағылдыра. Башҡорт теле буйынса бындай һүҙлектәргә Ҡ.З. Әхмәров төҙөгән «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге» һ.б.
3. Диалектологик һүҙлектәр ерле һөйләштәрҙең һүҙлек байлыҡтарын сағылдыра: диалект һүҙҙәренә аңлатма бирелә, уларҙың ҡайһы төбәктә ҡулланылыуы күрһәтелә.
4. Ономастик һүҙлектәр телдә булған ер-һыу, ҡала-ауыл, кеше исемдәрен һәм башҡа яңғыҙлыҡ исемдәрҙе сағылдыра. Бындай һүҙлектәргә, мәҫәлән, Т.Х. Күсимованың «Башҡорт исемдәре» һүҙлеге.
5. Аңлатмалы һүҙлектәр, ғәҙәттә, телдә булған һүҙҙәрҙе тулы рәүештә сағылдырырға ынтыла. Уларҙа һүҙҙәрҙең бөтә мәғәнә үҙенсәлектәре, уларҙың телдә ҡулланылышы аңлатыла һәм миҫалдар ярҙамында асыҡлана. Башҡорт теленең бындай аңлатмалы һүҙлеге 1993 йылда ике томда «Башҡорт теленең һүҙлеге» исемендә баҫылып сыҡты. Һуңғы йылдарҙа Ф.Ғ. Хисамитдинова ҡул аҫтында 10 томлыҡ аңлатмалы һүҙлек донъя күрҙе.
6. Этимологик һүҙлектәр телдә булған һүҙҙәрҙең килеп сығышы һәм мәғәнә үҙгәрештәре тураһында мәғлүмәттәр бирә.
7. Синонимдар һүҙлеге телдәге синонимдарҙы, уларҙың мәғәнә нескәлектәрен, ҡулланыу өлкәләрен миҫалдар ярҙамында асыҡлай. З.Ғ. Ураҡсин «Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге».

8. Омонимдар һүҙлеге яңғыраштары бер төрлө, ләкин мәғәнәләре яғынан бер-береһенән айырылған һүҙҙәрҙе сағылдыра һәм миҫалдар ярҙамында асыҡлай. М.Х. Әхтәмов «Башҡорт теленең омонимдар һүҙлеге».

9. Антонимдар һүҙлеге мәғәнәләре буйынса бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған һүҙҙәрҙе сағылдыра, уларҙың мәғәнә ҡаршылыҡтары миҫалдарҙы күрһәтелә. М.Х. Әхтәмов «Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге».

10. Грамматик һүҙлектәр бер нисә төрлө була, уларҙы һүҙ тамырҙары һәм нигеҙҙәре, төрлө грамматик күрһәткестәр (аффикстар), уларҙың ҡулланылыштары сағылдырыла. Бындай һүҙлектәргә, мәҫәлән, К.Ғ. Ишбаев, З.К. Ишкилдинаның «Башҡорт теленең һүҙьяһалыш һүҙлеге».

11. Айырым яҙыусының һүҙлеге. Бындай һүҙлектәрҙә айырым яҙыусының бөтә ижадында йәки айырым әҫәрҙәрендә ҡулланылған һүҙҙәр сағылдырыла, уларҙың ҡулланылыу йышлыға билдәләнә. Ошондай һүҙлектәрҙең береһен – Д.Юлтыйҙың «Ҡан» романының һүҙлеген З.Ә. Сиражетдинов төҙөнө.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Аҫтарына һыҙылған һүҙҙәргә һүҙлектән синонимдар табып яҙығыҙ**.**

**Доға**

Доғаның төп мәғәнәһе – мөрәжәғәт, теләк, саҡырыу, ялбарыу, ярҙам һорау.

Доға – зәғифтәрҙән зәғиф булған бер кешенең бөйөктәрҙән бөйөк, көслөләрҙән көслө бер зат, Ҡөрьән эйәһе Аллаһы Тәғәләгә, түбәндәгенең – бөйөклөккә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүе.

Доға – Аллаһ хозурына иң ҡыҫҡа юл. Изге Ҡөрьәндә лә был турала бик асыҡ итеп аңлатылып бирелә: «Бәндәләремдең мин нимә эшләгәндәрен беләм. Әй Мөхәммәд, ғәләйһис-сәләм, минең ҡолдарым һинән: «Аллаһ беҙгә беҙҙең йәшерен серҙәребеҙҙе белерлек дәрәжәлә яҡынмы?» – тип һорайҙар». Әйт: уларға мин улар үҙҙәре уйлағандан да яҡыныраҡмын. Һорағандарҙың доғаһы шул уҡ минутта миңә килеп етер. Доға ҡылып минән һораған кешегә мин шунда уҡ яуап бирәм. Улар ҙа күндәмлек һәм иман килтереү менән миңә яуап бирһендәр. Шул ваҡытта улар, бәлки, тура юлдан тайпылмаҫтар.

(«Әл-Бәҡара» сүрәһе, 186-сы аят)

**3-сө күнегеү.** Һүҙҙәрҙең аңлатмаһын һүҙлектән табығыҙ һәм һөйләм төҙөп яҙығыҙ**:**

Холоҡ –
Абруйлы –
Бурыс –
Аяныс –
Йылғыр –
Баһадир –
Мәшәҡәт –

**4-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ һәм башҡорт теленә тәржемә итегеҙ.

Когда-то давно старик открыл своему внуку одну жизненную истину:

– В каждом человеке идёт борьба, очень похожая на борьбу двух волков. Один волк представляет зло: зависть, ревность, сожаление, эгоизм, амбиции, ложь. Другой волк представляет добро: мир, любовь, надежду, истину, доброту и верность. Внук, тронутый до глубины души словами деда, задумался, а потом спросил:

– А какой волк в конце побеждает? Старик улыбнулся и ответил:

– Всегда побеждает тот волк, которого ты кормишь.

(Интернет селтәренән)

*Ошо тексҡа оҡшаған фәһемле хикәйә уйлағыҙ.

**5-се күнегеү.** Шиғырҙы уҡығыҙ һәм антонимдарҙы табығыҙ:

**Ураҙа**

Ал таңдарҙа иркәләнеп,
Ураҙа айы тыуа,
Шик-шөбһәне күңелдәрҙән,
Күңелдәрҙән ул йыуа.

Ауыр һүҙҙән кешеләр
Изге айҙа тыйыла.
Яҡты, яҡшы эштәр генә
Йөрәктәргә уйыла.

Изге доға һүҙҙәренән
Таң ата, ҡояш байый.
Изге теләктәр менән
Хоҙай күңелде ҡайый (Д. Талхина)

**6-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Нимә ул лексикография?
2. Һүҙлектәр нисә төркөмгә бүленә?
3. Лингвистик һүҙлек нисә төргә бүленә? Төрҙәрен атағыҙ.
4. Башҡорт телендә ниндәй һүҙлектәр бар?

**Өйгә эш:**

1. «Күңел тыныслығы» темаһына инша яҙығыҙ.
2. Башҡорт теленең һүҙлектәренә реклама эшләргә (презентация, проект һ.б.).
3. Бер һүҙлеккә рецензия яҙырға.

## Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы

Кесегә мәрхәмәт ит, олоға итәғәт ит.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Һүҙҙәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡайһы һүҙҙәрҙең башҡорт ерлегендә барлыҡҡа килеүен билдәләгеҙ.

Атай, йәмғиәт, Аллаһ, стакан, биҙрә, шәкерт, әсәй, кәнфит, мәҙрәсә, слесарь, ямғыр, багаж, Ҡөрьән, ғаилә, олатай, энә, ҡағыҙә, сәғәт, автобус, ҡорт, намаҙ, ер, япраҡ, ҡул, баҫҡыс, закон, эскәмйә, тәрбиә, йәннәт, тәбиғәт, лавка, һөнәр, өләсәй, ғәйбәт, күҙ, йондоҙ, ат.

Ҡайһы һүҙҙәр төп башҡорт һүҙҙәре төркөмөнә инмәне? Ни өсөн? Фекерегеҙҙе иҫбатлағыҙ.

Башҡорт теленең һүҙлек составы төп башҡорт һүҙҙәре һәм төрлө телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙән тора.

**Төп башҡорт һүҙҙәре** тип дөйөм төрки сығанаҡлы һүҙҙәргә әйтәләр, бындай һүҙҙәр төрки телдәрҙең үҙ ерлегендә барлыҡҡа килгәндәр һәм үҫкәндәр, шуға күрә уларҙың тамыр формалары хәҙерге төрки телдәрҙең бөтәһе өсөн дә йәки күпселеге өсөн уртаҡ була. Төп төрки сығанаҡлы һүҙҙәр башҡорт лексикаһының нигеҙен тәшкил итә:

✓ тән өлөшөнөң атамалары: *баш, күҙ, ҡул, тел, теш, теҙ, бил, сәс, ҡаш, ауыҙ, морон, ҡолаҡ, ҡабаҡ, табан, беләк, аяҡ* һ. б.;

✓ үҫемлек һәм уның өлөштәренең атамалары: *ағас, ҡайын, тирәк, тал, имән, саған, ҡамыш, андыҙ, ҡамғаҡ, һуған, бойҙай, арпа, орлоҡ, емеш, сәскә, япраҡ, һабаҡ, ботаҡ, тамыр, бөрө, ҡабыҡ* һ. б.;

✓ тәбиғәт күренештәренең атамалары: *ямғыр, ҡар, боҙ, ел, һыуыҡ, томан, көн, төн, таң, кис, боҫ, болот, дауыл, ҡойон, йәшен, ҡырау, ысыҡ* һ. б.;

✓ төп билдә (сифат) атамалары: *бай, йәш, ҡарт, киң, тар, оҙон, ҡыҫҡа, шуҡ, ас, туҡ, оло, кесе, тулы, тәрән, һай, күп, аҙ, әсе, ҡоро, ҡаты, йомшаҡ, тиҙ, шәп, яй, тигеҙ, шыма, йылы, эҫе, тәрән, һай* һ. б.;

✓ төп төҫтө белдергән атамалар: *аҡ, ҡара, күк, һары, ҡыҙыл, йәшел, буҙ, сал, ал* һ. б.;

✓ хәрәкәтте белдереүсе ҡылымдар: *килеү, китеү, барыу, осоу, йөҙөү, сумыу, атлау, сығыу, инеү, һикереү, һелтәү, төшөү, менеү* һ. б.;

✓ ябай һандар атамаһы: *бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун, утыҙ, алтмыш, йөҙ, мең* һ.б.;

✓ алмаштар: *мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар, ошо, кем, ни, нисә, ҡайҙа, бында, был, теге, шул, нимә* һ. б.;

✓ йәнлек-атамалары: *ат, һыйыр, эт, ҡуй, тай, дөйә, аҫ, төлкө, бүре, айыу, арыҫлан, сысҡан, ҡаҙ, тауыҡ, өйрәк, торна, бөркөт, ҡоҙғон, ҡарға, турғай* һ. б.;

✓ ер һәм һыу объекттарының атамалары: *тау, үҙән, дала, ялан, урман, йылға, ҡул, ҡоҙоҡ, ҡая, ҡабаҡ, яр, түбә* һ. б.

Төп башҡорт һүҙҙәренә шулай уҡ башҡорт ерлегендә барлыҡҡа килгән һәм башҡорт теле өсөн генә хас булған һүҙҙәр ҙә ҡарай. Мәҫәлән, тәлмәрйен, гөбөргәйел, гөрләүек, әсергәнеү, ҡыйыҡ (өй ҡыйығы), көпшә, ағасаҡ (балыҡ), йәйләүес (бәрәс), бараба, барған-даҡ (ҡош исеме) һәм башҡа күп кенә һүҙҙәр башҡа төрки телдәрҙә юҡ, ләкин улар башҡа телдәрҙән үҙләштерелмәгәндәр, ә башҡорт ерлегендә барлыҡҡа килгәндәр.

**2-се күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙең ниндәй телдәрҙән үҙләштерелеүен билдәләгеҙ.

| | |
|---|---|
| биҙрә | бирсәткә |
| сәйнүк | тәҡдир |
| картуф | файҙа |
| караүат | сәфәр |
| кирбес | ғөрөф |
| арыш | ожмах |
| самауыр | йыназа |

доға | йәһәннәм

- Һеҙ рус һәм ғәрәп теленән үҙләштерелгән ниндәй һүҙҙәрҙе беләһегеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ. Бирелгән һүҙҙәр менән 5 һөйләм төҙөгөҙ.

Башҡорт әҙәби теленә рус теле аша латин һәм грек телдәренән килеп ингән һүҙҙәрҙең күбеһе халыҡ-ара һүҙҙәр иҫәбенә инә, сөнки улар донъялағы бик күп телдәрҙә шул уҡ мәғәнәлә киң ҡулланыла. Бер нисә тел өсөн уртаҡ булған һүҙҙәр **интернациональ һүҙҙәр** була, мәҫәлән: *биржа, глобус, директор, ксерокс, компьютер, мелодия, ринг, телефон, юрист* һ. б.

**3-сө күнегеү**. Тексты уҡығыҙ. Интернациональ һүҙҙәрҙе күсереп алығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатмалы һүҙлектән ҡарап асыҡлағыҙ.

### Өләсәйҙәр мәктәбе

Заман башҡа – заң башҡа, тип күп кенә етешһеҙлектәрҙе бөгөнгө йәшәйешебеҙгә япһарырға тырышһаҡ та, ғаилә ҡиммәттәре, быуындар бәйләнеше бала тәрбиәләүҙә бик ҙур роль уйнай.

Ни өсөн бына һин атай-әсәйең, өләсәйең йәиһә олатайыңды тыңларға тейешһең? Ярай, «тейеш» һүҙе оҡшамаһа, ошолай тип үҙгәртәйек: уларҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалыу һинең өсөн, киләсәгең өсөн бик мөһим. Быны белгес булараҡ әйтәм, һүҙемде дәлилләп үтеү мотлаҡтыр.

Беренсенән, улар был донъяла һинең берҙән-бер иң ғәзиз кешеләрең. Икенсенән, уларҙың тәрбиәһе шулай: бер ҡасан да яманлыҡҡа өйрәтмәҫтәр. Быныһы менән дә килешәһеңдер? Бәлки, һиңә улар тормоштан артта ҡалған, наҙан кешеләр кешеләр кеүек тә күренеп китәлер. Эйе, өләсәйең, ысынлап та, компьютерҙың ҡайһы еренә баҫып ҡабыҙырға ла белмәйҙер, олатайың кеҫә телефонының бер генә төймәһе менән эш итәлер. Айфон, гаджет, виджет, нетбук тигән нәмәләрҙе аныҡ ҡына итеп күҙ алдына ла килтерә алмайҙарҙыр. Шуға ҡарамаҫтан, күберәген аҡыл өйрәтеү менән маҙаңа тейәләрме?

Кәңәшем шул: бер генә минутҡа уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һалсы. Өләсәйең, олатайыңдың нимә күргәндәрен, ниҙәр кисергәндәрен, бала саҡтары ҡайҙа үткәнен белеү – һинең бурысың.

Ә һинән өләсәй-олатайҙарыңа тик иғтибар, ихтирам ғына кәрәк. Иҫеңдә тот: һин уларҙың тормошоң дауамы, донъяла нәҫелдәрен дауам итеүсе. Уларға һин бик ҡәҙерлеһең, сөнки, халыҡ әйтмешләй, баланың балаһы балдан татлы (Ә. Исхаҡова).

Үҙенең тарихи үҫешендә башҡорт теле башҡа күп кенә ҡәрҙәш булмаған телдәр менән мөнәсәбәткә ингән. Бындай мөнәсәбәттәр башҡорт халҡының башҡа халыҡтар менән күрше территорияла йәшәүе, иҡтисад һәм мәҙәниәт бәйләнештәре нигеҙендә барлыҡҡа килә.

Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһында ғәрәп, фарсы, рус һәм башҡа күп кенә телдәрҙән **үҙләштерелгән һүҙҙәр** бар. Сит телдәрҙән килеп ингән һүҙҙәрҙең ҡайһы берҙәре шул тиклем үҙләштерелгәндәр, шундай төҙөлөш һәм мәғәнә үҙгәрештәре кисергәндәр, хатта уларҙы төп башҡорт һүҙҙәренән айырыуы ла мөмкин түгел. Әйтәйек, түбәндәге сит телдәрҙән килеп ингән һүҙҙәрҙең төҙөлөшө төп башҡорт һүҙҙәренән һис тә айырылмай: *яуап, китап, рәсем, сабыр, милек, нөктә, есем* (ғәрәпсә: *джавабун, китабун, рәсмүн, сабрун, мүлкүн, ноҡтатун, джасмүн*); *шәкәр, ыҙа, сөгөлдөр, дөрөҫ, аҙна, таҫтамал* (фарсыса: *шәккәр, иза, ноғондор, дорост, адина, дастмал*); *арыш, бүрәнә, ҡомаҡ, ҡуласа, мейес, сабата, толҡа* (русса: *рожь, бревно, хомяк, колесо, печь, чоботы, толк*) һ. б. Ҡайһы бер һүҙҙәр, киреһенсә, башҡорт теленә хас булмаған сифаттарын һаҡлайҙар. Этимологик анализдан башҡа фонетик төҙөлөшө буйынса ғына уларҙың үҙләштерелгән һүҙҙәр икәнлеген белергә була. Мәҫәлән, ғәрәп теленән үҙләштерелгән *тәҡдир* һүҙендә һаңғырау [ҡ] өнөнөң яңғырау [д] менән йәнәш килеүе һәм тел арты [ҡ] өнөнөң алғы рәт һуҙынҡылары менән ҡулланылыуы уның үҙләштерелгән

**4-се күнегеү.** Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе аш-һыу, йорт-ҡура, кейем-һалым, һауыт-һаба, белем тематик төркөмдәргә бүлеп яҙығыҙ.

Иман, келәт, көрөшкә, дәрес, бирсәткә, билмән, тәрилкә, мәсет, мәсьәлә, кәстрүл, намаҙ, лапаҫ, китап, әлифба, доға, шәл, солан, калуш, сәй, һарай, фән, мискә, ҡарбуз, толоп, йәһәннәм.

- Ошо һүҙҙәрҙе ҡулланып, ғаилә темаһына 5 һөйләм төҙөп яҙығыҙ.

Ө л г ө: Дини һүҙҙәр: *иман, ...* .

**5-се күнегеү.** Тексты уҡып сығығыҙ. Ике төркөмгә бүленегеҙ. Төп башҡорт һүҙҙәренә һәм үҙләштерелгән һүҙҙәргә миҫалдар табып яҙығыҙ.

### Ата-әсәгә мөнәсәбәт

Балалар менән уларҙың ата-әсәләре араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр балаларға ата-әсәләренә ҡарата ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Үҙҙәренә ҡарата ҙур ҡайғыртыусанлыҡҡа, түҙемлелеккә, яҡшы мөғәмәләгә һәм тәрбиәгә ата-әсәнән дә лайығыраҡ бер кем дә юҡ.

Ата-әсәләр үҙҙәренә ҡарата башҡаларҙыҡына ҡарағанда балаларының дорфалығын ауырыраҡ кисерәләр. Шуға күрә балалар уларға ҡарата айырыуса иғтибарлы булырға тейештәр.

Ҡайһы саҡта яңылышһалар ҙа ата-әсәләр, ғәҙәттә, үҙҙәрен тәжрибәлерәк, аҡыллыраҡ, хаҡлыраҡ тип иҫәпләйҙәр. Былдай ышаныс үҙ балаларының үҫеп етеүҙәренә ҡарамаҫтан, уларҙы тәрбиәләп үҫтереүҙәре менән нығытыла.

Балалар ата-әсәләрен ҡарау һәм тәрбиәләү өсөн яуаплы. Ата-әсә мохтажлыҡ кисергән ваҡытта уларға ярҙам итеү, мөмкин ҡәҙәр уларҙың тормошон еңеләйтергә тырышыу – ысын дини бурыс булып тора.

Бала ата-әсәнең кәйефен ебәрә торған эштәрҙән тыйылырға тейеш. Балаларҙың ата-әсәгә ҡарата булған бурыстарының береһе түҙемлелек һәм ҡайғыртыусанлыҡ һанала. Ата-әсә үтенеп, балаһы быны эшләй алмаған осраҡта ла ул көсөнән килмәгәне өсөн уларҙан ғәфү үтенергә тейеш.

Кешенең ата-әсәһе һәм ҡатыны менән мөнәсәбәттәре ҡайһылыр бер яҡҡа зыян иҫәбенә булмаҫҡа тейеш. Һәр ике яҡтағы үҙ-ара мөнәсәбәттәргә гармония һәм татыулыҡ хас булырға тейеш.

Ата-әсәләре хатта мәжүсиҙәр йәки Исламдың дошмандары булған осраҡта ла балалар уларға ҡарата түҙемле, рәхмәтле ҡайғыртыусан булырға, хөрмәт менән ҡарарға тейештәр.

Ата-әсәһе һөйләгәндә балалар иғтибар менән тыңларға, уларҙы бер ҡасан да бүлдермәҫкә һәм улар менән бәхәсләшмәҫкә тейештәр.

Ата-әсәһе ҡартайғас, улар тураһында ҡайғыртыу, уларҙы үҙ өйөндә йәшәтеү балаларҙың бурысы булып тора. Ҡарттар йортона оҙатып, уларҙан ҡотолорға тырышыу – әҙәпһеҙлек кенә түгел, ә бәлки оятһыҙлыҡ та.

Ата-әсә менән бала араһындағы ҡаршылыҡтар ниндәй генә ҙур булмаһын, бала уларға зыян килтерерлек итеп һөйләшмәҫкә, асыуланмаҫҡа һәм ҡул хәрәкәттәре яһамаҫҡа тейеш.

Ата-әсәләре үлгәндән һуң уларҙы балаларының хөрмәтләүҙәренең ысулдары – улар өсөн доға ҡылыу, уларҙы ярлыҡауҙы үтенеү (мосолмандар өсөн) – уларҙың яҡшы эштәрен рәхмәт хисе менән иҫкә алыу һәм уларҙың дуҫтарын хөрмәт итеү.

Ҡартайған һайын, ата-әсә физик һәм аҡыл яғынан көсһөҙләнә башлай. Шуның арҡаһында тиҙ ярһып китеү, энергия юғалтыу, күңелгә артыҡ яҡын ҡабул итеү, ихтимал, ҡылынған эш-ғәмәлдәргә, яңылыш баһа биреү күренештәре барлыҡҡа килә. Шунлыҡтан балалар үҙҙәрендә үс алыу теләге тыуған ваҡыттарҙа шуларҙы иҫтә тоторға һәм үҙҙәренең өлкән йәштәге ата-әсәләренә ҡарата түҙемлелек күрһәтергә, игелекле булырға тейештәр.

Ата-әсә һүҙен тыңламау, уларға ҡул һелтәү, шәфҡәтһеҙлек күрһәтеү гонаһ һанала. Тормоштағы барлыҡ хаталарҙы, моғайын, аңлап та, кисереп тә булалыр, әммә ата-әсәгә ҡарата бындай мөнәсәбәтте ғәфү итеп булмай. *(«Ислам әхлағы һәм ғәҙәттәре» китабынан)*

**6-сы күнегеү.** Түбәндәге хәрефтәр теҙмәһендә ғәрәп теленән үҙләштерелгән 6 һүҙ йәшеренгән. Мәғәнәләрен аңлатмалы һүҙлектән ҡарап асыҡлағыҙ.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Н | Ә | Ç | Е | Л | Ғ | Ә | Ш | А | Р |
| Һ | И | Ҡ | Ғ | Т | А | Г | Ш | Ә | Ө |
| Р | Х | И | Й | О | И | А | Л | Р | К |
| А | Т | Ә | Ҡ | З | Л | Ә | Ү | А | Ө |
| И | И | Р | А | М | Ә | К | И | Б | Ф |
| С | Ç | Р | А | Е | И | Ғ | Т | И | Н |
| Ү | Ә | М | И | Р | А | Ç | И | Һ | И |
| Ҡ | Ғ | И | Ң | Т | Ә | Р | Б | И | Ә |

**7-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ, һығымталар эшләгеҙ.

1. Ниндәй төп төрки сығанаҡлы һүҙҙәр башҡорт лексикаһының нигеҙен тәшкил итә?
2. Үҙләштерелгән һүҙҙәр нисек барлыҡҡа килгән?
3. Интернациональ һүҙҙәргә билдәләмә бирегеҙ. Миçалдар килтерегеҙ.

**Өйгә эш:**

1. Төп башҡорт һүҙҙәренән генә торған 5 һөйләм төҙөгөҙ.
2. Интернациональ һүҙҙәр ҡулланып диалог төҙөп яҙығыҙ.
3. Ғаиләгеҙ тураһында 3 минутлыҡ сюжет төшөрөп, иптәштәрегеҙгә күрһәтегеҙ. Сығышығыҙҙа үҙләштергән һүҙҙәр ҡулланығыҙ.

**Актив һәм пассивлыҡ күҙлегенән хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы**

Туғанлыҡта – көс.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ниндәй һирәк ҡулланылған һүҙҙәр осраны?

Һикегә ултырып доға ҡылғас, Хажғәле ҡарт күҙен һөртөп алды ла:

– Илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сыға, тиҙәр, шул дөрөҫ икән, – тине. Ул иҫәнлек-һаулыҡ һорашты. – Ауырып, ыҙғарлап торһам да, һин ҡайтҡанды ишеткәс, килдем әле. Күрмәгә килдем. Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрә килһен, тигән боронғолар, – тине Хажғәле ҡарт.

– Бик мәслихәт, бик мәслихәт, ағай. Әйҙә, ҡатаңды сисеп, төпкә менеп ултыр, мендәр өҫтөнә, – тине Әхмәди һәм оло һикеһенең түренә, урҙанан үрелеп алып, мендәр ырғытты.

Әхмәди ағаһының күңелен табырға тырышты:

– Бер ҙә ҡартаймаған кеүекһең әле, ағай. Таяҡ менән йөрөһәң дә, бик ныҡ баҫаһың. Мин киткәндә лә шулай инең.

– Ҡартаймаған ҡайҙа, ҡустым. Етмеш туғыҙҙы ҡыуам инде, Аллаға шөкөр. Атайың мәрхүм дә етмеш туғыҙ йәшендә вафат булды. Тупрағы еңел булһын инде мәрхүмдең, – тине Хажғәле ҡарт.

Факиһа еңгәй, оло һикегә ашъяулыҡ йәйеп, сәй ултыртты, сәй янына майлы ҡоймаҡ, бал, муйыллы май ҡуйҙы. Улар икәүләп кенә сәй эсергә тотондолар *(Ж.Ғ. Кейекбаев)*.

- Актив һәм пассив ҡулланылышлы һүҙҙәр бер-береһенән нимәһе менән айырыла?

Башҡорт теленең һүҙлек составындағы бөтә һүҙҙәр ҙә бер тигеҙ кимәлдә ҡулланылмайҙар. Көнкүрештә һөйләшеп аралашыу өсөн телдәге бөтә һүҙҙәрҙең дә кәрәге юҡ. Шуға күрә һүҙҙәрҙе, ҡулланылыштарына ҡарап, ике төркөмгә бүлеп йөрөтәләр: **актив ҡулланылышлы һүҙҙәр** һәм **пассив ҡулланылышлы һүҙҙәр**. Башҡорт теленең һүҙлек составындағы актив ҡатламға ҡараған һүҙҙәрҙе белмәйенсә, башҡортса һөйләшеү мөмкин түгел. Актив һүҙлек ҡатламына, мәҫәлән, туған-ҡәрҙәшлек, хайуан, тәбиғәт күренештәре, үҫемлек, тән өлөштәре, төрлө төҙөлөштәрҙең, эш ҡоралдарының, тормош кәрәк-яраҡтарының һәм башҡа күп кенә нәмәләрҙең атамалары ҡарай. Уға шулай уҡ хәҙерге башҡорт телендә ҡулланылған ҡылым, сифат, һан, рәүеш һәм башҡа һүҙ төркөмдәренең күп кенә өлөштәре инә.

**2-се күнегеү.** Бағаналап бирелгән һүҙҙәрҙең ниндәй терминдарға ҡарауын әйтегеҙ.

атай
ағай
һеңле
апай
әсәй
еңгәй
балдыҙ
ҡоҙаса
намаҙ
мәсет
ураҙа
тәһәрәт
тамуҡ
ожмах
тәсбих
мулла
ҡырҡмыш
ҡонан
дүнәжен
һәүерек
аҫау
ҡонажын
ҡолон
байтал

**Терминдар** тип үҙенең махсус йүнәлеше сикләнгән яңғыҙ мәғәнәгә ынтылышлы һүҙҙәргә әйтәләр. Былдай һүҙҙәр фән, техника, дин, политика, дипломатия, хужалыҡ тармаҡтары һ. б. өлкәләрҙә ҡулланылалар.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Унда ниндәй һүҙҙәр өҫтөнлөк итә? Пассив ҡулланылышлы һүҙҙәр булһа айырып күрһәтегеҙ.

Аллаһ беҙҙе күрә

Сәлих үҙенең олатаһынан:

– Олатай, ә ни өсөн беҙ Аллаһ Тәғәләне күрмәйбеҙ? – тип һораны.

– Сөнки беҙҙең күҙҙәр шул рәүешле төҙөлгән, шуға улар Аллаһты күрмәй, – тине олатаһы.

– Нисек инде улай, олатай?

– Ә һин фотоаппарат менән бөтә нәмәне төшөрә алаһыңмы?

– Эйе, төшөрә алам.

– Ә үҙеңдең йөрәгеңде, үпкәләреңде лә төшөрә алаһыңмы?

– Юҡ, уларҙы тик ренген аппараты менән генә төшөрөп була.

– Бына күрәһеңме, ике аппарат та төшөрөр өсөн эшләнелгән, тик фотоаппарат рентген аппараты төшөргәнде төшөрә алмай. Сөнки уларҙың конструкциялары төрлө. Беҙҙең күҙҙәребеҙ ҙә шулай, Уны күрмәҫлек итеп төҙөлгән.

– Ә ул беҙҙе күрәме?

– Әлбиттә, Ул беҙҙе ҡараңғы, утһыҙ бүлмәлә лә, беҙ ҡара кейемдә булһаҡ та күрә. *(А. Уйсал)*

Айырым профессия өлкәһендә эшләүселәр ҡулланған махсус һүҙҙәрҙе **профессионализмдар** тип йөрөтәләр.

**4-се күнегеү.** Уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Был хикәйәне һөйләүсе кешенең һөнәре ниндәй? Һеҙ уны нимәгә ҡарап билдәләнегеҙ?

– Мин ҡартайҙым инде, – тип башланы һүҙен атайым. – Заманында эштә ал бирмәнем, һөнәрҙәрем дә етерлек ине. Ана, солоҡ ябыуҙы ғына ал. Йөрәкле, беләкле ирҙәр эше ул. Хәҙер юнмаһы егерме метрлап бейеклектәге ҡарағайҙарға менерлек хәл ҡалманы. Һине шул эштәргә өйрәтеп китергә ине уйым.

Был мине бик тә шатландырҙы. Атайым менән кәрәк-яраҡтарҙы арбаға һалдыҡ. Уларҙың исемдәрен беләм: бына яҫы ҡайышты биштән үреп

эшләнгәнен кирәм тиҙәр. Ярты метрҙай таҡтаның ике башына бау тағылғаны тәпәлдерек була. Бал алғанда шуға баҫып торалар. Дилбегә кеүек итеп сүстән ишелгән бауҙы таҫмау тиҙәр. Уның менән аҫтан кәрәк нәмәләрҙе күтәрәләр, өҫтән бал батманын аҫҡа төшөрәләр.

Атайым менән урманға юл алдыҡ *(Н. Мусин)*.

- Профессиональ һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.

**5-се күнегеү.** «Туғанлыҡ» һүҙенә синквейн төҙөгөҙ.

**6-сы күнегеү.** Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ. Һығымталар эшләгеҙ.

1. Үҙенең махсус йүнәлеше сикләнгән яңғыҙ мәғәнәгә ынтылышлы тип ниндәй һүҙҙәргә әйтәләр?

а) профессионализмдар;

б) терминдар;

в) диалект һүҙҙәр.

2. Актив ҡулланылышлы һүҙҙәр – ул

а) айырым профессия өлкәһендә эшләүселәр ҡулланған махсус һүҙҙәр;

б) айырым төркөм кешеләре телмәрендә генә ҡулланылған һүҙҙәр;

в) көндәлек тормошта йыш ҡулланыла торған һүҙҙәр.

3. Айырым профессия өлкәһендә эшләүселәр ҡулланған махсус һүҙҙәр тип ниндәй һүҙҙәргә әйтәләр?

а) пассив ҡулланылышлы һүҙҙәр;

б) профессионализмдар;

в) диалект һүҙҙәр.

**Өйгә эш**

1. Матур әҙәбиәттән туғанлыҡ терминдары булған 3 һөйләм табып күсереп яҙығыҙ.

2. Ата-әсәләрегеҙҙең профессиялары тураһында мини-инша яҙып килегеҙ. Унда профессионализмдар өҫтөнлөк итһен.

3. Үҙегеҙҙең шәжәрәгеҙҙе төҙөп, иптәштәрегеҙ алдында сығыш яһағыҙ.

**Бәйләнешле телмәр үҫтереү дәресе. Уҡытыусы тәкдим иткән текстағы фекерҙе үҫтереп фекерләү иншаһы яҙыу.**

ПЛАН:

1.Текста күтәрелгән проблема буйынса фекерҙәрегеҙҙе сағылдырған инеш.

2. Текстағы проблеманы билдәләү.

3. Проблеманы аңлауҙы иҫбатлау өсөн текстан ике миҫалды күрһәтеү, асыу.

4. Проблема буйынса автор позицияһы.

5. Автор менән килешәһегеҙме, юҡмы? Ни өсөн?

6. Берәй художестволы әҫәрҙән беренсе аргумент.

7. Яҙыусы әҫәренән икенсе йәки тормоштан бер аргумент.

8. Йомғаҡлау (автор позицияһы һәм үҙегеҙҙең фекерҙәр буйынса һығымталар).

## Диалект һүҙҙәр

Әсәһен ҡәҙерләгән ҡәҙерле булыр.
Әйтем.

**1-се күнегеү.** Бағаналап бирелгән һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. Һул бағанала бирелгән һүҙҙәр әҙәби телгә ҡарай. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе аңлашыламы? Шул мәғәнәне белдереү өсөн һеҙҙең яҡтарҙа уң бағаналағы һүҙҙәрҙең ҡайһыһы ҡулланыла?

| | |
|---|---|
| 1. Ҡурай еләге | 1. Ағас еләге, әберсә, торна еләге, айыу еләге. |
| 2. Ҡоҙоҡ | 2. Ҡотоҡ, ҡойоҡ, оро, ҡойо. |
| 3. Тоҡ | 3. Ҡапсыҡ, мишәҡ. |
| 4. Әсәй | 4. Инәй, әннә. |

**Диалект һүҙҙәр** тип әҙәби телдә ҡабул ителмәгән, ерле һөйләштәр өсөн генә хас булған һүҙҙәрҙе атайҙар. Диалект термины грек теленең **диалектос «һөйләш»** һүҙенән яһалған. Мәҫәлән, *сөңкә* (сынаяҡ өҫтө), *кәбәркә* (соландағы бүлмә), *аяҡ* (ҙур табаҡ), *өгөрсә* (ҡыяр).

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ҡалын шрифт менән бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе аңлашыламы, һеҙҙең яҡтарҙа ниндәй һүҙҙәр ҡулланалар?

Шундай күренеш күҙ алдыма баҫты: баш осомда имән ботаҡтары бәүелә, ағас тирәләй, ҡулға-ҡул тотоношоп, ваҡ балалар әйлән-бәйлән уйнай. Улар араһында мин дә, минең кесе **туғаным** Сәлисә менән Ильяс та бар. Башта беҙ күңелле йыр йырлайбыҙ, шаярышып зыҡ ҡубабыҙ. Унан нимәгәлер ыҙғышып, илашып алабыҙ. Тағы татыулашабыҙ. Үҙебеҙ һаман әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ, әйләнәбеҙ ... Беҙ генә түгел, ошо имән тирәләй бөтә ер, бөтә күк әйләнә. Ә ағас ҡымшанмай ҙа тик тора.

Был имән минең Оло инәйем булып сыға. Уның тирәһендә инде балалар ғына түгел, беҙҙең бөтә ғаиләбеҙ – атайым, Кесе инәйем, **абзыйҙарым**, апайҙарым әйләнә. Хатта бер пар күк атыбыҙ, ике ала **һәүкәштәребеҙ**, быҙауҙарыбыҙ, һарыҡтарыбыҙ, тауыҡтарыбыҙ әйләнә. Шул кеше тирәһендә беҙҙең барлыҡ бәхет-шатлыҡтарыбыҙ, ҡайғы-хәсрәттәребеҙ, көндәлек мәшәҡәттәребеҙ, өмөт-хыялдарыбыҙ әйләнә – донъябыҙ әйләнә. Минең Оло инәйем ошо әйләнеп торған донъяның үҙәге. Беҙ йәшәгән донъя тыныс һәм хәүефһеҙ. Унда һәләкәт тә, ғазап та юҡ *(М. Кәрим)*.

- Был өҙөк ниндәй әҫәрҙән алынған? Йөкмәткеһен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

Башҡорт телендә өс диалект бар:

- көньяҡ диалект
- көнсығыш диалект
- төньяҡ-көнбайыш диалект

Көньяҡ диалект

---

Көньяҡ диалектҡа ҡараған территория көнсығыш диалектынан өс мәртәбәгә ҙур. Көньяҡ диалектҡа Эйек-Һаҡмар һөйләше (Ейәнсура, Мәләүез, Баймаҡ районының көньяғы, Күгәрсен, Хәйбулла, Көйөргәҙе райондарында йәшәгән үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамъян, түңгәүер ырыуы башҡорттары инә), бөрйән һөйләше (бөрйән ырыуы башҡорттары – Бөрйән районы), урта һөйләш (Архангел, Ҡырмыҫҡалы, Белорет, Ишембай, Ғафури, Нуриман райондарына ҡараған табын, ҡатай, юрматы, тәлтем ырыуы башҡорттары инә), Дим һөйләше (Ауырғазы, Дәүләкән, Миәкә, Әлшәй, Бишбүләк, Нуриман райондарының көнбайышы, Федоровка, Стәрлебаш, Шишмә, Иглин райондарындағы меңле, илкәй меңе, субы меңе, ҡыркөйлө меңе һ. б. ырыу башҡорттары инә). Был диалектҡа Башҡортостандан ситтә Ырымбур өлкәһендә Александр, Гай, Красногвардейский, Ҡыуандыҡ, Новосергиевский, Октябрь, Переволоцк, Һарыҡташ, Төйлөгән райондарында, Һамар өлкәһенән Большечерниговский, Большеглушицкий, Һарытау

өлкәһенән Перелюб һәм Пугачев райондарындағы Һайылмыш, Һаҡмар, Туҡ, Соран, Ырғыҙ, Кәрәлек һәм Кәмәлек йылғалары буйында йәшәгән башҡорттарҙың һөйләштәре инә. Фонетик үҙенсәлектәре: маллар – малдар, атлар – аттар, ҡаҙлар – ҡаҙҙар, урманныҡ – урманлыҡ. Морфологик үҙенсәлектәре: Әсән – әсәйең, Һинә – һиңә, Атан – атайың, Һуңғары – һуңыраҡ. Лексик үҙенсәлектәре: селбәрә – сей балыҡ, бал итәк – ҡатлама.

Көньяҡ диалекттың төп билдәләре: күплек һәм яһаусы ялғауҙар, һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, нигеҙҙә, ике төрлө килә. Шулай ҙа күп осраҡта ла һаҡлана. Мәҫәлән:

- Маллар – әҙәби телдә малдар
- Атлар – аттар
- Ҡаҙлар – ҡаҙҙар
- Эшләү –эшләү
- Урманныҡ – урманлыҡ һ. б.

Көньяҡ диалект үҙенең өндәре, грамматик үҙенсәлектәре, һүҙлек составы яғынан хәҙерге башҡорт әҙәби теленә бик яҡын тора.

Көнсығыш диалект

Уға Башҡортостандың Балаҡатай, Мәсетле, Дыуан, Ҡыйғы, Салауат, Учалы, Әбйәлил райондары, Баймаҡ районының төньяғы, Бөрйән районының төньяғы, Белорет районының төньяҡ-көнсығышында һәм Силәбе, Ҡурған, Екатеринбург өлкәләрендә йәшәгән башҡорттарҙың һөйләштәре ҡарай. Был майҙанда борон-борондан ҡатай, табын, әйле, көҙәй, ҡыуаҡан, күбәләк, тиләү, тамъян, ҡарағай-ҡыпсаҡ, һалйот, һеңрән һ. б. ырыу-ҡәбиләләргә ҡараған башҡорттар йәшәгән. Көнсығыш диалектта -лыҡ, -лы, -ла кеүек ялғауҙарҙың, һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, т, д, ҙ өндәренә башланған дүртәр варианты барлыҡҡа килә: -лыҡ, (-тыҡ, -дыҡ, -ҙыҡ), -лы (-ты, -ды, -ҙы), -ла (-та, -да, -ҙа): сауҡалыҡ, таштыҡ, ҡомдоҡ, шырҙыҡ; балалы өй, башты кеше, талды урын, ҡыйҙы иген; атты дағала, тәмәкене ташта, ашты тәмдәп ҡара, кәбеҫтә тоҙҙаныҡ. Фонетик үҙенсәлектәре:

1)Ялғауҙар:

1. п, т, с, ҫ, ш, к, ҡ, х өндәренә бөткән һүҙҙәрҙән һуң – т өнөнән башланалар: йәштек – йәшлек, аҡтау – аҡлау.

2. л, м, н, ң, з, ж өндәренә бөткән һүҙҙәрҙән һуң – д өнөнән башланалар: йәндек – йәнлек, меңдәгән – меңләгән.

3. р, й, ҙ, у өндәренә бөткән һүҙҙәрҙән һуң – ҙ өнөнән башланалар: йәйҙәү – йәйләү, йөҙҙәгән – йөҙләгән.

Морфологик үҙенсәлектәре: Атаҡас – тас атаһы, сипекәй – себеш, йыуыштым – йыуындым, туйынығыҙ – ашағыҙ. Лексик үҙенсәлектәре: Инәй

– әсәй, ҡарттай – олатай, ҡартнәй – өләсәй. Көнсығыш диалект Арғаяш, Әй-Мейәс, Һалйот, Ҡыҙыл һөйләштәренән тора.

Төньяҡ-көнбайыш диалект

Башҡорт теленең көнбайыш диалектына Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында Ҡариҙелдең урта ағымында, Төй, Сөн, Ҡармасан, Сәрмәсән, Ағиҙелдең түбәнге ағымында, Танып йылғалары буйында урынлашҡан Ҡариҙел, Асҡын, Балтас, Тәтешле, Борай, Яңауыл, Краснокама, Дүртөйлө, Илеш,Баҡалы, Туймазы, ТатарстандыңАҙнаҡай, Аҡтаныш, Әгрез, Минзәлә, Мөслим, Пермь өлкәһенең Ҡуйыҙа, Уса, Пермь, Чернушкин һәм Барҙым районадарында йәшәгән башҡорттарҙың теле инә. Был диалект Ҡариҙел, Танып, түбәнге Ағиҙел – Ыҡ һәм Ғәйнә һөйләштәрен берләштерә. Диалекттың төп билдәләре: с тартынҡыһы урынында ч, һ урынына с ҡулланыла. Мәҫәлән: чирәм – әҙәби телдә сиҙәм; сөйнәксез (урта Урал) – әҙәби телдә һөйкөмһөҙ, сүлек (төньяҡ-көнбайыш) – әҙәби телдә һөлөк; ташчүлмәк (Ҡариҙел) – әҙәби телдә ташсүлмәк; үңәч (ғәйнә) – әҙәби телдә үңәс; үтә чығыу (төньяҡ-көнбайыш) – әҙәби телдә үтә сығыу; үҙ чире (төньяҡ-көнбайыш) – әҙәби телдә үҙ сире һ. б. Фонетик үҙенсәлектәр: Чирәм – сирәм, мөгөш, почмаҡ – мөйөш, төпчөк – кинйә. Морфологик үҙенсәлектәр: Әсән – әсәйең, Һинә – һиңә, Атан – атайың, Һуңғары – һуңыраҡ. Лексик үҙенсәлектәре: Апайым – балаларға өндәшеү, май аш – бауырһаҡ, алма – картуф.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Автор әйтергә теләгән төп фекерҙе билдәләгеҙ. Тексты үҙегеҙҙең диалектығыҙҙа үҙгәртеп ҡарағыҙ.

Беҙҙең яҡта кешенең кешелеген уның ҡатын-ҡыҙға булған мөнәсәбәтенә ҡарап баһалайҙар. Мин дә шулай уйлайым: илдең бөйөклөгөн, ундағы прогресты ҡатын-ҡыҙҙың илдәге хәленә ҡарап билдәләргә кәрәктер. Ҡатын-ҡыҙ күҙ йәше аҡкан ерҙә тормош шәп түгел, ә ҡатын-ҡыҙ йырлаған ерҙе иһә бәхетле ер тип әйтер инем.

Минең донъяла иң тәү күргән, иң тойған нәмәм – ул әсәйемдең йөҙө, уның йыры.

Әсә йыры – донълағы иң бөйөк йыр. Ҡалған бөтә йырҙар ҙа шунан башлана. Әгәр ҙә сәңгелдәк йыры булмаһа, моғайын, бүтән йырҙар ҙа тыумаҫ ине. Ул ваҡыт, бәлки, шатлыҡ та, донъяла бәхет тә, шиғриәт тә әлегенән байтаҡка ҡайтышыраҡ булыр ине.

Әсә йыры – беҙҙең күңелдәрҙә шыткан шиғриәт сығанағы. Беҙ уны, тиҫтәләрсә йыл үткәс тә, тормошобоҙҙоң иң ауыр һәм иң бәхетле сәғәттәрендә иҫкә төшөрәбеҙ.

Тау халҡы йүнһеҙ кеше тураһында: «Моғайын, сәңгелдәктә ятҡанда әсәһе уға йыр йырламағандыр», – ти. Валентина Терешкова, ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе космонавт, йыһандан әйләнеп ҡайтҡас, сит ил хәбәрсеһе тарафынан бирелгән: «Яратҡан кешегеҙҙең исеме нисек?» – тигән һорауға: «Әсәй», – тип яуап биргән *(Р. Ғамзатов).*

- Әсәйҙәр тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар? Әсә һәм бала, әсәйҙәрҙең бала яҙмышындағы урыны тураһында әңгәмәләшегеҙ.

**4-се күнегеү.** Көнсығыш диалектта бирелгән тексты әҙәби телгә күсереп уҡығыҙ.

Мин ней үҙем илле һигеҙенсе йылдан бире мында йәшәйем, мында килдек вис күсенеп Ҡыйғы районында инек. Шунан Салауат районына, шунан һуң ҫикҫән туғыҙынсы йылда музей астылар. Музей асҡас, партком беҙҙең үҙебеҙҙең Дамир Ахметович асҡысты ҡалдырҙы, мына һинең класташың, һиңә ҡалдырабыҙ, әле ул уахытта музей ҡара бер ней генә ине, музей хәленә китереү өсөн бик күп эштәргә туры гилде, мин үҙем дә һәләк ярҙам иттем.

Мында, аның шул урында хәҙер макет эштәлгән, оло мейес ине Мәрйәм апайҙың (Рәми Ғариповтың инәһе), ә теге яҡта ҡаҙандыҡ инде, оло мейестең ауыҙы анда ҡарап тора, ә Мәрйәм апай ғүмер буйына көндәрен-төндәрен механизаторҙарға әпәй бешерҙе. Көндөҙөн былай калхуз эшендә әпәй бешерә, шул мейесте яға, ауыҙы теге яҡҡа ҡарап торғас, шунда бешеренә ине. Шунан ас итергә тырышмаған инде, дүрт бала: өс ир бала, бер ҡыҙ бала, нисек-нисек үҫкәндәрен һөйҙәй туғайнылар.

Хәҙер мин шул аның һөйҙәгәндәрен тыңдап, үҙемдең шул ирем һөйҙәгәндәрен тыңдап, аның менән бергә шул музейҙы музей хәленә китергәнсе бик күп эштәр эштәргә туры гилде. Шуның өсөн аның һөйҙәгәндәрен дә яттап бөттөм, мына шулай экскурсияларға киләләр, һөйҙәй, ҡай уаҡыт берәй ергә киткән була, өйҙә бумай, мин һөйҙәй баштаным инде. Мына шулай ғүмер үтеп китте... *(С. Уилданова, Арый ауылы, Салауат р-ны. 2018 йылда яҙып алынды).*

**5-се күнегеү.** Һул яҡта әҙәби телдә һүҙҙәр бирелгән. Уң яҡтағы диалект һүҙҙәрен әҙәби телгә тура килтереп ҡуйығыҙ.

| | |
|---|---|
| 1. Картуф баҡсаһы<br>2. Сөй<br>3. Тоҡ<br>4. Әсәй<br>5. Ағай<br>6. Атай<br>7. Сеүәтә<br>8. Биҙрә<br>9. Өләсәй<br>10. Сәйнүк | а) күнәк<br>б) ҡартнәй<br>в) баҡырса<br>г) абзый<br>д) туҫтаҡ<br>е) ҡапсыҡ<br>ж) ҡаҙаҡ<br>з) ырҙын<br>и) әттә<br>к) әннә |

**6-сы кнегеү.** Һөйләмдәрҙе тултырып яҙығыҙ. Һығымталар эшләгеҙ.

Мин бөгөн дәрестә ................ белдем.

Миңә бөгөн ................. оҡшаны.

Мин үҙемә ................. асыш яһаным.

Мин үҙемде ................. баһалайым.

**Өйгә эш**

1. Матур әҙәбиәттән диалектта яҙылған 5 һөйләмде күсереп яҙығыҙ.
2. Һеҙҙең яҡта ҡулланылған диалект һүҙҙәрен яҙып килегеҙ. Әсәй тураһында һөйләмдәр төҙөгөҙ.
3. «Башҡорт теленең диалекттары» тигән темаға презентация эшләгеҙ.

## Иҫкергән һүҙҙәр. Яңы һүҙҙәр

Татыу ғаилә – ил күрке.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ниндәй һүҙҙәр аңлашылманы? Шул һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен йөкмәтке буйынса билдәләгеҙ. Был һүҙҙәр хәҙер телмәрҙә ҡулланыламы? Ни өсөн?

Беҙ ярлы инек. Ҡарындыҡ тәҙрәле, ер иҙәнлеситән өйҙә йәшәнек. Ярты дисәтинә еребеҙ булды. Ике һыйыр, ике ат тотҡан сағыбыҙҙы хәтерләмәйем. Күп ваҡытта ат булһа, һыйыр юҡ, һыйыр булһа, ат булмай торғайны. Ә күберәк икеһе лә булманы.

Беҙҙең тирәләге башҡорттар сабата кейә ине. Минең атайым да сабатаны бик матур үрә торғайны. Йомаһына биш-алты пар сабата үрә лә уларҙы баҙарҙа һатып, беҙгә бер әсмүхә сәй, ярты ҡаҙаҡ шәкәр, аҙ ғына сәскәле кәнфит алып ҡайта торғайны.

Мин тәүҙә ауылдағы Вәли мулла оҫтабикәһенә уҡырға йөрөнөм. Аҙаҡ Стәрлебашта Ғәли хәлфә мәҙрәсәһенд! Уҡыным. Тамаҡ ялына мәҙрәсәләге бай шәкерттәргә аш бешерергә, сәй ҡайнатырға ялландым. Уҡыуымды шулай дауам иттем. *(Т. Йәнәби)*

Иҫкергән һүҙҙәргә **архаизмдар** һәм **историзмдар** инә. **Архаизмдар** тип хәҙерге башҡорт телендә иҫкергән, ҡулланылмай йәки стилистик маҡсаттарҙа ғына ҡуллана торған һүҙҙәргә әйтәләр. Архаизмдар атаған предметтар, күренештәр, билдәләр, эш-хәрәкәттәр юғалмаған, иҫкермәгән, ә уларҙың элекке атамалары ҡулланылмай, сөнки уларҙы яңы атамалар алмаштырған. Мәҫәлән, *тыу* (хәҙерге атамаһы *байраҡ*), *ат* (исем), *кәлғә* (ҡала), *лөғәт* (һүҙ, һүҙлек), *буға* (үгеҙ) һ. б.

**Историзмдар** тип хәҙерге ваҡытта юҡҡа сыҡҡан предмет һәм күренештәрҙең атамаларына әйтәләр. Предмет һәм күренештәр хәҙерге ысынбарлыҡта юҡ, ә уларҙың атамалары телдә һаман йәшәп килә.

**2-се күнегеү.** Был өҙөк ниндәй әҫәрҙән алынған? Йөкмәткеһен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Текстан иҫкергән һүҙҙәрҙе табығыҙ. Мәғәнәләрен аңлатмалы һүҙлектән ҡарап асыҡлағыҙ.

– Кем булаһың, Ҡыҙ батыр? – тип һораны Хан. Яугир ҡатын атын, ырыуын, тамғаһын, ҡошон әйтте. Хан уның тауышын ишеткәс тертләп ҡуйҙы.

– Беҙҙә шундай йола бар: мин үҙ халҡыма өлгө булырға һәм әйткән һүҙемде үтәргә тейешмен, – тине Хан.

Яугир ҡатынды ҡотҡарырғамы тигән уй Ханға тынғылыҡ бирмәне.

– Батыр ҡыҙ, мин һиңә матурлығың хаҡына тағы бер бүләк яһарға булдым. Кемде ҡотҡарырға теләйһең, шул кеше һинең менән китәсәк.

Ошо һүҙҙәрҙе әйткәндән һуң, Хан яугир ҡатындың күҙ йәштәре атылып сығыуын көттө.

– Абзыйымды ебәр, – тине ҡыҙ.

– Иреңде яратмайһыңмы? Улыңды үҙһенмәйһеңме? – тип һораны мыҫҡыллы тауыш менән Хан.

– Яңылышаһың, Хан. Иремдән ҡәҙерлерәк, улымдан ғәзизерәк кеше юҡ минең өсөн. Тик мин яңынан кейәүгә сыға алам, тағы бала таба алам. Бер

туған абзыйҙы бер нисек тә ҡайтара алмаясаҡмын, – тине яугир ҡатын *(И. Бураҡаев).*

**3-сө күнегеү.** Төркөмгә бүленеп, И. Бураҡаевтың «Башҡорт көсө» әҫәренән алынған өҙөктө үҙегеҙсә дауам итегеҙ.

– ...Әле беҙҙең һәр беребеҙ башҡорт йөҙөн билдәләй, үҙендә башҡорт көсөн һынай.

– Ә көсөгөҙ нимәлә һуң һеҙҙең?

– ...

- Телмәрегеҙҙә иҫкергән һүҙҙәр ҡулланығыҙ. Аңлатмалы һүҙлек менән эш итегеҙ.

**Неологизмдар** тип яңы барлыҡҡа килгән, телдә киң таралыш алмаған һүҙҙәргә әйтләр.

Башҡорт телендә неологизмдар түбәндәге юлдар менән яһала: 1) телдә электән йәшәп килгән аффикстар ярҙамында (*тигеҙһеҙлек, билдәлелек.ю аҡлама, әсемә, күргәҙмә, ашлама*); 2) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән (*һүҙбәйләнеш, радиоалғыс, үҙешмәкәр, үҙаң*); 3) ҡушма һүҙҙәр ярҙамында (*район үҙәге, кер йыуғыс машина, ял йорто*); 4) сит телдән үҙләштереү юлы менән (*космос, концерн, спринт, такси*).

**3-се күнегеү.** Текст менән танышығыҙ. Унда неологизмдарҙы табығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

Социаль селтәр шөғөлдәре һәм ғәҙәттәре оҡшаш кешеләрҙе интернет аша берләштереүҙән барлыҡҡа килә. Ғәҙәттә, кеше үҙенә кәрәк йомошто таныштары аша белешеүҙе хуп күрһә, социаль селтәрҙәр системаһы ана шул виртуаль танышлыҡты тәьмин итә. Нимәһе ҡыҙыҡ: кешеләр социаль селтәрҙә танышып, осрашып ҡына ҡалмайҙар, ғаилә ҡороп ебәрәләр. Уларҙың һаны көндән-көн арта.

Элемтә электрон почта сервисы аша йәки хәбәрҙәр менән тиҙ аралашыу сервисы ярҙамында башҡарыла. Ҡайһы бер социаль селтәрҙәр бер жанрҙағы кинофильмдарҙы һөйөүселәрҙе йыйһа, икенселәре йыр-моң, китаптар, ҡул эштәре һәм башҡа әйберҙәр менән мауығып, аралашып, фекер алышып, уртаҡ тел тапҡан кешеләрҙе берләштерә *(«Аманат» журналынан).*

- Һеҙ интернетты нисек файҙаланаһығыҙ? Иң билдәле нindәй социаль селтәрҙәрҙе беләһегеҙ?

**4-се күнегеү.** Дебат уйындарын ойоштороғоҙ. Бер төркөм «Интернет селтәрендә танышып ғаилә ҡорған парҙар татыу һәм бәхетле» тигән фекерҙе яҡлай, ә икенсе төркөм был фекерҙе инҡар итә (мәҫәлән, *“Юҡ, ундай ғаиләләр бәхетле булмай һәм тиҙ арала айырылышалар, сөнки ...”*).

**5-се күнегеү.** Һул яҡта терминдар бирелгән. Уң яҡтағы бирелгән миҫалдарға тура килтегеҙ.

| | |
|---|---|
| 1. Архаизмдар<br>2. Неологизмдар<br>3. Историзмдар | а. батша, кантон, барымта, аршин, алпауыт.<br>б. иҙел, һабаҡ, бойҙа, атау, ҡат.<br>в. программист, ипотека, инновация, телеконкурс. |

**Өйгә эш.**

1. Архаизмдар һәм историзмдар булған 5 һөйләм яҙып килегеҙ.
2. Берәй яҡын кешегеҙгә ҡылыҡһырлама яҙығыҙ. Неологизмдар, архаизмдар һәм историзмдар ҡулланырға тырышығыҙ.
3. «Әгәр минең ғаиләм XXII быуатта йәшәһә ... » тигән проект эшләгеҙ. Дуҫтарығыҙ алдында яҡларға әҙерләнеп килегеҙ.

## Бәйләнешле телмәр үҫтереү дәресе. Изложение яҙыу.

## Морфология

## Исем.

## Исем тураһында төшөнсә. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреүе.

Атаһының үҙ улына биргән бүләге – күркәм әҙәп.

Хәҙис.

**1- се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәргә һорау ҡуйығыҙ. Уларҙың нимә аңлатканын билдәләгеҙ.

Әгәр **кеше** үҙен иманлы тип һанай икән, тимәк, ул әҙәпле, тәртипле булырға тейеш. Мосолмандарҙың бөйөк шағиры **Йәләлетдин Руми** былай тигән: «Ҡөрьәндең һәр бер **аяты** әҙәпкә өйрәтә», – тигән. Күренекле Ислам ғалимы Әхмәд Фарук Сирһинди: «Әгәр кеше әҙәп ҡағиҙәләрен үтәмәһә, ул

Аллаһы Тәғәләнең юлында юғары дәрәжәләргә өлгәшә алмаҫ, Раббыһына яҡын була алмаҫ, сөнки хаҡ мосолмандың **йөҙө** – әҙәп», – тигән.

**Әҙәп** – ул иманлы кеше өсөн иң ҙур **байлыҡ**, **хазина**. Ул кешене Аллаһтың рәхмәтенә һәм ризалығына илтә. Танылған әүлиәләрҙең береһе Хужа Баһаутдин Нәҡшбәнди хәҙрәттәре әҙәплелек ҡағиҙәләрен еренә еткереп үтәргә тырышҡан. Ул: «**Остазым** миңә һәр ваҡыт йәтимдәргә, фәҡирҙәргә, мохтаждарға, ауырыуҙарға ярҙам итергә, уларға хеҙмәт итергә ҡуша ине. Ете йыл буйына Аллаһтың мәхлүктәренә хеҙмәт иттем, уларға ҡарата әҙәпле булырға тырыштым һәм шул әҙәп арҡаһында Аллаһы Тәғәлә йөрәгемде асты. Мин мәхлүктәрҙең Аллаһҡа ялбарыуҙарын ишетә башланым», – тигән.

Хөрмәтле **мосолмандар**! Әҙәпкә эйә булыр өсөн рухи **тәрбиә** кәрәк. Рухи тәрбиә биреү һәр бер ата-әсәнең, уҡытыусының, тәрбиәсенең изге **бурысы**.

(“Әбйәлил” гәзитенән)

Предмет, кеше, күренеш, төшөнсәләрҙең атамаһын аңлатҡан һүҙ төркөмө *исем* тип атала. Ул кем? нимә? кемдәр? нимәләр? һорауҙарына яуап бирә. Исемдәр морфологик яҡтан һан, эйәлек заты, хәбәрлек һәм килеш менән үҙгәрә. Синтаксик яҡтан исемдәр һөйләмдең эйәһе лә, хәбәре лә, эйәрсән киҫәктәре лә булып килә ала.

**2-се күнегеү.** Аңлатҡан мәғәнәләренә ҡарап, исемдәр төркөмсәләргә бүленә. Һәр төркөмсәгә бишәр миҫал уйлап әйтегеҙ.

1. Конкрет предмет, матдә, йән эйәләрен белдергән исемдәр: кеше, үлән, ...
2. Төрлө миҙгелде, күренештәрҙе, һауа торошон аңлатҡан исемдәр: көҙ, буран, ...
3. Төрлө сифат, үҙенсәлектәр атамаһын аңлатҡан исемдәр: изгелек, ҡартлыҡ, ...
4. Төрлө эш-хәрәкәт, хәл, мөнәсәбәттәрҙең атамаһын аңлатҡан исемдәр: дуҫлыҡ, көрәш, ...
5. Кешеләрҙең һөнәрен, хеҙмәтен белдергән исемдәр: уҡытыусы, игенсе, ...

**3-сө күнегеү.** Текстан исемдәрҙе табығыҙ, уларҙы ике бағанаға бүлеп яҙығыҙ. Беренсе бағанала берлек һанындағы исемдәр, икенсеһендә – күплек булһын.

Аллаһы Тәғәлә кешене аҡыл, аң, рух, ғәм, сәм, моң, дәрт, илау-көлөү, намыҫ, ҡот, иҫ, уй, көс, һүҙ, ғәмәл-ғибәҙәт, һөйөү-көйөү, холоҡ, үкенеү, ҡыуаныу һәм башҡа беҙ белгән һәм белмәгән бик күп сифаттар һәм төшөнсәләр менән бүләкләгән. Шулай уҡ Ул кешегә еҫ һиҙеү, ишетеү, күреү, тәм тойоу, арыу, йоҡлау, хәрәкәтләнеү кеүек мөмкинлектәр биргән, уны һәр береһе үҙенсәлекле эш башҡарған ағзалар, ул ағзаларҙы үҙҙәренең бурыстары булған күҙәнәктәр һәм башҡа беҙ аңлаған һәм аңламаған, күҙгә күренгән-күренмәгән есемдәр менән тәьмин иткән.

Аллаһы Тәғәлә Әҙәм затына йән өргәс, яҡшы йән эйәһе (кеше) килеп сығыуын аңлағас: «Мин һине Ер йөҙөндәге барлыҡ тыуар йәндәрҙең батшаһы итәм!» – ти. Был хаҡта Тәүратта әйтелә.

(З. Шакирова)

**4-се күнегеү.** Төркөмдәрҙә эш. Һәр төркөм үҙенә тейешле ялғауҙар менән унар миҫал уйлап яҙырға тейеш.

| | **Һүҙҙең тамырындағы һуңғы хәреф** | **Күплек ялғауҙары** | | **Миҫалдар** |
|---|---|---|---|---|
| I төркөм | а, ә, ы, е, о, ө, я | **-лар** | **-ләр** | бала**лар** – дети<br>кеше**ләр** – люди |
| II төркөм | л, м, н, ң, з, ж | **-дар** | **-дәр** | гараж**дар** – гаражи<br>кейем**дәр** – одежда |
| III төркөм | б, в, г, ғ, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ | **-тар** | **-тәр** | китап**тар** – книги<br>еләк**тәр** – ягоды |
| IV төркөм | ҙ, й, р, у, ү, и, ю | **-ҙар** | **-ҙәр** | ҡыҙ**ҙар** – девочки<br>күҙҙәр – глаза |

**5-се күнегеү.** Түбәндә бирелгән әҙәплелек ҡағиҙәләрен уҡығыҙ. Улар тураһында фекер алышығыҙ. Үҙегеҙ тағы ниндәй ҡағиҙәләр өҫтәр инегеҙ?

- Мосолман кешеһе менән осрашҡанда сәләм бирегеҙ һәм ике ҡуллап күрешегеҙ.
- Тәкәббер булмағыҙ, тыйнаҡ һөйләшегеҙ.
- Кеше һөйләгәндә уны бүлдермәгеҙ. Ул һөйләгәнгә ҡарша һөйләп, кәйефен ҡырмағыҙ
- Ике арала низағ булғанда мөнөсәбәттәрҙе өс көндән артыҡҡа өҙөргә ярамай. Әгәр низағтан һуң бер мосолман, бәхәсте онотоп, икенсе мосолманға: «Сәләм!» – тиһә, ул – әҙәпле, яҡшы кеше.
- Диндәшегеҙгә насарлыҡ теләмәгеҙ. Үҙегеҙгә ҡарата ниндәй мөнөсәбәт теләһәгеҙ, башҡаларға ҡарата шундай мөнәсәбәттә булығыҙ.
- Насар ғәмәл ҡылыусылар өсөн Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенегеҙ. Гонаһлы мосолмандар өсөн доға ҡылығыҙ, ғибәҙәт ҡылғанда тәүбәләрен ҡабул итеүен теләгеҙ.
- Өлкәндәрҙе ихтирам итегеҙ, кеселәргә кеселекле булығыҙ, вәғәҙәләрегеҙгә тоғро ҡалығыҙ.

(Ф. Муллаханов)

**6-сы күнегеү**. Хаталы юлдарҙы билдәләгеҙ.

1. Исем һүҙ төркөмө кем? нимә? кемдәр? нимәләр? һорауҙарына яуап бирә.
2. Башҡорт телендә предмет атамалары һәр ваҡыт ҙур хәрефтән яҙыла.
3. Күплек һанындағы исемдәр кемде? нимәне? һорауҙарына яуап бирә.
4. Л, м, н, ң, з, ж хәрефтәренә тамамланған тамырҙарға –дар/-дәр ялғауы ҡушылып күплек формаһы яһала.
5. Китапханасы, һатыусы, йыйыштырыусы, тракторсы, хәбәрсе, малсы һүҙҙәре эш-хәрәкәтте белдерә.
6. Предмет, кеше, күренеш, төшөнсәләрҙең атамаһын аңлатҡан һүҙ төркөмө *исем* тип атала.
7. Исемдәр һөйләмдә һәр ваҡыт эйә булып килә.
8. Һаңғырау тартынҡыға тамамланған тамырҙарға –тар/-тәр күплек ялғауы ҡушыла.

**Өйгә эш.**

1. Әҙәпһеҙлек тураһында 3 фекер уйлап яҙығыҙ.

2. Әҙәп тураһында 5 мәҡәл һәм әйтем табып яҙығыҙ. Күплек формаһында торған исемдәрҙең аҫтына һыҙығыҙ.

3. Тыйнаҡлыҡ әҙәпкә һаналамы? Әҙәпле кешегә хас тағы ниндәй сифаттар тураһында фәһемле ваҡиғалар ишеткәнегеҙ бар?

Бер ваҡыт хәлифәләрҙең береһе – Һарун Әр-Рәшид ниндәйҙер сетерекле бер нәмә тураһында ҡыҙыҡһынып, имамдарҙан Әбү Йософҡа һорау бирә.

– Быны мин белмәйем, – ти имам. – Әйтә алмайым.

– Нисек һин инде белмәйһең? Белһен, тип бит һиңә эш хаҡы түләп торалар, – ти хәлифәнең ярҙамсыһы.

– Мин алған эш хаҡы ғилемемә тап килерлек итеп бирелә, – ти имам. – Әгәр ҙә белмәгәндәрем өсөн дә түләһәләр, ҡаҙнаның малы етмәҫ ине.

Заманында үҙенең ғилемдә тулы камиллыҡҡа етә алмауын танып, тыйнаҡлыҡ менән генә имам Ғазали ҙа әйткән:

– Әгәр ҙә белмәгәндәремде аяҡ аҫтына һалып барһалар, башым күктәргә тиклем күтәрелер ине, – тигән.

Тыйнаҡтарҙың ғына бит ул, ғәҙәттә, тәбиғәте – үткер, күңеле – киң, аҡылы зирәк була. Тыйнаҡлыҡ иманлы бәндәнең әҙәбен дә, холҡон да бер тәртипкә һала (С. Суҡбаев).

### Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары.

Ҡатын ҡыҙ – донъя тотҡаһы.

Әйтем.

**1-се күнегеү.** Ҡалын хәреф менән яҙылған һүҙҙәргә иғтибар итеп уҡығыҙ. Уларҙың ниндәй үҙенсәлеге бар?

### Юлдарым гел уңып тора.

Яулыҡ ябына башлағандан һуң, үҙемдә ифрат еңеллек тойҙом. Дин юлына баҫыуымдың һауабылыр, шуға Аллаһ Тәғәлә миңә еңеллек бирәлер, **юлдарым** гел генә уңып торалыр, тип уйлайым.

Яулыҡ ябыныр алдынан бер йыл самаһы уйланып, мосолманса кейенгән ҡыҙҙар менән аралашып йөрөнөм, ни өсөн яулыҡ ябыныуҙарының серенә төшөнөргә тырыштым. Баштараҡ мәсеткә инер алдынан ғына яулыҡ бәйләй торғайным, унан сыҡҡас, **сумкама** һалып ҡуя инем. Тора-бара **яулығыма** өйрәнеп киттем, хәҙер унһыҙ йөрөй ҙә алмайым.

Яулыҡ бәйләү тышҡы **ҡиәфәтемде** генә түгел, күңел **донъямды** ла үҙгәртте. Мәҫәлән, тыйнаҡ, иманлы булырға өйрәтте. Хәҙер **һүҙҙәремде** үлсәп кенә һөйләйем, **ғәмәлдәремде** лә уйлап ҡылам. Ғөмүмән, һәр йәһәттән дә башҡаларға өлгө булырға ынтылыш барлыҡҡа килде.

Урамда берәй мосолман ҡыҙын осратып иҫәнләшкәс, **кәйефең** булмаһа ла, йылмайып ҡуяһың. Аллаһтың **рәхмәте** иҫкә төшә лә, ҡайғырған **сәбәбеңде** онотаһың. Эйе, был Аллаһтың беҙгә – ҡатын-ҡыҙға күрһәткән сикһеҙ **рәхимлелеге**, сөнки **ҡиәфәтебеҙ** менән дә Аллаһты кешеләрҙең **иҫтәренә** төшөрәбеҙ.

Ҡайһы бер ҡыҙҙар булмышы менән әҙер булмаған килеш яулыҡ ябына ла, кеше **һүҙенә** түҙмәйенсәме, әллә **сабырлыҡтары** етмәйенсәме, **яулыҡтарын** сисә. Ашыҡмағыҙ, **күңелегеҙҙә** иман бар икән, ул барыбер һине яулыҡ ябынырға саҡырасаҡ (Ғ. Мөхәмәтова).

Исемдәрҙең эйәлек категорияһы теге йәки был предметтың ҡайһы бер затҡа йәки предметҡа ҡарағанлығын аңлата. Мәҫәлән, ***дәфтәрем – минең дәфтәр, дәфтәребеҙ – беҙҙең дәфтәр.***

| Һан | Зат | Һуҙынҡыға тамамланған нигеҙгә | | Тартынҡыға тамамланған нигеҙгә | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Ялғау | Миҫалдар | Ялғау | Миҫалдар |
| **Бер лек** | **I** | -м | бала**м**<br>алма**м**<br>сәскә**м** | **-ым**<br>**-ем**<br>**-ом**<br>**-өм** | ҡул**ым**<br>күҙ**ем**<br>тормош**ом**<br>көн**өм** |
| | **II** | **-ң** | бала**ң**<br>алма**ң**<br>сәскә**ң**<br>күрше**ң** | **-ың**<br>**-ең**<br>**-оң**<br>**-өң** | ҡул**ың**<br>күҙ**ең**<br>тормош**оң**<br>көн**өң** |
| | **III** | **-һы**<br>**-һе**<br>**-һо**<br>**-һө** | бала**һы**<br>сәскә**һе**<br>һоҫҡо**һо**<br>өлгө**һө** | **-ы**<br>**-е**<br>**-о**<br>**-ө** | ҡул**ы**<br>күҙ**е**<br>тормош**о**<br>көн**ө** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Күплек** | **I** | **-быҙ**<br>**-беҙ**<br>**-боҙ**<br>**-бөҙ** | бала**быҙ**<br>сәскә**беҙ**<br>һоҫҡо**боҙ**<br>өлгө**бөҙ** | **-ыбыҙ**<br>**-ебеҙ**<br>**-обоҙ**<br>**-өбөҙ** | ҡулыбыҙ<br>күҙ**ебеҙ**<br>тормош**обоҙ**<br>көн**өбөҙ** |
| | **II** | **-ғыҙ**<br>**-геҙ**<br>**-ғоҙ**<br>**-гөҙ** | бала**ғыҙ**<br>сәскә**геҙ**<br>һоҫҡо**ғоҙ**<br>өлгө**гөҙ** | **-ығыҙ**<br>**-егеҙ**<br>**-оғоҙ**<br>**-өгөҙ** | ҡулығыҙ<br>күҙ**егеҙ**<br>тормош**оғоҙ**<br>көн**өгөҙ** |
| | **III** | **-һы**<br>**-һе**<br>**-һо**<br>**-һө** | бала**һы**<br>сәскә**һе**<br>һоҫҡо**һо**<br>өлгө**һө** | **-ы,**<br>**-е,**<br>**-о,**<br>**-ө** | ҡул**ы**<br>эт**е**<br>тормош**о**<br>көн**ө** |

**2-се күнегеү.** 1-се күнегеүҙәге ҡалын менән яҙылған исемдәрҙең затын билдәләгеҙ. *Юл, һүҙ, сумка* һүҙҙәрен эйәлек заты менән үҙгәртегеҙ.

**3-сө күнегеү.** Нөктәләр урынына 2-се зат берлек ялғауҙарын өҫтәп, кәрәк ерҙә килеш ялғауҙарын ҡушып күсереп яҙығыҙ.

Ат.. йөрөшлө булһа – тояҡҡа көс,
Ҡатын.. тауышлы булһа – ҡолаҡҡа көс,
Көн.. аяҙ булһа – айға көс,
Көн.. болотло булһа – көнгә көс,
Ил... йот килһә – мал... көс,
Ил... үләт килһә – йән... көс Мәкәл..

**4-се күнегеү.** Түбәндәге таблицаға таянып, исемдәрҙең хәбәрлек категорияһы тураһында ҡағыҙә төҙөгөҙ.

| Зат | Берлек | Миҫалдар | Күплек | Миҫалдар |
|---|---|---|---|---|
| 1-е | **-мын**<br>**-мен**<br>**-мон**<br>**-мөн** | уҡыусы**мын**<br>кеше**мен**<br>башҡорт**мон**<br>төрөк**мөн** | **-быҙ**<br>**-беҙ**<br>**-боҙ**<br>**-бөҙ** | уҡыусы**быҙ**<br>кеше**беҙ**<br>башҡорт**боҙ**<br>төрөк**бөҙ** |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 2-е | **-һың**<br>**-һең**<br>**-һоң**<br>**-һөң** | уҡыусы**һың**<br>кеше**һең**<br>башҡорт**һоң**<br>төрөк**һөң** | **-һығыҙ**<br>**-һегеҙ**<br>**-һоғоҙ**<br>**-һөгөҙ** | уҡыусы**һығыҙ**<br>кеше**һегеҙ**<br>башҡорт**һоғоҙ**<br>төрөк**һөгөҙ** |
| 3-е | – | | **-лар**<br>**-лəр**<br>**-тар**<br>**-тəр**<br>**-дар**<br>**-дəр**<br>**-ҙəр**<br>**-ҙар** | уҡыусы**лар**<br>кеше**лəр**<br>башҡорт**тар**<br>төрөк**тəр**<br>урман**дар**<br>күл**дəр**<br>һүҙ**ҙəр**<br>ҡыҙ**ҙар** |

**5-се күнегеү.** Зөлфиə Ғүмəрованың "Ҡатынмын тигəн кеше" шиғырын тасуири итеп уҡығыҙ. Хəбəрлек категорияһы ялғауын ҡабул иткəн һүҙҙəрҙе табып анализлағыҙ.

**Ҡатынмын тигəн кеше.**

Йəйəүлене һоҡландырһын,
Һыбайлыны туҡтатһын
Ҡатынмын тигəн кеше!

Бахырмын тип зарланмаһын,
Батыр тиеп дан ҡаҙанһын
Ҡатынмын тигəн кеше!

Тупһаларҙа хурланмаһын,
Ҙур түрҙəрҙə ҙурланһын
Ҡатынмын тигəн кеше!

Ғаилə ҡотон һаҡлаһын,
Йəрен һөйөп туймаһын
Ҡатынмын тигəн кеше!

Мин кем тиеп шыңшымаһын,
Ерҙə ғорур йəшəһен,
Ҡатынмын тигəн кеше!

(З. Ғүмəрова)

**6-сы күнегеү.** Дөрөҫ яуаптарҙы билдəлə.

*1. Башыбыҙ*һүҙенә ниндәй эйәлек заты ялғауы ҡушылған?
А) 2-се зат берлек
Б) 2-се зат күплек
В) 1-се зат күплек

2. Ҡайһы мәҡәлдә исем эйәлек заты ялғауы ҡабул иткән?
А) Ҡыҙы бар кешегә ҡырҡ яусы килер.
Б) Еңгә – еҙ энә.
В) Килен кеше – сит бауыр.

1. Ниндәй һүҙҙә хата бар?
А) кешеһең
Б) башҡортмын
В) уҡытыусыларбыҙ

**Өйгә эш.**

1. “Башҡортостан” гәзитенән эйәлек заты ялғауы ҡушылған һүҙҙәр менән 5 һөйләм яҙып алығыҙ.

2. Тексты уҡығыҙ. Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе әйтегеҙ. Телмәрегеҙҙә хәбәрлек категорияһы ялғауҙарын ҡабул иткән исемдәрҙе лә ҡулланығыҙ.

Аллаһы Тәғәләнең рәсүле ҡатындарға яҡшы мөнәсәбәттә булырға өндәгән. «Ҡатынына иң яҡшы мөнәсәбәт күрһәтеүсе һеҙҙең арағыҙҙан иң яҡшыһы булыр», – тигән ул. «Ғәҙел кеше генә ҡатынын ихтирам итер һәм уҫал, намыҫһыҙ, ҡәбәхәт кеше генә уны кәмһетер», – тигән һүҙҙәрен еткерә Пәйғәмбәр. Диндә шулай уҡ беҙҙең бер кешенән барлыҡҡа килеүебеҙ, йәребеҙ үҙебеҙҙән булдырылыуы һәм уларҙан беҙгә балалар, ейәндәр бүләк ителеүе әйтелә. Шуны ла өҫтәп әйтке килә: берәүҙең ҡыҙы булһа, ул атаһына ожмахҡа ишек асыр. Әгәр ҡатын икән, ул иренең иманының яртыһын теүәлләр. Әгәр ул әсә булһа, ожмах уның аяғының аҫтында ятыр (Д. Ғилманов).

3. Гүзәл Ситдиҡованың “Мин – мосолман” шиғырын яттан һөйләргә әҙерләнегеҙ.

### Мин – мосолман

Динем – Ислам,
Дин – йәннәт,
Пәйғәмбәрем –
Мөхәммәт.
Изге китап

Ҡөрьәнем –
Аллаһ биргән
Йәм-йәнем.
Йома етһә,
Барыбыҙ
Ғибәҙәткә
Барабыҙ.
Манарала
Һилал – ай,
Яңы ғына
Тыуған ай;
Йондоҙо бар
Янында.
Ислам дине –
Ҡанымда!

(Г. Ситдиҡова).

**Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе.**

Ир – баш, ҡатын – муйын.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡып сығығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ. Бер үк һүҙ ни өсөн төрлө ялғауҙар ҡабул итеүен асыҡлағыҙ.

Ғаилә тормошо менән йәшәүсе һәр **ҡатын** өҫтөндә оло бурыс – ир хаҡы, уға итәғәтле булыу. Хоҙай гүзәл заттың донъялағы һәм әхирәттәге дәрәжәһен, бәхетен иренә булған мөнәсәбәте менән бәйләгән.

Бер ваҡыт Мөхәммәт пәйғәмбәргә бер ханым килә. Пәйғәмбәр **ҡатындан**:

– Һинең ирең бармы? – тип һорай.

– Эйе, – тип яуап бирә ҡатын.

Алла илсеһе:

– Иреңә ҡарата мөғәмәләң нисек? – тип ҡыҙыҡһына.

– Мин уға булған хеҙмәтемдә һәм итәғәтемдә кәмселек килтермәҫкә тырышам, – тип яуап бирә. Шул ваҡыт пәйғәмбәр **ҡатынға**:

– Иреңә булған мөнәсәбәтеңә иғтибар ит, сөнки ул – һинең йәннәтең, һинең йәһәннәмең, – тип әйтә.

Ирегеҙгә итәғәт итеүегеҙ йәннәтле итһә, итәғәтһеҙ булыуығыҙ утҡа инеүгә сәбәп булыр. Ир – хужа, ҡатын – ҡабырға. Ғаиләлә ир – ир урынында, ҡатын ҡатын булып ҡалырға тейеш. Аңлашылмаусанлыҡтар тыуғанда ла ҡатын иренә: “Ул – хужа. Һуңғы һүҙҙе хәләл ефетем әйтергә тейеш”, – тип, юл ҡуйырға бурыслы. Ир ҙә: “Өйҙә кем хужа?” – тип **катынды** ҡурҡытырға түгел, ә хужалығын ҡайғыртыусы булараҡ, хәләл ефетенә юл ҡуйырға өйрәнһен. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән лайыҡлыраҡ ир юҡ, ләкин ул йыш ҡына Ғәйшәнең йәшлеген аңлап, **катындың** ҡайһы бер ҡылыҡтарын ғәфү иткән. Бер ҡасан да ҡул күтәрмәгән.

Ерҙә хаталанмаған кеше юҡ. Шуға күрә динебеҙ кешенең яман сифаттарын түгел, ә яҡшы сифаттарын күрә белергә өйрәтә. Аллаһы Тәғәлә лә: “Улар менән яҡшы мөғәмәләлә булығыҙ. Әгәр ҙә **катында** берәй нәмәне оҡшатмаһағыҙ, әммә сабыр итһәгеҙ, Алла һеҙгә күп хәйерлек бирер”, – тигән (“Йәшлек” гәзитенән).

Һөйләмдә исемдәрҙең бүтән һүҙҙәргә төрлө ялғауҙар менән бәйләнеүе **килеш менән үҙгәреш** тип атала. Башҡорт телендә алты килеш. Шулай уҡ эйәлек һәм төшөм килештәрҙең билдәле һәм билдәһеҙ формалары бар.

| Килештәр | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Төп килештәге** исемдең һуңғы хәрефе | **Эйәлек к.** | **Төбәү к.** | **Төшөм к.** | **Урын-ваҡыт к.** | **Сығанаҡ к.** |
| Кем?<br>Нимә? | Кемдең?<br>Нимәнең? | Кемгә?<br>Нимәгә? | Кемде?<br>Нимәне? | Кемдә?<br>Нимәлә? | Кемдән?<br>Нимәнән? |
| 1. а (я), ә, ы, э, о, ө | -ның<br>-нең | -ға<br>-гә | -ны<br>-не | -ла<br>-лә | -нан<br>-нән |
| 2. л, м, н, ң, з, ж | -дың<br>-дең<br>-доң<br>-дөң | -ға<br>-гә | -ды<br>-де<br>-до<br>-дө | -да<br>-дә | -дан<br>-дән |
| 3. б, в, г, ғ, д, к, ҡ, п, с, ҫ, т, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ | -тың<br>-тең<br>-тоң<br>-төң | -ҡа<br>-кә | -ты<br>-те,<br>-то<br>-тө | -та<br>-тә | -тан<br>-тән |
| 4. ҙ, й, р, у (ю), ү, и | -ҙың<br>-ҙең<br>-ҙоң<br>-ҙөң | -ға<br>-ғә | -ҙы<br>-ҙе<br>-ҙо<br>-ҙө | -ҙа<br>-ҙә | -ҙан<br>-ҙән |

**2-се күнегеү.** 1-се күнегеүҙәге ҡалын менән яҙылған исемдең килештәрен билдәләгеҙ. Шул уҡ текстан һәр килешкә берәр миҫал табып яҙып алығыҙ.

**3-сө күнегеү.** Мәҡәлдәрҙең беренсе өлөшөнә тура килгән дауамын дөрөҫ итеп билдәләгеҙ. Төшөп ҡалған ялғауҙарҙы ҡуйып күсереп яҙығыҙ.

| | |
|---|---|
| Ир-егеттең эсен.. (ур.-в. к.) | утыҙҙа ҡылыс та ҡоймай. |
| Ир-егет өй.. (ур.-в. к.)  тыуыр, | бөкөрө ҡатын. |
| Унда уҡ юнмаған – | эйәрле, йүгәнле ат ятыр. |
| Ире барҙың – | яу.. (ур.-в. к.) үлер. |
| Булмаҫ ир.. (төб.к.) | көнө бар. |

**4-се күнегеү.** Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән исемдәргә кәрәкле килеш ялғауҙарын ҡушып, тексты күсереп яҙығыҙ. Фекер алышығыҙ.

Мосолман өйләндеме – хәләл **ефете**... сығымдарын тулыһынса ҡапларға бурыслы. Хатта ҡатыны уның үҙенән хәллерәк булған осраҡта ла. Шулай уҡ **ҡатын...** мосолман булыуы ла шарт түгел, өйләнгәнһең икән, **сығымдар**.. ҡапларға тейешһең. Әлбиттә, **ир...** кеҫәһенә лә иғтибар итергә кәрәк: ҡыҙ кейәүгә сыҡҡанға тиклем **байлыҡ**.. йәшәргә күнекһә лә, артабан ире эшләгән аҡса менән хушһынырға мәжбүр була. Ни тиһәң дә, **егет**... матди хәле алдан уҡ билдәле бит (һәр хәлдә, **ҡыҙ**... ата-әсәһе, туғандары уны **кейәү**.. бирер алдынан был хаҡта ҡыҙыҡһынырға тейеш). Әммә шуны оноторға ярамай: ғаилә бай икән, ир ҡатынына аҡсаһын йәлләргә тейеш түгел, өйөндә ярҙам итергә, йорт-ҡураны алып барыуға кеше яллау кеүек эштәр исрафҡа ла инмәй. Ябайлаштырып әйткәндә, ҡатын бер ерҙә лә эшләмәһә лә, **йорт**.. бер тин дә аҡса килтермәһә лә, **ире**... күпме аҡса эшләүен тулыһынса контролдә тоторға хоҡуҡлы (“Йәшлек” гәзитенән).

**5-се күнегеү.** Зөлфиә Ханнанованың “Эй, башҡортом!”  шиғырын тасуири уҡығыҙ.

**Эй, башҡортом!**

Эй, башҡортом, кей түбәтәй!
Эй, башҡортом, әйт аҙан!
Ата-бабалар йолаһын
Тергеҙәйек ҡайтанан!

Эй, башҡортом, йәй намаҙлыҡ!
Теләк телә сәждәлә,
Ил-йортобоҙ тыныс булыр,
Урап үтер мең бәлә.

Эй, башҡортом, тарт тиҫбеңде,
Әйт һин: “Аллаһу әкбәр!”
Киң ҡөҙрәте менән Хоҙай
Бар халҡымды бүләкләр!

Эй, башҡортом, тот ураҙа,
Эй, башҡортом, сал ҡорбан.
Йөрәгеңдә иман артһын,
Күңелеңдә – миһырбан.

Эй, башҡортом, ҡалдыр ил тип,
Доға ҡылырлыҡ бала,
Ошо изге еребеҙгә
Хужа булырлыҡ бала!
Лә иләәһә илләллаһ!
Лә иләәһә илләллаһ!

(З. Ханнанова).

**6-сы күнегеү.** Буш шаҡмаҡтарҙы тултыр.

| **Килеш** | **һорауы** | **миҫалдар** |
|---|---|---|
| төп | | доға, иман, башҡорт |
| | кемдең? нимәнең? | доғаның, имандың, башҡорттоң |
| төбәү | кемгә? нимәгә? | |
| | | доғаны, иманды, башҡортто |
| | кемдә? нимәлә? | |
| сығанаҡ | | |

**Өйгә эш.**

1. *Мосолман, дин, мәсет, йорт, саҙаҡа, мөғжизә, иғтибар, көмбәҙ* һүҙҙәрен килештәр буйынса үҙгәртегеҙ.

2. Төрлө килештәрҙә ҡулланылған исемдәрҙе мөмкин тиклем күберәк файҙаланып, берәй билдәле дин әһеле тураһында сығыш әҙерләгеҙ.

3. “Ысын мосолман ир-егетен билдәләүсе 10 сифат” тигән ҡағыҙәләр йыйылмаһы эшләгеҙ.

## СИФАТ

### Сифат тураһында дөйөм төшөнсә. Сифат дәрәжәләре.

Ололаһаң олоно, ололарҙар үҙеңде.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Гүзәл Ситдиҡованың “Йәш хужа” шиғырын тасуири итеп уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ. Уларға һорауҙар ҡуйығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

### Йәш хужа

Олатайҙың һөртөп ҡуйҙым
Ҡатаһын,
Белеп торам кистән һуңлап
Ҡайтаһын.
Йома намаҙына тиеп
Киткәйне,
Сыҡҡан саҡта маңлайымдан
Үпкәйне:
– И **инсафлы**, **мөхәббәтле**
Бала һин,
Иң **өлкән** ир булып өйҙә
Ҡалаһың,
Мин ҡайтҡанса тәртип һинең
Өҫтә, – тип, –
Бар ҡылғаның булһын **яҡшы**
Төҫтә, – тип,
Миңә бурыс һалып китте
Олатам.
Донъя көтә beләм инде,
Былайтам:
Һеңлеләргә –
Иҙән йыуыу,
Ҡустыларға –

Быҙау ҡыуыу,
Ә үҙем ярам утын,
Утын бит – өйҙөң ҡото.

(Г. Ситдиҡова).

Предметтың, йән эйәһенең, күренештең, эш-хәлдең билдәһен аңлатҡан һүҙҙәр **сифат** тип атала. Сифаттар ниндәй? ни төҫлө? ҡайһы? ҡасанғы? ҡайҙағы? һорауҙарына яуап бирә.

**2-се күнегеү**. Таблицаға таянып, сифаттарҙың аңлатҡан мәғәнәләре тураһында мәғлүмәт бирегеҙ. Тағы ниндәй билдәләр тураһында әйтергә була? Таблицаны миҫалдар менән тулыландырығыҙ.

| **Сифат предметтың, заттың төрлө билдәләрен белдерә:** | |
|---|---|
| төҫөн | ҡыҙыл яулыҡ, йәшел үлән, ... |
| күләмен | бейек тау, оҙон сәс, ... |
| тәмен | һутлы алма, әсе лимон, ... |
| формаһын | түңәрәк күл, өсмөйөшлө хат, ... |
| бер предметта икенсе предметтың булыуын йә булмауын | лимонлы сәй, итһеҙ аш, ... |
| кеше һәм хайуандарҙың эске һәм тышҡы сифаттарын | сибәр ҡыҙ, ҡурҡаҡ ҡуян, ... |
| һ.б. | ... |

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡып сығығыҙ. Фекер алышығыҙ. Ҡалын менән бирелгән сифаттарҙың яһалышына иғтибар итегеҙ. Уларҙың мәғәнә төҫмөрҙәренә төшөнөргә тырышығыҙ.

Юҡтан бар ителгән бөтә тереклек араһында **иң өҫтөн**, **иң гүзәл**, **иң шәрәфле** зат – кеше. Ҡөрьәндә был хаҡта шулай тиелгән: «Кешене **иң мөкаммәл** һүрәттә яралттыҡ (юҡтан бар иттек) («Әт-Тин» сүрәһе, 4-се аят).

«Кешегә ҡараһаң, Аллаһтың **бөйөк**, **олуғ** булыуын күрерһең. Сөнки кеше кеүек **мөкаммәл** затты ялтыуға (юҡтан бар итеүгә) бары тик Аллаһы Тәғәлә генә һәләтле»,– тигән Ислам ғалимдары.

**Мөкаммәл** зат кешене хөрмәт итеү – һәр кемдең бурысы. Тимәк, кеше бер-береһенә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтергә тейеш. Бигерәк тә ололарға **ихтирамлы**, **иғтибарлы** булыу – мосолмандың әхлаҡ ҡанунына әйләнергә тейеш.

Ололарҙы хөрмәтләү сауап килтерә, ололарға ихтирамлы булыу бәрәкәтендә Аллаһы Тәғәлә донъябыҙҙың тыныслығын арттыра. Аллаһы Тәғәлә **саф** күңелле кешеләрҙең доғаһын ишетеп, кешеләргә мәрхәмәт ҡыла, ризыҡтарын бәрәкәтләндерә.

Бер мәжлестә пәйғәмбәребеҙгә бер сынаяҡ шәрбәт тәҡдим иткәндәр. Пәйғәмбәребеҙ уны ҡулына алған да Әбү Ғөбәйҙә исемле иптәшенә һонған. Әбү Ғөбәйҙә йәшкә пәйғәмбәребеҙҙән **олораҡ** булған.

Әбү Ғөбәйҙә: «Эй, Аллаһтың илсеһе, беренсе булып үҙең эс, һин пәйғәмбәрһең бит, минән **лайыҡлыраҡһың**»,– тигән. Пәйғәмбәребеҙ уға: «Һин эс. Бәрәкәт – ҡарттарыбыҙҙа»,– тигән (“Күркәм холоҡ” дәреслегенән).

**4-се күнегеү.** Таблицаларҙы иғтибар менән өйрәнегеҙ. Һөҙөмтә яһағыҙ. Ҡағиҙә сығарығыҙ. Икенсе таблицаны үҙегеҙҙең миҫалдарығыҙ менән тулыландырығыҙ. Бөтә сифаттарҙы лә дәрәжә менән үҙгәртеп буламы?

| **Дәрәжә** | **форма** | **миҫал** |
|---|---|---|
| Төп | – | бәләкәй, ҡара |
| сағыштырыу | -раҡ/-рәк, -ыраҡ/-ерәк, -ораҡ/-өрәк | бәләкәйерәк<br>ҡараraҡ |
| артыҡлыҡ | төп сифаттың беренсе ижегенә –п/-м өндәре ҡушыла | бәп-бәләкәй, ҡап-ҡара |
| | бик, үтә, иң, сөм, ифрат, бигерәк, ғәжәп, уғата | үтә бәләкәй, сөм ҡара |
| | төп дәрәжәләге сифатты сығанаҡ йәки эйәлек килештәрҙә ҡуйып ҡабатлау | бәләкәйҙең бәләкәйе, ҡаранан ҡара |
| аҙһытыу | беренсе ижек аҙағына –ғылт/-гелт, -ҡылт/-келт, -ғылтым/-гелтем, -ҡылтым/-келтем, -һыу/-һеү, -һыл/һел, -ылтым/-елтем ялғауҙары ҡушыла | ҡараһыу |
| | ғына, генә, ҡына, кенә | бәләкәй генә |

| Сифат дәрәжәләре | | | |
|---|---|---|---|
| **төп** | **сағыштырыу** | **артыҡлыҡ** | **аҙһытыу** |
| аҡ | ағыраҡ | ап-аҡ | аҡһыл |
| гүзәл | гүзәлерәк | иң гүзәл | – |
| йәш | йәшерәк | бик йәш | йәш кенә |
| | | | |
| | | | |
| | | | |

**5-се күнегеү.** Төрлө дәрәжәләге сифаттарҙы әүҙем ҡулланып, “Өләсәйемдең өйөндә” тигән ҙур булмаған текст яҙығыҙ.

**6-сы күнегеү.** Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Сағыштырыу дәрәжәһендә торған сифат
А) йәшкелт
Б) йәшерәк
В) һомғол

2. Артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифат
А) аҡ ҡына
Б) боронғо
В) ғәжәп матур

3. Сифатты табығыҙ
А) элек
Б) элекке
В) электричество

4. Сифаттың һорауы
А) кемдә?
Б) ҡайһы?
В) ниңә?

5. Ниндәй һүҙ төшөп ҡалған?

Олатайымдың ... һүҙҙәре күңелемдә мәңге һаҡлана.

А) бөҙрә

Б) аҡыллы

В) йомарт

**Өйгә эш.**

1. *Остаз, имам, китап, ҡартлыҡ* һүҙҙәренә мөмкин тиклем күберәк сифаттар табып яҙығыҙ.

2. Тексты дәфтәрегеҙгә күсереп яҙығыҙ, сифаттарҙың ниндәй дәрәжәлә ҡулланылыуын билдәләгеҙ.

Сәйфулла олатай иртәнге намаҙҙан һуң ауыл тирәһенә сығып йөрөп килергә булды. Урман артынан иренеп кенә һарғылт ҡояш күтәрелә. Аҡһыл күк йөҙө бөгөн үтә матур булып күренде ҡартҡа. Ҡар күп кенә яуҙы быйыл. Ап-аҡ юрғанын ябынған ер яҙғаса йоҡоға талған. Урман эсе яп-яҡты. Төрлө йәнлек эҙҙәре иҫ киткес матур семәр кеүек күренә. Сәйфулла олатай тәбиғәт хозурлығына бик оҙаҡ һоҡланып торҙо.

3. “Ололарға иғтибарлы булайыҡ” темаһына фоторепортаж әҙерләгеҙ.

## Төп һәм шартлы сифаттар.

Бала табыу – бер ҡыйын, бала бағыу – мең ҡыйын.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты иғтибар менән уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән яҙылған сифаттарҙың ниндәй мәғәнә белдереүен билдәләгеҙ. Уларҙы дәрәжәләр менән үҙгәртегеҙ. Һығымта яһағыҙ.

### Ожмах сәскәләрен тәрбиәләү серҙәре.

Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ ғәләйһиссәләм балаларҙы был тормоштоң ожмах сәскәләре тип атаған, һәр саҡ сабыйҙарға ихтирамлы булған. Уларҙы айырмай, бөтәһенә лә бер тигеҙ ҡараған, бәләкәстәр менән шаярырға, уйнарға яратҡан. Өфө ҡалаһынан Илмира Арыҫланова ла тәрбиә эшендә хәҙистәргә таяна. Хоҙай Тәғәлә уға береһенән-береһе **матур** бер ҡыҙ һәм ул бүләк иткән.

– Ислам динендә балаларҙы тәрбиәләү еңелерәк, сөнки Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ **дөрөҫ** тәрбиә биреү серҙәрен өйрәтеп ҡалдырған. Иң мөһиме – сабыйҙарҙы ысын күңелдән яратыу. Ғаиләбеҙҙә балаларҙы айырмайбыҙ. Уларға тигеҙ ҡарап, теләктәрен иҫәпкә алып тәрбиәләйбеҙ. Баланың кем

булып үçеүе, киләсәктә ниндәй тормош юлын һайлауы тәрбиәгә бәйле. Намаҙ уҡығанда ла улар беҙҙең менән, улыбыҙ өйҙә аҙан ҡысҡырып йөрөй. Кисен балаларға әкиәт һөйләйбеҙ. Нурсолтан өсөн атай тәрбиәһе мөһим. Ҡыҙым Ғәйшә минең ҡарамаҡта. **Төшкө** аш-һыу әҙерләгәндә үҙенсә ярҙам итергә маташа, – ти Илмира.

Йома көндәрен йәш ғаилә мотлаҡ мәсеткә барып, өйҙә **тәмле** былау бешереп, **еҙ** самауырҙан сәй эсеп, күстәнәстәр өләшеп үткәрәләр. Ә ял көндәрендә иһә Арыҫлановтар өсөн туғандары менән осрашыу, аралашыу ғаилә йолаһына әүерелгән. **Йәйге** селлә лә, **көҙгө** ямғыр ҙа, **ҡышҡы** ыжғыр буран да быға ҡамасау була алмай.

Илмира Арыҫланованың **оҫта** хужабикә, ире өсөн **һөйөклө** ҡатын, ә балаларына **хәстәрлекле** әсәй икәне **нурлы** йөҙөндә сағыла. Яҡындарыңа ҡарата һөйөү, йәшәүгә дәрт бер ҡасан да һүрелмәһен! (И. Ҡолбахтина).

Сифаттар, предметтың билдәһен ниндәй яҡтан белдереүҙәренә ҡарап, **төп** һәм **шартлы** сифаттарға бүленә. Төп сифаттар туранан-тура предметтың билдәһен белдерә: аҡ сәскә, яҡшы кеше, тәртипле бала. Шартлы сифаттар предметтың билдәһен урынға, ваҡытҡа һәм башҡа предметтарға мөнәсәбәте аша белдерә: таш йорт, йәйге көн, аяҡтағы итек, көмөш балдаҡ һ.б. Шартлы сифаттар дәрәжә менән үҙгәрмәй.

**2-се күнегеү**. Бирелгән сифаттарҙы ике бағанаға күсереп яҙығыҙ: төп һәм шартлы сифаттар. Дүрт һөйләм төҙөгөҙ.

Ҙур, түңәрәк, һалҡын, әҙәби, һоро, яңы, иркен, шаҡмаҡлы, зирәк, аҡһаҡ, яҙғы, тарихи, ҡыҙыу, текә, һуңғы, ҡышҡы, йомшаҡ, оло, матур, аҫыл, ебәк, йәйге, күләмле.

**3-сө күнегеү.** Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ урынлаштырып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.

1. балаларығыҙҙы булырға үҙегеҙҙең өйрәтегеҙ тәртипле өлгөлә

2. ҡора балалар нимә ғаиләһен дә саҡтан күреп үҙҙәренең шулай бәләкәй ғаиләлә үçһә

3. һуңынан тәрбиәләргә уларға ваҡыт үпкәләмәгеҙ балаларығыҙҙы тапмаһағыҙ

**4-се күнегеү**. Түбәндәге тексты уҡығыҙ. Фекер алышығыҙ. Төп һәм шартлы сифаттарҙы билдәләгеҙ.

Тап бөгөн бала күңеленә башҡортлоҡ тойғоһо һалыу, тел ҡәҙерен белергә өйрәтеү – рух тәрбиәһендә иң мөһимелер.

Үҙ-ара мөмкин тиклем күберәк аралашып йәшәү, милли рухтың сая һаҡсылары булған зыялылар менән йышыраҡ осрашыу, алһыҙ-ялһыҙ тырышып эшләгән рухлы шәхестәребеҙҙең хеҙмәтен күреп баһалау, милләтенә, туған халҡына йөрәгендә оло ихтирам йөрөткән балаларыбыҙҙы дәртләндереү, башҡорт телен өйрәтеүҙе фәнни нигеҙҙә ҡороп, алдынғылар рәтенә сығарыу, һәр баланың һәләтен үҫтереү, халыҡ педагогикаһына, дингә таяныу – рухи тәрбиә биреүҙә этәргес көс ул. Үҙ ғәмәлдәреңә ҡарата дөрөҫ, ғәҙел баһа биреү, изгелеккә, таҙалыҡҡа, илһөйәрлеккә, телһөйәрлеккә ынтылыу һәм үҙ артыңдан балаларыңды әйҙәү – рухилыҡтың асылы

Балалар – киләсәгебеҙ, уларға әхлаҡи һәм патриотик тәрбиә биреү, тыуған илдең матурлығын, уға ҡарата ихтирам һәм ғорурлыҡ хистәре уятыу – беҙҙең бурыс (Й. Кәримова).

**5-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Сифат һүҙ төркөмө нимәне белдерә?
2. Зәңгәр, бәләкәй, йоҡа һүҙҙәрен сифат дәрәжәләре менән үҙгәртегеҙ.
3. Төп һәм шартлы сифаттарҙың айырмаһы нимәлә?

**Өйгә эш.**

1. Р. Фәхретдиновтың “Балаларға нәсихәттәр”ен уҡығыҙ, үҙ фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.

2. “Мин баламды нисек тәрбиәләйәсәкмен” тигән темаға 7-8 слайдтан тоған презентация әҙерләгеҙ.

3. Тәрбиә тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?

## Телмәр үҫтереү дәресе.
## Инша яҙыу.

Аллаһты таныу ғилеменә эйә булған кеше Уның ризалығына лайыҡ булып, ҡулынан да, теленән дә бер кем зыян күрмәҫлек итеп йәшәй белә, тиелә бер хәҙистә. Бөгөнгө көнгә был фекер тура киләме? Шул турала уйланып, әҙәбиәттән, ваҡытлы матбуғаттан миҫалдар килтереп, инша яҙығыҙ.

## Ҡылым.
## Ҡылым тураһында дөйөм төшөнсә. Хәбәр һөйкәлеше.

Кеше өсөн иң ҙур бәхет – кешеләргә бәхет килтереү.
Р. Фәхретдинов.

**1-се күнегеү.** Бирелгән тексты уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын билдәләгеҙ. Ҡағыҙә сығарығыҙ.

Кеше элек-электән бәхетле булырға **хыялланған**, **өмөтләнгән** һәм **тырышҡан**. Әҙәм балалары бер иш кенә түгел, шуға һәр кем бәхет төшөнсәһен төрлөсә **аңлай**. Ҡайһы берәү өсөн бай булыу мөһим, икенселәрҙең – тамағы туҡ, өҫтө бөтөн икән, шул **етә**. Өсөнсөләр иһә һис ни менән **ҡәнәғәтләнмәй**.

Ә мосолман өсөн фани донъяла ғына бәхетле булыу **етмәй**, ул мәңгелек әхирәттәге, ысын донъялағы бәхеткә **ынтыла**. Әлбиттә, барлыҡ дин тотоусылар өсөн иң мөһим оло бәхет – иманлы булып йәшәү һәм баҡыйлыҡҡа күскәндә мосолман булыу. Сөнки иманһыҙ, кафыр булып йәшәү һәм үлеү – иң ҙур гонаһ, бәхетһеҙлек.

Әгәр ҙә кеше ҡырын эш ҡыла икән, йән тыныслығын **юғалта**. Күңел тыныслығы тапмайынса бәхеткә ирешеү мөмкин түгел. Уны боҙа торған ҡайһы бер ғәмәлдәр бар: ул гонаһ эшләү, көнләшеү, өмөтһөҙлөккә бирелеү һ.б. Гонаһ, ысынлап та, кешене бәхеттән **мәхрүм итә**, уға ниғмәт ишектәрен **яба**. Әҙәм балаһы боҙоҡлоҡтар ҡыла торғас, был уның ғәҙәтенә **инә**.

Пәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм **әйткән**: «Кеше гонаһ ҡылыу сәбәпле ризыҡтан мәхрүм **ителер**, тәҡдирҙе бары тик доға ғына үҙгәртер һәм ғүмерҙе ни бары изгелек кенә **арттырыр**» (Ф. Ғайсина).

Кешеләрҙең, предметтарҙың эш-хәрәкәтен, хәл торошон аңлатҡан һүҙ төркөмө **ҡылым** тип атала. Уның бер нисә морфологик категорияһы бар: 1) һөйкәлеш, 2) зат, 3) һан, 4) йүнәлеш, 5) күләм.

Хәбәр һөйкәлеше эш-хәрәкәтте, процесты аңлата. Ул заман, зат, һан менән үҙгәрә.

**Хәҙерге заман** эш-хәрәкәттең хәҙерге ваҡытта эшләнеүен йә эшләнмәүен белдерә: *бара, әйтеп тора, ултыра, һөйләй, тыңламай.*

**Үткән заман** эш-хәрәкәттең һөйләү ваҡытына тиклем булғанлағын, эшләнгәнлеген-эшләнмәгәнлеген аңлата: *һөйләне, яҙған, әйткәйне, ултырған ине, торғайны, ҡайтманы.*

**Киләсәк заман** эш-хәрәкәттең, хәлдең һөйләү ваҡытынан һуң эшләнәсәген, буласағын йәки булмаясағын белдерә: *әйтер, һөйләр, әйтәсәк, әйтмәйәсәк.*

**2-се күнегеү.** 1-се күнегеүҙәге ҡылымдарҙы өс төркөмгә бүлеп яҙығыҙ. Беренсе төркөмдә үткән заман, икенсеһендә – хәҙерге заман, өсөнсөһөндә – киләсәк заман ҡылымдары булһын.

**3-сө күнегеү.** Тасуири уҡығыҙ. Эстәлеге буйынса фекер алышығыҙ. Шиғырға ниндәй исем бирер инегеҙ? Текстан барлыҡ һәм юҡлыҡ формаһындағы ҡылымдарҙы табығыҙ. Юҡлыҡ формаһының яһалыу рәүешен билдәләгеҙ.

Эй Аллаһым, иҫәнлек бир,
Һаулығымдан айырма.
Ауыр һынауҙар ебәреп,
Ҡанатымды ҡайырма.
Эй Аллаһым, сабырлыҡ бир,
Йөрәгемде талдырма.
Бәхет өләшкән сағында
Мине ситтә ҡалдырма.
Эй Аллаһым, иман бирсе,
Тура юлдан яҙҙырма.
Шайтан ҡотҡоһонан ҡоткар,
Бик иркәләп аҙҙырма.
Эй Аллаһым, тыныслык бир,
Ҡайғы-хәсрәт һалдырма.
Рәхмәтеңдән, шәфҡәтеңдән,
Ярҙамеңнән ҡалдырма (Р. Зәйнуллина).

**4-се күнегеү.** 1) Терәк һүҙҙәргә таянып, таблицаны тултырығыҙ. 2) *Йәшәргә, өмөтләнергә* ҡылымдарын барлыҡ һәм юҡлыҡ формаһында зат һәм заман менән үҙгәртегеҙ. Парлап эшләгеҙ. Берегеҙ барлыҡ, икенсегеҙ юҡлыҡ формаһын яһаһын.

| зат / заман | Хәҙерге заман | Шаһитлы үткән заман (ни эшлә**не**?) | Шаһитһыҙ үткән заман (ни эшлә**гән**?) | Киләсәк заман |
|---|---|---|---|---|

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Мин | ышанам | | | |
| Һин | | ышандың | | |
| Ул | | | ышанған | |
| Беҙ | | | | ышанырбыҙ |
| Һеҙ | | | | |
| Улар | | | | |

**5-се күнегеү.** Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Шаһитлы үткән заман формаһын яһаусы ялғауҙар:
а) -ҙы/ -ҙе, -ҙо/-ҙө, -ды/-де, -до/-дө
б) -ған/-гән, -ҡан/-кән
в) -ның/-нең, -тың/-тең

2. Ҡылымдың морфологик категориялары:
а) килеш, һан, эйәлек
б) дәрәжә, төркөмсә, хәбәрлек
в) зат, һан, заман

3. Киләсәк заман формаһындағы ҡылымдарҙы күрһәтегеҙ:
а) бара, килә, оса
б) барыр, килер, осасаҡ
в) барҙы, килгән, осто

**Өйгә эш.**

1. Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Хәҙерге заман формаһында ҡулланылған ҡылымдарҙы табығыҙ.

Аллаһы Тәғәлә йомшаҡ күңелле атайҙарға – ҡыҙ бала, ғәйрәтле атайҙарға ир бала бүләк итә. Шөкөр, ғаиләбеҙ ишле. Ғаиләлә бер бала булһа, ул туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен күрмәй, ата-әсә хеҙмәтен файҙаланып ҡына үҫә. Бар иғтибарҙы, хөрмәтте татыған был сабый эгоисҡа әйләнеп, олоғайғас та шул ярҙамды көтә. Ишле ғаиләләрҙә балалар бер-береһен яҡлап, берҙәм булып үҫә. «Яңғыҙҙың яны юғалһа ла табылмаҫ, күмәктең уғы юғалһа ла табылыр», тигән бик тапҡыр әйтем дә бар беҙҙең халыҡта. Ҡыҙҙарыбыҙ Тәнзилә, Айгөл, Гүзәл йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне – юғары уҡыу йорттарын уңышлы тамамлап, үҙ һөнәрҙәре буйынса эшләп йөрөйҙәр. Кесебеҙ Миләүшә, мәктәпте алтын миҙалға тамамлап, Өфө нефть-техник

университетында белем ала. Ҡала мөхитендә үҫһәләр ҙә, ике телде лә берҙәй яҡшы беләләр. Тәрбиәнең эталоны юҡ, ул күп ҡырлы. Бәғер емештәребеҙгә тәрбиә биреү ғүмер буйына бара. Ғаиләлә ата-әсә мөғәмәләһе, татыулыҡ – бала өсөн дәрес. Бала бәхетле булып үҫһен, ата-әсәһенә ҡыуаныс килтерһен өсөн, күңелендә рух тойғоһон үҫтереп, иман орлоҡтары һалып, мәрхәмәт һәм шәфҡәт менән үҫтерә белергә кәрәк (Н. Ниғмәтуллин).

2. Үрҙә бирелгән текстағы бөтә ҡылымдарҙы ла киләсәк заман формаһына ҡуйып уҡығыҙ.

3. Бәхет тураһында башҡорт халҡының ниндәй мәҡәл һәм әйтемдәре бар? “Нимә ул бәхет?” темаһына, башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен ҡулланып, 10 һөйләмдән дә кәм булмаған сығыш әҙерләгеҙ.

## Ҡылымдың бойороҡ, шарт, теләк, ниәт-маҡсат һөйкәлештәре.

Хәләл бәхет кенә йәнгә дауа.
Й. Баласағуни.

**1-се күнегеү.** Динә Талхинаның “Өләсәйем васыяттары” шиғырын уҡып сығығыҙ. Ҡалын менән айырып бирелгән ҡылымдарҙың мәғәнә төҫмөрөнә төшөнөргә тырышығыҙ. Бойороҡ һөйкәлешендәге ҡылым формалары тураһында ҡағыҙә уйлап әйтегеҙ.

### Өләсәйем васыяттары

Ал таңдарҙы, балаҡайым, бисмилла менән **башла**,
Аш менән яуап бирәләр атылған яуыз ташҡа.
Йоҡоларға талған саҡта рәхмәт **уҡы** Хоҙайға,
Ҡөҙрәте уның һәр ҡайҙа, хатта бөртөк бойҙайҙа.
Иртән торғас, урының **йый**, шайтан аунап **ятмаһын**,
Үҙҙәренә етмәҫ аңды һиңә бер кем **һатмаһын**.
Ашағас та ҡашыяҡ **йыу** – шайтан ялап **ҡуймаһын**,
Сама белеп **һөйлә** һүҙҙе – һине кеше **тыймаһын**.
Мыжыҡ **булма**, илаҡ **булма**, өйҙөң ҡотон **ебәрмә**,
Үпкәләрҙе **һөйлә**, балам, бары иҫкән елдәргә.
Тандар менән, балаҡайым, Хоҙайҙан бәхет **һора**,
Насар төштәр күрһәң дә гел, яҡшыға ғына **юра**.
Рәхмәт **уҡы** Хоҙайға, тыныс таңдар атҡанға,
Күҙен асып кинәнеп яңы көнгә баҡҡанға.
Дөрөҫ һүҙҙәр **һөйлә**, балам, ялғанды Хоҙай һөймәй,

Хоҙай һөймәгән әҙәмгә, бел, балам, бәхет теймәй.
Кеше йәшен **алма**, балам, уйлап **һөйлә** һүҙеңде,
Был донъяла көслө түгел, еңә, балам, түҙемле.
Көйөнөстәр – ҡайғы түгел, түҙемлегеңде **юйма**,
**Йырлап та ал**, **илап та ал**, һағышты эскә **йыйма**.
Ҡамыр ҡуйһаң, йырлап **ҡуй**, йырлы ризыҡты тик **йый**,
Табын әҙерләгән мәлдә **уйлай күрмә** ҡара уй.
**Уйла** һәр саҡ изге уй! (Д.Талхина).

Ҡылымдың **бойороҡ һөйкәлеше** формалары бер кешенең икенсе кешегә ниндәй ҙә булһа бер эш-хәлде башҡарырға бойороуҙы, ҡушыуҙы, талап итеүҙе, теге йәки был эште эшләргә рөхсәт биреүҙе, үтенеүҙе, мөрәжәғәт итеүҙе, өндәүҙе, кәңәш итеүҙе белдерә. Ул зат һәм һан менән үҙгәрә:

| | | | |
|---|---|---|---|
| мин | – | беҙ | – |
| һин | уҡы, һөйлә | һеҙ | уҡығыҙ, һөйләгеҙ |
| ул | уҡыһын, һөйләһен | улар | уҡыһындар, һөйләһендәр |

**2-се күнегеү.** 1-се күнегеүҙән өс бойороҡ һөйкәлеше формаһындағы ҡылымды зат һәм һанда үҙгәртегеҙ.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Бәхетле булыу өсөн ниндәй шарттарҙы үтәү мөһим булыуы хаҡында фекер йөрөтөгөҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән ҡылым формалары ниндәй һөйкәлешкә ҡарауын билдәләгеҙ. Ҡағыҙә сығарығыҙ.

Көнләшеү – кеше бәхетен юҡҡа сығарыусы сифат. Әгәр әҙәм балаһы башҡа кеше ниғмәттәренең үҙендә булыуын **теләһә**, ул Аллаһ Тәғәләнең ҡарары менән риза булмай, тигәнде аңлата. Рәсүлебеҙ былай тигән: «Көнләшеүҙән һаҡланығыҙ, сөнки ут утынды юҡ иткән кеүек, көнләшеү ҙә изгелектәрҙе юҡҡа сығара».

Кеше һәр нәмәлә **шикләнһә**, барыһын да гел насарға **юраһа**, күңел төшөнкөлөгөнә бирелә. Хаҡ мосолман Раббыһынан тик яҡшыны ғына өмөт итергә тейеш. Ысынлап та, Аллаһ Тәғәлә кешегә был донъяла һәм әхирәттә шатланыр өсөн күп ниғмәттәр бирә, беҙгә тик шөкөр итергә һәм ҡыуанырға ғына кәрәк.

Һәр кем үҙенең ағзаларының сәләмәтлегенә, күҙенең күреүенә, ҡолағының ишетеүенә, аяҡтарының йөрөүенә ҡәнәғәт **булһа**, бәхеткә ирешә алыр. Даими рәүештә ризаһыҙлыҡта **ҡалһа**, **зарланһа**, борсоуға һәм

ҡурҡыуға дусар булыр. Һәр ваҡыт Аллаһты иҫләп зикер әйтеп, доғалар ҡылып **йөрөһә**, әҙәм балаһы йән тыныслығын тойор, бәхетле булыр.

Ҡөрьәндә: «Иман килтергән кешеләрҙең күңелдәре Аллаһты иҫкә төшөргән ваҡытта тыныслана, иман килтергән һәм изгелек ҡылғандарға рәхәтлек һәм яҡшы урын», – (13: 28-29) тиелгән (Ф.Ғайсина).

**Шарт һөйкәлеше** эш-хәлдең билдәле бер шарт булғанда ғына үтәлеү-үтәлмәүен белдерә. Шул шарттарҙы белдергән ҡылымдар шарт һөйкәлеше формаһында бирелә. Ул нигеҙгә *–ha/-hә* аффикстары ҡушылыу юлы менән яһала: *яҙһа, йөрөһә.* Шарт һөйкәлешенең аналитик формалары ла бар: *алған булһа, алыр булһа, алһа икән* һ.б.

| | | | |
|---|---|---|---|
| мин | йөрөһәм, барһам | беҙ | йөрөһәк, барһаҡ |
| һин | йөрөһәң, барһаң | һеҙ | йөрөһәгеҙ, барһағыҙ |
| ул | йөрөһә, барһа | улар | йөрөһә(ләр), барһа(лар) |

**4-се күнегеү.** Парлап эшләгеҙ. Берегеҙ түбәндәге миҫалдарҙа ҡулланылған шарт һөйкәлешендәге ҡылымдарҙы 1-се зат берлек формаһына, икенсегеҙ – 3-сө зат күплеккә ҡуйып, һөйләмдәрҙе тулыһынса уҡып күрһәтһен.

1. Кем дә кем «Бисмилләһир-рахманир-рәхим» тип берәр сихыр, боҙоҡ өҫтөнә 487 мәртәбә уҡып өрһә, ул сихыр үҙ көсөн юғалтыр.

2. Кем дә кем «Бисмилләһир-рахманир-рәхим»де 487 мәртәбә уҡып теләһә, Аллаһ Тәғәлә уға һорағанын бирер.

3. Кем дә кем «Бисмилләһир-рахманир-рәхим»де көн һайын 100 мәртәбә уҡып торһа, Аллаһ Тәғәлә уға ҡайһы бер серҙәрҙе асыр, күренмәҫ нәмәләрҙе күрһәтер.

4. Мөхәррәм айының беренсе көнөндә «Бисмилләһир-рахманир-рәхим»де 130 мәртәбә яҙып, шуны янығда йөрөтһәң, ҡайғыға осрамаҫһың.

5. «Бисмилләһир-рахманир-рәхим» ауырыу кеше өҫтөндә өс көн дауамында 100-әр мәртәбә уҡылһа, уға шифа килер.

(«Һәфтиәк шәриф тәфсире» китабынан тәржемәләнде).

**5-се күнегеү.** Кешенең берәй эш-хәлде эшләргә, башҡарырға йәки башҡармаҫҡа булған теләген, ынтылышын, самаһын, ниәтен, уй-маҡсатын һәм хыялын белдергән ҡылым формалары **теләк һөйкәлеше**ндә килә. Түбәндәге шиғыр юлдарында теләк һөйкәлешендә килгән ҡылымдарҙы билдәләгеҙ.

1. Батыр күрһәм, шул батырлыҡ тигән
Тауға менгем килде.
Дан ҡапҡаһы күрһәм, шул ҡапҡаны
Шаҡып ингем килде (М.Кәрим).
2. Шат күңелем ҡылдарында
Уйнап алайым әле,
Ерем йәмен, халҡым ғәмен
Көйгә һалайым әле (Н. Хәбиров).
3. Хоҙайымдың рәхмәтенә
Мин лайыҡ булһам ине,
Аллам, тиеп типкән йөрәк
Иманға тулһа ине (Т.Кәримова).

**6-сы күнегеү**. Ҡалын хәреф менән бирелгән ниәт-маҡсат һөйкәлешендәге ҡылымдарға айырыуса иғтибар итеп, тексты уҡып сығығыҙ. Уларҙың мәғәнәләрен асыҡлағыҙ, яһалыу юлдарын билдәләгеҙ.

Зифа ханым иртәнге намаҙҙан һуң бер туған Ғәйшә апаһына **бармаҡсы булды**. Ғәйшә апайҙың бөгөн тыуған көнө. Юл ыңғайы ауыл кибетенә инеп, матур ғына берәй бүләк **алмаҡсы**. Сәй табынына үҙе бешергән баллы сәк-сәген дә **куймаҡсы**, туғанына матур теләктәрен **теләмәксе ине** Зифа ханым. Әммә, Аллаһы бойорһа, тип ниәтләмәнеме икән, уйлағандары тормошҡа ашманы. Намаҙын уҡып бөтөп, намаҙлығын йыйыштырып ҡына йөрөй ине, күрше Хәмиҙә инәй килеп инде. “Күршекәйем, Зифаҡайым, зинһар, ярҙам ит! Бәхетле булғырым, рәхмәт яуғырым! Эййй, ҡартлыҡ тигәнең...”– тип, әбей ялбарып ҡараны. Зифа уны түргә **саҡырырға булғайны**, күршеһе үтә ашығыуын белдерҙе. Һыйырын **һаумаҡсы булып** аҙбарға инһә, тегеһенең елене шешеп, үҙенә яҡын да ебәрмәүен һөйләп бирҙе. Ауылдың үрге осонда йәшәгән мал табибын саҡырып килтереүен үтенде (А. Йомағолова).

**7-се күнегеү.** Түбәндәге таблицаны тултырығыҙ. Тәҡдим ителгән ҡылымдарҙы затта һәм һанда үҙгәртегеҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| **мин** | | **беҙ** | |
| **һин** | күр, күрһәң, күргең килә, күрмәксеһең | **һеҙ** | |
| **ул** | | **улар** | |

**Өйгә эш.**

1. Үҙегеҙ уйлап “Бәхетле булғым килә” тигән кинофильмдың сюжетын ҡыҫҡаса яҙығыҙ.

2. Шарт һөйкәлешендәге ҡылымдар менән 5 мәҡәл табығыҙ.

3. “Ынйы бөртөктәре” башҡорт афоризмдары китабынан бәхет тураһындағы аҡыллы фекерҙәр менән танышығыҙ. Оҡшаған өсәүһен ятлап алығыҙ.

## Ҡылым төркөмсәләре.

Нәфсеһенә эйәргән – шайтанға эйәрер.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Түбәндәге текста ҡалын хәрефтәр менән айырымланып бирелгән һүҙҙәр ҡылым төркөмсәләренә ҡарай. Шуларға айырыуса иғтибар бүлеп, яһалыу юлдарына иғтибар итеп, мәҡәләне уҡып сығығыҙ, фекер алышығыҙ.

### Бәхеткә илтеүсе бер юл

Пәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә күңел тыныслығы, донъя бәхете **һораған**, хәсрәттәрҙән **котолоу** өсөн юл **эҙләгән** бер сәхәбәһенә: “Донъянан **булған** әйберҙәрҙән ваз кис. Донъянан ваз кис, Аллаһ Тәғәлә һине һөйөр. Кешеләр **ирешкән** байлыҡ, дәрәжәләрҙән ваз кис. Күңелеңдән сығар уларҙы, кешеләр һине һөйөр", – тине.

Әлеге хәҙистең мәғәнәһе бик тәрән. Аллаһ Тәғәлә беҙгә ике нәмә биргән: аҡыл һәм нәфсе. Әгәр ҙә беҙ нәфсебеҙҙе **күрә** алһаҡ, аҡыл менән шул нәфсегә ҡаршы **көрәшә** алһаҡ, донъяла күп нәмәгә һәм шулай уҡ Аллаһ Тәғәләнең мөхәббәтенә **өлгәшә** аласаҡбыҙ. **Туймаҫ** нәфсебеҙ беҙҙе бик күп хәсрәттәргә алып килә.

Ғалимдарҙың береһе: “Нәфсе шундай нәмә ул – донъяла ялтыр-йолтор **килгән** бөтөн әйбергә бәйләнә. Бер ниәт, бер теләк, бер маҡсатты үтәй, уныһын **булдырғас**, күңелендә икенсеһе барлыҡҡа килә", – ти. Нәфсе теләгәненә **ирешкәс**, икенсеһен **теләй** башлай. Кәрәкме, кәрәк түгелме, һайыҫҡан кеүек һәр ялтырағанға ҡыҙығабыҙ, **йыйырға** тырышабыҙ. Ләкин нәфсе артынан **йөрөгән** кеше иң һуңынан, кәм тигәндә, кеше көлкөһөнә ҡала. «Нәфсенең бөтә теләктәрен **ҡәнәғәтләндерергә тырышҡан** кеше, шул нәфсе теләктәре аҫтында иҙеләсәк», –тип әйтә ғалимдар.

Бер ханым Мәрйәм әсәбеҙҙең тормошо тураһында **уҡып**, бик тәьҫирләнә. Бер ғалим янына килеп: “Минең Мәрйәм әсәбеҙ кеүек булаһым

килә. Берәр ергә **бикләнеп**, ғибәҙәт **ҡылырға**, ураҙа **тоторға** теләйем", – **тигәс**, уға был ғалим: «Һин уны **күтәрә** алмайһың. Һин донъяла йәшә, Аллаһты һөй, кешеләрҙе. Кешеләрҙең һиңә әйткән ауыр һүҙҙәрен **күтәрергә, ғәфү итергә** тырыш.

Был һинең өсөн иң ҙур ғибәҙәт булыр», – тигән. Кешеләр менән бергә **йәшәргә**, шуның менән бергә күңелдән Аллаһ Тәғәләгә булған мөхәббәте **юғалтмаҫҡа**, Раббыбыҙҙы бөтә әйберҙән өҫтөн **күрергә** кәрәк. «Аллаһты иң әҙ генә хәтеренә **алған** кеше лә мәңге хәсрәттә ҡалмаҫ», – тип әйткән Пәйғәмбәребеҙ (Мәхмүт хәҙрәт Шәрәфетдин).

**2-се күнегеү.** 1-се күнегеүҙә ҡалын хәрефтәр менән бирелгән ҡылым төркөмсәләрен түбәндәге таблицаның тейешле бағаналарына төркөмләп яҙығыҙ.

| **Исем ҡылым** | **Сифат ҡылым** | **Уртаҡ ҡылым** | **Хәл ҡылым** |
|---|---|---|---|
| Эш-хәлдең, хәрәкәттең исемен белдерә. Нимә? ни эшләү? һорауҙарына яуап бирә: *барыу, күреү* | Предметтың йә шәхестең эшләгән эше буйынса билдәһен белдерә. Ниндәй? ни эшләгән? ни эшләүсе? нимә эшләр? нимә эшләйәсәк? һорауҙарына яуап бирә: *әйткән һүҙ, уңған кеше, юлдан яҙҙырыусы әҙәм, өндәшмәҫ ҡатын, торор йорт, яҙаһы хат* | Берәй эште эшләргә кәрәклекте, тейешлекте, мөмкинлекте, ниәт иткәнлекте йәки эшләүҙән тыйыуҙы белдерә: *барырға, күрергә, бармаҫҡа, күрмәҫкә* | Төп эште белдереүсе ҡылымға өҫтәмә мәғәнә биреп, уны рәүеше яғынан асыҡлап килеүсе ҡылым формаһы:<br>1)-ып/-еп/ -оп/-өп/-п: *илап, көлөп;*<br>2) –ғас/-гәс, -ҡас/-кәс: *барғас, килгәс;*<br>3)-ҡансы/-кәнсе, -ғансы/-гәнсе: *яҙғансы, килгәнсе;*<br>4)-ҡанса/-кәнсә, -ғанса/-гәнсә: *әйткәнсә, көткәнсә;*<br>5) –а/-ә, -й: *яҙа* башла, *ашыкмай* |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | тор. |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |

**3-сө күнегеү.** Ҡылым төркөмсәләренә ярашлы дүрт төркөмгә бүленеп эшләгеҙ. Бирелгән ҡылым нигеҙҙәренән беренсе төркөм исем ҡылым, икенсе – сифат ҡылым, өсөнсө – уртаҡ ҡылым, дүртенсе хәл ҡылым яһап, һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ.

Өйрән, ышан, тот, йәшә.

**4-се күнегеү.** Ҡылым төркөмсәләренең төшөп ҡалған ялғауҙарын өҫтәп, тексты уҡығыҙ. “Нәфсе һәр кемгә лә хас сифатмы?” тигән темаға әңгәмә ҡороғоҙ.

**Нәфсе ҡоло булмайыҡ**

Ислам дине мосолманды **тыу...** көнөнән алып баҡыйлыҡҡа күскәнсе үҙ-үҙен тәрбиәләүгә йүнәлтә. Кешенең ҙур дошманы – нәфсе, уның менән көрәш иң ауыры, сөнки үҙ-үҙеңде үҙгәртеү ҡыйын. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт сАллалаһу-ғәләйһис-сәләм Табук яуынан ҡайтып килгән яугирҙарға: «Хәҙер беҙ бәләкәй йыһаттан һуң оло йыһатҡа әйләнеп ҡайтабыҙ», – тигән. Йәғни «оло йыһат» тип ул нәфсебеҙ менән көрәште күҙ уңында тотҡан. Ул үҙе Аллаһҡа: «Мине үҙ нәфсем менән һис бер мәлгә лә ҡалдырма!» – тип доға ҡылыр булған. Нәфсе кеше менән бергә йөрөй, ул һис туймай, уны бары тик ҡәбер тупрағы ғына туйҙырғанын беләбеҙ.

Нәфсе – аҡса, байлыҡ артынан **ҡыу...**, күп **йоҡла.**, артығы менән ризыҡ, әйбер **көҫә.** – гонаһҡа **батыр. тор...** һынау ул. Кеше бер тапҡыр гонаһ **ҡыл...** та, тәүбәгә килмәһә, үкенмәһә, уның йөрәгендә ҡара тап хасил булып, һәр яңы гонаһ ҡылған һайын ҡаралыҡ йөрәген **ялма.** бара. Һөҙөмтәлә ул таш бәғерле яуыз бәндәгә әүерелә. Бер тапҡыр алдашһа, урлашһа, кешегә шул яман ҡылыҡтарҙы еңеү көндән-көн ауырлаша һәм улар яйлап тамуҡҡа этәрә.

Аҡыллы кеше үҙенә **яҙ...** матди һәм рухи байлыҡтың ҡайҙан килгәнен һәм барыһының да беҙгә ваҡытлыса бүләк икәнен аңлай. Шөкөрлө булыу – изге ғәмәлдәребеҙ, телебеҙ менән рәхмәтле **булы..** Ул **бир...** һаулыҡҡа, ризыҡҡа, ғилемгә һәм башҡа ниғмәттәренә, сикһеҙ бәрәкәтенә йөрәк һәм тел менән күп шөкөрҙәр **әйт..** лазым. Ибраһим сүрәһендә: «Бына Раббығыҙ:

«Әгәр шөкөр ҡылһағыҙ, Мин һеҙгә арттырырмын, әгәр ҡәҙерен белмәһәгеҙ... Ысынлап та, минең ғазабым көслө!» – тип хәбәр итте (14:7)» (Ф.Ғайсина).

**5-се күнегеү**. Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Исем ҡылым –ғас/-гәс ялғауҙары менән яһала.
А) эйе
Б) юҡ.

2. Хәл ҡылымдың биш формаһы бар.
А) эйе
Б) юҡ.

3. *Байырға, тәккәберләнергә* һүҙҙәре сифат ҡылымға ҡарай.
А) эйе
Б) юҡ.

**Өйгә эш.**
1. Нәфсе, ҡомһоҙлоҡ тураһында сығыш әҙерләгеҙ.
2. Нәфсене ҡылыҡһырлаған 8-10 сифатты исем ҡылым формаһында яҙығыҙ. Мәҫәлән, *туймау, ...* .

## ҺАН

### Һан тураһында дөйөм төшөнсә. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе.

Мәсет бар ерҙә бәхет ишле.
Әйтем.

**1-күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һүҙҙәргә иғтибар итеп, һорауҙар бирегеҙ. Дөйөм һәм айырмалы яҡтарын асыҡлағыҙ.

Төркиәнең Ялова провинцияһы мәсетендә **37** йыл буйы дөрөҫ булмаған тарафҡа ҡарап намаҙ уҡығандар, доға ҡылғандар. Ә был кәмендә **67525** тапҡыр уҡылған намаҙ тигән һүҙ. Был хаҡта dailysabah.com хәбәр итә. Мәсет Мәккә яғына ҡарамаған булған.

Мәсет **1981** йылда төҙөлгән һәм ул дөрөҫ итеп һалынмаған булып сыҡҡан. Мәсеттең имамы әлеге хәлдән сығыу юлын тапҡан, ул мәсет эсендә намаҙ уҡыу өсөн **12** күрһәткес урынлаштырған. Юғарыраҡ дин әһелдәре әлеге яңылышлыҡты килеп тикшереп киткәндәр һәм халыҡты

тынысландырғандар. **37** йыл буйына яңылыш тарафҡа ҡарап уҡылған намаҙҙар дөрөҫ яҡҡа ҡарап уҡылган намаҙҙар кеүек үк ҡабул ителәсәк, тип халыҡты ышандырырға тырышҡандар улар (“Шоңҡар” журналынан).

Предметтың иҫәбен, уның һаналыу тәртибен белдергән һүҙ төркөмө *һан* тип атала. Ул нисә? күпме? нисәү? нисәшәр? күпмешәр? һорауҙарына яуап бирә.. Һандар килеш, эйәлек һәм хәбәрлек заттары менән үҙгәрә. Һандың төркөмсәләре бар. Һөйләм эсендә һан бөтә төр синтаксик функцияларҙа ла ҡулланыла ала: эйә менән хәбәр составында йөрөй, күләм-дәрәжә хәле, аныҡлаусы вазифаһын башҡара, һирәкләп тултырыусы ла булып килә ала.

**2-се күнегеү.** Лексик-грамматик төрҙәренә ҡарап, һан төркөмсәләрен үҙләштерегеҙ. Һәр төркөмсәгә ҡараған һандар менән һүҙбәйләнеш төҙөгөҙ.

1. Төп һандар предметтың теүәл иҫәбен белдерә. *Бер, ике, өс....*
2. Рәт һандары предметтың һаналыу тәртибен күрһәтә. *Беренсе, икенсе, өсөнсө...*
3. Йыйыу һандары предметты йыйыу иҫәбен күрһәтә. *Берәү, икәү, өсәү...*
4. Бүлем һандары предметтарҙы тигеҙ өлөштәргә бүлеүҙе аңлата. *Берешәр, икешәр, өсөшәр...*
5. Сама һандары предметтың яҡынса иҫәбен белдерә. *Бишләп, егерме тирәһе, унлаған...*
6. Кәсер һандары предметтың бөтөн һәм тулы булмаған өлөштәрен билдәләү өсөн ҡулланыла. *Дүрт бөтөн ундан һигеҙ, Ғафури урамы туғыҙ кәсер бер (9/1).*
7. Үлсәм һандары – предметтың ауырлығын, күләмен, ҙурлығын белдергән төркөмсә. *Етеле лампа, алтылы калуш.*

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Һандарҙы табығыҙ, күсереп яҙығыҙ. Уларҙың өҫтөнә нинәй төркөмсәгә ҡарағанлыҡтарын билдәләгеҙ.

“ЛӘЛӘ-ТЮЛЬПАН” – Өфө йәмиғ мәсете. Уға 1989 йылда нигеҙ һалына, 1998 йылда төҙөлөш тамамлана, 1999 йылдан алып эшләй. Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты ҡарамағында тора. Мосолман Үҙәк Диниә назараты инициативаһы бығаса сәнәғәт предприятиелары һәм айырым кешеләр аҡсаһына төҙөлә. Архитекторы В.В. Дәүләтшин. 3 ҡатлы, архитектур күләмдең нигеҙен атып ултырған ләлә сәскәһе образы тәшкил

итә. Һигеҙ яҡлы ике манара (атып өлгөрмәгән ләлә сәскәһе рәүешендә, бейеклеге 54 м) мәсеттең 3-сө ҡат кимәлендә урынлашҡан төп ишегенең алғы баҫҡысының ике яғында тора. 3‑сө ҡатта вестибюль менән ҡатын-ҡыҙҙар өсөн балконлы намаҙ залы. Намаҙ залы көнсығыш стилендә биҙәлгән: стеналарҙағы һәм витраждарҙағы үҫемлек орнаменты ожмах ағастарының сәскәләрен кәүҙәләндерә. Мәсеттең 1‑се һәм 2‑се (терраса) ҡаттарында ҡунаҡ бүлмәләре, уҡыу кабинеттары, уҡыусылар өсөн торлаҡ бүлмәләре һәм никах, исем ҡушыу йолаһын, мөхтәсибәт йыйылыштарын үткәрә торған зал урынлашҡан. Мәсет эргәһендә мәҙрәсә, балалар, өлкәндәр өсөн йәкшәмбе мәктәптәре эшләй. 1999-2005 йылдарҙа мәсеттә Рәсәй Ислам университеты урынлаша. Мәсет Өфөнөң мосолман дини үҙәге булып тора, унда мосолман байрамдары үткәрелә. Имам-хатиптары: Ғ. Вәлиев, М. Тажетдинов, А. Ғарифуллин (Р. Вәлиева).

**4-се күнегеү.** Өс төркөмгә бүленеп, кәсер, рәт, йыйыу һандарын килештәр менән үҙгәртегеҙ.

| **Килештәр** | **Һандарға бирелгән һорауҙар** | **Миҫалдар** |
|---|---|---|
| Төп | Нисә? | Егерме ике |
| Эйәлек | Нисәнең? | Егерме икенең |
| Төбәү | Нисәгә? | Егерме икегә |
| Төшөм | Нисәне? | Егерме икене |
| Урын-ваҡыт | Нисәлә? | Егерме икелә |
| Сығанаҡ | Нисәнән? | Егерме икенән |

**5-се күнегеү.** Түбәндә бирелгән дини биналар менән уларҙың адрестарын тоташтырығыҙ.

| | |
|---|---|
| «Ләлә-тюльпан» мәсете | Чернышевский урамы, 103 |
| Ислам университеты | Комаров урамы, 5 |
| Башҡортостан диниә назараты | Чернышевский урамы, 5 |

**6-се күнегеү.** Һандар дөрөҫ ҡулланылмаған һөйләмдәрҙе төҙәтегеҙ.

1. Хәҙрәткә егерме һигеҙәр йәш.

2. Беҙҙең мәктәп 3. Исмәғилев урамы, биш кәсер икенсе йортта урынлашҡан (5/1).

3. М. Кәримдең берләгән томында шиғырҙары йыйылған.

**Өйгә эш.**

1. “Өфө мәсеттәре” тигән темаға кәмендә 8 слайдтан торған презентация әҙерләгеҙ.
2. Х. Тапаҡовтың “Мәсет” хикәйәһен уҡығыҙ, фекер алышырға әҙерләнегеҙ.
3. Һан төркөмсәләренең һәр ҡайһыһы менән 2-әр һөйләм уйлап яҙығыҙ.

## АЛМАШ

### Алмаш тураһында дөйөм төшөнсә. Алмаш төркөмсәләре.

Йырсыларға ҡалыр ошо йырым,
Ҡомартҡыға ҡалыр Ҡөрьәнем.
Миндәй генә булып та ирҙәр тыумаҫмы,
Аллаһтан нур алып, иленә сәсмәҫме?

З. Рәсүлев.

**1-се күнегеү.** Нөктәләр урынына аҫта бирелгән һүҙҙәрҙе ҡуйып уҡығыҙ.

**Һәр кем үҙе өсөн яуап бирә**

Йәнегеҙ өсөн яуаплылыҡ үҙегеҙҙә. “Иғтибарлы булығыҙ, ….. үҙе һәм ҡуйылған бурыстары өсөн яуап бирәсәк. Тура юл менән барыусыға унан ситкә тайпылған зыян яһай алмаҫ”. (Изге Ҡөрьән, 5:105).

Кешеләр араһында ….. тиеүселәр бар: “….. Юғары Көскә һәм Ҡиәмәт көнөнә ышандыҡ”. Әммә ….. мөьмин түгел. Ышанабыҙ, тип әйтеп, ундайҙар Хоҙайҙы һәм уға инаныусыларҙы алдарға теләйҙәр. Әммә ..... алдағандарын ғына аңламайҙар”. (Изге Ҡөрьән, 2:8, 9). (Имам Ш. Әләүетдиновтың “Камиллыҡҡа һәм иманға юл” китабынан).

**Таяныс һүҙҙәр:** Беҙ, һәр кем, ошолай, үҙҙәрен, улар.

Алмаш – предметты, уның эшен, билдәһен атаусы һүҙ төркөмө түгел. Ул исем, сифат, һан, рәүештәрҙең урынына ҡулланыла.

Мәғәнәләре буйынса алмаштар ете төркөмсәгә бүленә:

1. **Зат**: *мин, һин, ул, беҙ, һеҙ, улар.*
2. **Күрһәтеү:** *был, теге, ошо, ундай, шул тиклем, шулай һ.б.*
3. **Һорау:** *кем, кемдеке, күпме, нисә һ.б.*
4. **Билдәләү:** *һәр бер, һәр сак, бөтә, үҙ һ.б.*

5. **Билдәһеҙлек:** *әллә ҡасан, әллә ниңә, әллә кем, теләһәниндәй, нимәлер, ҡасандыр, нисектер һ.б.*

6. **Юҡлыҡ:** *һис кем, һис ҡайҙа, бер нисек һ.б.*

7. **Эйәлек алмаштары**: *минеке, һинеке, уныҡы, минең, һинең, уның һ.б.*

**2-се күнегеү.** Өс төркөмгә бүленеп, **б**ирелгән алмаштарҙы килеш менән үҙгәртегеҙ. Бер берегеҙҙең эштәрен тикшерегеҙ, баһа ҡуйығыҙ.

1-се төркөм: ошо, ул.

2-се төркөм: әллә кем, беҙ.

3-сө төркөм: һин, теге.

**3-сө күнегеү.** Зәйнула ишан тураһындағы яҙмаларҙы уҡығыҙ. Алмаштарҙы табығыҙ. Төркөмсәләрен билдәләгеҙ.

1870 йылда, беренсе тапҡыр хаж ҡылырға барғанда, Зәйнулла ишан Истанбулда мөршите Көмөшханауи янында туҡтай. Ҡырҡ көн буйы хәлүәтлектә була. Аҙаҡ мөршитенең мөриттәре менән бергәләп хажға китә. Улар, Ҡара диңгеҙҙән Урта диңгеҙгә сығып, Ҡыҙыл диңгеҙенән Джидда ҡалаһына килә, унан 70 – 80 саҡрым араны йәйәүләп үтеп, Мәккәгә барып етә. Икенсе тапҡыр ишан 1882 йылда бер туған ағаһының улы Муса менән дә ошо уҡ юлдан үтә. Әлбиттә, сәфәрҙә йөрөгәнендә төрөк суфыйҙары менән ныҡлап дуҫлаша, Нәҡшбәндиә тәриҡәте уларҙы туғанлаштыра.

Тәүге тапҡыр хаж ҡылып ҡайтҡас, Зәйнулла ишанды төрмәгә ултыртыуҙары билдәле. Уны рөхсәтһеҙ хажға барыу, төрөк солтанына һатылыу, китаптар алып ҡайтып, мосолмандарҙы туплау, Мәүлит байрамын үткәрергә ҡотортоу, хеҙмәт итәһе урынға зекер әйтеп, Аллаһҡа табынып ваҡыт уҙғарыу һәм башҡа бихисап эштә ғәйепләйҙәр. Туғыҙ йылдан иһә һанап үтелгән ғәмәлдәрҙең береһе лә төрмәгә ултыртыуға сәбәп була алмағаны иҫбатлана. Тотҡонлоҡ осоро тураһындағы ҡайһы бер яҙмалар шикләндермәй ҡалмай: унда шәхес еңел көн иткән тигән һымаҡ яҙалар. Төрмә – төрмә инде ул, уның үҙ ҡануны. Дуҫтары, туғандары ишанды ҡотҡарыу өсөн күп көс һалған тигән хәбәр менән дә риза түгелмен. Беренсенән, шәхес яҡлауға мохтаж түгел, икенсенән, батша властары алдында кемдеңдер файҙаһына һүҙ әйтеү мөмкин булмай. Зәйнулла ишан – үҙе ҡөҙрәт эйәһе. Аллаһтан бирелгән һынауҙарҙы үткәс, уға изге эштәрен дауам итергә юл асыласаҡ. Ул шуны белә: таң алдынан ҡараңғылыҡ ҡуйыра, әммә был ҡояш ҡалҡыуын тотҡарлай алмай. Шулай итеп, шәйех ауырлыҡты

илаһи ҡөҙрәте менән үтә һәм, иленә ҡайтып, Троицкиҙағы мәҙрәсәлә эшләй башлай (Л. Яҡшыбаева).

**4-се күнегеү.** Тәлғәт Сафа улы Тажетдин хәҙрәттең биографияһынан бер нисә белешмә менән танышығыҙ. Төшөп ҡалған алмаштарҙы ҡуйып уҡығыҙ.



Тәлғәт Сафа Тажетдин 1948 йылда Ҡаҙан ҡалаһында эшселәр ғаиләһендә тыуған. .... Үзбәкстандың Бохара ҡалаһында руханиҙар училищеһында, Ҡаҙандағы Әл-Мәржәни йәмиғ мәсетендә белем ала. 1978 йылда Ҡаһирәлә бөтә донъяға билдәле “Әл-Әзһар” университетын тамамлай. Тәлғәт Тажетдин Дуҫлыҡ, дүртенсе дәрәжә “Ватан алдындағы ҡаҙаныштары” ордендары менән бүләкләнгән. Республика көнө алдынан ..... Салауат Юлаев ордены тапшырылды.

**5-се күнегеү.** Фотолағы шәхестең биографияһын алмаштар ҡулланып һөйләгеҙ.

**6-сы күнегеү.** Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Зат алмаштары ғына килеш менән үҙгәрә.
А) эйе
Б) юҡ

2. кем? нимә? ни өсөн? һорауҙары ла алмаш булып килә.
А) эйе
Б) юҡ

3. Беҙҙеке, һеҙҙеке, уныҡы һүҙҙәре күрһәтеү алмаштары булып иҫәпләнә.
А) эйе
Б) юҡ

**Өйгә эш.**
1. Автобиографияғыҙҙы яҙып килегеҙ. Унда күберәк алмаштар ҡулланырға тырышығыҙ.

2. Билдәле дин әһелдәре тураһында һораулыҡ әҙерләгеҙ.

3. Зәйнулла ишан тураһында интернет селтәренән мәғлүмәт табығыҙ, уны буклет формаһында эшләгеҙ.

## РӘҮЕШ

### Рәүеш тураһында төшөнсә. Уның төркөмсәләре һәм төрҙәре.

Тау Мөхәммәткә килмәһә, Мөхәммәт тауға үҙе бара.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Түбәндәге кроссвордты сисегеҙ. Вертикаль бағанала килеп сыҡҡан һүҙҙе аңлайһығыҙмы?

1. Ҡөрьән ниндәй графикала яҙылған?
2. Ҡөрьәнде кешеләргә еткереүсе Пәйғәмбәребеҙҙең исеме нисек булған?
3. Хатанан, гонаһтан ҡайтыу, ҡылынған гонаһтар өсөн Аллаһы Тәғәләнең ғәфү итеүен һорау.
4. ...-саҙаҡа биреүҙә ун төрлө изгелек барҙыр.
5. Аллаһтың илсеһе, тәбиғәттән өҫтөн илаһи зат.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | 1 | | **Р** | | | | |
| | 2 | | | **Ә** | | | | |
| | | 3 | | **Ү** | | | | |
| | 4 | | | **Е** | | | | |
| 5 | | | | **Ш** | | | | |

**Рәүеш** – эш-хәлдәрҙең, хәрәкәттең билдәһен белдереүсе, уларҙың нисек, ҡасан, ни рәүешле үтәлеүен аңлатҡан һүҙ төркөмө. Ғәҙәттә, ҡылым алдынан килә, ялғауҙар ҡабул итмәй.

**2-се күнегеү.** Бирелгән таблицаны иғтибар менән ҡарағыҙ. Төркөмдәргә бүленеп, рәүештең һәр төрө менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.

| **Рәүеш төрҙәре** | **Яһалыу юлы** | **Миҫалдар** |
|---|---|---|
| **Тамыр** | - | Ҡапыл, ифрат, яҡын, оҙаҡ, телеләй |
| **Яһалма** | 1. -са, -сә<br>2. -лата, -ләтә | Мосолманса кейенеү.<br>Һарыҡлата зәкәт биреү. |

| | | |
|---|---|---|
| | 3. -тай, -тәй, -дай, -дәй, -ҙай, -ҙәй, -лай, – ләй<br>4. -ын, -ен, -өн<br>5. –ндай, ндәй | Зәмзәмдәй саф, фәрештәләй изге, гөлдәй матур.<br><br>«Ҡәҙер» кисендә фәрештәләр ергә төшә. Ураҙа айы ҡышын да, яҙын да, йәйен дә, көҙөн дә тура килергә мөмкин. |
| **Ҡушма** | Ялан аяҡ, ара-тирә, алпан-толпан, аяҡ өҫтө, аҙмы-күпме, тиҙ-тиҙ | Аяҡ өҫтө ашарға ярамай.<br>Алпан-толпан атлаған бала. |

**3-сө күнегеү.** М. Ҡунафиндың «Кешелеккә тоғролоҡ» хикәйәһенән өҙөктө уҡығыҙ. Рәүештәрҙе табығыҙ һәм күсереп яҙығыҙ, яһалыу юлын билдәләгеҙ.

Унның аҡ йөҙөн, зәңгәр күҙҙәрен һәм оҙон сәстәрен күргәс тә Йософ Пәйғәмбәргә оҡшатты ул. Эйе, Йософҡа. Бала саҡта өләсәһе Ҡол Ғәлиҙең “Ҡиссаһи Йософ”он уға ла, эргә-тирәләге башҡа малай-ҡыҙҙарға ла яттан һөйләй торғайны. Шул тиклем иҫ киткес әкиәт ине ул. Шул саҡта уҡ ул да Зөләйха кеүек Йософҡа ғашиҡ булғайны. Уларҙыҡы кеүек ҡамсы яндырыр көслө мөхәббәтең булыуын теләй ине йәш ҡыҙ бала. Өфөлә вузда уҡығанда Иҙрисен тапты. Мөхәббәтле булды. Өләсәһенән әйләнә-килә һөйләтә торғас, күп өлөшөн үҙе лә ятлап алғайны был әкиәттең. Буй еткергән егерме йәштәрҙәге Йософ-Рәсүлгә күҙ һалғас та, һәр эште баш баҫып итәғәтле генә башҡарыуы, балаларҙың үсекләп өндәшеүҙәренә лә иғтибар итмәй ышаныусан ҡарашы менән бағыуы бер мөғжизә кеүек күренде.

“Эй, Йософ йән, миһырбанлы, мөрәүәтле,
Холҡоң яҡшы, йөҙөң яҡты, һүҙең татлы.
Йәш айҙай нескә ҡаштарың бар,
Ынйыларға тиң һинең тештәрең бар,
Йофар еҫе килеп торор сәстәрең бар”…

**4-се күнегеү.** Ҡайһы рәттә рәүештәр бирелгән?
Елән, дәфтәр, парта, шәкерт.
Әҙәпле, бәрәкәтле, хәләл, аҡыллы.
Юғары, ҡыҙҙарса, кисен, ашыҡ-бошоҡ.
Уҡыны, ятланы, килде, һөйләне.

**5-се күнегеү.** Рәүеш төркөмсәләре менән танышығыҙ. Таблицаның һәр бағанаһына 5-әр миҫал яҙығыҙ.

| Төркөмсәләре | төп | ваҡыт | урын | оҡшатыу | күләм-дәрәжә | сәбәп-маҡсат |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Һорауы | нисек? ни рәүешле? | ҡасан? | ҡайҙа? | нисек? | күпме? | ниңә? нилектән? |
| Миҫалдар | шәп, яй, ҡабалан | кисә, бая, иртәгә, яҙын | юғары, алыҫ, түбән, яҡын | уттай, айыуҙай, минеңсә | бер аҙ, бер юлы, байтаҡ | бушҡа, юҡҡа, юрый |
| | | | | | | |

**6-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Рәүештәр ниндәй һорауҙарға яуап бирә?
А. Кем? Нимә?
Б. Ҡайҙа? Нисек? Ҡасан? Ни рәүешле?
В. Ни эшләй?

2. Ваҡыт рәүеше булған һүҙбәйләнеште табығыҙ.
А. күрәләтә эшләне
Б. былтыр булған
В. оҙаҡ йәшә.

3. Күләм-дәрәжә рәүеше булған һүҙбәйләнеште табығыҙ.
А. берәм-һәрәм киләләр
Б. өҫкө ҡатта
В. әкрен ҡыбырлай

**Өйгә эш.**

1. С. Әбүзәрҙең «Мөхәммәт Пәйғәмбәр» поэмаһын уҡығыҙ. Рәүештәрҙең контекстағы мәғәнәһен аңлатығыҙ.
2. Рәүештең бөтә төркөмсәләрен дә ҡулланып, текст төҙөгөҙ.
3. Пәйғәмбәрҙәр тураһында мәғлүмәт йыйығыҙ, әңгәмә ҡорорға әҙерләнегеҙ.

## Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Теркәүес, бәйләүес, киҫәксә.

Яҡшылыҡ ҡылыу яҡшылыҡ күреүҙән яҡшыраҡ.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән айырып бирелгән ярҙамсы һүҙҙәр тураһында нимә беләһегеҙ?

**Яҡшылыҡ тураһында баллада**

Бабай һөйләй:
– Булған, ти, бер
Йәш йөрәк,
Йәш булһа ла,
Булған, ти, ул
Таш йөрәк.
Яҡшылыҡтың
Ни икәнен
Белмәгән,
Уны хатта
Төшөндә лә
Күрмәгән.
«Шәп эшләйһең,–
Тигән уға
Яуызлыҡ, –
Шуның өсөн
Бүләк итәм
Яңғыҙлыҡ.
Рәхәтләнеп
Йәшә, әйҙә,
Бер үҙең.
Борсолмаҫһың,
Һыу баҫһа ла
Тик сәтләүек
Ҡәҙәр генә
Ҡалған, ти,
Һулышын да
Саҡ-саҡ ҡына
Алған, ти.
«Их, – тигән ул,
Дуҫтар булһа
Янымда!..»
Шәфҡәтле ҡарт
Килгән дә шул
Сағында:
«Күрәм, – тигән, –
Нисек ауыр
Булмышың! »
Һәм өргән, ти,
Уға йылы
Һулышын.
Яҡшылыҡ шул
Бар дарыуҙан
Яҡшыраҡ:
Ярһып тибә
Башлаған, ти,

Ер йөҙөн…»
Таш йөрәккә
Шул саҡ низер
Булған, ти,
Ҡырау тейгән
Гөл шикелле
Һулыған, ти.

Таш йөрәк.
Йәш йөрәккә
Әйләнгән ул
Яңынан,
Әйтерһең дә
Ҡабат тыуған
Ялҡындан  (Х.Халикова)

**2-се күнегеү.** Таблицаға 1-се күнегеүҙә осраған ярҙамсы һүҙҙәрҙе төркөмләп  яҙығыҙ.

| **Теркәүес** | **Бәйләүес** | **Киҫәксә** |
|---|---|---|
| Һөйләм эсендә һөйләм киҫәктәрен йә ябай һөйләмдәрҙе бер ҡушма һөйләм итеп теркәүсе ярҙамсы һүҙ.<br>1. **Теҙеү** т. тиң киҫәктәрҙе, тиң һөйләмдәрҙе теркәй:<br>а) йыйыу т.: да-дә, та-тә, ҙа-ҙә, ла-лә, һәм, шулай уҡ, тағы ла, йәнә, тағы;<br>б) ҡаршы ҡуйыу т.: ә, ләкин, тик, шулай ҙа, әммә, фәҡәт;<br>в) бүлеү т.: йә, йәки, ни, йәиһә, әллә, әле, бер, берсә.<br>2. **Эйәртеү** т. Бер-береһенә эйәреп килгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙ-ара теркәй: сөнки, әгәр, әгәр ҙә мәгәр, тимәк, шул арҡала, шуның өсөн, хатта, гүйә. | Эйәреүсе һүҙҙе эйәртеүсе һүҙгә, эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе ярҙамсы һүҙ төркөмө.<br>1. **Төп йәки эйәлек** килеште талап итеүсе б.: өсөн, кеүек, һымаҡ, шикелле, төҫлө, менән, һайын, аша, буйына, арҡаһында һ.б.<br>2. **Төбәү һәм төп** килеште талап итеүсе б.: тиклем, хәтлем, саҡлы, ҡәҙәр, ҡаршы, табан, ҡарап, ҡарамаҫтан, ҡарағанда һ.б.<br>3. **Сығанаҡ** килеште талап итеүсе б.: бирле, башҡа, бүтән, һуң, элек, борон, алып, тыш һ.б. | Айырым һүҙҙәргә, һөйләм йөкмәткеһенә өҫтәмә мәғәнә биҙәге биреүсе ярҙамсы һүҙ төркөмө.<br>1. **Көсәйтеү, раҫлау** к.: да баһа, ҙа баһа, даһа, ҙаһа,-сы, -се, -со, -сө, бит, инде, тағы, теге, япа-, ап-, һап-, ҡап-, да/дә, та/тә, ҙа/ҙә, ла/лә һ.б.<br>2. **Икеләнеү** к.: -дыр, -дер, -ҙыр, -ҙер һ.б.<br>3. **Һорау** к.: -мы/-ме, -мо/-мө, -мы ни, -ме ни, -ме икән, -мы икән.<br>Сикләү к.: ғына, генә, ҡына, кенә, уҡ, үк. |
| | | |

**3-сө күнегеү.** “Урал батыр” эпосын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Төшөп ҡалған ярҙамсы һүҙҙәрҙе ҡуйып, эпостан өҙөктө күсереп алығыҙ. Ошо өҙөк буйынса фекер алышығыҙ.

“Урал батыр” эпосында яҡшылыҡ хаҡында фәһемле миҫалдар аша бик яҡшы итеп аңлатылған.

Донъяла мәңге ҡалыр эш –
Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән –
Ул ... булһа – яҡшылыҡ.
Күккә ... осор яҡшылыҡ,
Һыуға ... батмаҫ яҡшылыҡ,
Телдән ... төшмәҫ яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә ..., кешегә ...
Мәңге йәшәр аш булыр.
***
Барығыҙға шуны әйтәм:
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ;
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!

Эпоста башҡорт халҡының донъяла йәшәү маҡсаты аңлатылған. Был иһә – изгелек ҡылыу, үҙеңдән һуң яҡшы исемеңде ҡалдырыу. Балаға бәләкәйҙән ошо маҡсат һалына башлаған. Яҡшылыҡ тураһында мәҡәлдәр, йырҙар ифрат күп. Әкиәттәрҙә лә һәр саҡ изге ниәтлеләр өҫтөнлөк яулай. Геройҙары бер ваҡытта ла хәйлә, алдау, юхалау, ике йөҙлөләнеүгә юл ҡуймай, ауырлыҡтарҙы фәҡәт батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, күңел матурлығы аша еңеп сығып, халыҡ батырына әйләнә. Ил батшаһы вазифаһына күтәрелһә, халҡын хәстәрләп йәшәй.

**4-се күнегеү**. Вәғәзде тасуири итеп уҡығыҙ. Осраған ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә анализ эшләй барығыҙ.

### Һәр игелек – саҙаҡа

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд Мостафа салаллаһу ғәләйһиссәләм бер хәҙис шәрифендә шулай тигән: «Әгәр асыуланышҡан ике кешене дуҫлаштырһаң, был эш һиңә саҙаҡа булыр, әгәр кешегә атланып ултырырға йәки йөгөн ҡуйырға ярҙам итһәң, был эшең дә саҙаҡа булыр. Һәр яҡшы һүҙ – саҙаҡа;

ғибәҙәт ҡылыу юлында яһаған һәр аҙымың – саҙаҡа; юлдан башҡаларға зыян килтерерлек нәмәләрҙе алып ташлауың да һинең өсөн саҙаҡа була».

Ислам күрһәтмәләре нигеҙендә тәрбиәләнгән мосолман кеше башҡаларға файҙа ғына килтерергә, ә зыян килтерергә мөмкин булған ерҙәрҙән үҙен һаҡларға тырыша. Сөнки ул яҡшылыҡтың ғына тик уңышҡа килтерәсәген яҡшы белә. Аллаһынан ҡурҡыусы мосолманға рәхмәт ишектәре һәр ваҡыт асыҡ. Һәм ул был ишектәргә Аллаһының мәрхәмәтенә ирешеү һәм Уның йомарт бүләгенә лайыҡ булыу өсөн инергә ынтыла.

Һәр бер хикмәттең башы булып һәр эштә һәм һәр хәлдә Аллаһынан ҡурҡыу тора. Һәр бер мөьмин Аллаһынан ҡурҡыу сәбәпле үҙенең бөтә эштәрен тәртипкә килтерә. Уның бер эшенә лә тел-теш тейҙереп булмай. Сөнки ул бер ҡасан да Аллаһы Тәғәлә алдында барыһы өсөн дә яуап бирәһен иҫенән сығармай (https://nazir1965.com/vəғəzdər/hər-igelek-saҙaҡa.html).

**5-се күнегеү**. Дөрөҫ яуаптарҙы билдәләгеҙ.

1. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре:
А) теркәүес, киҫәксә, бәйләүес
Б) теркәүес, рәүеш, алмаш
В) исем, ҡылым, сифат

2. Бәйләүестәр ниндәй һорауға яуап бирә?
А) кемдер? нимәлер?
Б) нисә? ҡасан?
В) һорауҙары булмай

3. Ә, тик, әммә һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарай?
А) бәйләүес
Б) теркәүес
В) рәүеш

**Өйгә эш.**
1. “Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре” тигән презентация эшләгеҙ.
2. “Кем ул – яҡшы кеше?” тигән темаға 5 тезис яҙығыҙ.
3. 3-сө күнегеүҙә бирелгән “Урал батыр” эпосынан яҡшылыҡ тураһындағы өҙөктө ятлағыҙ.

## Телмәр үҫтереү дәресе
## Күрмә изложение яҙыу
## Мосолман әҙәбе

Исламдың нигеҙендә тәү сиратта әҙәп, әхлаҡ, тәртип ята. Әҙәп – ярты иман, тигән боронғолар. Мөьмин ғаиләһендә лә, халыҡ араһында ла үҙен тыйнаҡ тоторға тейеш һәм кешеләр менән мөнәсәбәттә ғәҙел булыуы мотлаҡ. Сөнки алдаҡсыға исламда урын юҡ. Алдашыу, ике йөҙлөлөк – иң ҙур гонаһ. Әгәр кеше яңылыш гонаһ ҡыла икән, тиҙерәк тәүбәгә килеп, үкенеп, ике рәҡәғәт «Тәүбә намаҙы»н уҡып, башҡа улай йәмһеҙ ҡыланмаҫҡа һүҙ бирә. Әҙәм балаһы тәүбә итмәһә, йөрәгендә ҡара тап барлыҡҡа килеп, тут һымаҡ йөрәген ялмап ала. Шунан кеше ҡаты бәғерлегә әйләнә, халыҡта ундайҙарҙы «таш йөрәк» тиҙәр. Йөрәктәребеҙ, күңелдәребеҙ бысранмаһын өсөн һәр ваҡыт намаҙ уҡып, ураҙа тотоп, тәүбә итеп, Аллаһ биргәненә шөкөр әйтеп, зекер ҡылып йәшәргә тейешбеҙ. Аллаһ Үҙенең рәхимле, миһырбанлы, рәхмәтле булыу кеүек гүзәл сифаттарын мосолман йөрәгенә һалған. Шуға күрә кеше ни тиклем ябай, йомшаҡ, алсаҡ күңелле, әҙәпле икән, тимәк, ул шул тиклем Аллаһтың мәрхәмәтлелегенә өлгәшә.

Насар холоҡло әҙәмдәрҙе Аллаһ тәүбә өсөн яратҡан. Беҙ, уларға ҡарап, тәүбә итергә һәм Раббыбыҙ беҙҙе улай ҡылмағанына шөкөр итергә тейеш. Ул үҙенең холҡон камиллаштырыу өҫтөндә эшләргә, яңы маҡсаттар менән йәшәргә бурыслы.

Совет заманында, дини китаптар булмау сәбәпле, динебеҙҙе белмәй йәшәнек. Әммә хәҙер, ислам буйынса әҙәбиәт тулып ятҡанда, белә тороп гонаһ ҡылыу – харам. Ҡәберҙә лә, Ҡиәмәт көнөндә һорау алғанда ла барлыҡ ҡылған ғәмәлдәребеҙ өсөн яуап бирәсәкбеҙ бит.

Күптәр үҙен тәртипһеҙ тота, халыҡ араһында ҡысҡырып һөйләшә, әрләшә, һүгенә, ғәйбәт һата, кеше хаҡына керә, рәнйетә... Ә тыйнаҡ, әҙәпле булыу, был хаҡта уйланыу – гонаһтарҙан һаҡланыу ысулы ул.

Мосолмандарға үрнәк булһын өсөн Ҡөрьән, хәҙистәр бирелгән. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм тормошо ла яҡшы өлгө беҙҙең өсөн. Гүзәл заттарға үрнәк булып пәйғәмбәрҙәрҙең, сәхәбәләрҙең ҡатындары тора.

Мөьминдәр дуҫты унын иманына, әҙәп-әхлағына ҡарап һайлай. Насар йоғонто яһап, кешене иманынан, диненән яҙҙырырҙай бәндә менән яҡынаймаҫҡа тырыша.

Мосолмандарға салих-инсандар, дин әһелдәре, ғалимдар менән аралашып йәшәргә кәрәк. Шулай уҡ уларға тыуғандан алып үлгәнсегә хәтлем ғилем алыу лазым. Шунда ғына күңел таҙа, саф һаҡлана, иман нығына (Ф. Ғайсина).

# ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ СИНТАКСИСЫ

## Һөйләм төрҙәре.

Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу – кешенең төп бурысы.

Хәҙис.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Һәр һөйләмдең интонацияһына ҡарап, уларҙың аҙағына тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙығыҙ. Ниндәй тыныш билдәләрен ҡуйғанығыҙҙы дәлилләгеҙ.

### Бурыс

Бер ҡарт ҡына кеше үҙе кеүек ҡартайып ҡороп барған ағасҡа һөйәлеп илай ине

Яңы ғына уның эргәһенә мыҡты кәүҙәле йәш ир-егет килеп, араҡы һатып алыу өсөн аҡса һораны һәм бар көсөнә ҡартты ҡолата һуғып китеп барҙы Ағас төбөндә ҡолап ятҡан бабайҙы күреүселәр уға ярҙам итергә ашыҡты

– Олатай, нимә булды Ул кешегә һинән нимә кәрәк Бабай бер кемгә лә иғтибар бирмәйенсә, өҫтөндәге япраҡтарҙы ҡаға-ҡаға үҙ алдына һөйләнде Ул бурысын түләргә килде Ул нимә эшләргә тейеш булһа, шуны эшләне...

Кешеләр, бабайға таяғын алып тотторҙолар ҙа китеп барҙылар Ошо хәлде баштан алып аҙағынаса ситтән күҙәтеп торған бер йәш егет ҡарттың эргәһенә килеп һүҙ башланы:

– Һеҙ бик ныҡ арығанһығыҙ, әҙерәк бынау ағас төбөнә ултырып ял итеп алығыҙ

Оло кеше, илауҙан ҡыҙарған күҙҙәре менән күк йөҙөнә күтәрелеп ҡарап, ауыр итеп һуланы

– Минең был ағас төбөндә ял итеп ултырырға хаҡым юҡ Һәм үлгәнсе булмаясаҡ, – тип илап ебәрҙе лә, күңел төбөнән сыҡҡан ыңғырашыу менән һөйләй башланы:

– Был хәл илле йыл элек булды  Мәрхүм атайымдың рухы тыныс булһа ине, мин фәҡәт ошо ергә, ошо ағас эргәһенә килеп, тәмәкегә аҡса һорап, тупаҫ һүҙҙәр әйтеп атамды рәнйеттем Бына бөгөн ошо уҡ ерҙә миңә үҙемдең улым ҡул күтәрҙе...

Йәш кеше нимә тип әйтергә белмәй албырғап ҡалды Ул әҙерәк тынысланғас, әйҙә өйөңә алып барайым, тип теләк белдереүенә ҡарт, унның тәҡдимен кире ҡағып:

– Минең өйөм бынан алыҫ. Йәйәү ҡайтам, илле йыл элек үҙ атам рәнйеп, ҡайғыға сумып ошо юлдан ҡайтҡан кеүек, бөгөн мин ҡайтам... Ҡайтышлай унның ҡәберенә зыярат ҡылып, “Йәсин” сүрәһен уҡып, бер аҙ ҡәберенең эргәһендә туҡталам... (“Һаҡмар” гәзитенән).

Әйтелеү маҡсатына ҡарап, һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырып йөрөтәләр.

Нимәлер тураһында хәбәр итеүҙе белдергән һөйләмде – **хәбәр һөйләм**, һорауҙы эсенә алған һөйләмде – **һорау һөйләм**, ә кемде лә булһа эш-хәрәкәткә өндәүҙе, бойороуҙы, һоҡланыуҙы белдергән һөйләмде **өндәү һөйләм** тип атайҙар.

**2-се күнегеү**. Бирелгән ике һөйләмде тейешле интонация менән уҡығыҙ, сағыштырығыҙ. Уларҙың мәғәнәһе буйынса айырмаһын билдәләгеҙ.

– Йә Аллаһтың илсеһе, кешеләр араһында кемде нығыраҡ хөрмәтләйем?

Һәр ата-әсәнең бурысы – иманлы бала тәрбиәләү!

**3-сө күнегеү.** Әйтелеү маҡсатына ҡарап, һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырып йөрөтәләр. Һәр һөйләм төрөнә миҫал уйлап яҙығыҙ.

Хәбәр һөйләм:

Һорау һөйләм:

Өндәү һөйләм:

**4-се күнегеү.** Интонацияға ҡарап бел!

Интонация – латинса intonate (“ҡысҡырып әйтеү”) һүҙенән алынған, телмәрҙең бик мөһим яғы, мәғәнә белдереүҙә һәм тойғо биҙәктәрен сағылдаыуҙа ҙур роль уйнай.

Уҡыусыларға алдан уҡ һәр береһенә бер төрлө билдә (.!?) яҙылған өсәр карточка таратылып бирелә. Уҡытыусы хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙән торған текст уҡый. Икенсе ҡат уҡығанда (текст ике ҡат уҡыла), һәр һөйләмдән һуң пауза яһала. Һөйләм уҡылған һайын, уҡыусылар интонацияға ҡарап, хәбәрме, һораумы, өндәү һөйләмме икәнен айыра белергә һәм үҙҙәрендәге карточкаларҙың береһен күрһәтергә тейештәр. Һәр һөйләмдән

һуң нисә уҡыусы хаталанғанын иҫәпкә алып, таҡтаға мәрәйҙәр яҙыла бара. Текст уҡылып бөткәс, командаларҙың күпме дөрөҫ яуап биреүе һәм хаталанауы иҫәпләнә. Аҙ хаталаныусы команда еңеүсе булып ҡала.

**5-се күнегеү.** Түбәндә бирелгән бурыс тураһында тексты уҡығыҙ. Уның тураһында фекер алышығыҙ. Үҙегеҙ тағы нимәләр өҫтөр инегеҙ?

**Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу – кешенең төп бурысы**

Бер Аллаһҡа ғына ғибәҙәт ҡылыу – кешенең төп бурысы. Аллаһ Ҡөрьәндә кешеләргә: "Эй, кешеләр! Һеҙҙе барлыҡҡа килтергән һәм һеҙҙән элек булғандарҙы барлыҡҡа килтергән Раббығыҙға ҒИБӘҘӘТ ҡылығыҙ – моғайын һеҙ тәҡүәлеләрҙән булырһығыҙ!" – тип әмер иткән (Ҡөрьән, "Һыйыр" сүрәһе, 2:21).

Аҡыллы кеше бала сағынан уҡ үҙенең ата-әсәһенә ҡарата бурыстарын таный. Шулай уҡ, кешенең үҙ-үҙенә ҡарата ла бурыстары байтаҡ: ашап-эсеү, йыуыныу, кейенеү һәм башҡаһы. Әммә һәр кешенең төп бурысы – Аллаһ Тәғәләнең әмерҙәрен үтәү. Ә Аллаһ Тәғәлә Үҙенә ышанған һәм буйһонған кешеләргә Йәннәт вәғәҙә иткән: "Аллаһтың сиктәре ошо. Кем Аллаһҡа һәм Уның рәсүленә буйһона, Аллаһ уны аҫтында йылғалар ағып торған баҡсаларға индерер, ул унда мәңгегә ҡалыр, һәм был – бөйөк уңыш!" (Ҡөрьән, "Ҡатындар" сүрәһе, 4:13).

Үҙенә буйһонмағандарҙы иһә Аллаһ ғазап менән ҡурҡытҡан: "Кем Аллаһҡа һәм Уның рәсүленә буйһонмай һәм Уның ҡуйған сиктәрен уҙа, Аллаһ уны Тамуҡҡа индерер, ул унда мәңгегә ҡалыр, һәм уға – хурлыҡлы ғазап!" (Ҡөрьән, "Ҡатындар" сүрәһе, 4:14).

Шуныһы үкенес: күп кеше Аллаһты иҫенә лә төшөрөп ҡарамай. Тимәк, уларға бөйөк уңыш – Йәннәт кәрәк түгел. Тамуҡҡа төшһә ни ҙә, төшмәһә ни – уларға барыбер... (Дини сайттан).

**Өйгә эш:**

1. Ҡыҙҙарға Ислам динендә ҡатындарҙың ирҙәре алдындағы бурыстары, малайҙарға ирҙәрҙең ҡатындары алдындағы бурыстары тураһында проект эшләргә.

2. Әҙәби әҫәрҙән хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә өсәр миҫал табып яҙырға.

3. Хәҙистәрҙе ятларға.

Ислам – ғилем менән көслө.

Дин – ул нәсихәт.

Иманды күңел менән ҡеүәтләп тороу – ағастың тамыры.

Иманды телең менән әйтеп, ғәмәлдәрең менән нығытып та тороу – ағастың олоно, ботаҡтары, сәскәләре, емештәре.

Яҡшы ағас татлы емешен күп итеп биреп торған кеүек, сәләмәт тамырҙар ҙа игелеккә сәбәп кенә булып тора.

Ислам – ул иман менән нығытылған ғәмәл генә түгел, ғәмәл менән нығытылған йәшәү рәүеше лә.

## Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр.

Ағас күрке япраҡ, әҙәм күрке сепрәк.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Билдәләнгән һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табығыҙ. Шул һөйләмдең баш киҫәктерен генә ҡалдырып яҙып ҡуйығыҙ. Ике һөйләмде сағыштырып, йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр тураһында ҡағиҙә төҙөгөҙ.

### Яулыҡ? Хиджап? Әллә баш кейемеме?

**Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына ҡағылышлы яулыҡ һәм хиджап тураһында бәхәстәр халкыбыҙ араһында эленән-эле ҡалкып сығып тора.** Бер яҡтан, башҡорт булараҡ, беҙгә хиджап нимәгә кәрәк ул, үҙебеҙсә яулыҡ ябынайыҡ, тиҙәр, икенселәре хиджап яҡлы, өсөнсөләре яланбаш йөрөйөк, тиҙәр. Хиджап – ул ғәрәп ҡатын-ҡыҙҙарының баш һәм өҫ кейеме, Көнбайыш Европала уны баш ябыуы тиҙәр. Яулыҡ тип беҙҙең яҡта әйтәләр. Динебеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙын башы ла, кәүҙәһе лә, битенән һәм ҡул суҡтарынан тыш, ябыҡ булырға тейеш.

Ислам динендә генә баш һәм тән ҡаплаулы булырға тейеш, тип уйламағыҙ, шул уҡ талап христиан һәм иврит диндәрендә лә бар. Өҫ-баштағы кейемдәргә килгәндә, улар сусҡа тиреһенән булыуы тыйыла, шул ғына. Төҫтәренә килгәндә, ирҙәргә ҡатын-ҡыҙҙарға оҡшатып ҡыҙыл төҫтән йә ебәктән кейергә ярамай. Шулай уҡ һүрәтле кейемдәрҙә йөрөү ҙә гонаһлы. Яланбаш йөрөйһөгөҙ икән – үҙегеҙгә ҙур гонаһ алаһығыҙ, был иманығыҙ кимәле түбән икәнен күрһәтә. Иман – Аллаһ Тәғәләгә ышаныу булғас, ни эшләп ҡушҡандарына бармаҡ аша ҡарарға?

Ғәрәптәргә оҡшатып кейенеү кәрәкмәй. Пәйғәмбәребеҙ әйткән бит: ғәрәп халҡының башҡа халыҡтарҙан өҫтөнлөгө юҡ, тип. Кейенегеҙ һәм ябынығыҙ хәҙерге стилдә, тик шәриғәт ҡушҡан сиктән сыҡмағыҙ. Шәриғәт сиге – Аллаһ Тәғәлә ҡушҡан сик. Сиктән сығаһығыҙ икән, гонаһ һеҙҙеке – үҙегеҙгә ошо ғүмерҙә лә һәм әхирәттә лә яза килеүен көтөгөҙ.

Ҡатын-ҡыҙ кейеменә ниндәй шарттар бар?

1. Ҡул һәм биттән башҡа ерҙе ҡапларға тейеш.

2. Ул кейем күҙҙәрҙе йәлеп итә торған зиннәтле кейем булмаһын.

3. Йоҡа ғына булып, үтә күренә торған булмаһын.

4. Иркен һәм киң булһын, тәнгә һылашып тормаһын.

5. Кейемде хушбуйҙар менән хушландырмағыҙ.

6. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙың кейеме ирҙәр кейеменә һәм кафыр ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейеменә оҡшарға тейеш түгел.

8. Шөһрәт кейеме булырға тейеш түгел.

Бына ошондай шарттар. Ә инде кем дә кем ошо сиктәрҙән сығып, үҙенсә ҡылана икән, хушбуйҙар һөртөнөп, ирҙәр күҙенә салына икән, шул зинасы ҡатын менән бер тиң, тип әйтелә (Дини сайттан).

**2-се күнегеү.** Бирелгән исемдәрҙе хәбәр итеп, эйәләр уйларға.

Таҫтамал, ай, яулыҡ, мәсет, мулла, атай, бала, ....

Өлгө: *Кейем – яулыҡ, Ибраһим – мулла һ.б.*

**3-сө күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡырға. “Мосолман кешеһенең кейеме” темаһына әңгәмә ҡороғоҙ.

**Яулыҡ**

Их, яулыҡһыҙ йөрөйбөҙ шул, ҡыҙҙар,
Бар ирҙәрен илдең аҙҙырып,
Бар ирҙәрен илдең меҫкен итеп,
Һуңғы иманынан яҙҙырып.
Ә бит ниндәй ирҙәр булған элек
(Мин ишетеп беләм йырҙарҙан)!
Ил терәге ирҙәр тыуыр микән
Ярым-шәрә ҡатын-ҡыҙҙарҙан?!
Илдә мәшхәр хәҙер, шул мәшхәрҙең
Булыр микән берәй туҡтары?!
Яулыҡ ябынмаған ҡатындарҙың
Ҡарашында – иблес уҡтары.
Яулыҡ ябынмаған ҡыҙ-ҡырҡынды
Аяр микән ирҙең аҙғыны?!
Шулмы инде илдең күрәсәге,
Шулмы хәҙер беҙгә яҙғаны...

Яулыҡ ябынмаған ҡатын-ҡыҙҙар –
Мәсекәйме ул беҙ, убырмы...
Яулыҡ ябынмаған инәйҙәрҙең
Доғалары ҡабул булырмы?
Ә бит бар ғәмебеҙ һыйған уға,
Ябай әйбер түгел ул яулыҡ,
Уның көсө, уның хәсиәте
Йәһәннәмдән ҡалҡан булырлыҡ!
Аҡ яулыҡлы инәй доға ҡылһа,
Фәрештәләр баҫыр күс һырып...
Ҡуй, яулыҡһыҙ йөрөмәйек, ҡыҙҙар,
Илдең бәрәкәтен осороп!... (З. Ханнанова).

**4-се күнегеү.** Алып барыусы бирелгән һөйләмдәрҙе уҡый. Ҡалғандар алмашлап һөйләмдең тарҡаумы, йыйнаҡмы икәнен тиҙ генә әйтә. Кем бер тапҡыр ҙа яңылышмай, шул еңеүсе була.

**Иғтибарлы бул!**

Хәҙрәт инде. Шәкерт булам. Мәҙрәсәнән сыҡты. Хат яҙылды. Китап уҡыныҡ. Төш етте. Мәрйәм килгән ине. Китап алдылар. Ул ҡайтҡан булһа кәрәк. Дәрескә әҙерләндек. Ашарға килтерҙеләр. Мәсет бушап ҡалды. Сәғәт туҡтаған. “Аманат” алдырҙыҡ.

**5-се күнегеү.** Төркөмдәрҙә эш. Таблицаны тултыр.

| | Ҡағиҙәне яҙ | Миҫалдар килтер |
|---|---|---|
| Йыйнаҡ һөйләм | | |
| Тарҡау һөйләм | | |

**Өйгә эш:**

1. 1-се текстан беренсе абзацты күсереп яҙығыҙ һәм эйә менән хәбәрҙе табып, аҫтына һыҙығыҙ.
2. “Минең кейемем” тигән темаға тик йыйнаҡ һөйләмдәрҙән генә торған хикәйә яҙығыҙ.
3. “Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары һәм ир-егеттәре кейергә тейешле әйберҙәр” тигән презентация эшләгеҙ.

## Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре.

Милләт нигеҙе – дин һәм тел!

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Тексттың төп фекерен әйтегеҙ. Билдәләнгән һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, баш киҫәктәрен табырға. Аҫтына һыҙылмай ҡалған һөйләм киҫәктәре тураһында нимә әйтерһегеҙ?

### Милләт нигеҙе – дин һәм тел!

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим. Әл-хәмду лил-ләһи раббил-ғаләмин Үәс-саләтү үәссәләмү ғәлә мүхәммәдән үә ғәлә әлиһи үә әсхәбиһи әжмәғин.

«Ҡөрьән Кәрим»дә Аллаһ Тәғәлә «бисмилләһир-рахмәнир-рахим» тип донъяла йәшәгән бөтөн кешегә мөрәжәғәт итә. «Мин һеҙҙе бер атанан, бер әсәнән яраттым», – ти Раббыбыҙ. Быны бөгөн генетика ғилеме менән шөғөлләнгән ғалимдар ҙа раҫлай.

Шулай булғас, барыбыҙ ҙа бер телдә һөйләшергә тейеш инек, ләкин Аллаһ Тәғәлә аяттың дауамында: «Мин һеҙҙе төрлө милләт, халыҡ, ҡәбилә итеп яраттым», – тигән. Тимәк, был бүленеш – Хоҙайҙың хикмәте. Һәр милләткә айырым үҙенсәлек хас.

«Телегеҙҙең төрлө булыуы – Аллаһ Тәғәләнең барлығына бер дәлил», – тиелә «Ҡөрьән»дә. Хоҙай барлыҡҡа килтергән был хазинаны һаҡлау – милләттәрҙең изге бурысы. Шул тиклем бөйөк ул тел: уның эсендә күпме изге фекер, фәлсәфә, мәғәнә ята, әкиәт, әйтем, ҡобайыр һәм башҡа ижади ҡомартҡылар бар! Улар әле лә яҙыла.

**Хоҙай Тәғәлә милләттәрҙе бер-береһе менән танышһын, төрлө тел өйрәнһен, ғилем уртаҡлашһын өсөн яратҡан.**

**Донъяға килгән һәр кеше иң тәүҙә туған телен өйрәнә, уҡый башлағас, дәүләт телен, сит телдәрҙе үҙләштерә. Борон-борондан тәржемәселәр иң кәрәкле һөнәр эйәләре булып иҫәпләнгән. Күпме тел белһәң, донъяға ҡараш та шул ҡәҙәр киң була.**

Милләттең төп нигеҙе – тел һәм мәҙәниәт. Улар бер бөтөндө тәшкил итә. Туған телгә, мәҙәниәткә, йолаларға ғаиләлә иғтибар бар икән, милләт тә йәшәйәсәк. ӘхмәтЗәки Вәлиди «Башҡорт халҡына хушлашыу хаты»нда ике бөйөк ҡиммәтебеҙгә – динебеҙгә һәм телебеҙгә – һөжүм буласағы тураһында белдергән. Был һүҙҙәрҙе тарих иҫбатланы.

Динебеҙҙе һаҡлаһаҡ, телебеҙ ҙә имен булыр. Ғабдулла Туҡайҙың «Эй, туған тел, эй, матур тел, атам-әсәмдең теле», Рәми Ғариповтың «Йөрәгендә халҡы булмағандың кеше булырға ла хаҡы юҡ» тигән һүҙҙәре юҡтан ғына әйтелмәгән. Хөрмәтле ҡәрҙәштәр, телебеҙ бер телдән дә кәм түгел. Уны

аралашыу кимәлендә генә түгел, ә төбөнә төшөп өйрәнергә, барлыҡ ижади ҡомартҡыларын белергә ынтылырға тейешбеҙ. Бергәләп эшләһәк, сабыйҙарыбыҙҙа йырҙарыбыҙға, әҙәбиәтебеҙгә, сәнғәтебеҙгә мөхәббәт уятһаҡ ҡына милләтебеҙ һаҡланыр (Н. Ниғмәтуллин).

**2-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, авторын әйтегеҙ. Шиғырҙан аныҡлаусыларҙы табығыҙ. Аныҡлаусы менән бер һөйләмде күсереп алып, синтаксик анализ эшләгеҙ.

**Башҡорт теле**

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!
Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!
Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем – тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем – гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем – бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле!
Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!
Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле – минең телем!

**Аныҡлаусы** һөйләмдә предметтың билдәһен, эйәһен, иҫәбен, күләмен белдерә. Ниндәй? ҡайһы? ҡасан? ҡайҙағы? нисә? нисәнсе? кемдең? нимәнең? һорауҙарына яуап була. Аныҡлаусы эйәлек килештәге исемдән (*Алмаздың*), алмаштан (*беҙҙең*), сифат (*йыйылғандарҙың*) һәм исем ҡылымдан (*ҡурҡыуҙың*) килә, сифаттан (*яҡты*), һандан (*бер киҫәге*), күрһәтеү алмашынан (*был*) килә ала.

**Тиң булған аныҡлаусылар** аныҡланыусының бер төрлө билдәһен белдерәләр: *Ал, ҡыҙыл, һары сәскәләр күҙҙәрҙе ялмап тора*. **Тиң булмаған**

**аныҡлаусылар** предметтың йәки заттың төрлө билдәһен белдерәләр: *Унда, зәңгәр күлдәр көҙгөһөндә, бейек зәңгәр күктәр сағылып уйнай.*

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, туған тел тураһында әңгәмә ҡороғоҙ. Тексты күсереп алығыҙ, тултырыусыларҙы табығыҙ. Һөйләмдең эйәрсән киҫәге тултырыусы тураһында ҡағиҙә сығарығыҙ.

Туған тел... Кеше тәү мәртәбә ошо телдә «әсәй», «атай» һүҙҙәрен әйтә. **Ошо тел ярҙамында үҙенең тирә-яғындағы төрлө төшөнсәләр, атамалар менән таныша, кешеләр менән аралаша.** Әхлаҡ төшөнсәләрен әсә телендә аңына һеңдерә, күңеленә һала. Туған теле арҡаһында ул үҙ халҡының күңел хазинаһын – илаһи йырҙарын, мөғжизәле әкиәттәрен, тәрән аҡыллы мәҡәл-әйтемдәрен, серле йомаҡтарын белеү бәхетенә ирешә.

**Тултырыусы** һөйләмдең хәбәренә бәйләнеп, уның мәғәнәһен асыҡлап килә. Төбәү, төшөм, сығанаҡ, урын-ваҡыт килеш һорауҙарына, шулай уҡ кем менән? нимә менән? кем тураһында? кем тарафынан? һорауҙарына яуар бирә. Алмаштан (*миңә*), һандан (*берәүҙәргә*), исем ҡылымдан (*йөрөүҙән*), сифат ҡылымдан (*сыҡҡанға*) килә. **Тура тултырыусы** төшөм килештә торған исемдән, алмаштан һәм исемләшкән һүҙҙәрҙән килә, ҡалғандары **ситләтелгән тултырыусы** тип атала.

**4-се күнегеү.** Һөйләмдең **хәл** эйәрсән киҫәге тураһындағы ҡағиҙәгә таянып, таблицаны тултырырға.

**Хәл** – һөйләмдә эш-хәлдең эшләнеү рәүешен, күләмен, ваҡытын, урынын, сәбәбен, маҡсатын, ниндәй шарттарҙа үтәлеүен белдергән һөйләм киҫәге. Нисек? ни рәүешле? ҡайһылай? ҡайҙа? ҡайҙан? ҡайҙа саҡлы? ҡайҙан алып? ҡасан? ҡасандан бирле? ҡасанға тиклем? нисә? күпме? ни өсөн? ни сәбәпле? һорауҙарына яуап бирә.

**Төрҙәре:** рәүеш хәле (нисек? ни рәүешле? ҡайһылай?), урын хәле (ҡайҙа? ҡайҙан? ҡайҙа саҡлы? ҡайҙан алып?), ваҡыт хәле (ҡасан? ҡасандан бирле? ҡасанға тиклем?), күләм-дәрәжә хәле (нисә? күпме?), сәбәп хәле (ни өсөн? ни сәбәпле?), маҡсат хәле ( ниндәй маҡсат менән? ни өсөн?), шарт хәле (ниндәй шартта? ни эшләһә?), кире хәл (ни эшләһә лә? ни эшләмәһә лә? нимәгә ҡарамаҫтан?)

| № | Хәл төрҙәре | һорауҙары | миҫал |
|---|---|---|---|
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |
| | | | |

**5-се күнегеү.**

**Уйын “Сынйыр”**

Уйында ҡатнашыусылар түңәрәк яһап баҫалар. Аранан берәү башлап, ниндәй булһа ла бер һүҙ әйтә. (Мәҫәлән, *бурыс*). Уның уң яғындағы күршеһе шул һүҙгә тиҙ генә икенсе һүҙҙе ҡушып, һүҙбәйләнеш йәки һөйләм төҙөй (*катын-ҡыҙ бурысы* йәки *бурысты ваҡытында түләү мөһим*), шунан үҙе яңы һүҙ әйтә. Уйын шулай дауам итә. Яңылыш һүҙбәйләнеш йәки һөйләм төҙөгән кеше “сынйыр”ҙы өҙгән һанала һәм түңәрәктән сыға. Уйын бер генә кеше ҡалғансы дауам итә, бер нисә еңеүсе булыуы ла мөмкин.

**6-сы күнегеү.** Ҡабатлау өсөн һорауҙар.

1. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен һанап сығығыҙ.
2. Аныҡлаусы, тултырыусы һәм хәлдәр араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?
3. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусыларҙың төп айырмаһы нимәлә?
4. Тултырыусылар нисә төрлө була?

**Өйгә эш:**

1. 1-се күнегеүҙәге һуңғы абзацтан бер һөйләмгә синтаксик анализ эшләргә.
2. Телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн ниндәй план тәҡдим итерһегеҙ?
3. Тел тураһында кем күпме шиғыр таба? Исемлек төҙөргә.

**Бер һәм ике составлы һөйләмдәр. Атама һөйләм.**

Байрам ашы – ҡара ҡаршы.
Әйтем.

**1-се күнегеү.** Бағаналап бирелгән һөйләмдәрҙе сағыштыр. Улар араһында ниндәй айырма бар?

| | |
|---|---|
| Әҙәмде әҙәм иткән – әҙәп.<br>Беҙ ата-бабаларыбыҙ йолаларына тоғро булырбыҙ.<br>Ситтән килгән ҡунаҡтар халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығына һоҡлана.<br>Тәрән йылға тауышһыҙ ағыр. | Кеше холҡон күҙәт, үҙеңдекен төҙәт.<br>Тоҙҙай әсе лә, балдай татлы ла булма.<br>Яман менән юлдаш булма.<br>Тәрбиәле ғаилә. Тәрбиәле бала. |

Ике составлы һөйләмдәрҙә эйә составы ла, хәбәр составы ла була. *Ат етмәҫ ергә дан етер. Ҡыҙҙар өйгә эш эшләй. Ҡурсаҡҡа күлдәк тектем.*

Һөйләмдә йә хәбәр, йә эйә составы ғына булһа, ул бер составлы һөйләм тип атала. *Май айы. Кис. Тәмле алма. Матур сәскә.* Эйәнән генә лә, уға эйәргән эйәрсән киҫәктән дә торорға мөмкин. *Май айы. Алтынайҙың ҡурсағы.*

Хәбәрҙән генә лә, уға эйәргән эйәрсән киҫәктән дә торорға мөмкин. *Остом. Тауышһыҙ ағыр. Өнһөҙ генә илай. Шыштырлап атлай.*

**2-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланып, ике составлы тарҡау һөйләмдәр яҙығыҙ.

Изге байрам, байрамға әҙерләнеү, тәмле-тәмле аштар, яңы кейем, ҡунаҡҡа саҡырыу, күңелле әңгәмә, ҡыҙыҡлы хәлдәр, шат балалар, ололар түрҙә, ашһыу оҫталары.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Был өҙөк кемдең, ниндәй әҫәренән? Нимә тураһында һүҙ бара. Билдәләнгән һөйләмдәрҙе анализлағыҙ, ниндәй һөйләмдәр икәнен асыҡлағыҙ.

**Байрам ашы – ҡара ҡаршы**

**Бөгөн байрам. Ҡорбан байрамы.** Күпме замандар мин аҡрын ғына яҡынлашып килгән ошо иртәнең сихыры аҫтында йәшәнем**.** Уның шаңдағы, алыҫ офоҡ ситендәге аҡ болоттарҙа сағылып уйнаған таң нурҙары һымаҡ, әллә ҡасан инде минең иләҫ күңелемә килеп һарылды. Ҡояш әле сығып та

етмәгән, донъя инде яп-яҡты. Тап бына шулай килә ҡорбан байрамы. Үҙе әле ары – шауҡымы инде бире.

Уҙған төндә мине оҙаҡ йоҡо алманы. Башымдан төрлө-төрлө уйҙар уҙҙы. Байрам килгәс тә, ерҙә бөтә нәмә кинәт үҙгәрер төҫлө тойолдо миңә. Оло инәйем һөйләгән әкиәттәге һымаҡ, ут менән һыу бергә ҡушылыр, бүреләр менән һарыҡтар аралашып, бер көтөүҙә йөрөр, яуыздар – изгегә, дошмандар дуҫҡа әйләнер. Быға мин ҡыуанам да, бер аҙ шикләнәм дә. Һарыҡтар өсөн борсолам. Аңғармаҫтан ғына уларҙы мәкерле бүреләр быуып ташламағайы. Ут өсөн дә хәүефләнәм. Абайламаҫтан һыу үҙен һүндереп ҡуймағайы. Дуҫтар өсөн дә күңелем урынында уҡ түгел. Дошмандар, хәйлә ҡороп, үҙҙәрен харап итмәгәйе, тим...

Бер составлы **атама** һөйләмдәрҙә эйә составы ғына, йәғни эйә һәм уға эйәргән башҡа һүҙҙәр генә була, ә хәбәр составы бөтөнләй булмай, шуның өсөн атама һөйләмдәр предметтарҙың булыуын атап, һанап ҡына сығалар, улар тураһында бер ниндәй ҙә хәбәр бирмәйҙәр. Мәҫәлән: *Йыр. Тамаша залы. Залда ултырыусы балалар.*

**4-се күнегеү. Кемдең хикәйәһе яҡшыраҡ.**

“Ураҙа ғәйете”, “Ураҙа”, “Йома намаҙы” темаларына тик атама һөйләмдәрҙән генә торған инша яҙығыҙ. Кем иң күп атама һөйләмдәрҙән торған ҡыҙыҡлы хикәйә яҙа, шул еңеүсе була. Мәҫәлән:

Ҡорбан байрам.

Ҡояшлы көн. Матур ипләнгән йорт-ҡуралар. Халыҡ, халыҡ, халыҡ: ҡарттар, йәштәр, балалар. Һәр йөҙҙә – йылмайыу.

Ҙур-ҙур ҡаҙандар. Тәмле еҫле бауырһаҡтар, сәк-сәктәр, ҡоймаҡ. Тәм-том менән тулы оҙон өҫтәл.

**5-се күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡырға, төп идеяһын билдәләргә.

**Тәүбә**

Арсала һин йәнде вәсвәсәнән,
Табындырма ялған, ярлыҡҡа,
Гонаһтарым булһа,тәүбә итәм,
Йә раббым, тим, мине ярлыҡа!
Үҙ-үҙемә ҡылған зыян өсөн,
Баш тартмаған өсөн зар-аһтан,
Тәүбә итәм, раббым,

Үҙем белеп
Йә белмәй ҙә ҡылған гонаһтан.
Төңөләмен уйһыҙ арбалыуҙан,
Йөҙ сөйөрәм алдаҡ маҡсаттан.
Юрайым мин бары изгелектәр,
Ниәттәрем булһын аҡ, сафтан (Т. Искәндәриә).

**6-сы күнегеү.** Үҙенде тикшер. Нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәр ҡуйып, һөйләмдәрҙе тултырып яҙ, миҫалдар килтер. Һығымта эшлә.

1. Эйә составынан һәм хәбәр составынан торған һөйләм ... һөйләм тип атала.
2. Йә эйә составы, йә хәбәр составы ғына булған һөйләмдәр ... һөйләм тип атала.
3. Ике составлы йыйнаҡ һөйләмдәр ... һәм ... тора.
4. Ике составлы тарҡау һөйләмдәр ... һәм ... тора.

**Өйгә эш:**

1. Бер һәм ике составлы һөйләмдәргә бишәр миҫал яҙырға.
2. Дини байрамдар тураһында проект эшләргә.
3. Мәҡәлдәрҙе ятларға.

Йылы һүҙең, ихлас йөҙөң булһын.
Йылмайған йөҙ менән йылы сәй булһа, ҡунаҡҡа тағы ни кәрәк.
Балың булмаһа ла, телең балдай булһын.
Һыйлағанда һыу эс.

## Хәбәр составы ғына булған бер составлы һөйләмдәр

Иҫеректән ил биҙгән.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡырға. Йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ҡорорға. Хәбәр оставы ғына булған бер составлы һөйләмдәрҙе табып анализларға.

### Иҫерткес эсемлек эскәндең доғаһы 40 көн буйына ҡабул булмаҫ.

Ислам динендә аңды томалаусы барлыҡ әйберҙәр харам тип ҡабул ителә. Мәҙинә ҡалаһында беренсе ислам дәүләте төҙөлөп, намаҙ фарыз булғандан һуң да Мөхәммәт Пәйғәбәр эскелекте туҡтатыуҙа күп ауырлыҡ

кисерә һәм ул: „Раббым, был мәсьәләгә яҡтылыҡ бир, ярҙамыңды насип әйлә”, – тип доға ҡыла.

**Хәмерҙең аҙы, ла, күбе лә тыйыла. Иҫерткес эсемлектәр шауҡымы аҫтында шайтан барса йүнһеҙлекте эшләтә. Ана шуның өсөн дә динебеҙ кешелекте юҡҡа сығарған, әҙәм балаһының аҡылын юйған иҫерткес эсемлектәрҙе харам ҡыла. Ә кемдәр уны рәхәтләнеп ҡуллана, улар тура юлдан тайпыла.** Мөхәммәт Пәйғәмбәр ҙә: „Кемдәр иҫерткес эсемлектәр ҡуллана, улар Ҡиәмәт көнөндә ҡара йөҙ, көлһыу төҫтәге күҙҙәр менән телдәре түштәренә тиклем төшөп торған һәм ауыҙҙарынан туҡтауһыҙ шайыҡ ағып торған килеш баҫып торор”, – тигән. Ул тағы ла ағыу эсеүселәрҙе сәләмләмәҫкә һәм ауырыған мәлдәрендә яңғыҙ ҡалдырырға, тағы ла ундайҙарҙың үлеменән һуң аяттар уҡымаҫҡа кәңәш иткән. „Кешенең аңын томалаусы бар әйбер ул иҫерткес рәтенә инә, ә кемдер уны үҙ ғүмерендә ҡуллана – улар ожмахтан үҙ теләктәре менән баш тарта“,– тип тә әйткән Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм. Аллаһ илсеһе тағы ла эскеселәр хаҡында: „Ундайҙарҙың ҡәберенән үләкһә еҫенән дә насарыраҡ еҫе сығыр, тәнендә йылан менән саяндар мыжғып торор, ике аяҡ кейемендә лә тулы ут булыр, хатта улар мейене лә ҡайнатыр. Кемдәр эскеселәр менән бер өҫтәлдә ултырған – ул Бөйөк Яуап көнөндә һуҡыр булыр”, – тип әйтеп ҡалдырған. Шулай уҡ Пәйғәмбәребеҙҙең:”Намаҙ уҡыусы бер тапҡыр ғына эсә икән, уның 40 көн дауамында намаҙҙары ҡабул ителмәй”, – тигәнен дә хәтерҙә тотоу зарур. Хәҙистә лә әгәр ҙә кеше үлеме алдынан иҫерек була икән, ул иманһыҙ үлгән һанала.

Үҙен ысын мосолман тип һанаған кешегә бөтә яҡлап та спиртлы эсемлектәр һәм уға бәйле әйберҙәрҙән һаҡланыу мөһим. Кемдәр ошоғаса алкоголь менән мауыҡҡан, тиҙерәк тәүбәгә килеп, Аллаһы Тәғәләнән был гонаһтарҙан уны аралауын һорарға кәрәк. Ислам диненең тәмәке тартыуҙы ла хупламауын онотмайыҡ.

Беҙҙең ғүмер ҡыҫҡа, донъя үҙгәреүсән, ә баҡыйлыҡ – мәңгелек. Күберәген был фани, ваҡытлыса донъя хаҡында түгел, ҡиәмәт көнө хаҡында ҡайғыртығыҙ. Кешенең яҡшылығы ла, яманлығы ла үҙе менән юҡҡа сыҡмай, эҙһеҙ юғалмай. Яҡшылыҡтарҙың да, насарлыҡтарҙың да йоғонтоһо уның вариҫтарында, нәҫелендә, уның менән бергә ғүмер һөргән кешеләрҙә тороп ҡала. Эскелек менән балаларығыҙға кире өлгө күрһәтмәгеҙ. Хаталанмаған бәндә юҡ. Мосолман – тәүбә итә белеүсе, тәүбә итеүсе. Киләсәгебеҙ хаҡында уйлап, иманға ҡайтырға бер ҡасан да һуң түгел (Интернет селтәренән).

**2-се күнегеү.** Бирелгән һөйләмдәрҙе тикшерегеҙ. Хәбәрҙәр нисәнсе зат ҡылымдарынан бирелеүен асыҡлағыҙ.

1. Рамаҙан айында ураҙа тоторға ниәтләнәм, намаҙ уҡымайым. 2. Был сайтта Рамаҙан айы, ураҙа хаҡында яҙылған мәҡәләләрҙе уҡып, күберәк мәғлүмәт ала алаһығыҙ.

Эйәһе бирелмәһә лә, ниндәй һүҙҙең эйә булып килеүе хәбәрҙән беленеп торған һөйләм **билдәле эйәле** һөйләм тип атала. Билдәле эйәле һөйләмдең хәбәре берлектәге һәм күплектәге 1-се һәм 2-се зат һәм тик берлектәге 3-сө зат ҡылымдарынан килә, шуға күрә ниндәй һүҙҙең эйә булыуы ла беленеп тора.

**3-сө күнегеү.** Бирелгән ҡылымдар менән бер составлы һөйләмдәр уйлап яҙығыҙ. Билдәһеҙ эйәле һөйләм тураһында ҡағиҙә уйлап сығарығыҙ.

*Тоталар, һөйләнеләр, өйрәтәләр, ашайҙар.*

**Билдәһеҙ эйәле** һөйләмдә эште башҡарыусы була. Мәҫәлән: *Ҡунаҡтың кейеменә ҡарап ҡаршы алалар, аҡылына ҡарап оҙаталар.* Кемдер был эште башҡарған, ләкин кем икәне аныҡ ҡына билдәле түгел.

Билдәһеҙ эйәле һөйләмдәрҙә төп уй-фекер башҡарыусыға түгел, ә эш-хәрәкәткә йүнәлтелә. Һөйләмдең хәбәре булып өсөнсө зат хәбәр һөйкәлешенең күплек һанында торған ҡылым килә.

**4-се күнегеү.** Парҙар менән эш. **Эйәһеҙ** һөйләм тураһында ҡағиҙәне уҡығыҙ һәм башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре китабынан бишәр миҫал эҙләп яҙығыҙ.

Ҡайһы бер һөйләмдәрҙә эйә бөтөнләй булмай һәм уның кәрәклеге лә һиҙелеп тормай. Был һөйләмдең эш башҡарыусыһын да, эйәһен дә табып булмай. Мәҫәлән: *Бөгөн күп йүгереп, бик арытылды.* Бындай һөйләмдәрҙе **эйәһеҙ һөйләм** тип атайҙар. Эйәһеҙ һөйләмдәрҙең хәбәрҙәре теләк, уртаҡ ҡылымдарҙан, шулай уҡ төшөм һәм ҡайтым йүнәлешендәге ҡылымдарҙан килә.

**5-се күнегеү.** Төркөмдәрҙә эшләү. Һәр төркөм хәбәр составы ғына булған һөйләмдәрҙең бер төрөнә миҫалдар яҙа, ни өсөн был һөйләм нәҡ ул төргә ҡарағанлығын аңлата.

| Хәбәр составы ғына булған бер составлы һөйләмдәр | |
|---|---|
| **Һөйләм төрҙәре** | **Миҫалдар** |
| 1-се төркөм. Билдәле эйәле | |
| 2-се төркөм. Билдәһеҙ эйәле | |
| 3-сө төркөм. Эйәһеҙ | |

**6-сы күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡырға. Йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ҡорорға.

**Иман ҡайта ауылға!**

Әлхәмдүлилләһи, шөкөр,
ай балҡый манарала,
аҙан менән ауылыма
иман нуры тарала!

Иман килһә ауылыма,
ҡот һәм бәрәкәт артыр,
диндәштәр ҙур ихласлыҡта
күмәк намаҙға баҫыр!

Аҙан тауышынан ҡурҡып,
шайтандар йыраҡ ҡасыр,
хәмер һәм бүтән хәрәмгә
нәфсе лә юҡҡа сығыр!

Илдең киләсәге – йәштәр
уҡырҙар һәм эшләрҙәр,
донъя көтөп, динен тотоп,
балалар үҫтерерҙәр!

Бейек ярҙан иман йорто
ауылды байҡап торор,
изге ғибәҙәттәр беҙҙе
ҡалҡандай һаҡлап торор! (С. Ғарипова).

**Өйгә эш:**

1. 1-се күнегеүҙә ҡалын хәрефтәр менән билдәләнгән һөйләмдәргә синтаксик анализ яһағыҙ.

2. “Иҫерткес эсемлектәрҙең зыяны тураһында” темаһына сығыш әҙерләгеҙ.

3. Н. Мусин әҫәрҙәренән бер составлы һөйләмдәрҙең һәр төрөнә икешәр миҫал табып яҙығыҙ.

## Тулы һәм кәм һөйләмдәр

Ожмах әсәйҙәрегеҙҙең аяҡ аҫтында.
Әйтем.

**1-се күнегеү.** Таблицалағы һөйләмдәрҙе тикшерегеҙ. Тулы һәм кәм һөйләмдәр тураһында ҡағиҙә сығарығыҙ.

| Тулы һөйләмдәр | Кәм һөйләмдәр |
|---|---|
| – Һеҙ ҡайҙан килдегеҙ? | – Ауылдан. |
| – Был ауыл һиңә оҡшаймы? | – Эйе. |
| – Һин иртәгә мәсеткә бараһыңмы? | – Барам. |
| – Һеҙҙең хәлдәрегеҙ нисек? | – Яҡшы. |

**2-се күнегеү.** Тексты тасуири уҡығыҙ. Текст йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ҡороғоҙ. Тулы һәм кәм һөйләмдәргә берәр миҫал табығыҙ.

Һәр бер кеше өсөн иң беренсе, иң яҡын, иң ҡәҙерле кеше, ул – әсәй. Әсәйҙән лә яҡыныраҡ кеше юҡ донъя йөҙөндә. Ислам дине атай-әсәйҙе яратырға, уларға “уф” тип тә әйтмәҫкә ҡуша.

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдең «Исра» сүрәһенең 23-24-се аяттарында былай ти: “Аллаһ хөкөм итте үә бойороҡ бирҙе, фәҡәт Аллаһыға ғына ғибҙәт ҡылырға һәм ата-әсәгә изгелек итергә. Әгәр һин иҫән-һау саҡта уларҙың береһе йәки икеһе лә ҡартлыҡҡа ирешһәләр, һин уларға «уф» та тимә, ҡәһәрләмә, кәйефтәрен ебәрмә, бәлки уларға һәр ваҡыт йомшаҡ һәм һөйкөмлө һүҙҙәр һөйлә! Улар алдында мәрхәмәт менән түбәнселек ҡанатын йәй һәм: «Раббым, улар мине бала сағымда шәфҡәт менән үҫтергәндәре кеүек, Һин дә уларға донъяла һәм ахирәттә шәфҡәт ҡыл!» – тип әйт.

Тағы ла бер аятында шулай тигән:

– Беҙ кешегә: ата-әсәңә изгелекле бул, тип васыят иттек. **Әсәһе уны ниндәй ҡыйынлыктар менән ҡарынында йөрөтә. Ике йыл буйы һөтөнән айырмайынса имеҙеп үҫтерә.** Тик, иң башта Миңә, унан һуң ата-әсәгә шөкөр ит, тип васыят иттек.

Ҡөрьән Кәримдең ошо аяттарында Аллаһ Раббыбыҙ әсәй кешене нығыраҡ яратырға ҡуша. Беҙҙе улар 9 ай буйы ауыр булһа ла, үҙҙәренең

йөрәк аҫтында күтәреп йөрөткәндәр. Ауырлыҡ менән тыуҙырғандар. Күкрәк һөттәрен имеҙеп, йылытып, яратып үҫтергәндәр.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд салаллаһу ғәләйһис-сәләм атай-әсәйҙе хөрмәтләргә ҡушҡан. Ә әсәй кешене бигерәктә ныҡ яратырға һәм хөрмәт итергә ҡушҡан. Шул турала бик күп хәҙис шәрифтәр бар, мәҫәлән:

Бер ваҡыт бер сәхәбә килеп Пәйғәмбәребеҙ салаллаһу ғәләйһис-сәләмдән һорай: “Йә Аллаһтың илсеһе, кешеләр араһында кемде нығыраҡ хөрмәтләйһең?

– Әсәйеңде.

– Ә унан һуң кемде?

– Әсәйеңде, – тип әйтте Пәйғәмбәребеҙ салаллаһу ғәләйһис-сәләм.

– Ә унан һуң, Йә Аллаһтың илсеһе?

– Әсәйеңде, ә шунан һуң атайыңды, – тип әйтте Пәйғәмбәребеҙ салаллаһу ғәләйһис-сәләм.

Пәйғәмбәребеҙ салаллаһу ғәләйһис-сәләм бер хәҙис шәрифендә: «Ожмах әсәйҙәрегеҙҙең аяҡ аҫтында», – тигән (Дини календарҙән).

**3-сө күнегеү.** Шиғырҙы тасуири уҡығыҙ, йөкмәткеһе буйынса әңгәмә ҡороғоҙ.

“Иң бай кеше кем?» тиһәгеҙ
Ул кеше – мин, белегеҙ.
Маҡтана тип уйламағыҙ,
Килегеҙ ҙә күрегеҙ:
Йортобоҙ бар, атай уны
Һалды үҙ ҡулы менән.
Өйрәтте ул, мин дә хәҙер
Балта тоторға беләм.
Атай кеүек, әсәйем дә
Байлығы беҙҙең өйҙөң.
Ниндәй генә хәлдәрҙә лә
Ул таба беҙҙең көйҙө.
Һеңлем дә бар, ҡустым да бар –
Улар ҙа беҙҙең байлыҡ
Хоҙай биргән тағы беҙгә
Иң ҙур байлыҡ – ул һаулыҡ (Интернет селтәренән).

**4-се күнегеү.** Төркөмдәрҙә эш. Ике төркөм дә “Әҙәбиәттә әсәй образы” темаһына етешәр һорау төҙөй, һуңынан бер-береһенә һорауҙарҙы бирәләр, яуап биргән төркөм кәм һөйләмдәр менән генә эш итергә тейеш.

*Мәҫәлән.* – “Әсә йөрәге” ҡобайырын уҡынығыҙмы?

– Уҡыныҡ.

**5-се күнегеү.**

**Викторина**

1. Ниндәй һөйләмгә башҡа һөйләмдәр, исеменән сығып, “түбәнһетеп ҡарай”?
2. Ниндәй һүҙҙәр “өндәшә?”
3. Ниндәй һөйләмдәр бер генә һүҙҙән дә тора ала?
4. Ниндәй һөйләмдәрҙең атамаһы “бөхтә” мәғәнәһен бирә?
5. “Өндәргә, бойорорға яратыусы” һөйләмдәр әйтегеҙ.

**Өйгә эш:**

1. 2-се күнегеүҙә ҡалын хәрефтәр менән билдәләнгән һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләгеҙ.

2. “Әҙәби әҫәрҙәрҙә әсәй образы” темаһына проект эшләгеҙ.

3. Мәҡәлдәрҙе ятлағыҙ.

Әсә хаҡы – тәңре хаҡы.
Әсәһен ҡәҙерләгән ҡәҙерле булыр.
Әсә күңеле балала, бала күңеле далала.
Әсә йылыһы – ҡояш йылыһы.
Ата-әсәһенә ҡәҙер күрһәтмәгән – үҙе лә изгелек күрмәҫ.
Донъяла ата-әсәнән башҡа бар нәмә лә табыла.

## Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә

Белеме барҙың ҡәҙере бар.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Таблицалағы текстарҙы укығыҙ. Һәр һөйләмдең грамматик нигеҙен билдәләгеҙ. Текстар нимәһе менән айырыла?

| | |
|---|---|
| Бына һин Аллаһы тәғәләнең ризалығы өсөн яҡшылыҡ эшләйһең. Кешеләр һөйөнәләр. Һиңә рәхмәт әйтәләр. | Бына һин Аллаһы тәғәләнең ризалығы өсөн яҡшылыҡ эшләйһең, кешеләр һөйөнәләр, һиңә рәхмәт әйтәләр. |

Ике йәки бер нисә ябай һөйләмдән төҙөлгән һөйләм ***ҡушма һөйләм*** тип атала. Ҡушма һөйләм эсенә ингән ябай һөйләмдәрҙе мәғәнә һәм интонация берләштерә.

**2-се күнегеү**. Уҡып сығығыҙ. Ниндәй китаптар матур китаптар була? Шул турала әңгәмә ҡороғоҙ. Һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен билдәләгеҙ.

Матур китаптар – ғәжәйеп матур күренәсәк күҙгә, аулаҡтағы серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш, көсһөҙлөктә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, таризхты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрзең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе,хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә. Шуның өсөн китап алғанда һаранланмағыҙ. Китаптарҙан айырылмағыҙ.

...Файҙалы китаптарҙы уҡыу күңелгә шатлыҡ ҡына килтерә, фекергә аҙыҡ була, зиһенгә ҡеүәт бирә (Р.Фәхретдинов).

Ҡушма һөйләмдәрҙең бер нисә **грамматик нигеҙе** була.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, ҡушма һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ.

Һәр кеше, һәр бер ҡәүем һәм милләтең бәхетле булыуының төп сәбәбе белемдер. Ашлыҡтар өсөн ямғыр ни тиклем кәрәк булһа, әҙәм балаһы өсөн белем шул тиклем кәрәк. Кешеләрҙең дә белемлеләре менән белемһеҙҙәре шәриғәт алдында тиң түгел. Шуның өсөн һеҙ белем алығыҙ һәм балаларығыҙҙы ла белем юлына ҡуйығыҙ, белем таратығыҙ һәм таралыуына ярҙам итегеҙ.

Хәҙерге заманда белемле ҡәүемдәр сәғәтләп һәм минутлап үҫкән хәлдә, белемһеҙҙәре юҡҡа сыға. Белемле утын киҫеүселәр араһында янында ғилемһеҙҙәре артта ҡалғандары күренеп торғанда, башҡаларға ни ҡала? Шуның өсөн Йәнәб-и Аллаһ ғибәҙәт итер өсөн белем табығыҙ, һөнәр, сәнәғәт, игенселек һәм сауҙа менән көн үткәрергә булһағыҙ, белем алығыҙ (Р.Фәхретдинов).

**4-се күнегеү**. Түбәндәге күнегеүҙә мәҡәлдәр буталып бирелгән, төҙәтеп яҙығыҙ.

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1 | Аҡса тарат, | а | асҡысы – белем. |
| 2 | Белемле үлмәç, | б | ир ҡәҙере-белемдә. |
| 3 | Белемлегә йот юҡ, | в | белемһеҙ көлмәç. |
| 4 | Донъя-йоҙаҡ, | г | уҡымаһаң, белгәнең дә онотолор. |
| 5 | Ер ҡәҙере-игендә, | ғ | уҡыған мең һөнәрле. |
| 6 | Китап уҡыһаң, белемең артыр, | д | уҡымаған ил туҙыр. |
| 7 | Уҡыған ил уҙыр, | ҙ | белем йый. |
| 8 | Наҙан бер һөнәрле, | е | белемһеҙгә ҡот юҡ |

**5-се күнегеү**. 4-се күнегеүҙә бирелгән мәҡәлдәрҙе күсереп яҙып, ҡушма һөйләмдәрҙең нисә ябай һөйләмдән торғанын асыҡлағыҙ.

**Өйгә эш.**

1. Китап, уҡыу тураһында өс афоризм яҙып килегеҙ.
2. “Белемлелек арыçландан көслө батыр, шуға атланмай һинең төшөң һис өн булмай” һүҙҙәрен эпиграф итеп, белем, уҡыу тураһында ҙур булмаған инша яҙығыҙ.
3. Ятаҡан китабығыҙға буктрейлер эшләгеҙ.

## Теҙмә ҡушма һөйләм.
## Теркәүесһеҙ һәм теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр.

Ағыу хәтәр, ағыуҙан ғәйбәт хәтәр.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ. Һөйләмдең баш киçәктәренең аçтына һыҙығыҙ. Һығымта яһағыҙ.

Динебеҙҙә ғәйбәттең гонаһы зина ҡылыуға тигеҙ, тип әйтелә. **Алла күп кәмселекте ғәфү итә, ләкин ялған һүҙ һөйләү ғәфү ителмәй.**

Ғәйбәт һөйләп, нахаҡ тағып, бер кешене төрмәгә ултырталар. **Был кеше төрмәнән сыға, ғәйбәтсе уның янына килә, ғәфү итеүен һорай.** Төрмәнән сыҡҡан кеше мендәр алып сығырға ҡуша. Алып сыҡҡас, мендәрҙең тышын йыртып, йөнөн туҙҙыра. Унан ялған һөйләүсегә шул йөндө кире

тултырырға ҡуша. «Нисек быны йыйып бөтәйем? Был мөмкин түгел», – ти ғәйбәтсе. «Бына шулай, әйткән һүҙҙе, таралған ғәйбәтте кире йыйып булмай. Һине ғәфү итә алмайым», – ти ғәйбәттән зыян күргән кеше.

Динебеҙҙә ғәйбәт һөйләгән кешенең сауаптары кемде һөйләйҙәр – шуға күсә. **Рәнйетелгән кешегә тау һымаҡ сауап килә, ялғанды һөйләүсе кеше күп нәмәнән яҙа.**

Раббыбыҙ: «Бер-берегеҙҙән кәмселек эҙләмәгеҙ, үҙегеҙҙән эҙләгеҙ», – тигән. Шулай уҡ өйҙә булған кәмселектәрҙе, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәтте урамға сығарып һөйләргә ярамай. «Кәмселектәрегеҙҙе һөйләмәгеҙ, йәшерегеҙ. Мин һеҙҙең гонаһтарҙы ла йәшерермен», – тигән Раббыбыҙ. Ғәйбәт ишетеп, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ҡайғырып йөрөүҙе Ҡөрьән хупламай. **Ҡайғырыу йөрәкте бөтөрә, ә шайтан кешенең һағышлы сағын ярата.** Үткәнде, кисәге көндө уйлап, бөгөнгө көндөң бәрәкәтен юғалтмағыҙ. Ғүмер былай ҙа ҡыҫҡа, ҡайғырып, уны тағы ла ҡыҫҡартмағыҙ. Аллаға ышанығыҙ, ауырыған, сырхаған ваҡытта Раббыбыҙ үҙенең шифаларын насип итһен. Иҫәнлектә, һаулыҡта булайыҡ! (“Йәшлек” гәзитенән).

Бер-береһенә теҙеү интонацияһы ярҙамында бәйләнгән ике һәм унан да күберәк үҙ аллы һөйләмдән торған синтаксик конструкция **теҙмә ҡушма һөйләм** тип атала. Теҙмә ҡушма һөйләм эсендәге һөйләмдәр бер-береһенә буйһонмай, береһенән сығып икенсеһенә һорау биреп булмай.

Теҙмә ҡушма һөйләм эсендәге һөйләмдәр үҙ-ара интонация йәки теркәүестәр ярҙамында бәйләнә, шунан сығып, улар ике төргә бүленә: 1) теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм; 2) теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм.

**2-се күнегеү.** Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе табығыҙ, күсереп алығыҙ, схемаларын төҙөгөҙ. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙәге теркәүестәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

Туғаның, яҡының, ҡәрҙәшең һинең эргәңдән китә, ә һин уны гел яҡшы һүҙ менән иҫкә алаһың. Был ғәйбәт түгел. Әгәр яныңда булмаған ҡәрҙәшеңде боҙоҡ, яман һүҙ менән иҫкә төшөрһәң, ул ғәйбәт. Һин дуҫыңды яҡшы һүҙ менән иҫкә алаһың, ул был һүҙҙәрҙе кемдәндер ишетә, һөйөнә. Донъянан үткән кешеләрегеҙҙе лә тик яҡшылыҡ менән иҫкә алығыҙ. Ниндәй генә яман кеше булһа ла, ниндәй генә йүнһеҙ булһа ла, уның бер яҡшы яғы була, шуны иҫкә төшөрөгөҙ. Уны иҫкә алғанда: «Ҡара әле, ниндәй һәйбәт кеше ине, Аллаһының рәхмәте булһын», – тип доға ҡылып ҡуйығыҙ. Боҙоҡлоҡтары, ҡәбәхәтлектәре уларҙың үҙҙәренә Ҡиәмәт көнөндә иҫкә төшөрөлә, ә беҙ

яҡшылыҡтары менән иҫкә алайыҡ, аҙ ғына булһа ла гонаһтары кәмеүенә сәбәпсе булайыҡ (И. Сафин).

**3-сө күнегеү.** Ике төркөмгә бүленеп эшләгеҙ. “Һүҙ сәсһәң, ғәйбәт урырһың” тигән темаға фекер йөрөтөгөҙ. Бер төркөм теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр төҙөһөн, икенсеһе – теркәүесһеҙ. Кем күберәк?

**4-се күнегеү.** Схемаларға ярашлы теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр төҙөгөҙ, грамматик нигеҙҙәрен билдәләгеҙ.

1. [ ], хатта [ ].
2. [ ] лә, [ ].
3. Йә [ ], йә [ ].
4. [ ], һәм [ ].
5. [ ], [ ], ә [ ].

**5-се күнегеү.** Хаталарын төҙәтеп уҡығыҙ. Һығымталар эшләгеҙ.

1. Теҙмә ҡушма һөйләмдәр составындағы һөйләмдәр бер-береһенә буйһоноп килә.

2. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм эсенә ингән һөйләмдәр бер-береһенә киҫәксәләр ярҙамында бәйләнеп килә.

3. Теҙмә ҡушма һөйләм составында ике ябай һөйләм булырға тейеш.

**Өйгә эш.**

1. 2 теркәүесле һәм 2 теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм төҙөп яҙығыҙ. Схемаларын төҙөгөҙ.

2. “Ғәйбәт сәйнәгәнсе сүбәк сәйнә” мәҡәлен нисек аңлайһығыҙ?

3. Түбәндә бирелгән шиғырҙарҙың береһен яттан һөйләргә әҙерләнегеҙ.

1) Ғәйбәтте кем һөйләһә лә,
Ғәйбәтте кем тыңлаһа ла –
Гонаһтарын уртаҡ итәм.
Ғәйбәт һөйләгән табынды
Фәрештәләр урап үтә.
Тәүбә итһә, зинаның да
Гонаһтары сығыр юҡҡа.
Ғәйбәтсенең ғәйебе бөтмәҫ,
Ғәйбәтсегә юҡ ярлыҡау.
Анау кеше ғәҙел булды,

Эше сауап.
Уйы һәйбәт.
Тик барыһын ҡырып һалды
Ауыҙынан сыҡҡан ғәйбәт (Хәҙис).

2) Һыҙланма, дуҫ, ғәйбәт теле оҙон,
Әммә ҡыҫҡа уның ғүмере.
Күрмәйһеңме, ғәйбәт ҡапсығының
Күҙе һытыҡ, биле көмөрө.
Көлдәгенә йөрәк кере һеңгән,
Йән биҙҙергес татлы көлөшө.
Ғәйбәт менән ярап, еңел йәшәү –
өлөшөнә төшкән көмөшө.
Бәхетһеҙ ул – иблес кеүек, ул да
Хаҡлыҡ донъяһынан һөрөлгән.
Сәбәләнеп йәшәй күкрәгендә
Быҫҡып ятҡан зәһәр һөрөмдән (З.Биишева).

## Эйәртеүле ҡушма һөйләм.

Телең менән фекер йөрөтмә, мейең менән фекер йөрөт.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Таблицалағы һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ, уларҙың айырмаһы нимәлә икәненә төшөнөгөҙ.

| | |
|---|---|
| Әҙәм балаһы был донъяла тик тура һүҙ генә һөйләй, ә Аллаһы Тәғәлә уға ожмах ишектәрен аса. | Әҙәм балаһы был донъяла тура һүҙ генә һөйләһә, Аллаһы Тәғәлә уға ожмах ишектәрен аса. |

- Үрҙә килтерелгән һөйләмдәргә схема төҙөгөҙ. Баш һөйләм шаҡмаҡ йәйәләр менән, эйәрсән һөйләм йомро йәйәләр менән бирелеүен иҫегеҙҙә тотоғоҙ.

**Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә** бер һөйләм икенсеһенә буйһоноп, уға эйәреп килә. Эйәртеп килгәне **баш һөйләм** тип, эйәреп килгәне **эйәрсән һөйләм** тип атала. Эйәрсән һөйләм баш һөйләмдән сыҡҡан һорауға яуап бирә.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. 2 эйәртеүле ҡушма һөйләм табып, дәфтәрегеҙгә күсереп яҙығыҙ. Схемаларын төҙөгөҙ. Баш һөйләмдән сығып, эйәрсән һөйләмгә һорау ҡуйығыҙ.

### Телде гонаһтан һаҡлауҙың әһәмиәте

Кешегә Аллаһ тарафынан яҙылған иң ҙур ниғмәттәрҙең береһе – ул тел. Был ағза кеше тормошонда бик ҙур урын алып тора.

Кешене юҡтан бар итеү, Ҡөрьәнде өйрәтеү һәм уға һөйләшеү һәләтен биреү Аллаһ Тәғәләнең рәхмәтен күрһәтеүсе билдәләрҙән һанала. Әгәр ҙә кешегә һөйләшеү һәләте бирелмәһә, ер йөҙөндә тормош бармаҫ ине. Тел ярҙамында кеше аралаша, белем ала, күңелендә булған хистәрен башҡаларға еткерә.

Кеше теле менән яҡшы һүҙҙәр ҙә, гонаһлы һүҙҙәр ҙә һөйләргә мөмкин. Әгәр ул теле менән хәйерлеһен генә һөйләһә, Аллаһ Тәғәлә уны йәннәткә индерә.

Кеше ниндәй генә һүҙ һөйләмәһен, уның һәр һүҙен ике фәрештә яҙып бара. Аллаһ Тәғәлә әйтә: «Ике яҙып барыусы фәрештә кешенән сығыусы бөтә нәмәне теркәп бара. Улар уң һәм һул яҡта ултыра. Ул ниндәй генә һүҙ әйтмәһен, уны инде күҙәтеп тороусы фәрештә яҙырға әҙер тора».

Әҙәм балаһы иртә менән торғас, бөтөн ағзалар ҙа телгә мөрәжәғәт итәләр. Улар шулай тиҙәр: «Беҙҙең өсөн Аллаһтың ғазабынан һаҡлан! Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ һиңә бәйле. Әгәр ҙә һин дөрөҫ юлдан барһаң, беҙ ҙә тура юлдан барабыҙ. Әгәр ҙә һин дөрөҫ юлдан сыҡһаң, беҙ ҙә тура юлдан сығабыҙ» (Тирмизи).

Аллаһ Тәғәлә барыбыҙҙы ла тел афәтенән һаҡлаһын, уны бары тик хәйерле һөйләүҙә генә ҡулланырға ярҙам итһен! (А. Сафин).

**3-сө күнегеү**. Түбәндә бирелгән баш һөйләмдәргә эйәрсән һөйләмдәр өҫтәп яҙығыҙ. Тыныш билдәләренә иғтибар итегеҙ.

1. Беҙ тик дөрөҫөн генә һөйләйбеҙ, сөнки .... .
2. ..., имам вәғәз һөйләй башлағайны.
3. Шул асыҡланды: .... .

**4-се күнегеү**. Кәрәкле бәйләү сараларын ҡулланып, ябай һөйләмдәрҙән эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр төҙөгөҙ.

1. Кеше араһын бутай. Аллаһ Тәғәлә тамуҡ ғазаптарына дусар итә.
2. Әҙәм бер һүҙ әйтә. Фәрештәләр яҙып бара.

3. Кеше Аллаһ риза була торған бер һүҙ генә әйтә. Аллаһ уны дәрәжәләргә күтәрә.

**5-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Быға тиклем ҡушма һөйләм тураһында нимә белә инегеҙ?
2. Бөгөнгө дәрестә ниндәй яңы мәғлүмәт алдығыҙ?
3. Нимә аңлашылманы?

**Өйгә эш.**

1. “Уйламай һөйләгән – ауырымай үлгән” тигән мәҡәлде эпитет итеп алып, 3-5 минутлыҡ сығыш әҙерләгеҙ. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр ҡулланығыҙ.

2. Схемаларға ярашлы һөйләмдәр төҙөгөҙ.

1) [ ]: ( ).

2) ( ), шуға [ ].

3) [ ], сөнки ( ).

3. Ваҡытлы матбуғаттан ике эйәртеүле ҡушма һөйләм табып яҙығыҙ. Синтаксик анализ эшләгеҙ.

## Эйәрсән һөйләм төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсә

Ғилем – хазина.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты тасуири итеп уҡығыҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һөйләмдәрҙе күсереп алығыҙ. Баш һәм эйәрсән һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. Схема төҙөгөҙ. Баш һөйләмдән сығып, эйәрсән һөйләмгә һорау ҡуйығыҙ.

**Уҡы!**

Аллаһ Тәғәлә Әҙәмде яралтып, остаз булараҡ, уға барлыҡ ғилемде өйрәткән. Фәрештәләр иһә быға ҙур борсолоу белдергән.

– Әҙәм балаһын яралтыу ниңә кәрәк булды һуң, Раббым? **Ул ниәттәренде тормошҡа ашырмаһа, Һин ни ҡылырһың?**

**– Әҙәм балаһы насар юлды һайламаç, сөнки уға ғилем бирҙем**.

Белем – барлыҡ күркәм сифаттарҙың тамыры. Ғилемле кеше һәр саҡ камиллыҡҡа, яҡтылыҡҡа ынтыла, күңеле бөтөн була, башҡаларҙы яманламай, һауаланмай, ялҡауланмай, хәйлә-мәкер ҡормай, бүтәндәргә

һалышмай һ.б. Ғилемле кеше үҙе булып ҡала, сөнки тормошта тәғәйен урыны, ышаныслы терәге – белеме – бар. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең “Ғилемде бишектән алып гүргә ингәнсе өйрәнегеҙ,” тигән хәҙисе иһә белгәнең менән генә ҡәнәғәтлек кисермәйенсә, аң-белем даирәһен даими киңәйтеү зарурлығын тәкрарлай. Ә уның иге-сиге юҡ. **Дин әһелдәре әйтеүенсә, ғилем күҙ ҡарашы етмәç даръяға тиң.** Әҙәм балаһы шуның ярында тамсылап һыу эскән ҡошсоҡ кеүек кенә.

Белемле кеше тәрбиәле, әҙәпле. Ошоға ярашлы бер хикмәтте иçкә төшөрөп үтәйек. Атай кеше улын баçыуға алып сыға. Арыш башаҡтарының берәүҙәре эйелгән, икенселәре күккә туп-тура ҡарап, ғорур үçеп ултыра икән. “Атай, ниңә улар бер төрлө түгел? – тип аптыраған бала. – Был ни хикмәт? Эйелгәндәре матур түгел, кәрәктәре лә юҡтыр инде...” Атаһының яуабы иһә шулай булған: “Туп-тура үçкән арышҡа һоҡланма, улым. **Башаҡтары буш булғас, туп-тура тора улар**. Ә инде эйгәндәрҙең эсе тулы ем – туҡлыҡ, уңыш билдәһе был”.

Хикмәттән аңлашылыуынса, “емле”, йәғни ғилемле кеше үҙен һис ҡасан әллә кемгә ҡуйып, юғарыға ҡарап тәкәбберләнеп йөрөмәй, киреһенсә, ниндәйҙер кимәлдә түбәнселектә ҡала.

Исламда ғилем – иң юғары төшөнсәләрҙең береһе. Изге китапта ла, хәҙистәрҙә лә уның баһаһы бихисап мәртәбә тәкрарланған. Ғилемгә, үçешкә ынтылмағандың иманһыҙға яҡын тороуы билдәләнгән, бындай күренештәрҙе бөтөрөү юлдары күрһәтелгән. “Мосолмандың наҙан булыуы ярай торған эш түгел, – тигән, мәçәлән, Ғүмәр бин Хаттаб. – Белгәндәр – өйрәтергә, белмәгәндәр өйрәнергә тейеш”.

Тормоштоң “асҡысы” булараҡ, ғилем яҡшы, мул йәшәүгә юл яра. Замандың ауырлыҡтарын тәү сиратта уға таянып, лайыҡлы үтергә, киләсәккә тос орлоҡ ҡалдырырға бурыслыбыҙ, тип өйрәтә дин әһелдәре. Ҡөрьәндәге “Уҡы!” тигән бойороҡтоң төп асылы был (Д. Ишморатова).

| **Эйәрсән һөйләм** | **Һорауҙар** |
|---|---|
| Эйә һөйләм | кем? нимә? |
| Хәбәр һөйләм | ни эшләй? |
| Аныҡлаусы һөйләм | ниндәй? кемдең? нимәнең? |
| Тултырыусы һөйләм | кемгә? нимәгә? кемде? нимәне? кемдә? нимәлә? кемдән? нимәнән? кем/ нимә менән? кем/ нимә тураһында? |
| Ваҡыт һөйләм | ҡасан? |
| Урын һөйләм | ҡайҙа? |

| | |
|---|---|
| Сәбәп һөйләм | ни өсөн? ни сәбәпле? нилектән? |
| Маҡсат һөйләм | ниндәй маҡсат менән? |
| Рәүеш һөйләм | нисек? ни рәүешле? |
| Күләм-дәрәжә һөйләм | күпме? ни тиклем? ниндәй дәрәжәлә? |
| Сағыштырыу һөйләм | нимә ни эшләгән кеүек? кем ни эшләгән кеүек? |
| Шарт һөйләм | кем ни эшләһә? нимә ни эшләһә? ниндәй шарттарҙа? |
| Кире һөйләм | кем ни эшләһә лә? нимә ни эшләһә лә? кем ни эшләүгә ҡарамаҫтан? нимә ни эшләүгә ҡарамаҫтан? |

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Фекер алышығыҙ. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе табып, эйәрсән һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (ғәләйһис-сәләм): «Әҙәм балаһына бишектән алып ләхеткә хәтле ғилем алыу фарыз»,– тигән. Ғилемде фарыз дәрәжәһенә күтәргән. Фарыз – мотлаҡ үтәлергә тейеш ғәмәл. Шуға ла беҙ, нисә йәштә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт ғилем алырға тырышырға тейешбеҙ.

Әгәр берәй әҙәм ғилем алыу ниәте менән өйөнән сығып китһә, ул әйләнеп ҡайтҡансы, Аллаһ Тәғәләнең бөтөн фәрештәләре, бар мәхлүктәре, хатта һыуҙағы балыҡтары ла ошо кешегә хәйер доға ҡылып торорҙар.

Ғилемде өйрәтеүсе, йә булмаһа, өйрәнеүсе, йә булмаһа яратыусы булайыҡ, ғилемде яратмаусы, ғалимды хөрмәт итмәүсе булмайыҡ. Һәр ваҡыт белем алырға, үҙебеҙгә күберәк сауап йыйырға тырышайыҡ.

Ата-әсә балаһына донъя һәм дин ғилеме өйрәтергә тейеш. Дини белем биреү – ата-әсәнең Аллаһ Тәғәлә алдында бурысы. Ошо бурысты үтәмәһәк, Аллаһ Тәғәлә алдында шунын өсөн яуап тотасаҡбыҙ. Балаларыбыҙҙы әкренләп дингә яҡынайтайыҡ, үҙебеҙ ҙә шул юлдан яҙмайыҡ. Дини белемдең нигеҙе – Аллаһ Тәғәләне таныу. Аллаһ бер, Аллаһ бөйөк, Аллаһтан башҡа илаһи юҡ, тейеүҙә. Мөхәммәт (ғәләйһис-сәләм) Пәйғәмбәрҙе уның рәсүле итеп таныуҙа.

Әгәр даими ғилем өйрәнеүсе һәм уны башҡаларға таратыусы кеше ҡапыл вафат булһа, ул шаһит булыр. Шаһит – ул дин юлында үҙен аямай көрәшеп, йәнен биреүсе кеше.

Алған бар ғилемебеҙҙе башҡаларға өйрәтеү – беҙҙен бурыс. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (ғәләйһис-сәләм): «Арҡаһына китаптар тейәлгән ишәк һымаҡ булмағыҙ», – тип әйткән. Ғалим кеше бар булған белемен үҙендә генә йөрөтөргә түгел, ә башҡаларға таратырға тейеш. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең

белемде йәшермәйек, башҡаларға еткерәйек. Аллаһы Тәғәлә беҙҙән риза булыр (Дини сайттан).

**3-сө күнегеү**. Һөйләмдәрҙе тулыландырып, эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр төҙөгөҙ. Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

1. Мин шуға шатланам: .... .
2. .... , шуның белеме тәрән була.
3. Әгәр кеше ысн күңелдән ғилемгә ынтылһа, .... .
4. Шундай әҙәмдәр була: .... .
5. Ата-әсәһе нисек кенә тырышһа ла, .... .

**4-се күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Эйәрсән һөйләмдәрҙең нисә төрө бар?
2. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙән нимә менән айырыла?
3. Тултырыусы эйәрсән һөйләмдең һорауҙары ниндәй?

**Өйгә эш.**

1. Билдәле мәғрифәтсе Р. Фәхретдиновтың “Нәсихәттәр” китабынан китап һәм уҡыуға ҡағылышлы бүлеген табығыҙ. Унан эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе яҙып алығыҙ. Эстәлеге буйынса фекер алышырға әҙерләнегеҙ.
2. “Белем алыу – энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу” тигән мәҡәлде нисек аңлайһығыҙ? Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр ҡулланып, фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.
3. “Мин белем алған уҡыу йорто” тигән презентация әҙерләгеҙ.

### Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү саралары

Тота белһәң, аҙ ҙа бәрәкәтле була.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Бәрәкәт тураһында вәғәздән өҙөк уҡығыҙ. Ҡалын хәрефтәр менән бирелгән һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләгеҙ, схема төҙөгөҙ. Эйәрсән һөйләмдәрҙең башһөйләмгә бәйләнеү сараларын асыҡлағыҙ.

**Бәрәкәт**

**Аллаһ Тәғәләнән беҙ нимә һорайбыҙ, Ул шуны бирә.** Аллаһтың биргән ниғмәттәрен һанар булһағыҙ, һанап бөтөрә алмаҫһығыҙ.

Аллаһ Тәғәлә үҙенең сикһеҙ рәхмәте менән бирә торған ниғмәттәрҙең береһе –Бәрәкәт.

Күбебеҙҙең телендә, теләктәрендә булған ошо төшөнсә ниндәй мәғәнәләргә эйә һәм уны булдырыуҙың сәбәптәре ниндәй һуң?

**Бәрәкәт һүҙенең мәғәнәһе шул: ул артыуҙы һәм күбәйеүҙе белдерә. Ҡайһы бер ғалимдар уға ошондай аңлатма бирә: аҙҙың да файҙаһы күп булыуы мөмкин.** Икенсе төрлө әйтһәк, нимәнеңдер ҙә булһа көтөлгәнгә ҡарағанда күберәк килеп сығыуы.

Һәр әйберҙең дә үҙ бәрәкәте бар:

Мал-мөлкәттең бәрәкәте – уның өҙөлмәүе һәм файҙалы булыуы.

Ғаиләнең бәрәкәте – уның имен һәм тыныс булыуы.

Ғүмерҙең бәрәкәте – уның оҙон һәм игелек менән тулы булыуы.

Ғилемдең бәрәкәте – уны аңлау һәм уның буйынса ғәмәл ҡылыу.

Балаларҙың бәрәкәте – уларҙың игелекле булыуҙары.

Күреүебеҙсә, бәрәкәт – ул бөтә яҡшылыҡ һәм изгелектең йыйылмаһы (Интернет селтәренән).

Эйәрсән һөйләмдәр баш һөйләмгә айырым һүҙҙәр йә ялғауҙар ярҙамында бәйләнә. Бер нисә бәйләүсе сара бергә бирелеүе лә мөмкин. Мәҫәлән: *Мөхәммәт Пәйғәмбәр әйткәнг**ә**, һәр мосолман колаҡ һалырға тейеш. Йортобоҙҙа бәрәкәт арт**һын өсөн**, беҙ Аллаһ Тәғәләне йыш иҫкә алырға тейешбеҙ.*

Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә интонация ярҙамында ла бәйләнә. Мәҫәлән: *Мин беләм: ул бер ваҡытта ла намаҙын ҡалдырмай.*

Бәйләүсе сара булып мөнәсәбәт һүҙҙәр һәм алмаштар ҙа килә ала. Мәҫәлән: ***Кем** доға уҡый, **шуның** бәрәкәте арта.*

**2-се күнегеү**. Парлап эшләгеҙ. Иптәшегеҙ менән эйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә төрлө саралар менән бәйләп, 3 эйәртеүле ҡушма һөйләм төҙөгөҙ. Схема һыҙығыҙ, синтаксик анализ яҙағыҙ.

**3-сө күнегеү.** Беренсе һәм икенсе бағаналағы һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡығыҙ һәм эйәртеүле ҡушма һөйләм килеп сығырлыҡ итеп, парҙарын табығыҙ. Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып, дәфтәрегеҙгә күсереп яҙығыҙ, схемаларын төҙөгөҙ.

| | |
|---|---|
| Кем хәйер-саҙаҡа бирә | ураҙа башлана |
| Шул билдәле | беҙ шулай йәшәргә тейеш |
| Аллаһ Тәғәлә ни ҡушһа | шуның малы арта |
| Рамаҙан айы етеү менән | ысын күңелдән уҡылған доға Аллаһҡа барып етә |
| Мөхәммәт Пәйғәмбәребеҙ нисек өйрәтһә | шул булыр |

**4-се күнегеү.** Төркөмдәрҙә эшләгеҙ. Дини белемегеҙгә таянып, түбәндәге темаларға әңгәмә ҡороғоҙ. Телмәрегеҙҙә эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр ҡулланығыҙ.

1-се төркөм өсөн тема. Бәрәкәтте йәлеп итә торған сәбәптәр күп, шуларҙың бер-нисәһен атап үтегеҙ. Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

2-се төркөм өсөн тема. Ниндәй ғәмәлдәр йорттан, ғаиләнән бәрәкәт китеүенә сәбәпсе булырға мөмкин?

**5-се күнегеү**. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрөн асыҡлағыҙ.

1. Аллаһ Тәғәләнән ярлыҡау һорап, үҙебеҙҙең ауылдағы мәсеткә саҙаҡа алып барҙым.
2. Аллаһ Тәғәләнән ярлыҡау һорағас, Ул әҙәм балаһына бәрәкәт ишектәрен асты.
3. Аҙан тауышын ишетһәм, кәйефем күтәрелә.
4. Намаҙға баҫҡан көндән алып, уның тормошо ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе.

**Өйгә эш.**

1. Мәҡәлдәр китабынан эйәртеүле ҡушма һөйләм булған 3 мәҡәл күсереп алығыҙ, эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеү сараларын билдәләгеҙ.
2. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең төрөн билдәләүгә иптәштәрегеҙ өсөн бер эш төрө уйлап килегеҙ.
3. “Хәрәкәттә – бәрәкәт” темаһына 2 минутлыҡ видео төшөрөгөҙ.

## Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау

Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ.

Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡып сығығыҙ. Уның эстәлеге буйынса әңгәмә ҡороғоҙ. Үҙегеҙ һайлап, ике һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ. Һөйләм киҫәктәренең һәр ҡайһыһы тураһында мәғлүмәт бирегеҙ.

### Исламда атайсал төшөнсәһе

Аллаһ рәхмәте менән Мәккә еңелгәндән һуң, Пәйғәмбәребеҙ унда тағы ла ун биш көнгә тороп ҡала. Был көндәр ансарҙар күңелендә, әлбиттә, борсолоу хистәре уята. Сафа тауында доға ҡылып тоғанда ансарҙарҙың был борсолоуҙарын Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм үҙе лә һиҙеп ҡала. Мәҙинәлә йәшәгәндәрҙең: "Үҙ иленә ҡайтҡас, Аллаһ илсеһе унда ҡалмаҫ", – тип һөйләшеп торғандан һуң, был турала яңы аяттар менән хәбәр ҙә бирелгәс, ул ансарҙар эргәһенә килә:

"Эй, ансарҙар! Ундай нәмәнән Аллаһ үҙе һаҡлаһын! Һижрәт менән мин һеҙҙең ҡалағыҙға килдем! беҙҙең бөтә тормошобоҙ, айырылмаҫлыҡ булып, бергә бәйләнгән. Һәм мин һеҙҙең менән бергә ваҡытта үлеп тә ҡалырмындыр", – ти.

Тыуған ҡалаһы Мәккәгә ҡарата һөйөү хисе ниндәй генә көслө булмаһын, ул Ислам дине ҡеүәт тапҡан изге ҡалаға, Мәҙинә халҡына тоғролоҡ һаҡлап ҡала.

Был урында хикмәт эйәләренән берәүҙең бик тапҡыр һүҙҙәрен килтереп китке килә:

"Әгәр ҙә, – тигән ул, – Йәннәттең үҙенең дә Тыуған илдән ситләштерер көсө була ҡалһа, илде һағыныу хистәренән мин унда ла һарғайып үлер инем."

Сөнки Ватанды һөйөү ул имандан килә.

"Һиндостанда, – тигәндәр хикмәт эйәләре, – өс төрлө хайуан өс төрлө сифаты менән айырылып тора: бик оҙаҡ замандар ситтә йөрөһә лә, дөйәләр үҙ илен; йәшәрлек урындары булмаһа ла, ҡоштар ояларын; башҡа ергә ҡарағанда әллә ни файҙа тапмаһа ла, кешеләр Тыуған илен һағына," – тигәндәр.

Тыуған илгә ҡарата һөйөү Исламда имандың бер сағылышы булып һанала. (Дини календарҙән).

**2-се күнегеү**. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ. Аныҡлаусыларҙы табып, аҫтарына һыҙығыҙ. Уларҙың ниндәй һүҙ төркөмөнән булыуын билдәләгеҙ.

**Уралымды иҫкә төшөрөп...**

Фирғәнәнең иркен үҙәнендә
Гөл-сәскәнең мең-мең төҫтәре,
Төҫтәренә, сәскә еҫтәренә
Кемдең генә китмәҫ иҫтәре.
Ағастар ҙа бында бейегерәк,
Һәм күберәк емеш уңышы.
Ләкин барыһынан ҡиммәтерәк
Тыуған яҡтың тыйнаҡ һулышы.
Һағындыра һәр саҡ атайсалым,
Ҡайҙа ғына табан юл алма:
Алыҫыраҡ унан киткән һайын
Мөхәббәтем арта Уралға.
Ағиҙелдәй һыуҙы таба алмаҫһың,
Ҡайҙа ғына барма, уралма.
Ниндәй генә ерҙә таң атмаһын –
Иң гүзәл таң беҙҙең Уралда! (Р. Ҡолдәүләт).

**3-сө күнегеү**. Төркөмдәрҙә эш. 1-се төркөмгә эш: “Тыуған илем” темаһына 10 бер составлы һөйләмдәрҙән торған текст яҙығыҙ. 2-се төркөмгә эш: “Өфөм – баш ҡалам” темаһына кәмендә 10 һорауҙан һәм 10 яуаптан торған диалог төҙөгөҙ. Тулы һәм кәм, йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр ҡулланығыҙ. 3-сө төркөмгә эш: “Башҡортостан” темаһына 4 теҙмә ҡушма һөйләм яҙығыҙ. 4-се төркөмгә эш: “Тыуған илдең данлы улдары” темаһына 3 эйәртеүле ҡушма һөйләм яҙығыҙ.

**4-се күнегеү**. Мәҡәлдәрҙе тулыландырып яҙығыҙ. Ҡушма һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

1. Ил көйөнгәндә көйөн, ил ... .
2. Илгә ҡушылһаң, ир булырһың, илдән айырылһаң, ... .
3. Илдең биле ныҡ булһа, ирҙең ... .
4. Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ... .
5. Тау билһеҙ булмаҫ, әҙәм ... .
6. Ташлаһаң илеңде, ... .
7. Халыҡҡа хыянат – ....

**5-се күнегеү**. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Һөйләмдең әйтелеү маҡсаты буйынса төрөн билдәләгеҙ.
Яҡты булһын киләсәгең,
Илем-илкәйем. (М. Тайсина)
а) өндәү
б) һорау
в) хәбәр
г) бойороҡ

2. Ҡайһы юлда һөйләм киҫәге яҙылған?
а) исем
б) теркәүес
в) хәбәр
г) өндәү

3. Йыйнаҡ һөйләмде билдәләгеҙ.
а) Өфөлә йәшәй.
б) Мин Өфөнән.
в) Өфө матурлана.
г) Матур Өфө.

4. Бер составлы һөйләмде билдәләгеҙ.
а) Тыуған ил – алтын бишек.
б) Тыуған илен һәр ваҡыт һағынып иҫкә ала.
в) Мин тыуған ауылыма һирәк ҡайтам.
г) Ватан ул, ҡыҙым, тыуған ил.,
Бына беҙ торған урын (Р. Ниғмәти).

5. *Тыуған ил ҡайҙа ҡушһа, ир-егет шунда барыр*. Эйәрсән һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.
а) эйә һөйләм
б) маҡсат һөйләм
в) урын һөйләм
г) сәбәп һөйләм

**Өйгә эш.**
1. “Башҡортостан – тауҙар иле” тигән кроссворд эшләгеҙ.
2. Билдәле башҡорт шағирҙарының береһенең тыуған ил тураһындағы шиғырын яттан һөйләргә әҙерләнегеҙ.

3. Лира Яҡшыбаеваның “Мөжәүир хәҙрәт” исемле китабынан тыуған төйәкте һүрәтләгән берәй өҙөктө күсереп алығыҙ. 3 һөйләмгә синтаксик анализ эшләгеҙ.

## Телмәр үҫтереү дәресе
## Проект эше.

“Беҙ йәшәгән төбәктә хәләл-туризм” тигән темаға проект эше башҡарығыҙ. Был проектты эшләгәндә ошоларға иғтибар итегеҙ:

- Маҡсатын, тәғәйенләнешен билдәләү.
- Хәләл-туризмға нигеҙ булырҙай ҡағиҙәләр теҙмәһе төҙөү.
- Кеше ҡулынан артыҡ зыян күрмәгән күркәм тәбиғәтле географик урын һайлау.
- Милли колоритты күрһәтерлек, бөтә уңайлыҡтары булған йәшәү урындарын (турбаза) планлаштырыу.
- Унда эшләргә тейеш кешеләр иҫәбен булдырыу. Һәр береһенең вазифаһын, бурыстарын күҙАллау.

Үрҙә күрһәтелгән пункттар буйынса проекттың презентацияһын эшләгеҙ. Һөйләмдәр төҙөк, бай эстәлекле, хатаһыҙ булырға тейеш.

# СТИЛИСТИКА

## Йәнле һөйләү стиле.

Телмәр таҙалығы – аҡыл нигеҙе.

**1-се күнегеү.** Кросвордты сисегеҙ.



1) Мосолман дине.
2) “Ғәлиә” мәҙрәсәһенә нигеҙ һалыусы.
3) Мосолман календары буйынса 12-се ай.
4) Башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир.
5) Ислам динендә ай тәҡүиме.
6) Миләди йыл иҫәбе башланыуға сәбәп булған пәйғәмбәр исеме.
7) Ғәрәп һүҙе, сит ергә күсенеү тигәнде аңлата.
8) Ҡорбан ғәйетенән һуңғы өс көн йәғни, зөлхизә айының 11,12,13-сө көндәре нисек атала?
9) Сәғүд Ғәрәбстанындағы ҡала.
10) Иң изге ай.

➢ **Стилистика -** уй-фекерҙе сағылдырыу, тасуирлау саралары системаһын өйрәнеүсе фән. Боронғо гректарҙа менән римляндарҙа “стиль” һүҙе яҙыу ҡоралын аңлатҡан. Тора-бара был һүҙҙең мәғәнәһе үҙгәргән һәм киңәйгән. Башҡорт телендә *йәнле һөйләү, матур әҙәбиәт, фәнни, рәсми, публицистик, хаттар, дини стилдәр* бар. Стилистика икегә – лингвистик һәм функциональ төрҙәргә бүленә. Лингвистик стилистика һүрәтләү сараларын өйрәнә, ә функциональ стилистика функциональ стилдәрҙе өйрәнә.

Функциональ стилдәрҙең һәр береһе ике төрлө формала ғәмәлгә ашырыла: һөйләү һәм яҙма. Уларҙың ниндәй төрҙә булыуы аралашыу рәүешенә бәйләнгән – туранан-тура, ҡара-ҡаршы һөйләшепме, әллә яҙма документтар ярҙамындамы. Теге йәки был формала аралашыу төрлө стилдәрҙә төрлөсә. Мәҫәлән, йәнле һөйләү стиле өсөн аралашыуҙың типик формаһы – телдән һөйләү рәүешендә, йәғни ҡара-ҡаршы һөйләшеү сифатында була; ә бына фәнни һәм рәсми эш ҡағыҙҙары стилдәрендә аралашыу тик яҙма формала ғына була.

**2-се күнегеү.** Тексты дөрөҫ интонация менән уҡығыҙ. Үҙенсәлекле тел сараларын күрһәтегеҙ. Текст ниндәй стилгә ҡарай?

Бер мәл уҡыусы остазынан:
– Яңы эш башлау өсөн аҙнаның ҡайһы көнө уңышлы икән?
Уҡытыусы бер аҙ уйлап торған да:
– Шаршамбы, – тигән.
Барыһы ла йәһәтләп дәфтәрҙәренә дөрөҫ яуапты яҙа башлаған, тик бер уҡыусы ғына ашыҡмаған.
– Ә һин ниңә яҙмайһың?
– Артабан ни әйтерегеҙҙе белгәнгә.

– Ә ни тип әйтәсәкмен мин?

– Кесе йома, йома, шәмбе, йәкшәмбе... Уңыш аҙымың аҙна көнөнә ҡарамай.

➢ Халыҡтың **йәнле һөйләү теле стиле** башҡорт теленең төп һүҙлек фонды менән грамматик төҙөлөшөнә таяна. Был стилдә билдәле бер һөйләштең, диалекттың үҙенсәлеге асыҡ сағыла, теркәүестәр бик һирәк ҡулланыла, кәм һөйләмдәр менән бер составлы һөйләмдәр өҫтөнлөк итә, һүҙҙәрҙең ҡәҙимге тәртибе эҙмә-эҙ һаҡланмай. Был стиль бүтән стилдәрҙән үҙенең «тәртипһеҙ» булыуы менән айырылып тора, сөнки кеше үҙ туған телендә һөйләгәндә йәки һөйләшкәндә телмәренә талапсан булмай, уға артыҡ контроль дә яһамай. Һәр бер кешенең һөйләү стиле уның белем, дөйөм культура кимәленә лә тығыҙ бәйләнгән.

Ҡулланылыу өлкәһе: көндәлек тормош, көнкүреш, ғаилә мөнәсәбәттәре.

Аралашыу маҡсаты: хәбәрләшеү, хәл-әхүәл белешеү, әңгәмәләшеү, туғандарың менән әңгәмә ҡороу, бәйләнеш булдырыу һ.б.

Телмәр төрҙәре: диалог, монолог, әңгәмә, һөйләү, яҙыу, хатлашыу һ.б.

Йәнле һөйләү стиле – ул ғәҙәти телмәр. Ғәҙәти телмәрҙә тел материлы – һүҙҙәр, һүҙ формалары, күркәм телмәр саралары – алдан әҙер булмай.

Йәнле һөйләү стилендә ҡул ишараһы, ҡараш, күҙ ҡыҫыу, эйәк ҡағыу, баш сайҡау, ниндәй шарттарҙа һөйләшеү ҙә ҙур роль уйнай. Аралашыу ситуацияһына, аралашыусыһына, хәл-ваҡиғаның мөһимлегенә йәиһә мөһим түгеллегенә ҡарап, йәнле телмәр үҙгәреп тороусан. Йәнле һөйләү стиле аралашыусыларҙың профессияһына ҡарап та айырылырға мөмкин.

**3-сө күнегеү.** Текстарҙы уҡығыҙ, унда яҙылған ислам әҙәбе хаҡында фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.

1. Суфьян ибн ‘Абдулла ас-Сакафи Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән (с.ғ.с.) һораған: – Минең өсөн иң ҡурҡынысы нимә? Мөхәммәт пәйғәмбәр телгә күрһәткән.

Ысынлап та, ислам динендә тел – ул төрлө гөнаһтар бәләһе, ти. Шуға бәйле кеше һәр әйткән һүҙен уйлап әйтергә тейеш (Хәҙис).

2. Тәккәберлеккә бирелмәгеҙ, – тип өйрәткән пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәлләйһис-сәләм. – Был һыҙат – шайтан фиғеле.

“Мин” тигән һүҙҙе лә тәүгеләрҙән булып иблис әйткән. Ул Аллаһ тәғәлә фәрештәләренә Әҙәмгә сәждә ҡылырға бойорғас, бойороҡто үтәмәгән. “Мин

кешенән яҡшыраҡ, – тип тәккәберләнгән. – Һин мине уттан, ә уны балсыҡтан яралттың”.

Кемдең кемдән өҫтөнөрәк, яҡшыраҡ булыуын Аллаһ Тәғәлә үҙе белә (Хәҙис).

**4-се күнегеү.** Мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

Телдең күрке - һүҙ.
Теле яmegamандың көнө яман.
Татлы тел таш ярыр.
Тел менән тирмән тарттырып, онло булып булмай.
Тел менән һөйләгәнсе, ҡул менән эшләп күрһәт.
Телеңде бәйләп ҡуй ҙа, ҡулыңды эшкә ҡуш.
Телеңә таянма, көсөңә таян, көсөңә таянма, эшеңә таян.
Телеңә урын тапмаһаң, тешеңә ҡыҫтыр.

**5-се күнегеү.** Диалогты ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. Иптәшегеҙ менән үҙ-ара ислам әҙәбе хаҡында диалог яҙығыҙ.

Намаҙ уҡымаған, ураҙа тотмаған бер ауыл ағайы юлға сыҡҡан. Шунда уға таныш булмаған бер әҙәм эйәргән. Ауыл кешеһенән ҡайҙа барғанлығын һорашҡас, тегеһе:

- Ҡаланан ҡайһы бер кәрәк-яраҡ алаһы бар, шунда барам әле, — тип яуап ҡайтарған.

- Мин дә һинең менән барһам яраймы? Юлда яңғыҙ йөрөү эсте бошора бит, - тигән.

Ауыл ағайы ризалашҡан. Икәүләп юлды дауам иткәндәр. Бара торғас, бер йөҙөм баҡсаһына килеп етә былар. Теге ауыл ағайы әхлаҡһыҙ булыу өҫтөнә ҡараҡ та икән. Тиҙ генә баҡсаға инә лә йөҙөм ашарға тотона. Етмәһә, баҡсаға зарар килһен тип, тәлгәш-тәлгәш йөҙөмдәрҙе өҙөп, ергә ташлай. Юлдашы бының сәбәбен һорашҡас:

- Баҡса минеке түгел, зарары хужаһына булһын, — тип яуап ҡайтара.

Юлды артабан дауам итә былар. Бара торғас, бер ауылға килеп етәләр. Нәҡ шул ваҡыт мәсет манараһынан өйлә намаҙына саҡырып аҙан яңғырай. Аҙан тауышын ишеткәс, юлда эйәргән кешенең сырайы боҙолоп китә. Күҙ осо менән генә юлдашына ҡарап ала. Уның мәсеткә инергә һис тә ниәте юҡлығын һиҙенгәс, һорай:

- Намаҙ уҡырға инмәйһеңме ни?

- Мин намаҙ уҡымайым, ураҙа ла тотмайым.

- Улайһа, туғаным, мин һиңә юлдаш була алмам.

Ауыл ағайы аптырап ҡала.

- Ниңә улай? Мин бит һиңә бер ниндәй ҙә насарлыҡ эшләмәнем.

- Дөрөҫ, минең алда бер ғәйебең дә юҡ. Ләкин бына һине лә, мине лә яратҡан Аллаһ ҡаршыһында ҙур ғәйебең бар.

- Нисек? Һүҙеңде әйтеп бөтөр, зинһар.

- Күпме юл үттек, ә һин Аллаһы Тәғәлә хупларлыҡ бер нәмә лә эшләмәнең. Киреһенсә, ул хупламаған ғәмәлдәр ҡылдың. Кеше баҡсаһына индең, уға зарар килтерҙең. Аҙан тауышын ишетә тороп, намаҙ уҡырға ла ниәтең юҡ.

**6-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1) Стилистика фәне нимә өйрәнә?

2) Лингвистик стилистика нимә өйрәнә?

3) Функциональ стилистиканың өйрәнеү объекты нимә?

7) Функциональ стилдәрҙе һанағыҙ.

8) Йәнле һөйләү стиленең төп үҙенсәлектәрен атағыҙ.

9) Мосолмандарҙың һөйләү телмәре башҡа кешеләрҙекенән айырыламы? Айырылһа, нимә менән?

**Өйгә эш.**

1. Йәнле һөйләү стиле тураһында белешмәне уҡығыҙ. Һөйләү телмәрендәге был стилгә хас сараларҙы күҙәтегеҙ.

2. Дини әҙәбиәттән телгә ҡағылышлы текстар килтерегеҙ.

3. Матур әҙәбиәттән йәнле һөйләү стilenә ҡараған өҙөктө яҙып алығыҙ, уға стилистик анализ яһағыҙ.

## Матур әҙәбиәт стиле

Уйҙың күрке – тел, телдең күрке – һүҙ.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Текстарҙы уҡығыҙ, һүрәтләү сараларын билдәләгеҙ. Текстар ниндәй стилгә ҡарай?

Йән бирер дин юлында мосолман ир,
Аҙашмаҫ яҡшыларға ҡушылған ир.
Аллаһыны сифат менән танымаһа,

Ҡай китап ул кешене мосолман дир?

(Мифтахетдин Аҡмулла)

Был донъяла уйламайса эш итмәҫ бул,
Сер бүлешеп, ахмаҡтарҙы иш итмәҫ бул.
Әле телең, күҙ-ҡолағың иҫән саҡта
Телеңде тый, күҙеңде йом, ишетмәҫ бул.

(Ғүмәр Хәйәм)

➢ Матур әҙәбиәт стиле башҡа функциональ стилдәрҙән ныҡ айырыла. Әгәр башҡа стилдәрҙең бөтәһе лә ғәҙәттәге аралашыу бурысын үтәһә, матур әҙәбиәт стилендә тел фекерләү формаһы ғына булып түгел, ә художестволы һүрәтләү элементы булып та сығыш яһай. Матур әҙәбиәт стиле башҡа функциональ стилдәрҙән тел-һүрәтләү сараларының киң мөмкинлектәрен оҫта һәм тулы файҙаланыуы менән айырыла. Конкрет әҙәби әҫәрҙә был һүрәтләү сараларының ҡулланылыу кимәле һәм үҙенсәлектәре яҙыусының шәхси оҫталығы менән дә тығыҙ бәйләнештә була.

Матур әҙәбиәт стиле үҙенең стилистик саралары һәм мөмкинлектәре менән киң диапазонлы булыуы менән айырыла. Телдең әҙәби һәм әҙәби булмаған формалары (мәҫәлән, ерле һөйләштәр, жаргондар), башҡа бөтә стилдәрҙең алымдары матур әҙәбиәт стилендә ысынбарлыҡты образлы ҡабул итеү һәм һүрәтләү маҡсаттарында ҡулланыла.

Матур әҙәбиәт стилендә, образлы һүрәтләү маҡсаттарынан сығып, телдең башҡа бөтә функциональ стилдәре лә ҡулланылырға мөмкин. Маҡсаттан сығып, бер әҙәби әҫәрҙә төрлө жанрҙағы әҫәрҙәрҙең стиль алымдары файҙаланыла ала.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, уға стилистик анализ эшләгеҙ.

Көнө [Батыршаның], ғәҙәттәгесә, иртәнге намаҙҙан башланды. Иркен ыҙба таңғаса тамам һыуынып өлгөргән. Әҙәм балаһына бындай саҡта йоҡоларынан уянып тороп китеүҙәре өшәнес: йылы урынында татлы төштәр күреп иҙерәй-иҙерәй йоҡла ла йоҡла икән дә һуң. Әммә хужа кеше, урта йәштәрҙәге ирәбе ир, йыбанып ятмай йәһәт кенә тороп кейенергә кереште. Өй эсе күҙ төрткөһөҙ дөм ҡараңғы. Усаҡ янына үтеп, кистән күмеп ҡуйған өйөмөнән йылы көл аралаш тере ҡуҙҙарҙы бармаҡтары менән йыйыштырҙы ла өҫтөнә әҙер туйыҙын-сыраһын һалып, өрә-өрә ут ҡабыҙып ебәрҙе. Дөрләй

төшкәс, ҡоро утынын өҫтәне. Ут-ялкындан тирә-йүн бер аҙ яҡтырып китте, һалҡын шыҡһыҙ ыҙбаға йән ингәндәй булды.

Ҡомғандағы һыуы йылымыслanғас, хужа ҡуңалтаҡ ҡатаһын ҡатып тәһәрәт алып инде. Йыйыштырған урыны – кейеҙ йәймә һикеһе өҫтөнә намаҙлығын йәйеп, ялан аяҡ баҫыуы булды, үҙен бөтөнләй икенсе донъялағылай тойҙо. Унын өсөн хәҙер усаҡ утынан яҡтырып торған намаҙлығы аҡлығы ла күңеле паклығы ғына бар ине. Ҡараңғы тын тирә-яҡ, фани донъя, гүйә юк ине уға. Әҡбәр тәҡбирен әйтеп фатиха сүрәһен ярым көйлө тауыш менән уҡығанда ойоҡкос рухани халәткә күскәйне инде. Бер-ике рәҡәғәне үткәндә намаҙсыбыҙ сәждәгә китә-китә Аллаһы Тәғәләһе ихтыярында ине тамам. Намаҙ мосолманға фарыз ғибәҙәт кенә түгел, Аллаһына һығынышы, көн-йүн рәүешенә көйләнеше лә ине шикелле. Тимәк, намаҙлы икән, нәсирлы.

Намаҙға талған бер хәлдән баҫып торған ереңә кире ҡайтыу, нисектер, сәйерерәк тойолғандай, әҙәмгә фанилығына инеп китеүе лә, ай-һай, ап-анһат түгелдер, моғайын. Хужаны тышта эш-көшө көтә: мал-тыуарын, ҡош-ҡортон ҡарайһы, барын барлайһы бар. Унан ғилем эше, имамлығы, башҡаһы.

(Ғайса Хөсәйенов )

> ➢ **Текска стилистик анализ яһау тәртибе**
>
> 1. Стиле
> 2. Ҡулланыу сфераһы
> 3. Төп функцияһы
> 4. Телмәр төрө
> 5. Адресат характеры
> 6. Формаһы
> 7. Стиль һыҙаттары
> 8. Морфология
> 9. Синтаксис

**3-сө күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Килтерелгән өҙөк ниндәй әҫәрҙән?
2. Өҙөктә кем тураһында һүҙ бара?
3. Кем ул Батырша? Уның тураһында нимәләр беләһегеҙ?
4. Текста ниндәй осор һүрәтләнгән?

5. Тексҡа ниндәй исем бирерһегеҙ?

**4-се күнегеү.** Текстан дин өлкәһенә ҡараған һүҙҙәрҙе табығыҙ һәм аңлатмалы һүҙлектән мәғәнәләрен яҙығыҙ.

*Өлгө:* намаҙ – мосолмандарға фарыз булған биш ғәмәлдең икенсеһе, балиғ булған кеше үтәргә тейеш булған ғибәҙәт.

**5-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы, фекерегеҙҙе еткерегеҙ. Текста телгә алынған башҡорт әҙиптәре хаҡында нимәләр беләһегеҙ?

Дин менән әҙәбиәт бер-береһенә бик яҡын. Улар донъяны таныуҙа һәм аңлатыуҙа фаразға, образлы һәм күргәҙмәле күрһәтеүгә, өгөт нәсихәткә ныҡ таяна. Кешенең аңына ғына түгел, күңеленә үтеп инеү хәстәрлеген күрәләр.

Дин өгөтләй, әҙәбиәт арбай.

Ҡәҙимге әҙәбиәт өсөн дин – иманы, идея-эстетик ерлеге булһа, дин өсөн әҙәбиәт яҡын ярҙамсыһы, образ-биҙәктәре ҡаҙнаһы ине.

Әүәлге күп яҙыусыларҙың дин әһелдәре булыуы ла ерле юҡтан түгел.

Әүәлге башҡорт әҙиптәренең байтағы – күренекле дин әһелдәре лә. Һибәтулла Сәлихов – Һибәтулла ишан – атаҡлы ишан, Әбелмәних Ҡарғалы – арҙаҡлы шәйех хажи, Шәмсетдин Зәки – Шәмсетдин суфый – суфый әҙәм, Ризаитдин бин Фәхретдин – Риза ҡаҙый һәм мөфтөй. Араларында тағы ахундары, имамдары, мөҙәристәре бар.

Совет осоро ваҡытында тәрбиәләнеп, шул осорҙа ижад итеүсе яҙыусыларыбыҙҙы совет хөкүмәте, коммунистар партияһы атеистар итеп тәрбиәләне. Улар ижадына дин бығаса ят булды. Шуныһы ҡыуаныслы: һуңғы йылдарҙа ижад итеүсе әҙиптәребеҙ әҫәрҙәрендә дини тема яңынан күтәрелә башланы (Ғайса Хөсәйенов).

**6-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1. Матур әҙәбиәт стиленең төп һыҙаттары тураһында һөйләгеҙ.
2. Матур әҙәбиәт стиле башҡа стилдәрҙән нисек айырыла?
3. Матур әҙәбиәт стиленең жанрҙарын атағыҙ.
4. Ислам динен яҡтыртҡан ниндәй әҙәби әҫәрҙәрҙе беләһегеҙ?
5. Ислам әҙәбиәтендә матур әҙәбиәт стиленең ниндәй алымдары ҡулланыла? Миҫалдар килтерегеҙ.

6. Матур әҙәбиәт стиленең ислам әҙәбитендәге иң юғары өлгөһө? (изге китап)

7. Нилектән ислам әҙәбиәтендә элекке дәүерҙәрҙә ижад ителгән әҫәрҙәрҙең авторы күрһәтелмәгән һәм аноним рәүешендә сығарылған?

**Өйгә эш.**

1. Ислам динен яҡтыртҡан әҙәби әҫәрҙән өҙөк килтерегеҙ. Стиль яғынан анализ яһағыҙ.

2. Ғайса Хөсәйеновтың «Ҡанлы 55» романын уҡығыҙ. Һөйләргә әҙерләнегеҙ.

3. Дини әҙиптәр хаҡында (Әбелмәних Ҡарғалы, Шәмсетдин Зәки, Ризаитдин бин Фәхретдин, Һибәтулла Сәлихов һ.б.) проект эше эшләгеҙ.

## Фәнни стиль.

Ғилемһеҙ ғалим – емешһеҙ ағас.
Ж. Кейекбаев.

**1-се күнегеү.** Түбәндәге таблицанан терминдарҙы табығыҙ. “Башҡорт теленең академик һүҙлегенән” уларҙың мәғәнәләрен яҙып алығыҙ.

| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Д | И | О | С | П | Ч | Б | Ә | Т |
| А | Н | М | О | О | Н | Ә | К | У |
| И | А | Я | Л | М | А | Р | Ә | Б |
| С | Л | Т | М | Л | Ы | Ҡ | И | А |
| У | А | Л | А | Т | Ф | И | Б | Л |
| И | М | И | М | А | Т | Т | Ә | Л |
| Н | А | Ф | И | Н | А | Р | С | Б |
| М | М | А | Ҙ | Ғ | Р | Ә | Х | И |

➢ Фәнни стилдең маҡсаты – фәнни эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәһен аңлатыу, тасуирлау. Ул стиль монолог телмәр формаһында тормошҡа ашырыла. Фәнни стиль - киң төшөнсә. Ул фән һәм техника өлкәһендә файҙаланыла, ләкин формаһы, йөкмәткеһе, тәғәйенләнеше менән бер төрлө булмаған әҙәбиәтте берләштерә.

Бөтәһенән дә элек әҙәби телдең был төрө ғалимдарҙың төрлө фән өлкәһендә тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһен тасуирлау өсөн ҡулланыла. Фәнни стилдең төп маҡсаты - фәнни эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәһен аңлатыу, һүрәтләү. Ул стиль монолог формаһында тормошҡа ашырыла.

Фәнни стилдә телмәр саралары алдан һайланып, әҙерләнеп яҙыла.

Фәнни стилдең үҙенә генә ҡараған жанрҙары бар: монография, фәнни мәҡәлә һәм китаптар, диссертациялар, белешмәләр, дәреслектәр һ.б. Уларҙа төрлө фәнгә ҡараған термин, атама һәм билдәләмәләр, ҡағиҙәләр күп була. Һүҙҙәр үҙҙәренең төп мәғәнәһендә ҡулланыла, фекерҙе, фәнни ҡарашты логик эҙмә-эҙлекле биреүгә бигерәк тә ныҡлы иғтибар ителә. Фәнни стилдә тағы махсус фразеологик берәмектәр, ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр, дөйөмләштереүсе һүҙҙәре булған һөйләмдәр йыш ҡулланылыусан. Һәр саҡ тип әйтерлек һүҙҙәр тик тура мәғәнәһендә генә йөрөй, һирәкләп хис-тойғо биҙәге биреүсе һынлы һүҙҙәр ҙә осрай.

Фәнни стилдәге текстарҙа сығанаҡтарға, цитаталарға һылтанмалар биреү мотлаҡ. Фәнни стилдең үҙенә генә хас жанрҙары, билдәле бер ҡалып менән эшләнгән әҫәрҙәре бар: монография, фәнни мәҡәлә, китап һәм брошюра, диссертация, фәнни белешмә әҙәбиәт, дәреслектәр һ.б. Уларҙа төрлө фәнгә ҡараған термин, атама, билдәләмәләр, ҡағиҙәләр, таблицалар күп була. Һүҙҙәр үҙҙәренең төп мәғәнәһендә ҡулланыла, фекерҙе, фәнни ҡарашты логик эҙмә-эҙлелектә биреүгә бигерәк тә ныҡлы иғтибар ителә. Фәнни стилдә тағы махсус фразеологик берәмектәр, ҡатмарлы синтаксис төҙөлмәләр, дөйөмләштереүсе һүҙҙәре булған һөйләмдәр йыш ҡулланылыусан. Һәр саҡ тип әйтерлек һүҙҙәр тик тура мәғәнәһендә генә йөрөй. Хис-тойғо биреүсе һынлы һүҙҙәр бик һирәк осрай.

Фәнни стилдәге текстарҙа сығанаҡтарға, цитаталарға һылтанмалар биреү мөһим шарт һанала. Был стилгә фактик материалдың күплеге, аныҡ һәм ҡыҫҡа ғына итеп мәғлүмәт биреү хас. Ысынбарлыҡтағы күренештәрҙе тасуирлау, уларҙы өйрәнеү һәм аңлатыу фәнни стилдең төп йөкмәткеһен тәшкил итә.

Фәнни стиль теленең әҙәби тел нормаларына тап килеүе, белдерергә теләгән фекерҙе йыйнаҡ һәм дөрөҫ, тулы һәм асыҡ сағылдырыуы, айырым һөйләмдәрҙең, һөйләм төркөмдәренең, текстың мәғәнәүи өлөштәренең үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә булыуы шарт.

Фәнни әҫәрҙең кемгә - белгестәрме әллә киң ҡатлам уҡыусыларғамы - тәғәйенләнгәнлегенә ҡарап, фәнни һәм фәнни-популяр стилдәрҙе айырып йөрөтөү бар. Уларҙы артабан тағы фәнни-уҡыу, фәнни-публицистик, фәнни-мемуар кеүек тармаҡтарға бүлергә лә мөмкин.

Фәнни-популяр әҙәбиәт тип ниндәй ҙә булһа берәй фундаменталь мәсьәлә, техника, мәҙәниәт буйынса шул фәндәрҙең береһенән дә белгес булмаған уҡыусылар өсөн еңел һәм аңлайышлы тел һәм һөйләмдәр менән яҙылған хеҙмәткә әйтәләр.

Теге йәки был фундаменталь фәнни проблема, техника, мәҙәниәт һ.б. фәндәр буйынса махсус белеме булмаған киң масса уҡыусылар, ҡыҙыҡһыныусылар өсөн еңел дә, аңлайышлы ла тел һәм һөйләмдәр менән яҙылған хеҙмәтте фәнни-популяр әҙәбиәт (әҫәр) тип атайҙар.

**2-се күнегеү.** Өҙөктө уҡығыҙ, уның стиль үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ. Тексты файҙаланып, ғөмүмән фәнни стилдең (телмәрҙең) билдәләрен һанап күрһәтегеҙ. Тексың ниндәй фән өлкәһенә ҡарағанын әйтегеҙ.

Философия материя менән рухтың беренселлеге йәки икенселлеге мәсьәләһендә генә түгел, йәшәү һәм бөтмөш, рухтың күсеш йә күсмәҫ мәсьәләһендә лә төрлө ағымдарҙы хасил итә.

Дини философия үлемде кеше ғүмеренең бөтөүе түгел, рухтың икенсе хәлгә, баҡый донъяға күсеүе мәңгелеге менән аңлата.

Материалистик филолсофия кеше үлеү менән йәне лә үлә, рухы ла бөтә тип бара. Боронғо грек философтары Платон, Сократ үлемде кеше аңында ғына йәшәгән субъектив төшөнсә, тимәксе.

Көнсығыштың атаҡлы әҙибе һәм философы Йәләлетдин Руми иһә, үлем ул ишәк ише мәхлүктәргә генә ауыр, сөнки улар үлемһеҙлек фекеренән мәхрүм, ти. Уй-аҡылға эйә әҙәм балаһы баҡый ғүмерҙе белмеше менән үлем ҡурҡынысын да еңә, ти.

Дин был мәсьәләлә әҙәмде илертә, материализм тилертә.

Һәр әҙәмдә Ғайса пәйғәмбәр рухы бар, ти Руми. Бәндәнең тыумағы әҙәм булырға иғланы ғына, ти ул йәнә, әҙәм булмағы – рухи уяныуынан башланыр. Үҙенең рухани йән икәнен аңлау менән Аллаға инаныуға табан килер. Әҙәм үҙен-үҙе аңлау менән Алланы ла аңлауға өлгәшер, ти суфыйҙар.

Йәләлетдин Руми кеүек суфый әҙиптәрҙең философияларының гуманистик асылын тойоп һоҡланмау мөмкин түгел (Ғайса Хөсәйенов).

**3-сө күнегеү.** Бер үк авторҙың бер үк темаға яҙылған фәнни хеҙмәтенән өҙөктәрҙе уҡығыҙ; уларҙы сағыштырығыҙ, айырмаларын һәм оҡшашлыҡтарын күрһәтегеҙ. Ҡайһыһын фәнни, ҡайһыһын фәнни-популяр хеҙмәт тип атар инегеҙ? Ни өсөн?

I. М. Аҡмулла 1831 йылдың 26 (иҫке стиль менән — 14) декабрендә Өфө губернаһының Бәләбәй әйәҙе Елдәр волосы (хәҙер Башҡортостандың Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Йәштән үк үҙ әсәһе үлеп, үгәй әсә ҡулында ҡалған Мифтах ет динға атаһының шул ғаиләһендә, «ят бауыр» хәлендә ҡыйырһытылып, төрлө йәбер-золомдарҙы татып үҫергә тура килә. Үгәй әсәнең «йоҙроҡ тәрбиәһе» аҫтында алған тәүге тормош һабаҡтары кескәй Мифтахетдинда бунтарлыҡ, үҙ бәҫен үҙе яҡларға ынтылыш тәрбиәләргә булышлыҡ итә. Артабан ата йортонан бөтөнләйгә китеп, бәләкәйҙән тулыһынса яҙмыш ҡарамағында тороп ҡалыу ҙа уны йәштән үк үҙ йүнен үҙе күрә белергә, үҙ аллы тормош көтөргә өйрәтә. Ғаиләлә башланған ҡаҡҡыланыу-һуҡҡыланыуҙар, кәмһетелеүҙәр мәҙрәсәлә лә дауам итә. Йәше етеп, тәүҙә шул уҡ Елдәр волосы Мәнәүезтамаҡ мәҙрәсәһендә, шунан күрше Ҡарамалы волосын- дағы Әнәс ауылында уҡып йөрөһә лә, берҙән, үҙенең бөтмәҫ шуҡлыҡтары арҡаһында мәҙрәсә әһелдәре менән тыныша алмай, икенсенән, үҙе лә мәҙрәсә тәртиптәре, ундағы уҡытыу кимәле менән мөрхәтһенмәй. Мифтахетдинда көндәр буйы доға ятлап мейе серетеүгә, наҙан муллаларҙың нотоҡтарына, сиктән тыш насар уҡыу шарттарына ҡарата протест уяна. Шағирлыҡ һәләте моронлай башлағас, тел, шиғриәт уның берҙән-бер һәм иң ышаныслы көрәш ҡоралына әйләнә... (Ә. Вилданов. Аҡмулла. Шиғырҙар. Мәғрифәт, яҡтылыҡ йырсыһы. Алғы һүҙ. Өфө, 1981. 7-8-се биттәр).

II. Мифтахетдин Аҡмулла 1831 йылдың иҫке стиль менән 14 декабрендә Өфө губернаһының Бәләбәй әйәҙе Елдәр волосы Туҡһанбай ауылында тыуған. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа был дата 1839 тип алынған. Ҡаҙаҡ әҙибе Дусмайыл Ҡасҡынбай улы уны Аҡмулланың үҙе сысҡан йылында тыуғаным тип әйтеүенә таянып иҫәпләп сығарған. «Әлен жыйнағы»ның баш һүҙендә Сәкен Сәйфуллин да, Дусмайылға һылтанып, Аҡмулланың тыуған йылын 1839 тип билдәләй. Ләкин бында Дусмайыл дың сама менән генә эш итеүе күренеп тора: ул Аҡмулланың хибескә (төрмәгә) төшөү йылын (1867) дөрөҫ күрһәтһә лә, уға ул ваҡытта 24 йәш булған тип күрһәтә. Әгәр Аҡмулла 1839 йылда тыуған булһа, 1867 йылда уға 24 түгел — 28 йәш булыр ине. Унан килеп, Дусмайыл шағирҙың үлгән йылын дөрөҫ күрһәтмәй. «Вафатында йәше 56-ла ине, йәғни 1896 йылда 8 октябрҙә»,— ти

ул. Тәүге версияның дөрөҫлөгө шик тыуҙырмай: уны шул уҡ Дусмайылдың һорауы буйынса Аҡмулланың бала сағын яҡшы белгән ауылдашы Шәйхетдин Динмөхәммәт улы «метриканан иҫбат иттем» тип яҙып ебәрә. Күренекле ғалим-библиограф Риза Фәхретдинов та Аҡмулла һижри буйынса 1248 йылда (миләди буйынса 1831-1832 йылдарға тура килә) тыуған тип күрһәтә. Башҡорт әҙәбиәте ғилемендә Ә. Харисов та шул уҡ фекерҙе яҡлай. Шулай итеп, Мифтахетдин Камалетдин мулла ғаиләһендә тыуа (Ә. Вилданов. Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы. Өфө, 1981. 43, 44, 51, 52-се биттәр).

**4-се күнегеү.** Кроссвордты дөрөҫ сисһәгеҙ, уртала фән менән шөғөлләнеүсе кешене аңлатҡан һүҙҙе уҡырһығыҙ.




1. Фәнни стилдең икенсе атамаһы.
2. Фәнни эштәрҙә икенсе бер авторҙың һүҙҙәре.
3. Фәнни эш төрө.
4. Фәндең ниндәйҙер бер өлкәһен аңлатҡан һүҙ йәки һүҙбәйләнеш.
5. Фәнни стиль ниндәй телмәр формаһында тормошҡа ашырыла?

**Өйгә эш.**

1. Теология фәненә бәйле биш термин яҙырға.
2. Дини темаға бағышланған ғилми мәҡәлә табығыҙ. Мәҡәлә тексына анализ эшләгеҙ (терминдар, цитаталар һ.б.).
3. Зәки Вәлидиҙең «Башҡорт» (Ислам энциклопедияһы, Стамбул, 1942) исемле мәҡәләһенә рецензия яҙығыҙ.

## Публицистик стиль

Кеше тормошонда тәрбиә һәм иман быуындарҙан-быуындарға тапшырылыр иң бөйөк һәм мөһим ҡиммәттәрҙең береһе.

Әйтем.

**1-се күнегеү.** Текстарҙы уҡығыҙ. Ундағы фекерҙәр менән килешәһегеҙме? Текстарҙың стиле тураһында нимә әйтерһегеҙ?

1. Был фани донъяла бар нәмә лә ваҡытлыса, беҙ, кешеләр, барыбыҙ ҙа ҡунаҡ ҡына. Кеше тормошонда тәрбиә һәм иман быуындарҙан-быуындарға тапшырылыр иң бөйөк һәм мөһим ҡиммәттәрҙең береһе. Иманлы быуындың рухы ла ныҡ. Балаларыбыҙға беҙҙән һуң тороп ҡалыр мал-мөлкәт ул — матди байлыҡ ҡына. Күңелеңдә иман булмаған кешегә матди байлыҡ булыу ғына тормош асылын аңларға ярҙам итмәй ул. Бары тик иманлы булғанда ғына кеше тулыһынса бәхетле була ала («Юшатыр» гәзитенән).

- Публицистик стиль халыҡ араһында өгөт-нәсихәт эшендә ҡулланыла. Шуға күрә ул стилдә гәзит-журнал мәҡәләләре, әҙәби тәнҡит, һәр төрлө мөрәжәғәттәр, белдереүҙәр, ижтимағи-сәйәси брошюралар, төрлө темаларға очерктар, фельетондар Һәм памфлеттар яҙыла. Публицистик стилдә үтә киң тематик проблемалар, йәмғиәтте ҡыҙыҡһындырған сәйәси, иҡтисади, әхлаҡ кеүек мәсьәләләр яҡтыртыла. Ул стилдә замандың мөһим ваҡиғалары яҙыла, уларҙың өҫтөнлөгөн һүрәтләгән ыңғай баһалы мәҡәләләр ижад ителә.

Яҙыусынан үҙ фекеренең дөрөҫлөгөнә инандыра алырлыҡ һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр, һүрәтләү саралары һайлап алыу талап ителә. Публицистик стилдә битараф, йәғни дөйөм ҡулланылышлы, һүҙҙәр менән бергә көслө хис-тойғоло һөйләмдәр, риторик өндәүҙәр һәм һорауҙар, юғары һәм тантаналы һүҙҙәр, фразеологик берәмектәр йыш урын ала.

Публицистик стиль публицистик мәҡәлә формаһында телдән дә, яҙма рәүештә лә йәшәй. Ул стилдәге әҫәрҙәр һәр кемгә аңлайышлы, үткер тел менән ҡыйыу яҙылырға тейеш. Шулай булғанда ғына халыҡҡа, тыңлаусыға уның тәьҫире көслө була.

Очерктар, юл яҙмалары, фельетондар кеүек публицистик стиль әҫәрҙәре күркәм әҙәбиәт стиленә яҡынаялар; шуға күрә оҫта яҙылған публицистик материалда һәр төрлө тасуирлау саралары (эпитет, сағыштырыу, метафора, тапҡыр мәҡәл һ.б.) актив ҡулланыла.

**2-се күнегеү**. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ, ҡулланылған телмәр берәмектәрен һанап, уның публицистик стилгә ҡарағанын иҫбатлағыҙ.

**Иман**

Өләсәйем күптән гүр эйәһе инде. Бер көн уны төшөмдә күреп уяндым. Ул миңә йылмайып, арҡамдан яратып, дөрөҫ юлдан атлап бараһың, балам, тине лә тиҙ генә юҡҡа сыҡты...

Өләсәйем биш намаҙын да теүәл үтәгән, Ҡөрьән китабын еңел уҡыған, белемле, зиһенле кеше ине. Бушыраҡ ваҡыттарҙа өләсәй беҙҙе янына саҡырып ала ла үҙ ҡулдары менән күсереп яҙылған доғаларҙы ятларға бирә. Ошо доғаларҙы кем алдан ятлап ала, бәлки, киноға барырлыҡ хәйер-аҡса ла бирермен әле, тип дәртләндереп ҡуя. Ул ваҡытта беҙ бер ни аңламай, аҡса алыр өсөн доғалар ятлаған булһаҡ та, өләсәйем, нисек кенә булмаһын, беҙҙең күңелдәргә иман орлоҡтарын сәсеп ултырған бит. Уның: донъяла ниндәй генә хәлдәр булмаҫ, ауырлыҡтар булғанда һынмағыҙ, бирешмәгеҙ, ә ошо доғаларҙы ҡабатлағыҙ, ышанығыҙ, ярҙам итәсәк, тигәне иҫтә уйылып ҡалған.

Мин ысынлап та, үҫә төшкәс, юлға сыҡҡанда, имтихандар тапшырғанда, ҡаршылыҡтар осрағанда, һәр ваҡыт ана шул бәләкәйҙән ятлаған доғаларымды иҫемә төшөрөп ҡабатлап йөрөнөм. Ниндәйҙер бер көс, ышаныс бирә ине улар миңә.

Баҡһаң, өләсәйем мәрхүмә беҙгә бала саҡта намаҙҙа уҡылырға тейеш булған барлыҡ доғаларҙы ятлатып, намаҙ тәртибен өйрәткән булған икән. Кескәй генә балаларҙың күңеленә юл табып, ниндәй ҙур сауап алған булған ул! Аллаһы Тәғәләгә мең шөкөр, бөгөнгө көндә, ауылыбыҙ мәсетендә дини тәрбиә биреү менән бергә ғәрәп алфавитын өйрәтеү ҙә ойошторолған. Мин унда ҙур теләк менән йөрөйөм. Шуғамы икән, өләсәйемдең төшөмдә миңә дөрөҫ юлдан атлап бараһың, балам, тип әйтеүе, уның рухының минең өсөн шат һәм риза булыуын белдерәлер, тип уйлайым. Өләсәйемә бик ныҡ рәхмәтлемен, урындары ожмах түрендә булһын! (Рәмилә Ҡужаҡова)

**3-сө күнегеү.** Нияз Сәлимовтың “Башҡорт әҙәби теленең публицистик стиле” (Өфө: Китап, 2005, 12-се бит) китабынан публицистик стилдең төркөмдәрен һәм жанрҙарын яҙып алығыҙ.

**4-се күнегеү.** Түбәндә бирелгән варианттарҙан публицистик стилгә хас билдәләмәне һайлап алығыҙ.

1) әҙәби ҡулланыу сигендә торған ябай телмәр һүҙҙәре: әҙәби телдәге *картуф* урынына *бәрәңге, ныҡлы* (кәүҙә) урынына *мыҡты*, *йүгереп бара* урынына *елдереп бара* һ.б.;

2) әйтелгән уй-фекерҙен аныҡлығы һәм яҡшы эшкәртелгән булыуы, төп фекерҙен ныҡ нигеҙләнеүе, синтаксик конструкцияларҙын ҡатмарлылығы, тел сараларынын билдәле бер кимәлдә ҡоро булыуы;

3) телмәрҙең информатив тығыҙлығы, конкретлылыҡ, фактарға иркенлек, логик эҙмә-эҙлелек, йыйнаҡлыҡ һәм экспрессивлыҡ, хис-тойғолоҡ, тыңлаусыны, уҡыусыны дәртләндерерлек итеп һөйләү һәм яҙыу.

**Өйгә эш.**

1. Публицистик стилдең жанрҙарын яҙығыҙ. Уларға ҡылыҡһырлама бирегеҙ.
2. Киң мәғлүмәт сараларында дини рубрикаларға, тапшырыуҙарға күҙәтеү яһағыҙ. Телдән сығыш яһарға әҙерләнегеҙ.
3. “Ни өсөн мәктәптәрҙә дин дәрестәрен индерегә кәрәк?” тигән темаға публицистик мәҡәлә яҙығыҙ.

## Рәсми йәки эш ҡағыҙҙары стиле.

Иман барҙа әҙәп бар.
Әйтем.

**1-се күнегеү.** Кроссвордты сисегеҙ.




1) Һижри иҫәп менән йылдың етенсе айы.
2) Яҙмыш. Аллаһы Тәғәлә билдәләгән күрәсәк.
3) Һижри иҫәп менән йылдың икенсе айы.
4) Мосолмандарҙың хаж ҡылыу урыны.
5) Ислам дине киң таралған илдәрҙә дәүләт башлығы титулы, хаким.
6) Хаж ҡылғанда Сафа һәм Мәрүә убалары араһынан үтеү йолаһы.
7) Хаж ҡылғанда Ҡәғбә тирәләй йөрөү йолаһы.
8) Ҡөрьән китабында ҡанунлаштырылған мосолман дине.

- Рәсми-эш стиль төрлө эш ҡағыҙҙары, документтар, ғаризалар, протоколдар һ.б. яҙғанда файҙаланыла. Рәсми-эш стиленең төп функцияһы – эшлекле информацияны тулы, аныҡ итеп биреү.

Һәр төрлө документтың характерлы сифаттары, талаптары йәки формаһы бар. Эш стиленә ҡыҫҡалыҡ, теүәллек хас, шулай уҡ унда ҡалыплашҡан һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр файҙаланыла *(һеҙҙен иғтибарға еткерәм, приказға ярашлы рәүештә, юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып һ.б.)* .

Рәсми-эш стиленең айырмалы үҙенсәлеге булып официаль телмәргә хас үҙенсәлекле лексиканың ҡулланылыуы тора *(ғариза, юллау, хәбәр итеү, юғарыла әйтелгән һ.б.)*. Бында диалектизмдар, ябай һөйләү лексикаһы бик ҡулланылмай. Һәр бер һүҙ тура мәғәнәһендә генә ҡулланыла. Метафоралар һәм нығынған һүҙбәйләнештәр (әйтемдәр, мәҡәлдәр) был стилгә хас түгел.

**2-се күнегеү.** Түбәндәге һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе уҡығыҙ. Ҡайһы һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе рәсми эш ҡағыҙҙары стиленә ҡарата ҡулланыр инегеҙ?

Ут сығарыуҙан һаҡланыу, беренсенән, икенсенән, планға ярашлы, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, гүзәлем, бәғерем, көтмәгәндән, йыпырыу, дөмөккөрө, халыҡ-ара хәлде еңелләштереү, конус, параллель, өсмөйөш, аҡһым, ҡарарға ризаһыҙлыҡ белдереү, яҡшынан-яҡшы, йәштәрсә, ярҙам ҡулы һуҙыу, туҙға яҙмағанды, ул ҡормоштоң, табан ялтыратыу; беҙ, түбәндәге ҡул ҡуйыусылар.

**3-сө күнегеү.** Текстың стилен, уның төп үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ.

### Ҡорбан байрамына рәхим итегеҙ!

12 август «Ағиҙел» ял һәм һауыҡтырыу лагеры эргәһендә район халҡы өсөн дөйөм ҡорбан ашы ойоштора. Байрамға йәше-ҡарты, балалар,– барыһы ла рәхим итһен! Һәр кемгә үҙенә һауыт-һаба һәм сәйлек күстәнәс алып килеү шарт. Аш табыны ергә ашъяулыҡтар йәйеп ойоштора, шуға үҙегеҙ менән түшәк алырға онотмағыҙ. Балалар, өлкәндәр өсөн төрлө ярыштар үткәреләсәк. Ҡорбан байрамы сәғәт 11-ҙә башлана.

Дөйөм район Ҡорбан ашына рәхим итегеҙ! (“Таң” гәзитенән)

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, ул ниндәй стилгә ҡарай? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

## Намаҙҙың шарттары

1. Намаҙ ваҡыты етеү.
2. Тәһәрәтле булыу.
3. Кейеме, уҡый торған урыны таҙа булыу.
4. Тән өлөштәре ҡаплаулы булыу.

Ирҙәргә: тубыҡтан алып кендеккә тиклем тән күренмәҫкә тейеш. Ҡатындарға: биттәр, беләҙектән алып ике ҡул осо һәм шайтан ашыҡтан башлап ике аяҡ осто күренергә мөмкин. Ҡалған тән өлөштәре – ғәүрәт, улар күренмәҫкә тейеш.

5. Ҡиблаға ҡаршы йүнәлеү.
6. Намаҙҙы ниәтләү.

**4-се күнегеү.** Текстарҙы уҡығыҙ, уларҙың стилен билдәләгеҙ.

1. Иң мөһим нәмә – ул иман. Иман булһа, ҡалғаны бик еңел бирелә. Иман тураһында белмәгән кешегә, һин ҡафыр, тинеләр, һинең урының йәһәннәмдә, тинеләр. Күп нәмә әйттеләр. Ошолар урынына “Аллаһ” тип әйтергә өйрәтһәләр, һуңынан иманы ҡеүәтләнер ине кешенең.

Был ваҡыт эсендә күп кешегә нимә булды? Ишетеүемсә, был мәмләкәттә үҙенә ҡул һалыусылар күп. Сөнки Аллаға инаныуҙы өйрәтмәнеләр. Был кешеләр иманһыҙ китте.

Был ысын тормош түгел. Был үтеп китә торған тормош, мәңгелек тормош менән сағыштырғанда бер минут та дауам итмәй. Мәңгелек тормош өсөн был тормош бер нимә лә тормай. Ни тиклем михнәтле булһа ла, Аллаға инанғандан һуң, ул михнәттәр әхирәттә сауап итеп, бүләк итеп биреләсәк.

2. Мөхәммәт, бине Ғәбдулла бине Ғәбд-әл-Моталлиб бине әл-Хашими, (20 (22) апрель 571 (570), Мәккә — 8 июнь 632, Мәҙинә) – Пәйғәмбәр, мәшһүр дин эшмәкәре, бер Аллаһыға табыныу дине – Ислам динен иңдереүсе, Аллаһ ебәргән изге китап – Ҡөрьәнде кешеләргә еткереүсе, дәүләт һәм сәйәсәт эшмәкәре, Ғәрәп ярымутрауында көслө мосолман дәүләтен төҙөгән шәхес. Мөхәммәт исеме «Маҡтауға лайыҡ» тигән мәғәнәне аңлата.

Башҡа исемдәре лә бар: Әхмәт, Мәхмүт, Мостафа. Аллаһ Ҡөрьәндә уға исеме менән дүрт тапҡыр өндәшә, шулай уҡ уны Нәби, Рәсүл, Ғәбд, Бәшир, Нәдхир, Мудхәккир, Шәһит, Дәғый кеүек исемдәр менән атай. Тыуған йылы һәм урыны – 570 йыл тирәһендә хәҙерге Сәғүд Ғәрәбстаны Мәккә ҡалаһы. Үлгән йылы һәм урыны – 8 июнь 632 йыл, хәҙерге Сәғүд Ғәрәбстаны Мәҙинә ҡалаһы. Пәйғәмбәр Мәҙинә ҡалаһы мәсетендә ерләнгән.

3. Ғилемлелек-даръялыр,
Ҙур рыялыҡ булмаһа;
Аҡыллы әҙәм – олуғтыр,
Асыуы артыҡ булмаһа (М. Аҡмулла).

**5-се күнегеү.** Эш ҡағыҙҙары стиленә хас фразаларҙы тулыландырып әйтегеҙ.

Килешеү нигеҙендә ... ...
Һеҙҙен һорауға яуап итеп... ...
Һеҙҙән үтенеп һорайбыҙ ... ...
Беҙ һеҙгә тәҡдим итә алабыҙ ... ...

**Өйгә эш.**

1. Гәзит-журналдарҙан рәсми эш ҡағыҙҙары стилендә яҙылған хәбәрнамә табығыҙ.
2. Эшкә урынлашыу өсөн резюме төҙөгөҙ.
3. Автобиографияғыҙҙы яҙығыҙ

## Хаттар стиле.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, ул ниндәй стилгә ҡарай? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

“Хат башы, яҙығыҙ ҡаршы.

Һеҙ – иң һөйөклө атайым һәм әсәйем. Мин, улығыҙ Яманһарин Фәйзрәхман, бер күрергә зар булып, иң ҡыҙыу ялҡынлы сәләмдәр ебәреп ҡалам. Һәм Әбделмән, Әбделхаҡ ҡустыларыма бик күп сәләмдәремде бүләк итеп ебәреп ҡалам. Һәм дә Зәйтүнә, Фатима, Әминә һылыуҙарға барыһына ла бик күп сәләмдәремде ебәреп ҡалам. Һәм күрше тирә-яҡҡа, бабай-инәйҙәргә, ағайҙарға-энеләргә, апайҙарға-һылыуҙарға, йәштәргә, мине яратҡандарға, иптәштәремә бөтөн булған сәләмдәремде ебәреп ҡалам. Сәләм ошоноң менән тамам”.

- Борондан уҡ айырым кешеләрҙең, дәүләт эшмәкәрҙәренең бер-береһе менән үҙ-ара мөнәсәбәттәре махсус яҙышыу, йәғни хатлашыу аша ла барған. Ундай юл менән аралашыу тормошта ҙур урын алып тора. Шул рәүешле яҙышыу үҙ аллы бер стиль барлыҡҡа килтергән. Хаттың традицион нығынған формаһы эшләнгән: уның үҙенсәлекле башы, төп өлөшө һәм тамамланышы (аҙағы) була. Шул рәүешле, хат һәр саҡ тип әйтерлек мөрәжәғәт менән башланып, сәләмдәр ебәреү формаһында дауам ителә лә, унан адресаттың тормош хәлдәре, яңылыҡтар хәбәр ителеп, әйтер йомош, үтенес белдерелә, һуңынан хат йомғаҡлау менән тамамлана.

Хат тексында хис-тойғоло һөйләмдәр, уларҙа ирекле һүҙ тәртибе, аныҡлаусылар, төрлө өҫтәмә һөйләмдәр йыш ҡулланыла, хатта хат яҙыусының белем кимәлен, холҡон, килеш-торошон, килбәтен шәйләргә була. Хаттар стиленә тағы көндәлектәр, иҫтәлектәр, мемуар әҫәрҙәр инә.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ, стилистик анализ яһағыҙ. Нәҫерҙәр тураһында нимә беләһегеҙ ? Шул хаҡта һөйләгеҙ.

Яҙыусы һәм ғалим Әнүр Вахитовтың Мәскәүҙә әҙәбиәт институтында уҡып йөрөгән Әмир Әминевҡа яҙған хаты:

*«Нәҫереңде ҡарап сыҡтым. Төрлөсә уйлап ҡараным. Уйла: ҡайтһаң - әсәйең ҡаршы ала, китһәң - оҙата. Был сюжет була алмай, сөнки художестволы фекер ҙә, үҙеңсә итеп шуны яҙыу ҙа, тойғо ла самалы. Әҙәби әҫәр бит ул һүрәт, картина, ул – уйланыу, тойғоларҙың бер нөктәгә төшөүе (линза менән ҡояш нурын йыйып ут ҡабыҙып була). Ә һиндә ул юҡ. Нисек*

*инде меңдәрсә кешегә шул үҙеңдең ҡайтып-китеү хаҡындағы хәбәрҙе художестволы әҫәр итеп тәҡдим итеүҙән оялмайһың? Нисек инде үткер сюжетлы, бығаса берәү ҙә яҙмаған берәй кеше холҡон (характерын тип әйтмәйем, ул бик ҙур эш булыр ине) тасуирлай алмайһың? Һәр һөйләмде, һәр фразаны, һәр һүҙҙе - урынындамы? - уйлау юк. һин һөйләйһең, һөйләмә, ә һүрәтлә! Яҙыусының һүҙе - алтын һүҙ, яҙғаны сәнғәтсә булырға тейеш. Ә сәнғәтсә яҙыу алтынға ла алмаштырылмай. Шуны онотма...*

*1975 йыл, 28 декабрь».*

(«Шоңҡар» журналынан)

**3-сө күнегеү.** 1914-1915 йылдарҙа Беренсе Бөтә донъя һуғышы яланынан яҙылған хатты уҡығыҙ. Уның стилен, төп үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ.

«Һуаллаһылбари, сағынмаҡлыҡ хәли!

Әссәләмәғәләйкүм, вәғәләминләдәйкүм әжмәғин, сез-ки ғиззәтләү вә хөрмәтле булып торғучы, олуғларның олуғсы әткәйем вә әнкәйем хәзрәтләренә, безки суғышда йөрүчи улығыҙ Ғабдулладан бик күпдин күп сәләм. Бәғдә туған энем Саримға күпдин күп, чуҡдин чуҡ сәләмнәремне күндереп, барығызның да хәйер-фатихасын көтеп ҡалдым. Бәғдә хәләл жефетемә, барығызның да хәйер-фатихасын көтеп ҡалдым. Бәғдә хәләл жефетемә, сөйөклө улым Кәлимуллаға күпдин күп доғаи сәләмнәремне күндергәйсез. Вә бәғдә изгеләрнең изгесе Мырҙағәли хәҙрәткә, Шәрәфи ҡодаға сәләм дигәйсез. Амин...» (Ғ. Хәйри).

**4-се күнегеү.** Ребусты сисегеҙ.

Х   , ,

 , ,  , ,  , , Е

**5-се күнегеү.** Тексты тәржемә итегеҙ. Хат стиле тураһында һөйләгеҙ.

**Р. Ғариповтың ғаиләһенә яҙған хаты**

Надя, дорогая!

Дети мои!

Как я хочу писать вам что-то светлое, хорошее , смешное, но – никак не могу...

Жизнь моя – какой-то “чертов круг”. И связана с какой-то большой жизнью моего народа, с моими убеждениями о нём, с любовью к нему, я хочу что-то от себя оставить ему, хочу быть чем-то полезным ему, нужным...

Трудно жить честному, а приспосабливаться, гвоорить то, о чем я не думаю, я не умею и не хочу. Без этого я не имею права писать. А меня читают и знают мои башкиры и ждут от меня что-то , и я должен считаться с ними – раз я живу для них и пишу.

**6-сы күнегеү.** Түбәндә анлатмалы һүҙлектән бирелгән мәғлүмәтте уҡығыҙ. Бирелгән хат төрҙәренен һәр береһенә ҡыҫҡаса миҫал яҙып китегеҙ.

Хат –эш ҡағыҙы, аралашыу сараһы һәм мәғлүмәт алмашыуының киң таралған юлы. Почта аша ебәрелә.

шәхси хаттар – личные письма;

мөхәббәт хаттары – любовные письма;

дуҫлык хаттары – дружеские письма;

фронт хаттары – фронтовые письма.

**7-се күнегеү.** Яҡын кешегеҙгә – атай-әсәйегеҙгә, апайығыҙға, ағайығыҙға, ҡустығыҙға, дуҫығыҙға һ.б. күмәкләп хат яҙығыҙ.

Хатты кемгә яҙыуын һәр кем үҙе һайлай. Тәүҙә нимә тураһында хәбәр

итеүегеҙ хаҡында кәңәшләшегеҙ. Бер кем дә үҙенең кемгә, нимә тураһында яҙасағын әйтмәй.

Беренсе кеше тәүге һөйләмде яҙа, һөйләмен ҡапларлыҡ итеп бөкләй, ҡағыҙҙы янындағы иптәшенә тапшыра. Ҡағыҙ беренсе һөйләм яҙылған ерҙән бөгөлгәнлектән, икенсе кеше беренсеһенең ниндәй һөйләм яҙғанын белмәй, күрә алмай. Икенсе кеше хатты дауам иткән кеүек үҙенең бер һөйләмен яҙа, шулай уҡ бөкләп, ҡағыҙҙы өсөнсө иптәшенә бирә. Ул да яҙып, бөкләп дүртенсеһенә, дүртенсеһе – бишенсеһенә, бишенсеһе – алтынсыһына һ.б. тапшыра. Хат яҙыла-яҙыла бөтәһендә лә булып үтә. Яҙып бөткәс, хатты бер кеше баштан аҙаҡҡа тиклем уҡый.

**Өйгә эш.**

1. Гәзит-журналдарҙан хаттар стиленә ҡараған текст (шәхси хат, көндәлек, иҫтәлек, мемуар) алып килегеҙ.
2. Алыҫта йәшәүсе дуҫығыҙға хат яҙығыҙ.
3. Уҡыған әҫәрегеҙ тураһында уның авторына хат яҙығыҙ.

## Дини стиль.

Намаҙ –исламдың терәге.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Тексытың стиле алдағы дәрестәрҙә үтелгән стилдәрҙән айырыламы?

«Бисмилләһир рахмәәнир рахиим.

Раббәнә әтинә фид-дүнйә хәсәнәтәү үә фил-әхирати хәсәнәтәү үә ҡинә ғәҙәбән-нәр. Раббәнәғ-фир ли үә лиүәлидәййә үә лил-мүъмининә йәүмә йәҡу-мул-хисәб».

Мәғәнәһе: «Эй, Раббым! Донъялыҡта безгә изгелек эшләй торған ғүмер бир, ошо изгелегебеҙ бәрәкәтендә Әхирәттә йәннәтеңде насип ит, ут ғазабынан һаҡла. Эй Раббым! Хисап көнөндә мине лә, ата-әсәмде лә, бар мосолмандарҙы ла ғәфү ит».

(Донъя һәм әхирәт өсөн доға)

➢ Башҡорт теленең функциональ стилдәре араһында дини стилде лә айырып күрһәтергә кәрәк. Диндең тарихы, тәбиғәте һәм вазифаһы уны стиль итеп формалаштыра. Ислам диненең үҙенә генә хас булған ысулдары, кешеләргә дини-рухани тәғлимәт биреү өсөн барлыҡҡа килгән, аң-аҡыл тарафынан ҡабул ителгән, күп быуаттар буйына файҙаланып, яҡтыртылып

килеүе һөҙөмтәһендә, башҡорт телендә махсус ҡалыплашҡан телмәр тибы – дини стиль барлыҡҡа килгән.

Дини стилдең вазифаһы – дини-рухани тәрбиә биреү, йәғни кешене рухи һәм физик яҡтан сәләмәт тотоу, уның иман-ышанысын һаҡлау, күңеленә изгелек һеңдереү, әҙәм балаларының үҙ-ара мөнәсәбәте – намыҫлылыҡҡа, әҙәп-әхләҡҡә, сабыр-түҙемлелеккә нигеҙләнергә тейешлекте аңлатыу. Билдәле булыуынса, мәсеттәрҙә ғибәҙәт ҡылыу ғәрәп телендә тормошҡа ашырыла, ә доғалар башҡорт телендә башҡарыла. Һуңғы йылдарҙа дини телмәр мәсеттә генә түгел, ә радио, телевидениела барған дини тапшырыуҙарҙа, шулай уҡ йәмғиәт тормошоноң мөһим хәл-ваҡиғаларына бағышланған сараларҙа ла (мәҫәлән, яңы мәктәп, балалар йорто, дауаханалар асҡанда, әрме сафтарына оҙатҡанда һ.б.) ҡулланыла башланы. Ғаилә тормошонда, төрлө байрамдарҙа, табындарҙа, ҡөрьән аштарында дини телмәр киң ҡулланыла. Мәҫәлән, бала тыуғас исем ҡушыу, үҫеп еткәс никах уҡытыу, көндәлек ритуалдарҙы үтәү, үлем килгәс мосолман дине шарттарына тура килтереп һуңғы юлға оҙатыу һ.б.

Башҡорт телендә популяр дини әҙәбиәт нәшер ителә. Шул рәүешле, дини стилдең ҡулланылыш даирәһе киңәйә. Дин әһелдәренең генә түгел, диндән йыраҡ торған кешеләрҙең дә телмәрендә лә ислам диненә ҡағылышлы лексик берәмектәрҙе йыш осратабыҙ. Дини телмәрҙең стилистик үҙенсәлектәрен шулай уҡ *Алла бойорһа*, *Алла бирһә, Иншә Аллаһ* һ.б. һүҙҙәр һәм тотороҡло һүҙбәйләнештәр тәшкил итә. Дини стилгә жанрҙары: ҡөрән тәфсирҙәре, сүрәләр, ҡисса, доға, вәғәз, мөнәжәт, нәсихәт һ.б.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡып сығығыҙ һәм жанрын билдәләгеҙ. Уның ҡиммәте нимәлә?

Әссәләмү ғәләйкүм үә рәхмәтуЛлаһи үә бәрәкәтүһү! Барығыҙға ла сәләм, Аллаһтың рәхмәте һәм бәрәкәте! Фәҡәт Уның ихтыяры менән беҙ был донъяға килгәнбеҙ һәм теребеҙ, фәҡәт Уның рөхсәте менән беҙ ошо яҡты донъяла йәшәйбеҙ. Аллаһ рөхсәте булмаһа, бер япраҡ та өҙөлөп төшмәй, бер тамсы һыу ҙа күктән яумай, бер секундлыҡ ел дә иҫмәй. Аллаһ – мөьминдәрҙең Яҡлаусыһы! Һәм Яҡлаусы, Һаҡлаусы булараҡ беҙгә Аллаһ етә! «Күптәр, бәлки, дингә килер ине лә, уларҙы тик намаҙ уҡый белмәүҙәре генә тотҡарлай», – тигән ине бер ҡәрҙәшебеҙ. Был һүҙҙәр, ысынлап та, хаҡиҡәткә оҡшаш. Һәр хәлдә, үҙебеҙҙең нисек дингә килгәнде иҫләһәк, тик намаҙға баҫҡас ҡына бит беҙ диндең ысынында нимә икәнен ныҡлап аңлай башланыҡ.

Намаҙ – ул Исламдың терәге, Ислам намаҙһыҙ булмай. Намаҙ – мосолманды кафырҙан айырып тороусы иман билдәһе. Намаҙ – ул Аллаһҡа шөкөр итеү, Уға үҙеңдең ихласлығыңды, буйһоноуыңды белдереү. Намаҙ уҡыу кешене насар эштәрҙән туҡтата һәм намаҙ уҡыу гонаһтарҙы юя. Намаҙ уҡыр өсөн күп ваҡыт кәрәкмәй, әммә намаҙ уҡыр өсөн ихласлыҡ кәрәк. Теге донъяла беҙҙән иң тәүҙә намаҙҙарыбыҙ өсөн һораласаҡ. Намаҙ уҡыу йән тыныслығы бирә, кешенең рухын күтәрә. Аллаһҡа буйһонған кеше бүтән кешеләргә табынмай, уларҙан ҡурҡмай һәм уларға ярамһаҡланмай. Намаҙ уҡыусы – ул Аллаһтың ғына ҡоло, әммә был донъя өсөн ул – иң ирекле кеше! Эй, кешеләр, барығыҙға ла намаҙ уҡый башларға ваҡыт!

Намаҙ – мөьмин мосолмандың нуры, диндең терәге. Аллаһы Тәғәлә беҙҙең доғаларыбыҙға мохтаж түгел, беҙ уның барлығына һәм берлегенә иман килтерергә тейешбеҙ. Намаҙ менән әҙәм балаһы һәр саҡ үҙен Хоҙай эргәһендә яҡлаулы һәм һаҡлаулы тоя, Уның ризалығына өмөтөн юғалтмай. Намаҙ уҡыу – иманды нығытыуға дәғүәт алып барыу ул.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Дини стилдең үҙенсәлектәрен әйтегеҙ.

### Намаҙ хаҡында пәйғәмбәребеҙ хәҙистәре

«Бер ваҡыт Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдән: «Ниндәй эш мәртәбәлерәк?» – тип һораным. Ул: «Ваҡытында уҡылған намаҙ», – тип яуап бирҙе. Мин: «Шунан һуң нимә?» – тип һораным. Ул: «Ата-әсәңде хөрмәт ит», – тине. Тағы ла: «Унан һуң нимә?» – тип һораным. Ул: «Алла юлында көрәшеү», – тип яуап бирҙе» (Бохари).

«Мин Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең кешеләргә һорау биргәнен ишеттем. «Нисек уйлайһығыҙ, әгәр берегеҙҙең ишек төбөнән йылға ағып торһа һәм ул шул йылғала көнөнә биш мәртәбә йыуынһа, тәнендә берәр кер ҡалыр инеме?» – тине ул. Кешеләр: «Юҡ, ҡалмаç», – тип яуап бирҙе. Шунан һуң Мөхәммәт пәйғәмбәр: «Биш ваҡыт намаҙ ҙа, нәҡ бына шуның кеүек, намаҙ уҡыусының гонаһтарын юйып төшөрөр», – тине.

Намаҙҙы йәмәғәт менән уҡыу бер яңғыҙың уҡыуға ҡарағанда егерме ете мәртәбәгә сауаплыраҡ.

Әгәр ҙә кеше тейешенсә тәһәрәт алып, өйөнән мәсеткә намаҙ уҡырға тип сыҡһа, һәр бер атлаған аҙымы һайын бер дәрәжәгә күтәрелер, сауапҡа ирешер һәм бар гонаһы юйылыр. Намаҙ уҡый башлағас та, фәрештәләр уға салауаттар әйтеп торор. Ул кеше мәсеттән сығып киткәнсе, тәһәрәте боҙолғансы фәрештәләр «Эй, Раббым! Ошо бәндәгә рәхмәттәреңде индер,

гонаһтарын ғәфү ит!», – тип гонаһтарын ярлыҡауын һорар. Берәүҙең намаҙ башланғанды көтөп ултырыуы ла намаҙ уҡыуҙан һаналыр».

**4-се күнегеү.** Мөнәжәтте уҡығыҙ. Текстың стиль үҙенсәлектәрен әйтегеҙ.

**Мәүлит көнө**

Мәүлит көнө ниндәй көн ул?
Кемдер әйтер: «Белмәйем».
Белгәндәремде әҙерәк
Һеҙгә лә мин һөйләйем.

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт
Ошо айҙа тыуалыр,
Раббиғелдең Әүүәл айы -
Мәүлит айы булалыр.

Раббиғел-Әүүәл айының
Ун беренсе кисендә,
Донъяға ир бала тыуған
Алыҫ ғәрәп илендә.

Был ир балаға исемен
Мөхәммәт тип ҡушылған,
Ҡара сәсле, нурлы йөҙлө,
Бик күркәм бала булған.

Ата йөҙөн ул күрмәгән,
Йәтимлекте татыған,
Алты ғына йәштә саҡта
Әсәһе үлеп ҡалған.

Аҫыраулыҡта үҫкән ул,
Хәләл хеҙмәт күрһәткән,
Ул байыраҡ кешеләрҙең
Һарыҡ көтөүен көткән.

Егерме биш йәше тулғас,

Үҙе яҙырға белмәгән
Мөхәммәт Рәсүлебеҙ
Сәхәбәләренә әйтеп
Яҙҙыртҡан Ҡөрәнебеҙ.

Егерме өс йыл башҡарған
Пәйғәмбәр изге эшен!
Ислам диненә өндәүгә
Биргән ул барлыҡ көсөн!

Мәүлит көнө - изге байрам
Күңелдәргә нур һибә,
Ошо нурҙар шатлыҡ тулы
Иманға алып килә.

Беҙҙең һөйөклө Пәйғәмбәр
Мөхәммәт Рәсүлебеҙ!
Тыуған көнөң - Мәүлит көнө
Маҡтайбыҙ һине бөгөн!

Барлыҡ мосолман шатлана
Мөхәммәт тыуғанына!
Раббыбыҙға изге эштә
Ярҙамсы булғанына!

Раббыға шөкөрҙәр ҡыла
Намаҙҙа һәм доғала,
Мөхәммәтте Илсе итеп
Ебәргәнгә донъяға!

Раббиғел - Әүүәл айының

Хәҙисәгә өйләнгән,
Ошонан һуң ғүмер юлы
Сауҙа менән бәйләнгән.

Ҡырҡ йәшендә Аллаһ уны
Үҙенән Рәсүл иткән,
Ҡөръән китабы һүҙҙәрен
Уның күңеленә керткән.

Һәр бер көнө байрам ул,
Мәүлит айын салауаттар
Күп әйтеүҙәр файҙа ул!

Беҙҙе мосолман итеүсе
Мөхәммәт Рәсүлебеҙ,
Һиңә маҡтауҙар яуҙырып
Үтһен һәр бер көнөбөҙ!

(Ф. Ҡотлогилдина)

**5-се күнегеү.** Ислам динендәге билдәле пәйғәмбәрҙәрҙең исемдәрен яҙығыҙ.

**Өйгә эш.**

1) Дин тураһында мәҡәл-әйтемдәр яҙып килегеҙ.
2) Дини стилдең жанрҙарын яҙығыҙ һәм аңлатма бирегеҙ.
3) «Бөгөнгө йәмғиәттә диндең роле» темаһына эссе яҙырға.

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ ТАРИХЫ

### Башҡорт әҙәби теле һәм уның тарихы.

Тел тарихы – ил тарихы.

**1-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ, ниндәй төп төшөнсә тураһында һүҙ барғанын билдәләгеҙ, аңлатма бирегеҙ. Әҙәби телдең төп билдәләрен асыҡлағыҙ.

Башҡорт милли әҙәби теленә – беҙ уны хәҙерге башҡорт әҙәби теле тип тә йөрөтәбеҙ – XX быуаттың 20 йылдарында нигеҙ һалына. Уның башҡорт йәнле һөйләү телмәренә нигеҙләнгән нормаларын булдырыуҙа телселәр, уҡытыусылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре күп көс һалған. Ул осорҙа башҡорт телендә ваҡытлы матбуғат менән бергә төрлө китаптар сыға башлай. Ләкин башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһы дөйөм башҡорт халыҡ теле нигеҙендә бик боронғо замандарҙа уҡ барлыҡҡа килгән. Башҡорт әҙәби һөйләү теле - ул асылда героик эпостарҙың, ҡобайырҙарҙың, легендаларҙың, сеңләүҙәрҙең, башҡорт классик йырҙарының теле. Уларҙың теле лә талантлы

башҡорт сәсәндәре, йырсылары, һүҙ оҫталары тарафынан быуаттар буйына эшкәртелгән, шымартылған тел һанала.

Ҡағиҙә булараҡ, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең нормалары нигеҙенә дөйөм башҡорт йәнле һөйләү телмәрендә киң таралған өн үҙенсәлектәре, лексик берәмектәр һәм грамматик формалар алынған. Башҡорт әҙәби теле көнсығыш диалектының *ҡыуаҡан һөйләшсәһе* һәм көньяҡ диалектының *юрматы һөйләшсәһе* нигеҙендә төҙөлгән. Әле башҡорт әҙәби теле үҫеш юлын дауам итә.

Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең үҫешкән, юлға һалынған яҙма төрө бар. Күренекле ғалим-тюрколог Н.А. Баскаковтың фекеренсә, «хәҙерге башҡорт әҙәби теле бик ныҡ үҫкән милли әҙәби тел һанала». Саф башҡорт әҙәби телендә ғилми хеҙмәттәр яҙыла, матур әҙәбиәт әҫәрҙәре ижад ителә, публицистик мәҡәләләр баҫыла, эш ҡағыҙҙары төҙөлә. Ә әҙәби телдең һөйләү формаһы мәктәптә уҡытыуҙа, урта һәм юғары белем биреүҙә, радио-, телетапшырыуҙар телендә генә түгел, халыҡ араһында ла киң ҡулланылыш ала.

- Әҙәби тел – өндәре, һүҙҙәре, грамматикаһы билдәле бер тәртипкә килтерелеп, нормалаштырылған тел.

Ғәҙәттә, әҙәби телдәрҙең тарихында ике дәүерҙе билдәләйҙәр: 1) милләткә тиклемге әҙәби теле һәм 2) милли әҙәби тел. Беренсеһе күп осраҡта халыҡтың йәнле һөйләү телмәренә нигеҙләнмәгән була һәм ул бер нисә халыҡты хеҙмәтләндерергә мөмкин. Ә милли әҙәби тел халыҡтың йәнле һөйләү телмәренә, уның диалекттарына нигеҙләнгән була.

Һәр әҙәби телдең, шул иҫәптән башҡорт әҙәби теленең дә, төп билдәләре бар: 1) әҙәби телдең бер төрлө яҙыуға һәм һөйләүгә йүнәлтелгән һәм диалекттарҙан юғары торған, нормаға килтерелгән булыуы; 2) әҙәби телдең мотлаҡ үҫешкән яҙмаһы булыуы; 3) әҙәби телдең ошо телдә яҙған кешеләр өсөн мәжбүри булыуы; 4) әҙәби телдең бер төрлө нормаға буйһонған, ләкин телмәр төҙөлөшө яғынан айырылған төрҙәре (стиль айырмалыҡтары) булыуы.

Башҡорт халҡының милләткә тиклемге әҙәби теле булып **иҫке төрки теле** йөрөгән. Ул тәүҙә, башҡорт халҡынан башҡа, ислам динен ҡабул иткән бөтә төрки халыҡтарын да хеҙмәтләндергән. Иҫке төрки теле боронғо уйғыр, иҫке үзбәк һәм уғыҙ халыҡтарының яҙма традицияларына нигеҙләнгән була.

Иҫке төрки теле, үҙенең күп быуаттар буйынса ҡулланылышында үҙгәрештәр кисереп, XIII быуаттан башлап XX быуаттың баштарына тиклем башҡорт халыҡының рәсми яҙма теле булараҡ ҡулланылған. Ул өндәр составы яғынан да, һүҙҙәре һәм грамматикаһы буйынса ла башҡорт

халҡының йәнле һөйләү телмәренән нығ айырылған, ләкин ул уҡый-яҙа белгән кешеләр өсөн аңлайышлы тел булған. Шуға күрә ете быуат буйына башҡорт халҡын ике тел хеҙмәтләндергән тип әйтеп була: көндәлек көнкүрештә башҡорттар үҙ диалекттарында һөйләшкән, ә яҙма аралашыуҙа иҫке төрки телен ҡулланған.

**2-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Автор нимә әйтергә теләгән? Башҡорт әҙәби телен дәүләт кимәленә еткереү өсөн уҙған быуаттың 20-се йылдарында ҙур көс һалған дәүләт эшмәкәрҙәренең береһе Шәһит Хоҙайбирҙин (1896 – 1924) бөгөн илдә туған телдәргә ҡарата тыуған кире мөнәсәбәт тураһында нимә әйтер ине? Быуат самаһы элек уның замандаштары ни өсөн көрәшкән?

Башҡорт теленең статусын күтәреүгә ҡағылышлы сетерекле мәсьәләләр күп була, уларҙы хәл итеү бик еңел бирелмәй. Төп мәсьәләләрҙең береһе – дәүләт кимәлендә торорға тейешле әҙәби телде булдырыу. Тик башҡорт әҙәби телен ниндәй диалекттарға (ә улар күп, ҡайһыларына өҫтөнлөк бирергә) таянып формалаштырырға һуң? Быны ошо һорау тора дәүләт етәкселәре, ғалимдар һәм яҙыусылар алдында. Оҙайлы бәхәстәрҙән һуң Академүҙәк 1923 йылдың декабрендә Ҡыуаҡан диалектын әҙәби телдең нигеҙе итеп алыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Был идеяны Академүҙәк етәкселеге һәм төп доклад менән сығыш яһаған ошо ойошманың бүлек мөдире Ғәбделәхәт Вилданов алға һөрә.

Академүҙәктең ҡарарын ҡабул итмәүселәр араһында Шәһит Хоҙайбирҙин да була. Ул Ҡыпсаҡ, Юрматы башҡорттары телендә яҙылған “Нисек яҙырға?” тигән мәҡәләһендә әсенеп шуны белдерә: “Академүҙәктең “төп башҡорт теле” хаҡындағы тезисын көсләп тормошҡа үткәҙеү дөрөҫ түгел... Ҡыпсаҡ, Юрматы, Ялан, Үҫәргән һәм Һаҡмар башҡортлары һөйләшкән телде ... тормошҡа үткәҙергә тейешбеҙ”. Әммә тел тирәһендә Академүҙәк менән тартыш байтаҡ дауам итә. Ниһайәт, ҡырҡыу мәсьәлә буйынса алтын урталыҡ һайлап алына: юрматы диалектына ҡыуаҡан диалектын ҡушып яһалған хәҙерге башҡорт әҙәби теле формалаша. Ошо хаҡта Башҡортостандың Мәғариф Халыҡ Комиссариаты коллегияһы 1924 йылдың 20 февралендә махсус ҡарар ҡабул итә ( Н. Сәлимов).

**3-сө күнегеү.** Бирелгән өҙөктәрҙе хәҙерге башҡорт теленә тәржемә итегеҙ, уларҙың ниндәй осор әҙәби теленә ҡарауын асыҡлағыҙ. Төркөмдәрҙә эште башҡарығыҙ.

1. Шундин суң дүрт шыбаға салдук. Ул шыбаға шул шарт илән (ирди): әүүәл шыбаға Ашҡаҙарға сузылған сулар үә яланлари илән мән Тәтәгәчкә

сыкди. Икинчи шыбаға Тәйрүк язылган сулари –ә яланлари илән староста Азнайга чыкди (Юрматы ырыуы шәжәрәһенән).

2. Сыуытды ҡыш көнөн, ҡарлар йағырды,
Аҡызды су итеб йаз айларында.
Тамам донйа йөзө аҡ ҡар булубән,
Тотар боз су йөзөн һәр жайларында.

( Ғәли Соҡорой )

3. Ирек ҡуйсаң, тел – арслан
Тыймасаң, ул – йылан.
Һәләк идер ул сәни,
Ваҡты рузгар эчендә.

(Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи)

4. Биләм дирсәң бу фәндә ғилме хали,
Назардан ҡума бу назме әл – ләали.

(Тажетдин Ялсығолов)

**4-се күнегеү.** Ҡобайырҙың әҙәби телдең ҡайһы осорона ҡарауын әйтегеҙ. Унын ни өсөн хәҙерге башҡорт теленә яҡын булыуын иҫбатлағыҙ. Йырауҙар теленең ниндәй стилгә яҡынлығын асыҡлағыҙ. Парҙа фекер алышығыҙ.

Һабрау йырауҙың Уралға ҡарап әйткәне

Уралда тыуған баланың
Теле сыға башлағас,
“Әсә тигән һүҙҙән һуң,
Икенсеһе – “Уралтау!”
Утыҙ теше сайраған,
Бар һөйәге ҡыйраған.
Ите бөтөп бар тәне
Тарамышҡа әйләнгән,
Йөҙҙән артыҡ йыл йәшәп,
Уралым тип көйләгән;
Ата-әсәһе үлгәндә
Иман теләп алланан,

Ҡанлы йәшен ҡатмаған
Һабрау ҡарт та тыуған тау.

**5-се күнегеү.**Тексты үҙ аллы уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ. Тексҡа таянып “Башҡорт әҙәби теленең өлгөлө әйтелеше” темаһына цитаталы план төҙөгөҙ.

Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелешенә килгәндә, мәсьәлә шулай тора: беренсенән, тарихи хәлдәрҙең ағышы арҡаһында, рус йәмғиәтендәге кеүек, башҡорт илендә милли культура үҙәге хеҙмәтен үтәүсе ҡалалар булмаған, сөнки башҡорттар элгәре ҡала-ҡала булып, йәғни ҡалалар һалып, компактлы рәүештә (күмәкләп) ҡалаларҙа йәшәмәгәндәр. Икенсенән, Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем башҡорт әҙәби теленең яҙма формаһы булмаған. Тик башҡорт теленең әҙәби һөйләү формаһы ғына булған. Ул бөтә башҡорттар өсөн уртаҡ булған дөйөм башҡорт халыҡ теле һанала. Ләкин башҡорт әҙәби теленең яҙма формаһы булмай әле, элек башҡорттар бөтөнләй яҙыу-һыҙыу эшен белмәгәндәр, уҡый-яҙа белмәгәндәр икән, тигән һүҙ түгел. Башҡорт йәмғиәтенең көндәлек тормошонда рәсми-юридик эш ҡағыҙҙарын яҙыу кәрәк булғанда, иҫке төрки телендә яҙғандар. Башҡорттар араһында киң таралған һәм һәр бер ауылда тиерлек осратырға мөмкин булған шәжәрәләр (нәҫел һәм ырыу тарихы) бөтәһе лә иҫке төрки телендә яҙылған. Шул уҡ иҫке төрки телендә боронғо башҡорт шағирҙары һәм уҡымышлы кешеләре шиғырҙар һәм башҡа әҫәрҙәр яҙғандар. Шул телдәмәҙрәсәләрҙә уҡытҡандар; урта быуаттарҙа уҡ инде башҡорттар араһынан боронғо Бохара, Хиуа һәм Болғар мәҙрәсәләренә барып иҫке төрки телендә уҡыусылар булған. Ләкин башҡорттар үҙҙәренең көндәлек тормоштарында иҫке төрки телендә һөйләшмәгәндәр. Ул тел фәҡәт китап теле, рәсми канцелярия теле хеҙмәтен генә үтәгән. Көндәлек тормошта башҡорттар халыҡтың йәнле телендә һөйләшкәндәр. Ул — XVI быуатта төрлө башҡорт ҡәбиләләре берҙәм халыҡ булып тамам формалашҡас, барлыҡҡа килгән дөйөм башҡорт халыҡ теле. Башҡорт халҡының ҙур күләмле бай һәм тәрән йөкмәткеле эпик әҫәрҙәре (мәҫәлән, «Аҡбуҙат», «Ҡуҙыйкүрпәс», «Урал батыр», «Алпамыша» һәм башҡа эпик әҫәрҙәр), ҡобайырҙар, тормош-көнкүреш фәлсәфәһенә бай булған башҡорт халыҡ йырҙары һәм бай хыяллы башҡорт әкиәттәре — былар бөтәһе лә дөйөм башҡорт халыҡ телендә һөйләнгән һәм йырланған. Сәсәндәр һәм һүҙ оҫталары тарафынан әйтелеп, йырсылар тарафынан йырланып, ул әҫәрҙәр телдән телгә, быуындан быуынға күсә барғандар. Ул эпостарҙың, йырҙарҙың һәм әкиәттәрҙең, бик боронғо замандан алып, бөтә төҙөклөгө менән беҙҙең көндәргә тиклем килеп етеүе, үҙ нәүбәтендә, был әҫәрҙәрҙең башҡорт халҡында ныҡ тамыр йәйеүенә, башҡорт халҡының рухи

ихтыяждарын, эстетик һәм интеллектуаль талаптарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алыуына һәм башҡорт йәмғиәте менән органик рәүештә ҡушылып үҫеүенә асыҡ дәлил була ала. Шул дөйөм башҡорт халыҡ телендә ижад ителгән гүзәл әҫәрҙәрҙең телен, һис шикһеҙ, башҡорт әҙәби һөйләү теле йәки башҡорт әҙәби теленең һөйләү формаһы тип ҡарарға кәрәк, сөнки уларҙың теле дөйөм халыҡ характерле йәнле һөйләү теленә нигеҙләнгәнлектән, бөтә башҡорттарға ла аңлайышлы. Бер нисә быуаттар буйына үҫеш процесендә дөйөм башҡорт халыҡ теленең лексик һәм грамматик нормалары дөйөмләнгән кеүек, уның дөрөҫ әйтелеш (орфоэпик) нормалары ла унификацияланған һәм дөйөмләнгән. Шуға күрә лә ике ҙур диалекттән 18 торған дөйөм башҡорт халыҡ теле, йәғни башҡорт халҡының йәнле һөйләү теле, Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң башҡорт әҙәби яҙма теле өсөн нигеҙ булып ятты. Башҡорт әҙәби яҙма теле өсөн шул ике ҙур башҡорт диалекты (көньяҡ һәм көнсығыш диалекттары) нигеҙ булып ятҡас, тәбиғи рәүештә, шул территорияларҙа йәшәүсе башҡорттарҙың йәнле һөйләү телендәге әйтелеш тә башҡорт әҙәби теле өсөн дөрөҫ әйтелеш тип ҡаралырға һәм башҡортса дөрөҫ әйтелеш өсөн норма хеҙмәтен үтәргә тейеш. Шуға күрә Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған фән эшмәкәре, СССР Фәндәр академияһының членкорреспонденте, профессор Н. К. Дмитриев үҙ ваҡытында башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше (орфоэпияһы) тураһында «йәш башҡорт әҙәби теле йәнле башҡорт диалекттарыры нигеҙендә үҫеп сыҡҡанлыҡтан, башҡорт теленең орфоэпияһы үҙенең тамырҙары менән тәбиғи рәүештә башҡорт йәнле теленә барып тоташа» тип яҙҙы һәм, дөрөҫ әйтелештең сығанағы итеп, башҡорт йәнле һөйләү телен күрһәтте (профессор Н.К. Дмитриевтең башҡорт әҙәби теленең әйтелеше тураһындағы сығышынан).

Башҡорт әҙәби теленең грамматик һәм лексик нормалары тулыһы менән башҡорт йәнле теленә, йәғни дөйөм башҡорт халыҡ теленә нигеҙләнгән.

**6-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1) Нимә ул әҙәби тел?
2) Әҙәби тел ниндәй формаларҙа йәшәй?
3) Башҡорт әҙәби теле ҡасан барлыҡҡа килгән?
4) Башҡорт әҙәби теленең формалашыу нигеҙендә нимә ята?
5) Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн башҡорт әҙәби телен төҙөгәндә төньяҡ-көнбайыш диалект өлгөләре алынмаған?

6) Хәҙерге башҡорт әҙәби телен үҫтереүгә тәҡдимдәр килтерер инегеҙ.

**Өйгә эш.**

1. Тел тураһында 10 мәҡәл яҙығыҙ.
2. Башҡорт әҙәби теленә бағышланған кроссворд төҙөгөҙ.
3. "Шаһит Хоҙайбирҙин һәм башҡорт әҙәби теле" тигән темаға мәғлүмәт алып килегеҙ.

## Башҡорт яҙыуы тарихы

Тел яҙмышы – ил яҙмышы.
Әйтем.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Башҡорт яҙыу тарихының дүрт дәүеренә характеристика бирегеҙ, уны схема формаһында күрһәтегеҙ, яҙыуҙың үҙенсәлектәрен билдәләгеҙ. Ошо осорҙа башҡорт халҡының яҙмышында булған ваҡиғалар телдә ниндәй сағылыш тапҡан?

Башҡорт яҙыуы тарихын дүрт дәүергә бүлергә була. Улар түбәндәгеләр:

**Октябрь революцияһына тиклемге дәүер**. XIII-XVI быуаттарҙан башлап XIX быуаттың аҙағына тиклем башҡорт йәмғиәтендә рәсми яҙма тел ролен иҫке төрки теле башҡарған. Иҫке төрки теле тик китап һәм кәнсәләр теле вазифаһын үтәгән. Дөрөҫ яҙыу өсөн ғәрәп яҙыуының принцептары нигеҙ итеп алынған. Әйтәйек, бер үк хәрефтең дүрт төрлө яҙылышы, һүҙ уртаһында һуҙынҡы өндөң хәрефтәрен яҙмау һ.б.

**Иҫке башҡорт алфавиты осоро**. Революцияға тиклем башҡорт йәмғиәтендә ғәрәп яҙыуы булыуын иҫәпкә алып, иҫке традиция буйынса башҡорт әҙәби теленең алфавиты өсөн ғәрәп графикаһы нигеҙ итеп алына. Шул уҡ ваҡытта башҡорт телендәге бөтә өндәрҙе белдереү, сағылдырыу һәм яҙыуҙы еңелләштереү өсөн ғәрәп алфавитына үҙгәреш индерелә: ундағы ҡаты, ҡалын әйтелешле т, з, ҙ, с, ғ, х хәрефтәре алып ташлана, башҡорт телендәге г, ң, а, ә өндәре өсөн айырым хәрефтәр алына.

Был алфавит традиция буйынса быға тиклем башҡорттар файҙаланып йөрөгән ғәрәп графикаһы нигеҙендә төҙөлә (уны һуңынан иҫке башҡорт алфавиты йәки «иҫкәлеп» тип йөрөтәләр) Алфавит 33 хәрефтән тора, шуларҙың егерме етеһе – тартынҡы («тауышһыҙ») өндәр, ә алтыһы һуҙынҡы

(«тауышлы») өндәр өсөн алынған. Күренеүенсә, ғәрәп алфавиты башҡорт теленә бер ни тиклем яраҡлалаштырыла, уға үҙгәрештәр индерелә: башҡорт теленең өндәр системаһына яуап бирмәгән ҡалын әйтелешле хәрефтәр төшөрөп ҡалдырыла. Башҡорт телендәге г, ң, а, ә өндәре өсөн, айырым хәрефтәр ҡулланыла. Һуҙынҡы өндәр өсөн уртаҡ берәр хәреф алына.

Ләкин ғәрәп алфавитының һәм орфографияһының уңайһыҙ яҡтары (һүҙҙәге урынына ҡарап, күпселек хәрефтәрҙең өс-дүрт вариантта һыҙылышы, һүҙ уртаһында ҡайһы бер һуҙынҡыларҙың яҙылмауы һ.б.) әле бөтөрөлмәй ҡала. Шунлыҡтан ул башҡорт теленең фонетик системаһын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмаған, практик яҡтан да яуап биреп етмәгән, сөнки башланғыс класс уҡыусыларына өс-дүрт варианттағы һыҙылышлы хәрефтәрҙе үҙләштереү, уҡырға һәм яҙырға өйрәнеү үтә мәшәҡәтле эш була һәм алифба осоро ғына ла ике йылға һуҙылған.

**Латин алфавиты осоро** (1929-1939). Ғәрәп графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит башҡорт теленең үҙенсәлектәрен яҙыуҙа сағылдырыу өсөн тулыһынса яуап бирә алмаған. Етмәһә, ул уҡытыуҙа балаларҙы грамотаға өйрәтеү эшен ҡыйынлаштырған. Башланғыс мәктәп уҡыусыһы уҡырға һәм яҙырға өйрәнеү өсөн бер хәрефтең дүрт төрлө яҙылышын белергә тейеш булған, шунлыҡтан хәреф танырға һәм яҙырға өйрәтеү ике йыл буйы дауам иткән. Ошо ауырлыҡтарҙан ҡотолоу өсөн үҫәң-үҫгө йылдарҙа башҡорт әҙәби теле өсөн латин графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит ҡабул ителгән.

**Хәҙерге алфавит осоро** 1939 йылдын башланды. Мәктәптәрҙә уҡыу-уҡытыу һәм грамотаға өйрәтеү эшен артабан еңеләйләштереү һәм камиллаштырыу өсөн 1939 йылда башҡорт әҙәби теле өсөн рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавит ҡабул ителә. Башҡорт телендәге өндәр өсөн алфавита өҫтәмә хәрефтәр алына: ө, ә, ү, ҫ, ҙ, һ, ң, ҡ, ғ. Был яңы алфавит уҡытыуҙа рус алфавитын белеүҙе һәм русса грамотаһы өйрәтеүҙе лә еңелләштерә.

**2-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ. Автор нимә әйтергә теләгән? Рус телендәге “о” һәм “е” өндәрен алыу-алмау мәсьәләһе иң бәхәсле мәсьәләләрҙең береһе булыуы нимә менән бәйле? Ошо осорҙа республикала ниндәй ваҡиғалар бара? Улар башҡорт теленең үҫеш процесын тотороҡлаймы? Үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ.

1940 йылдың декабрь айында Өфөлә башҡорт теле буйынса ғилми конференция үткәрелә. Конференцияға Башҡортостандағы телселәр, ғилми эшселәр, матбуғат эшселәре, яҙыусыларҙан тыш, туғандаш республикаларҙан да, Мәскәүҙән дә тел ғалимдары ҡатнашалар. Был конференцияла башҡорт

əҙəби теле өсөн рус графикаһы нигеҙендə төҙөлгəн алфавит һəм орфографияһының ғилми принциптаре тураһында проф. Н.К. Дмитриевтың доклады тыңлана. Докладсы һуҙынҡы өндəрҙе ҡушма хəрефтəр менəн (йо, йө, йə) яҙмайынса, бер генə хəреф менəн (е, ё, я) яҙыу принцибын ҡуя. Был мəсьəлəлə конференцияла ҡатнашыусылар икегə айырыла. Бер төркөм делегаттар ҡушма хəрефтəр менəн яҙыу яғында, ə икенсе төркөм (күпселек) бер генə хəреф менəн яҙыу яғында була. Конференция рус графикаһы нигеҙендə төҙөлгəн алфавиттың башҡорт теленең специфик үҙенсəлектəрен иҫəпкə алып төҙөлгəнен күрһəтеп үтə. Башҡорт теле орфографияһының фонетик, морфологик, тарихи-традицион принциптарҙа төҙөлөүен фəнни яҡтан дөрөҫ, тип таба. Шул уҡ ваҡытта конференция БАССР Верховный Совете Президиумынан башҡорт теле орфографияһына ҡайһы бер үҙгəрештəр индереүҙе һорап та ҡарар сығара. Был үҙгəрештəр башлыса я, е, ё хəрефтəре яҙылышы мəсьəлəһенə ҡайтып ҡала. Конференциянан һуң орфографияның һуҙынҡы хəрефтəр яҙылышына бəйле ҡағиҙəлəре ҡайтанан тикшерелə. Тел, əҙəбиəт ғилми-тикшеренеү институты конференция ҡарары нигеҙендə һуҙынҡылар яҙылышы тураһында проект төҙөп, СССР Фəндəр академияһының тел һəм яҙыу институтына ебəрə. Институт, проектты ҡарап, түбəндəге фекерҙе əйтə: СССР халыҡтары телдəре өсөн рус графикаһы нигеҙендəге алфавит түбəндəге принцйптарҙан сығып төҙөлөргə тейеш:

1) Рус хəрефтəре рус алфавитында ниндəй мəғəнəлə ҡулланылһалар, башҡа халыҡтарҙың алфавитынды ла шул уҡ мəғəнəлə ҡулланылырға тейеш.

2) Рус графикаһы нигеҙендəге алфавит шул телдең фонетик үҙенсəлектəрен иҫəпкə алып төҙөлөргə, телдəге бөтə специфик өндəр өсөн айырым хəрефтəр алынырға тейеш.

3) СССР халыҡтарының рус графикаһы нигеҙендəге алфавиттары араһында унификация булырға тейеш. Башҡорт алфавитендағы һуҙынҡыларҙың яҙылышы тураһында төҙөлгəн яңы проект был принциптарға ҡаршы килə. *Я, ё* хəрефтəренə рус алфавитында булмаған мəғəнəлəр йөкмəтелə: *я* хəрефе рус алфавитында *йа* өнөн белдерə, ə башҡорт алфавитында *йа, йə* өндəрен белдерергə тейеш була; *е* хəрефе рус алфавитында *йэ* өнөн, ё хəрефе - йо өнөн белдерə, ə башҡорт телендə был хəрефтəр рус алфавитында булмаған йы, йө өндəрен дə белдерергə тейеш булалар. Был хəл мəктəптə уҡыусыларға бер үк хəрефте ике төрлө уҡырға юл ҡалдыра. Уҡыусылар был хəрефтəрҙе башҡорт теле дəресендə йы, йэ, йө итеп уҡып, рус телендə лə шулай уҡый башлаясаҡтар. Бына шуларҙан сығып, СССР Фəндəр академияһының тел, яҙыу институты проектты хупламай.

**3-сө күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Латинлаштырылған алфавитҡа күсеүҙең кире һәм ыңғай яҡтары тураһында фәнни доклад рәүешендә сығыш әҙерләгеҙ. Эште парҙа башҡарығыҙ.

Башҡорт яҙыуын латинлаштырылған алфавитҡа күсереү үҙ ваҡытында прогрессив күренеш булды. Латинлаштырылған алфавит башҡорт халҡының тарихында, башҡорт яҙыуының һәм культураһының үҫешендә бик ҙур ыңғай роль уйнаны. Латинлаштырылған алфавит ғәрәп алфавитына ҡарағанда үҙләштереү өсөн еңелерәк һәм яҙыу өсөн уңайлыраҡ булды. Уға күсеү арҡаһында йөҙҙәрсә мең башҡорт йәштәре әсә телендә уҡырға һәм яҙырға тиҙерәк өйрәнделәр. Ололарҙың бик күбеһе грамотаға эйә булды. Халыҡ хужалығының икенсе биш йыллығын бойомға ашырыу йылдары — социалистик төҙөлөштөң гигант аҙымдар менән алға китеүе һәм культура революцияһының еңеү йылдары булдылар. Был йылдарҙа Башҡортостанда грамотаһыҙлыҡ, нигеҙҙә, бөтөрөлдө, мәктәптәр һәм башҡа культура-ағартыу оййошмалары бик ныҡ үҫте, тиҫтәләрсә исемдә гәзиттәр, журналдар, башланғыс һәм урта мәктәптәр өсөн төрлө фәндәрҙән стабиль дәреслектәр баҫылды. Башҡорт стенографияһы, башҡорт телендә яҙыу машинкалары эшләнде. Был эштә лә латинлаштырылған алфавит ыңғай роль уйнаны. Латинлаштырылған алфавитҡа күсеү – дин әһелдәрен дини әҙәбиәт таратыу буйынса уларҙың төп ҡоралы булған ғәрәп алфавитынан мәхрүм итте.

Социалистик яңы индустрия, механизацияланған ауыл хужалығы, хеҙмәттең яңы ҡоралдары революция йылдарында, бигерәк тә халыҡ хужалығының икенсе биш йыллығын бойомға ашырыу һәм өсөнсө биш йыллыҡты уңышлы рәүештә тормошҡа үткәрә барыу йылдарында барлыҡҡа килгән яңы төшөнсәләр, яңы фәнни асыштар һ. б. бик күп яңы һүҙҙәр һәм терминдәр тыуҙырҙы. Башҡорт теленә көн һайын ундарса яңы һүҙҙәр өҫтәлә барҙы. Милли формалы, социалистик йөкмәткеле культура үҙенең үҫешендә тағы ла киңерәк ҡолас йәйҙе һәм алға табан яңы аҙымдар яһаны. Бына ошо шарттарҙа быға тиклем йәшәп килгән латинлаштырылған алфавит халыҡтың культура талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмай башлай һәм телдең, яҙыуҙың артабан үҫешенә етди тотҡарлыҡ яһай, башҡорт теленә көндән-көн инә барған рус һүҙҙәрен һәм интернациональ һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыуға ҡамасаулай, рус теле менән башҡорт теленең бер-береһенә йоғонто яһауына яһалма кәртә була башлай.

**4-се күнегеү.** Һыҙыҡтар урынына тейешле мәғлүмәт яҙығыҙ. Эште төркөмдә башҡарығыҙ.

1) Башҡорт теле алфавитында һуҙынҡы өндәр өсөн __ хәреф алынған:________________.Быларҙан ё хәрефе фәҡәт рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә, ә, ө, ү хәрефтәре фәҡәт башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә йәки рус теленән инеп тә башҡорт теленең фонетикаһына буйһондороп әйтелә торған һүҙҙәрҙә генә яҙыла (бүрәнә, күршәк, өҫтәл). __ хәреф ҡушма өндәрҙе белдерә: ё-йо, _____, йү, мәҫәлән, ёлка (йолка); юл, юрист, юкә (йул, йурист, йүкә); ярыш, якорь (йарыш, йакорь). ____ хәрефтәрҙең бишеһе бер нисә өндө белдерә: о хәрефе тар әйтелешле һәм киң әйтелешле о өндәрен (ҡоролош, колхоз); ы хәрефе ҡыҫҡа әйтелешле һәм киң әйтелешле ы өндәрен (ыласын, промышленность): и хәрефе и һәм ый өндәрен (ирек, сираҡ (сыйраҡ); е хәрефе йэ, э, е өндәрен (ел (йел), бел (бэл), тема); у хәрефе һуҙынҡы у һәм ҡыҫҡа әйтелешле ҡалын тартынҡы v өндәрен (клуб, матур; ауыл (агчыл); ү хәрефе нәҙек һуҙынҡы ү һәм ҡыҫҡа әйтелешле нәҙек тартынҡы v өндәрен белдерә (бүлмә, рәүеш (рәсеш).

2) Тартынҡы өндәр өсөн __ хәреф алынған: ______________. Был хәрефтәрҙән фәҡәт в хәрефе генә ике өндө (в һәм ҡыҫҡа әйтелешле v өндәрен) белдерә: совет, ваҡыт, вәкил (уаҡыт, үәкил). Тартынҡы хәрефтәрҙән _______ хәрефтәре башҡорт теленең үҙ һүҙҙәрендә һәм рус теленән инеп тә башҡорт теленең фонетикаһына буйһондороп әйтелгән һүҙҙәрҙә генә яҙыла (ағай, ғинуар, ҙур сумаҙан, ҡаҡы, ҡарбуз, таң, баҫынҡы, кәбеҫтә); з хәрефе рус, ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәрҙә генә (колхоз, зифа, заман) һәм башҡорт һүҙҙәренең ҡайһы берҙәрендә (мәҫәлән, зыбын, зырлауыҡ, һ. б.); __ хәрефе башҡорт, ғәрәп, фарсы һүҙҙәрендә генә (һәм, һеңле, мөһабәт); ц, ч,щ хәрефтәре рус теле аша ингән һүҙҙәрҙә генә яҙыла (цех, почта, учреждение, плащ). __ хәрефтәре һүҙ башында яҙылмай. Быларҙан башҡа тағы алфавитта ъ, ь (ер, ерь) хәрефтәре алынған, былар бер төрлө лә өндө белдермәйҙәр: ъ хәрефе ҡалын тартынҡы өндө үҙенән һуңғы йәки алдағы һуҙынҡы өндән айырын әйтеүҙе белдереү өсөн (донъя, _______); __ хәрефе үҙенән алдағы өндөң нәҙеклеген белдереү (роль) йәки нәҙек тартынҡы өндө үҙенән һуңғы йә алдағы һуҙынҡы өндән айырып әйтеүҙе белдереү өсөн (тәьмин, мәсьәлә) ҡулланыла.

3) Башҡорт әҙәби теленең хәҙерге орфографияһы _____ принципҡа ҡоролған. Күпселек һүҙҙәр әйтелгәнсә яҙып йөрөтөләләр. Мәҫәлән, тамыр йәки нигеҙ һүҙҙәр аҙағындағы ҡ, к, п өндәре һүҙгә һуҙынҡы өн менән башланған ялғау ялғаныу менән ғ, г, өндәренә әйләндереп әйтелә һәм был орфографияла ла үҙенең сағылышын ала: нисек әйтелә, шулай яҙыла (аҡ—___, китап—____, ебәк—____), һүҙҙәрҙе бергә ҡушып әйткәндә ике һуҙынҡы уртаһында килгән ҡ, /с өндәре ғ, г өндәренә әйләндереп әйтелә, шулай яҙылалар: терегөмөш (тере көмөш), Ағиҙел (Аҡ Иҙел). Ҡайһы бёр

һүҙҙәр ялғауҙар ҡушылыу менән айырым өндәр төшөрөп ҡалдырылып әйтеләләр, яҙыуҙа ла төшөрөп яҙылалар (халыҡ - халҡы, ирек - ирке, бүрек - бүрке һ. б.)

**5-се күнегеү.** Текста осраған хаталарҙы төҙәтегеҙ, һыҙыҡтар урынына тейешле мәғлүмәтте яҙығыҙ. Эште үҙ аллы башҡарығыҙ. Башҡорт алфавитын булдырыуҙа ҡатнашҡан ниндәй ғалимдарҙың исемдәре билдәле һеҙгә?

Бөгөнгө көндә ҡулланылған башҡорт алфавиты 1929 йылда ҡабул ителгән. Был алфавитта 36 хәреф, шуларҙың туғыҙы телдең үҙенсәлекле өндәрен билдәләй ______________________________ хәрефтәре. Тағы шуныһы иғтибарға лайыҡ: _____, _____ хәрефтәре башҡа бер төрки телдә лә осрамай. Хәрефтәрҙең урынлашыу _____________ урыҫ алфавитындағыса ҡабул ителгән. Башҡорт теленең специфик өндәре өсөн алынған яңы хәрефтәр, ғәҙәттә, урыҫ графикаһындағы ҡайһы хәреф нигеҙендә яһалған булһа, башҡорт алфавитында шул урыҫ хәрефе артынса ҡуйылған.

Хәрефтәрҙең баш хәреф һәм бәләкәй хәреф варианттары айырыла. Тик ____, ____, _____, _____ хәрефтәренең генә яҙыуҙа баш хәреф варианттары ҡулланылмай, сөнки башҡорт яҙма әҙәби телендә был хәрефтәр менән башланған һүҙҙәр ______.

**6-сы күнегеү.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

7) Башҡорт графикаһы менән орфографияһы тарихын нисә дәүергә бүлеп йөрөтәләр?

8) Латинлаштырылған алфавит башҡорт халҡының тарихында, башҡорт яҙыуының һәм культураһының үҫешендә ниндәй роль уйнаны?

9) Башҡорт яҙыуының үҫеше нимә менән бәйле?

10) Башҡорт теленең бөгөнгө орфографияһы принципиаль үҙгәрештәр индереүҙе талап итмәй тигән фекер менән килешәһегеҙме? Үҙ ҡарашығыҙҙы еткерегеҙ.

**Өйгә эш.**

4. XX быуат башында башҡорт телендә сыҡҡан журналдар тураһында мәғлүмәт алып килегеҙ.

5. Башҡорт яҙыу тарихына бағышланған синквейн төҙөгөҙ.

6. Латинлаштырылған алфавитҡа күсеүҙең кире һәм ыңғай яҡтары тураһында фәнни доклад рәүешендә сығыш әҙерләгеҙ.

## Яҙма сығанаҡтар һәм уларҙың әһәмиәте

Үткәне юҡтың киләсәге юҡ.
Мәҡәл.

**1-се күнегеү.** Тексты уҡығыҙ. Унда һүрәтләнгән ҡомартҡыларҙың халҡыбыҙ мәҙәниәте тарихындағы әһәмиәтен билдәләгеҙ**.**

Халҡыбыҙҙың боронғо мәҙәниәтен, ышаныуҙарын, рухи донъяһын, йолаларын һынландырыусы ҡиммәтле ҡомартҡылар араһында ата-бабалар культына бағышланған ҡомартҡылар – мемориаль ҡоролмалар айырым урында тора. Был ҡомартҡылар – алыҫ меңәр йыллыҡтар төпкөлөнән килгән олуғ һәм бай тарихыбыҙҙың тере шаһиттары, һүҙҙе тәрәнерәктән башлаһаҡ, боронғо төрки бабаларыбыҙҙың, мәҫәлән, илде ҡурсалаған атаҡлы батырҙар һәм ҡағандар (хандар) хөрмәтенә таштарға соҡоп яҙып ҡалдырылған бихисап шиғри әҫәрҙәре, хәҙерге күпселек төрки халыҡтарҙың һәм, әлбиттә, башҡорттарҙың да яҙма мәҙәниәт, яҙма әҙәбиәт тарихының сал быуаттар тәрәнлегендәге башланғысы, рухи мираҫыбыҙ шишмәләренең көслө бер сығанағы булыу менән бергә, донъя мәҙәниәтенең дә һоҡланғыс күренеше иҫәпләнә. Төрки руна яҙмалы ундай ҡомартҡылар – ата-бабалар иҫтәлеген хөрмәтләп, ҡәбер өҫтәренә ҡуйылған һынташтар, һәр төрлө таш бағаналар Монголия, Тыва, Хакасия ерҙәренән, Таулы Алтайҙан башлап Урал һәм Волга буйҙарына, Дон далаларына һәм Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ киңлектәренә тиклемге меңәрләгән саҡрым арауыҡтарҙа бөгөнгө көндә лә киң билдәле. Улар йә, ысынлап та, һаҡланып ҡалған, йә емерелгән, урыны менән ҡыйратылған хәлдә, бик күп ер-һыу исемдәренә күсеп, барыбер эҙҙәре юғалып бөтмәгән (Р. Шәкүр).

- Башҡортостан сал быуаттарҙан һаҡланып ҡалған боронғо яҙма ҡомартҡыларға бик бай. Уларҙың араһында иң боронғолары – ташҡа соҡоп яҙылған яҙыуҙар. Ундай яҙыуҙарҙы эпиграфика фәне өйрәнә. Тыуған төйәгебеҙҙә болғар дәүеренән (IX-XIII быуаттар) һәм унан да боронғораҡ замандарҙан ҡалған ҡәбер таштарындағы яҙыуҙар (эпитафиялар), төрлө тамғалар һаҡланып ҡалған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар әле ныҡлап өйрәнелмәгән.

Башҡорттар араһына ислам дине килеп ингәс тә (XI-XIII быуаттар), ғәрәп яҙыуында ҡауырһын менән яҙылған ҡулъяҙма китаптар киң тарала башлай. Уларҙы мәҙрәсәләрҙә китап күсереүселәр - хаттаттар (калиграфтар) һәм шәкерттәр яҙғандар. Ындай яҙма ҡомартҡыларҙың күпселеге ғәрәп

хәрефтәре менән төрки, ғәрәп, фарсы телдәрендә яҙылған һәм күсерелгән. Йөкмәткеһе яғынан улар дини (Ҡөрьән, хәҙистәр, тәфсирҙәр, фиҡһ һ.б.), фәнни (граматикалар, география, тарих, медицина, астрономия, математика һ. б.), матур (ҡисса, дастан, робағи, ғәзәл һ, б.) әҙәбиәттәргә бүленә. Был яҙма ҡомартҡылар халҡыбыҙҙың боронғо тарихын, әҙәбиәтен, фәнен, әҙәби тел тарихын, ижтимағи уй-фекерен һәм, ғөмүмән, рухи мираҫын өйрәнеүҙә әйтеп бөткөһөҙ ҡиммәтле сығанаҡ булып һанала.

Уларҙы эҙләп табыу, йыйыу, каталогка һалыу, тасуирлау һәм баҫтырып сығарыу менән тарих, филология фәндәренең дөйөм бер тармағы булған археография шөғөлләнә. Археография *палеография* (почерктарҙағы хәрефтәрҙең яҙылышын, эволюцияһын өйрәнеүсе фән тармағы) менән *текстология* (текстарҙың тарихын өйрәнеүсе фән тармағы) һ.б. фәндәрҙе үҙ эсенә ала.

**2-се күнегеү**. Алдағы бирелгән мәғлүмәткә таянып, яҙма ҡомартҡыларҙы өйрәнеүсе фәндәрҙең бәйләнешен схема рәүешендә күрһәтегеҙ. Үҙ халҡыңдың тарихын өйрәнеү ни өсөн кәрәк? Һорауға яуап әҙерләгеҙ.

**3-сө күнегеү**. Тексты уҡығыҙ. Башҡорт әҙәби теле тарихына ҡағылышлы сығанаҡтар буйынса түңәрәк өҫтәл ойошторорға әҙерләнегеҙ. Һеҙгә ниндәй тарихи документтар билдәле? Әлеге ваҡытта уларҙың әһәмиәте бармы? Үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ.

Башҡорт әҙәби теле тарихына ҡағылышлы сығанаҡтар Башҡортостанда Зәки Вәлиди исемендәге милли китапханала, Үҙәк дәүләт архивында һәм Китап палатаһында, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында һәм китапханаһында, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ғайса Хөсәйенов исемендәге Ҡулъяҙмалар һәм иҫке баҫма китаптар фондында, Башҡортостан милли музейында, Башҡорт дәүләт университеты һәм Рәсәй мосолмандарының Диниә назараты архив-китапханаларында һаҡлана. Башҡорт әҙәби теле тарихының беҙ тикшергән осорона ҡараған сығанаҡтары Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан, Ырымбур һәм башҡа ҡалаларҙа осрай.

Өфөлә һаҡланған ҡулъяҙма китаптарҙың күбеһе революцияға тиклемге урындағы шағир һәм яҙыусыларҙың әҫәрҙәренең төп нөсхәләһе йәки күсермәһе, тәуарихтар, башҡорт ырыуҙарының шәжәрәләре, Башҡортостан ауылдары тарихы буйынса яҙмалар һәм күп һанлы тарихи документтар.

Айырым төркөмдө «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Бабсаҡ менән Күсәк», «Башҡорт ҡашҡалары» («Башҡорттоң

данлыҡлы ирҙәре»), «Буҙйегет» кеүек эпик әҫәрҙәр, башҡорт йырҙары йыйынтыҡтары, Салауат тураһындағы йырҙарҙың ҡулъяҙма версияһы һ.б. тәшкил итә.

Ғәрәп графикаһындағы баҫма әҫәрҙәргә килгәндә, улар XIX быуат аҙағы-XX быуат башында әүҙем баҫыла башлай. Полиграфия нәшриәттәре Ҡазан, Ырымбур, Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында барлыҡҡа килә. Беренсе ғәрәп графикаһындағы баҫма Башҡортостанда 1891 йылда Н. А. Безбородова типографияһында сыға. Ул Баһауетдин Мәҡсүтовтың «Мөғәллими хаттат» («Каллиграфия уҡытыусыһы») тигән бәләкәй генә китабы була.

Сығанаҡтың фәнни ҡиммәте, башҡорт әҙәби теле тарихы күҙлегенән сығып, уның мәғлүмәтлелек кимәле менән билдәләнә.

Тикшереүгә алынған сығанаҡтар графиканың характерына ҡарап түбәндәгесә бүленә:

1. Кодекс (китап) йәки бит (лист) формаһындағы ҡулъяҙмалар:
   а) автографтар (төп нөсхәләр);
   б) исемһеҙ (аноним) ҡулъяҙмалар;
   в) күсермәләр (варианттар).
2. Баҫма әҫәрҙәр.

Беренсе төркөмгә ҡулъяҙма китаптар һәм йыйынтыҡтар, тарихи документтар (шәжәрәләр, грамоталар, ярлыҡтар, бойороҡтар һ. б.), рәсми эш ҡағыҙҙары (акттар, рапорттар, килешеүҙәр, билеттар һ. б.) һәм эпистоляр материалдар (хаттар, көндәлектәр), йәғни ҡулдан яҙылған кодекс йәки бит формаһындағы бөтә сығанаҡтар инә.

Баҫма әҫәрҙәргә Т. Ялсығоловтың, Ә. Ҡарғалының, Һ. Салиховтың, Ш. Зәкиҙең, Ғ. Соҡоройҙоң, М. Аҡмулланың, М. Өмөтбаевтың әҫәрҙәре, М. Ғафури, С. Яҡшығолов, Д. Юлтый, Ш. Бабичтың тәүге әҫәрҙәре инә.

Проза традицион һәм эпик жанрҙар (хикәйәт, рисалә, намә, нәҫер, хикәйә, повесть һ.б.), публицистика (газета, журнал, әҙәби тәнҡит мәҡәләләре), ғилми яҙмалар (философия, логика, астрономия, математика, география, медицина, әҙәбиәт ғилеме, тел белеме буйынса дәреслектәр), тарихи документтар (шәжәрәләр, грамоталар, указдар һ.б.), рәсми эш ҡағыҙҙары (акттар, рапорттар, килешеүҙәр һ.б.), эпистоляр сығанаҡтар (рәсми хаттар, шәхси характерҙағы хат алышыуҙар, көндәлектәр) һәм ахыр сиктә, дини, рухани әҫәрҙәр (хөҙистәр, шәриғәт, фиҡһ һ. б.) менән бирелгән. Улар араһында Р. Фәхретдинов, Ф. Вәлиев, Х. Сәғҙи һәм башҡаларҙың проза әҫәрҙәре ҡиммәтле сығанаҡ булып тора.

**4-се күнегеү**. Түбәндәге төшөнсәләргә аңлатма бирегеҙ. Эште төркөмдәрҙә башҡарығыҙ.

1) Хикәйәт – ...
   Намә – ...
2) Рисалә – ...
   Хикәйә – ...
3) Шәжәрә – ...
   Повесть – ...

**5-се күнегеү**. Тексты уҡығыҙ, исем бирегеҙ. Унын буйынса цитаталы план төҙөргә әҙерләнегеҙ. Тарихта “болғар” төшөнсәһе ҡасан килеп сыға? Эште парҙа башҡарығыҙ.

Урал-Иҙел буйы төрки яҙма ҡомартҡылар теле яғынан төрлөсә. Нигеҙендә ҡараханлы-уйғыр теле үҙенсәлектәре ятҡан Әхмәт Йәссәүиҙең «Диуаны хикмәт», Насретдин Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбийә», Мәхмүт ибн Ғәлиҙең «Нәһж әл-фәрадис» кеүек ҡомартҡылары күсермәләре XIII-XIV быуаттарҙағы хорезм-төрки йәки Алтын Урҙа әҙәби телен кәүҙәләндерәләр. Шунда уҡ сығатай - Урта Азия төрки (Суфый Аллаярҙың «Мәсләк әл-Мөттәҡин», «Әнүәр әл-ғарифин», «Çөбәт әл-ғажизин» һ. б.) һәм анатолий - Кесе Азия төрки («Ҡиссаи Сәйетбаттал», «Ҡиссаи Фәхретдин», «Ҡаһарман Ҡатил» һ. б.) әҙәби телдәрендә яҙылған әҫәрҙәр осрай.

Ҡайһы ҡомартҡылар XIII-XIV быуаттарға ҡараған эпитафия яҙмаларын тәшкил итә. Уларҙың теле «болғар» исемен алған әҙәби вариантҡа ҡарай. Башҡортостан яҙма ҡомартҡыларының күбеһе Урал-Иҙел буйы төрки яҙма әҙәби телендә яҙылған. Был ҡомартҡыларҙы өйрәнеү башҡорт әҙәби теленең быуаттар дауамындағы үҫеш этаптарын билдәләргә һәм унын башҡа төрки телдәре менән бәйләнешен күҙәтергә мөмкинлек бирә.

Шундай ҡатмарлы һәм актуаль мәсьәләләрҙе хәл итеү ҡулъяҙмаларҙы йыйыу, каталогка һалыу һәм тасуирлау буйынса еңел булмаған эштәрҙе башҡарыуҙы, айырыуса ҡиммәтле ҡомартҡыларҙы баҫтырып сығарыуҙы һәм сығанаҡтарҙы комплекслы ғилми тикшеренеү эшен ойоштороуҙы күҙ уңында тота.

**7-се күнегеү**. Һорауҙарға яуап бирегеҙ.

1) Эпиграфика фәне нимә өйрәнә?
2) Яҙма сығанаҡтарҙың ниндәй төрҙәрен һанап сығығыҙ.
3) Текстарҙың тарихын өйрәнеүсе фән тармағы нисек атала?
4) Яҙма сығанаҡтар ҡайҙа һаҡлана?
5) Өфөлә һаҡланған сығанаҡтарҙы ҡайҙа табырға була?

6) Архивтарҙа, китапханаларҙа һаҡланған ниндәй яҫма сығанаҡтарҙы беләһегеҙ?

7) "Донъяла һүҙебеҙ бар, үҙебеҙ юҡ" (М. Аҡмулла) һүҙҙәрен нисек аңлайһығыҙ.

**Өйгә эш.**

1) Башҡорт яҙма сығанағтарын өйрәнгән ғалимдар, уларҙың хеҙмәттәре менән танышығыҙ.

2) Баҫма әҙәбиәттән бер әҫәргә лингвистик анализ яһағыҙ.

3) Башҡорт әҙәби теленең бер сығанағы буйынса презентация эшләгеҙ.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ИНЕШ ДӘРЕС........................................................................................................3
ФОНЕТИКА........................................................................................................5
Телмәр өндәре. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр ....................................................5
Башҡорт алфавиты. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре ....................................8
Сингармонизм....................................................................................................13
Ижек...................................................................................................................16
Баҫым..................................................................................................................19
Һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәреше..................................................................................22
Тартынҡы өндәрҙең үҙгәреше.................................................................................26
Орфоэпия.............................................................................................................28
Орфография.........................................................................................................31
ЛЕКСИКА ............................................................................................................38
Лексика тураһында төшөнсә. Һүҙ мәғәнәһе. ..........................................................38
Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Күсмә мәғәнәһе .............................................................42
Синоним. .............................................................................................................47
Антонимдар........................................................................................................52
Омонимдар.........................................................................................................56
Фразелогик берәмектәр........................................................................................60
Лексикография....................................................................................................66
Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы...............................................70
Актив һәм пассивлыҡ күҙлегенән хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы ........76
Диалект һүҙҙәр....................................................................................................80
Иҫкергән һүҙҙәр. Яңы һүҙҙәр.................................................................................85
МОРФОЛОГИЯ......................................................................................................88
Исем.Исем тураһында төшөнсә. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреүе.........................88
Исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары. ..................................................92
Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе.........................................................................97
Сифат тураһында дөйөм төшөнсә. Сифат дәрәжәләре.........................................101
Төп һәм шартлы сифаттар. ..................................................................................105
Ҡылым.Ҡылым тураһында дөйөм төшөнсә. Хәбәр һөйкәлеше. ..........................108

Ҡылымдың бойороҡ, шарт, теләк, ниәт-маҡсат һөйкәлештәре. .................... 111
Ҡылым төркөмсәләре........................................................................................ 115
Һан. Һан тураһында дөйөм төшөнсә. Һандарҙың килеш менән үҙгәреүе. ... 118
Алмаш.Алмаш тураһында дөйөм төшөнсә. Алмаш төркөмсәләре. .............. 121
Рәүеш. Рәүеш тураһында төшөнсә. Уның төркөмсәләре һәм төрҙәре. .......... 124
Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Теркәүес, бәйләүес, киҫәксә. ................................ 127
ЯБАЙ ҺӨЙЛӘМ СИНТАКСИСЫ ...................................................................... 133
Һөйләм төрҙәре. ................................................................................................ 133
Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. ........................................................................ 136
Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. .......................................................................... 139
Бер һәм ике составлы һөйләмдәр. Атама һөйләм. .......................................... 143
Хәбәр составы ғына булған бер составлы һөйләмдәр .................................... 145
Тулы һәм кәм һөйләмдәр .................................................................................. 149
Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә ..................................................... 151
Теҙмә ҡушма һөйләм.Теркәүесһеҙ һәм теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. ......................................................................................................... 153
Эйәртеүле ҡушма һөйләм. ................................................................................. 156
Эйәрсән һөйләм төрҙәре тураһында дөйөм төшөнсә ....................................... 158
Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә бәйләнеү саралары .................................. 161
Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау ..................................................... 164
СТИЛИСТИКА ................................................................................................... 167
Йәнле һөйләү стиле. .......................................................................................... 167
Матур әҙәбиәт стиле .......................................................................................... 171
Фәнни стиль. ....................................................................................................... 175
Публицистик стиль ............................................................................................ 180
Рәсми йәки эш ҡағыҙҙары стиле. ...................................................................... 182
Хаттар стиле ....................................................................................................... 186
Дини стиль. ......................................................................................................... 189
БАШҠОРТ ӘҘӘБИ ТЕЛЕ ТАРИХЫ ................................................................ 193
Башҡорт әҙәби теле һәм уның тарихы. ............................................................. 193
Башҡорт яҙыуы тарихы ..................................................................................... 199
Яҙма сығанаҡтар һәм уларҙың әһәмиәте ......................................................... 205

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

**ДӘРЕСЛЕК**

Лиц. на издат. деят. Б848421 от 03.11.2000 г. Подписано в печать 11.06.2020.
Формат 60Х84/16. Компьютерный набор. Гарнитура Times New Roman.
Отпечатано на ризографе. Усл. печ. л. – 13,1. Уч.-изд. л. – 12,9.
Тираж 10 экз. Заказ № 829

СП БГПУ 450000, г.Уфа, ул. Октябрьской революции, 3а